# Ағиҙел

Өфө,
февраль
2009

2 (1031)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Харис Сәғитов *(хужалыҡ эштәре буйынса баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.02. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 353 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0011.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

---

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (2, 1031)

# БЫЛ АНДА:

*Башҡортостан Республика ы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 75 йәш*


**Марсель Ҡотлоғәлләмов.** Изге хистәреҢ йылы ында
ҡойона тыуған илкәйеҢ. О ч е р к . ....................................................5
**Абдулхаҡ Игебаев**. Башҡортостан Президенты. Ш и ғ ы р . .........15
**Ирек Кинйәбулатов.** Хәҙер беҙҙе донъя таныны. Ш и ғ ы р . .........16
**Рәмил Йәнбәк.** Күгәрсенем. Ш и ғ ы р . .........................................17
**Рәйес Түләк.** Президент Рәхимовҡа. Ш и ғ ы р . ...........................17


ШИҒРИӘТ


**Фәндидә Харрасова.** Ҡапҡа төбөндә... П о э м а . ...........................18
**Муса Сиражи.** Былбыл әм халыҡ моҢо. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..............30
**Камил Фазлый.** Мәктәп. Ш и ғ ы р ҙ а р . .......................................36
**Зөфәр Вәлит.** Шул уҡ атай йорто... Ш и ғ ы р ҙ а р . ......................40


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Роберт Байымов.** Каруан килә Бағдадтан.
Т а р и х и - д о к у м е н т а л ь р о м а н . Аҙағы. ................................44
**Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғайсарова.** Төшләктәге төш.
Х и к ә й ә . .........................................................................................125
**Зөбәржәт Йәнбирҙина.** Хирург. Х и к ә й ә . .................................133


ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ


**Әмир Әминев.**"Дуҫым, иңә ҡалдырып мин китәм..." ..................137
**Магомед Ахмедов.** Бөркөтлө тауҙар илендә. Ш и ғ ы р ҙ а р . .......140


ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ


**Фәнил Күзбәков.** Саялыҡ. ............................................................147


БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ


**Ғайса Хөсәйенов.** Ялҡынлы ижади мираҫ
*(Рәшит Ниғмәтиҙең тыуыуына 100 йыл)* .......................................152
**Ҡәҙим Аралбай.** амар башҡорттарына. Ш и ғ ы р . ......................159
**Сабир Шәрипов.** Мөләйем әҙип ине...
(*Нурислам Шәйхуловтың тыуыуына 80 йыл);*
**Нурислам Шәйхулов.** Ҡаҙ бәпкәләре ары икән... Х и к ә й ә . .....161


ПУБЛИЦИСТИКА


**Сәләхетдин Карамов.** Уҡылмаған хат. Башы. ...............................170


“АҒИҘЕЛ” КОНКУРСЫ

*“КүҢелемдә – донъя сере”*


**Ләйсән Яҡупова.** Йән – күбәләк; **Илгиз Ишбулатов.** Мин – осар
ҡош. Ш и ғ ы р ҙ а р . .......................................................................179


СӘНҒӘТ


**Рәмилә Йә үҙина.** ыуғояр – ижадсы билге е. ..........................182
**Фәнис Янышев.** Наҙ өләшеүсе рәссам. ........................................187


ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*Президенту Республики Башкортостан Муртазе Губайдулловичу Рахимову – 75 лет*

**Марсель Кутлугалямов.** Заботой согретая, нежится край родимый... *(очерк).*
**А.Игебаев, Хасан Назар, Рамиль Янбек, Раис Туляк** *(стихи).*

ПОЭЗИЯ

**Ф.Харрасова.** У калитки... *(поэма)*;
**Муса Сиражи, Камил Фазлый, Зуфар Валит** *(стихи).*

ПРОЗА

**Р. Байымов.** Шел караван из Багдада *(документально-исторический роман) Окончание.*
**Г. Гиззатуллина-Гайсарова.** Сон ли это? *(рассказ)*;
**З.Янбердина.** Хирург *(рассказ).*

МОСТ ДРУЖБЫ

**А. Аминев** “Друг мой, я завещаю тебе...”
**М. Ахмедов.** В стране гор *(стихи).*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Ф. Кузбеков.** Отвага и проницательность.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Г. Хусаинов.** Поэтическое наследие
*(100 лет со дня рождения Рашита Нигмати).*
**Кадим Аралбай.** Самарским башкирам.
**С. Шарипов.** Добрый собрат по перу *(80 лет со дня рождения Н. Шайхулова).*
**Н. Шайхулов.** Желтый мой гусенок... *(рассказ).*

ПУБЛИЦИСТИКА

**С. Карамов.** Непрочитанное письмо. *Начало.*

КОНКУРС “АГИДЕЛИ”

*В душе – тайна мира.*

**Л. Якупова, И. Ишбулатов** *(стихи).*

ИСКУССТВО

**Р. Ягудина.** Водолей – знак творца.
**Ф. Янышев.** Художник, дарующий нам нежность.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

## Башҡортостан Республика ы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 75 йәш

# ИЗГЕ ХИСТӘРЕҢ ЙЫЛЫ ЫНДА ҠОЙОНА ТЫУҒАН ИЛКӘЙЕҢ

**ОЧЕРК**

Туҡ анынсы йылдың аҙағы ине. Ыжғыр декабрь алҡыны яңы йыл етәрәк тағы ла уҫаллаша төштө, шикелле,– өтөп ала. Ағас ботаҡтарына ҡунған бәҫ, ел аҙ ғына ҡағылыу менән, мендәрсә гәлсәр йондоҙсоҡтарға әүерелеп, ибелеп китә.

Мине, үҙем дә көтмәгәндә, республиканың яңы ойошторолған бер баҫма ының баш мөхәррире итеп тәғәйенләп ҡуйҙылар. Юғары Совет ултырышын алып барыусы Рәйес Рәхимов, ҡыҫҡа ғына сығышымды йомғаҡлап трибунанан төшөп барышлай, уйынлы-ысынлы итеп, артымдан: “Мөхәррир – булды, бер аҙнанан яңы гәзитте уҡый башлайбыҙ. Вперед!” – тип ҡеүәтләп ҡалды.

Иртәгә ен иртүк Матбуғат йортона киттем. Буласаҡ гәзит редакция ында – бер өҫтәл дә бухгалтер. Начальствоның үҙен гел етди ҡабул итеп өйрәнгән кеше булараҡ, миңә әр минут анаулы. Ни хәл итергә, эште кем менән әм нисек ойоштороп ебәрергә?

Шундай мәшәҡәттәр менән аптырап, ауыр уйҙарҙан арып, кисен уң ғына эштән ҡайт ам, телефон шылтырай.

– Ни хәл?!– Мортаза ағайҙың өйгә үк шылтыратыуына аптырай төштөм.– Эш барамы? Гәзитең ни эшләй әле? иңә нисә диктофон кәрәк?

Бул а бул ын, тип уйлайым. Республика хужа ы үҙе тәҡдим итеп торғанда, мулыраҡ орап ҡалайым.

– Унды бир әгеҙ, әлегә ярар...

– Нәфсең ничава икән. Фәйзи Ғариповичҡа улар бары ы ун дана килгән. Ярай, иңә – бише е, ҡалғандары – башҡа гәзиттәргә.

Эш, әлбиттә, ҡулға нисә аппарат эләктереп ҡалыуҙа түгел. Ҙур начальствонан йылы үҙҙе бик ишетеп өйрәнмәгәс, республика башында тороусы кешенең мең төрлө мәшәҡәттәр ара ында бер редакцияның мохтажлыҡтарын онотмауы мине ысындан да оҡландырҙы. Йылдар үтеп, Мортаза Ғөбәйҙулла улының кешелек сифаттарын яҡшыраҡ күрә-белә башлағас, феноменаль хәтер әм иғтибарлылыҡтың уға ата әм әсә ҡаны менән бирелгәнлегенә күп тапҡырҙар инандым.

Рәхимовтың ата-әсә е, тигәндән, ик ән дүртенсе йылдың йәйе, бесән өҫтө ине, шикелле. Сираттағы командировка Күгәрсен районына тура килде. Ҡыуанып юлға сыҡтым, сөнки райкомдың беренсе сәркәтибе булып минең күптәнге дуҫым әм арҡадашым Исмәғил Ғәбитов эшләй. Унын ҡара “Волга” ына ултырып, район хужалыҡтары буйлап сабабыҙ. Ғәбитов – талапсан да, ғәҙел дә кеше, әр нәмәне үҙе күреп, тотоп ҡарамайынса тыныслана алмай.

Тәкәт еҙ эҫе. Ошо тамуҡҡа бесәнселәр нисек түҙәлер. Минең и ә сыҡмаған

йәнем тәнемдә көскә эләгеп тора. Исмәғил Әхмәҙуллович бирешмәй, шулай ҙа ҡарағусҡыл йөҙө бурҙатлана төштө.

– Әйҙә, Эйеккә бер генә сумып сығайыҡ,– тип ялбарам, түҙер хәлем ҡалмағас.

– Яҡ-яҡ, што ин. Какуй ыу инеү бында.

Ғәбитов, үҙе ҡәтғиерәк яңғыра ын типтер инде, беҙҙең яҡтағыса өйләшеп ебәрә.

Ул арала машиналағы радиотелефон телгә килде.

– Исмәғил Әхмәҙуллович, юлдан Рәхимов шылтыратты. Тәүәкәнгә китеп бара икән. еҙҙең менән осрашырға кәрәк ине, тип әйтә.

– Аңлашылды. Хәҙер ҡайтып етербеҙ.

Унан миңә боролдо.

– ин, дуҫ, йомоштарыңды әлегә үҙең хәстәрләй тор. Минең Мортаза Ғөбәйҙулловичта эштәрем бар. Осрашырбыҙ.

XXII партсъезд исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводында генераль директор булып эшләүен ишет әм дә, Рәхимов менән күҙмә-күҙ осрашҡан кеше түгелмен. Йомошом да төшкәне юҡ. Исмәғил и ә, ҡырҡ эшен ҡырҡ яҡҡа ташлап тигәндәй, завод директоры менән осрашырға сапты.

Ике етәксенең үҙе нимә тура ында булғандыр, уны ы миңә ҡараңғы. әр хәлдә, эштән башҡаны белмәгән ирҙәр үҙҙән бутҡа бешереп ултырмағандыр. Аҙағыраҡ белеүемсә, улар райондың матди мохтажлыҡтары, шефлыҡ ярҙамын системалы нигеҙгә алыу тура ында өйләшкән-кәңәшләшкән.

Әммә, көндәлек мәшәҡәттәрҙе аҙға ғына онотоп, Президент тыуған төйәккә, уның атайсалына, күҙ алайыҡ.

Алыҫ Күгәрсен районының да төпкөл көньяғында, йәшел урмандар менән ҡапланған тауҙар, өҙәкләнә барып, Ырымбур далаларына күскән төбәктә урынлашҡан Тәүәкән тигән боронғо башҡорт ауылы. Уның тарихы хәҙер ике йөҙ илле йылдан артты. Бында әр түбәнең, әр туғайҙың, әр оло ағастың үҙ исеме бар. Аҙым айын тиерлек урғылған инештәрҙең ыуы йәйге селләлә лә тешеңде сатнатырлыҡ алҡын.

Теләүембәт, Дауыт-Ҡайып, Черниговка, Аҙнағол кеүек башҡорт, украин ауылдарын оло юлдар урап үткән. Тәүәкәндән Ырымбурға юл Өфөгә ҡарағанда күпкә яҡынyраҡ. Ошо ауылдарҙа етеш тормош көтөрлөк, иген игерлек, йорт-ҡаралты күтәрерлек, йыр яҙырлыҡ, бала бағырлыҡ күркәм кешеләр йәшәй. Беренсе ҡарашҡа, төбәктә ҙур дәүләт эшмәкәре үҫеп сыҡҡанлығын күр әтеүсе бер ниндәй айырым билдәләр ҙә юҡ. Тәүәкән, әлбиттә, – бик төҙөк, матур ауыл, ләкин Президенттың тыуған яғында иҫ китеп өйләрлек нәмәләр күрмәҫ ең. әр нәмә, бөтә республикалағыса, йыйнаҡ әм ябай.

Тәүәкән Күнйәп йылға ына бер юлы дүрт шишмә ыуы килеп ҡушылған төбәктә урынлашҡан. Әйткәндәй, Күнйәп үҙе лә, ҙурайып китеп, Наҡаҫ йылға ына табан йүгерә. Теге е, үҙ сиратында, Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Бишеваның романдарында данланған Оло Эйеккә юллана. Эйек и ә ыуҙарын йырлы-моңло аҡмарға илтеп ҡоя. аҡмар инде Ырымбур далаларында боронғо Яйыҡҡа барып ҡушыла. әм был ҙур йылға Каспий диңгеҙенә ҡоя. Бер уйла аң, ғәжәп инде, әллә ниндәй алыҫ дәүләттәрҙең ярын ҡағыусы тулҡындарҙа тамсы ғына беҙҙең ыу ҙа бул ын әле! Бында ҡай ы бер символик хәлде күрмәү мөмкин түгел.

Бөйөк Ватан уғышынан уң М.Ғ. Рәхимовтың ата ы, Ғөбәйҙулла Зөфәрович, районда байтаҡ хужалыҡтарҙа рәйес булып эшләй, шул иҫәптән эреләтелгән "Наҡаҫ" колхозын да етәкләй. Бик өлгәр, әр эште үлсәп эшләй торған рәйес күп тапҡырҙар ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ була. 1953 йылда, шулай, "Наҡаҫ"та әр гектарҙан 12,4-әр центнер уңыш алалар, хеҙмәт көнөнә колхозсыларға дүртәр

килограмм бойҙай әм берәр ум аҡса таратыла. Заманына күрә районда иң юғары күр әткес була ул.

Рәйескә өр-яңы "Победа" машина ының асҡысын тапшырмаҡсы булалар. Ғөбәйҙулла и ә баш тарта. "Мин колхозды ат менән дә урай алам, лутсы йөк машина ы бирегеҙ", — тип тик тора икән.

Хәҙерге етәкселәр өсөн нindәй әйбәт өлгө!

Артабан Ғ.З. Рәхимов етәкләгән "Наҡаҫ" районда алдынғылыҡты бирмәй. 1956 йылда унған рәйестең күкрәгендә "Почет Билдә е" ордены балҡый. Тағы бер ҡыуанысыл факт билдәле: "Наҡаҫ" колхозында республикала ғына түгел, илдә тәүгеләрҙән булып колхозсыларға пенсия түләй башлағандар. Шул ваҡытта "Наҡаҫ"ты "йөҙ ҡырҡ пенсионер колхозы" тип атағандар. Н. С. Хрущевтың илдәге ижтимағи тормошҡа аҙ ғына бул а ла "йылылыҡ" рөхсәт иткән сағы. Бер нindәй хоҡуғы булмаған крәҫтиәндәр үҙҙәрен кеше итеп анар мәл еткән. Ә бында, Рәхимов колхозында, паспорт биреү менән сикләнмәгәндәр, пенсия түләүгә йөрьәт иткәндәр.

Ерҙәге тәүге аҙымдарын ялан аяҡ я аған кеше, яҙмыш уны артабан нindәй генә тарафтарҙа йөрөтмә ен, тыуған яғына береккән тамырҙарынан айырыла алмай. Мортаза Ғөбәйҙуллович та, Тәүәкәндән сығып китеп, нефть техникумына ингәс, шул уҡ профилдәге институтта уҡығас, артабан тулы ынса сәнәғәт донъя ына инеп сумғас, тәбиғи рәүештә, ауылдан алыҫлашырға тейеш ине. Әҙәм бала ы, оҙаҡлап ауыл усағынан айырылып тор а, ундағы донъя көтөү ғәҙәттәренән дә, өнәрҙәрҙән дә ситләшә башлай. Был тәбиғи. Көн дә ат эйәрләмә әң, ул оҫталыҡты нисек аҡламаҡ кәрәк? Ауыл кеше енең үҙен тотошона, йөрөшөнә ҡарағыҙ, нисек өйләшеүенә иғтибар итегеҙ. Ул бер ваҡытта ла ашыҡмаҫ, сәбәләнмәҫ, ин яна тип ҡабынып бармаҫ. Уның үҙе лә үлсәнгән, атлап йөрөшө лә алмаҡ, дәрәжәле.

Минеңсә, Мортаза Рәхимовтың тәбиғәтендә ауыл сифаттары аҡланған да, юҡ та ымаҡ. Крәҫтиән тормошон яҡшы белеүе бер бул а, ҡала кешеләренә хас етеҙлек, хатта яндырайлыҡ уның характерының икенсе яғын күр әтә. Шулай ҙа, "Ағиҙел" журналын уҡыусыларҙың күпселек өлөшө ауыл ерендә йәшәүен иҫәпкә алып, Президенттың ауылға әм ауыл проблемаларына ҡарата мөнәсәбәтен был юлы айырыбыраҡ күр әтергә ниәтләнек.

Беҙ юғарыла М.Ғ. Рәхимов менән И.Ә. Ғәбитовты Тәүәкәнгә илткән юлда икеен генә ҡалдырып киткәйнек. Шундағы өйләшеүгә кире әйләнеп ҡайтма аҡ та, үҙҙе Президентты күп йылдар белгән, бергә эшләгән Исмәғил Әхмәҙулловичҡа бирәйек әле.

— Ағайҙың (күптәр, ололап, Президентты шулай тип йөрөтә) ауылға ҡарашын башҡа мәсьәләләрҙән айырып ҡарау дөрөҫмө икән? Ул бит әр нәмәгә ихлас тотона, уның өсөн эштең ҙуры йәи ә бәләкәйе юҡ. Әлбиттә, Президенттың ауылға булған мөнәсәбәте ата-әсә енән, ул үҫкән шарттарҙан килә. Рәхимов, колхоз рәйесе малайы бул а ла, туйып икергәндәрҙән түгел. Ул ауыл эшен белә, бөтә нәмә уның ҡулынан килә. Ауыл егеттәренә әм ҡыҙҙарына илке- алҡылыҡ хас түгел. Эштән ҡурҡмай улар. Ҡаланыҡыларҙы кәм еткәндән әйтмәйем, иллә егәрлелектә, хатта булдыҡлылыҡта улар ауылда үҫкәндәрҙән ҡалыша...

Уны ына килгәндә, әр кемдең үҙ фекере. Ә бына хәтер тағы туҡ анынсы йылдарға алып ҡайта.

Ваҡыт уҙып барған быуаттың унғы тиҫтә йылын башлап ебәрҙе. Ул йәй яуын - ыҙ, эҫе килде. Күләгәлә лә түҙеп торғо оҙ бөркөү. Өфөләге былай ҙа аҙ ғына фонтандар ҡороған, уларҙың таш табаҡтарына ваҡытынан алда арғайған япраҡтар менән сүп-сар тулған. Ағиҙелдең текә яры башындағы Салауат әйкәленән төшкән күләгәлә аслыҡ иғлан иткән өс-дүрт үҫмер гитара сиртеп ултыра. Был "сәйәсмәндәр" әле юҡ дәрәжәләге властан нимә талап итәләр, Хоҙай ғына белә. Бәл-

ки, ул да белмәйҙер. Ә майҙандар, йырҙағыса, бер дауыллап ала, бер тына. Төрлө телдәрҙәге бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығыштарҙан ҡолаҡ тона, әләмдәр, транспаранттар тулҡын булып сайҡала.

Батырҙар әм трибундар беҙҙә бихисап икән дә ба а. Улар өсөн власть та, хөкөм дә нипочем. Шул ҡәҙәре лә аҡыл бығаса ҡайҙа йәшеренеп ятҡан? Халыҡтың нисегерәк йәшәргә, кемдең нимәгә хужа булырға тейешлеген белгәс, ниңә бик мантый алмағанбыҙ? Республика алдағы көндәрҙә ниндәй юлдан китергә тейеш? Кәңәштәр, талаптар, ҡарарҙар, мөрәжәғәттәр... Тау-тау ҡағыҙ әм шаулап ағылған үҙ. Парламент трибуна ына берәүҙәр күтәрелә, икенселәре төшә. Ана, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Мисенежников тигән "демократ", аҡалын ыйпай- ыйпай, залға йоҙроҡ күр әтә: "Бында оҙаҡ ултыра алмаҫ ығыҙ, әфәнделәр! Урамдағы халыҡ яуап көтә!" Депутаттар ниңә үҙ урындарында ҡала алмаясаҡ әм уларҙан нимә көтәләр? Быны ы ла билдә еҙ. Хәйер, урамда шаярышып-көлөшөп торған бер нисә тиҫтә йәш-елкенсәкте "халыҡ" тип үк әйтеп була микән? Шулай ҙа парламентарийҙарҙың йөҙө борсоулы.

Парламент ултырышы дауам итә. Ул әле генә үҙенең Рәйесе итеп нефть эшкәртеү заводының генераль директоры Мортаза Рәхимовты айланы. әм бына, Юғары Совет ултырыштарын алып барыусы, инглизса әйткәндә, яңы спикер, президиум өҫтәле артында ултыра, бер-бере ен туҡтау ыҙ алмаштырып тороусы сығыш я аусыларҙы иғтибар менән тыңлай, залға йәки сығыш я аусыға ирәкмирәк тапҡыр әсе репликалар ташлай. Рәхимов ҡай ы саҡ, яҡындағы үҙ дауылынан ситләшеп, үҙ уйҙарына сумғандай. Республика башлығы нимә тура ында уйлай? Был ҡеүәтле, киң маңлайлы, тулы яңаҡлы, сәстәренә әле ҡырау ҙа төшөп өлгөрмәгән ирҙең йөрәген ниндәй шик-шөб әләр телгеләй?

Урамдарҙы тетрәндергән, хатта ошо алҡынса залға ла килеп ингән биҙгәктә илдә булып ятҡан ваҡиғаларҙың асылы тура ында аҙҙар ғына уйлана алғандыр. Ә бит ил бөйөклөк менән фажиғәне айырып торған упҡын ситендә тирбәлә. Ер йөҙөндә Эверест кеүек күтәрелеп торған Советтар Союзы тигән ба адир күҙ алдында хәл еҙләнә, быуындан яҙа. Мәңгелек дуҫ әм туған булып йәшәргә анттар әйтешкән халыҡтар, дөрөҫөрәге, уларҙың шул осорҙағы лидерҙары, милли мөйөштәренә инеп бикләнә. Уларҙы унда кем әм нимә көтә? Мөстәҡиллеккә күҙ йомоп ынтылыусы яңы юлбашсылар быға үҙ халыҡтарынан рөхсәт орағанмы?

Ә иҡтисад? Ул бит илдә бер организм итеп төҙөлгән әм, хәҙер бүлгеләй-өҙгөләй башла аҡ, ҡан ырап үлмәҫме?

Ә Башҡортостандың үҙендәге сәнәғәт менән ни хәл итергә? Уларҙың бит 97 проценты Союз йәки Рәсәй ҡарамағында. Нисәмә быуын халыҡ күмәкләп эшләргә өйрәнгән ауыл нишләр? Колхоз, әлбиттә, нисек йәшәгәндер, быны ы инде — икенсе мәсьәлә.

Мортаза Рәхимов ул ваҡытта Мәскәүҙә ғәҙәти төҫ алған сәйәси талаш-тартыш тура ында уйламаҫҡа тырыша. Унда Башҡортостан хаҡында ҡайғыртыусы кеше юҡ: "Әйткәндәй, башҡорттар ҡай ы тирәләрәк йәшәй уң әле? Байкал арьяғындамы, әллә Әстерханға яҡынмы?" Ельцин менән өйләшерлек. Ул насар кешегә оҡшамаған, Урал төбәгенең проблемаларын да белә, ләкин үҙен ғәҙеллек өләшеүсе барин ымағыраҡ тота. Күп мәсьәләләр буйынса үҙ фекере юҡ кеүек. Дәүләт башындағы кеше дәүләтсә ҡолас менән фекер йөрөтөргә, айҙар, йылдар аша алдан күрергә, ваҡиғаларҙың үҫеш логика ын аңлай барырға тейеш.

Парламент башлығы ошо көҙҙө үк, халыҡ исеменән, Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тура ында декларация ҡабул ителәсәген, ул документтың төрлө хистойғолар уятасағын, республиканың өр-яңы тарихына нигеҙ буласағын әм күп йылдар Рәсәй үҙәгенә тынғы бирмәйәсәген белгән инеме икән? Мортаза Рәхимов уға яҙмыш тарафынан ауыр киләсәк әҙерләнгәнен — барлыҡ халыҡ тарафынан

Башҡортостан Республика ы Президенты булып айланасағын иҙемләне микән? Йыл артынан йыл үтер әм асыҡ холоҡло, ләкин үҙ серҙәрен бер кемгә лә сисмәҫ Президент Рәсәй масштабындағы сәйәси фигура, ғәйәт абруйлы дәүләт эшмәкәре булып үҫеп етер.

Осраҡлы хәл булғандыр, әлбиттә, ләкин 1994 йылдың август башында Кремлдә Рәсәй Федерация ы Президенты Б.Н. Ельцин менән Башҡортостан Республика-ы Президенты М.Ғ. Рәхимов идара итеү даирә ен әм вәкәләттәрҙе айырып бүлешеү тура ындағы Килешеүгә ҡул ҡуйғанда Башҡортостан журналистарынан яңғыҙым ғына булдым. Совет власы йылдарында уҡ республикабыҙ иҡтисадының ҡеүәте әм халыҡтарының толерантлылығы менән айырылып тора ине. Донъялар буталып киткәс тә, ул тулы ынса бойондороҡ оҙлоҡ хыялына бирелмәне, әлеге тарихи шарттарҙа был Башҡортостан өсөн ғәмәлдә тормошҡа ашмаҫ эш ине. Унын ҡарауы, тормош ысынбарлығын объектив ба алап, ныҡлы ихтыярға таянып әм үҙ халҡының мәнфәғәттәрен алға ҡуйып, республика Федераль үҙәк менән цивилизациялы әм юридик йә эттән яйға алынған үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе эҙмә-эҙлекле үткәреү сәйәсәтенә йүнәлеш тотто. М.Ғ. Рәхимовтың күп анлы биографтары ла, Башҡортостан тура ында яҙған журналистар ҙа ошо фактты бер ваҡытта ла инҡар итмәне.

Шундай сәйәсәт, ахыр килеп, юғарыла иҫкә алынған Килешеүгә ҡул ҡуйыуға алып килде лә инде. 3 августа ҡул ҡуйылған документты Мортаза Ғөбәйҙулла улы үҙе бына нисек ба аланы: "Беҙҙең өсөн Рәсәй Федерация ы менән Башҡортостан Республика ы ара ында Килешеүгә ҡул ҡуйыу ғәйәт ҙур ә әмиәткә эйә. Ул ҡурҡаҡлыҡ, ышанмаусанлыҡ әм шикләнеү белдергән, беҙҙе асыҡтан-асыҡ әм йәшертен генә артҡа, уҙған көндәргә, өлкә автономия ына этәреүселәргә унғы яуабыбыҙ булды.

Килешеү, беренсе сиратта, Рәсәй менән Башҡортостан ара ындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең ғәмәлдә күп мәсьәләләрен хәл итеүе йә этенән ҡиммәтерәк. Рәсәй өсөн был — ысын мәғәнә ендә федератив дәүләт төҙөү юлында эҙмә-эҙлекле аҙым. Башҡортостан өсөн — унын Декларация идеалдарына яуап биреүсе дәүләти-хоҡуҡи статусын раҫлау. Федерация субъекттары өсөн — уртаҡ йортобоҙ булған бөйөк Рәсәйҙең бөтөнлөгөн әм тотороҡлолоғон аҡлап ҡалыу юлында яуаплылыҡ өлгө ө".

Мәскәү менән Башҡортостан ҡул ҡуйған ике яҡлы документтар, артабан уҫал тәнҡиткә дусар бул а ла, уларҙың әр бере е, Башҡортостанға үҙенең эске сәйәсәтенең әм хатта ниндәйҙер дәрәжәлә тышҡы сәйәсәттең дә төп контурҙарын үҙаллы билдәләү мөмкинлеген биреп, Рәсәй федерализмы нигеҙенә кирбес булып ятты. Ошо процестарҙа туранан-тура ҡатнашҡан кешеләрҙең әйтеүенсә, документтарҙы әҙерләгәндә Мортаза Ғөбәйҙулла улының дәүләт эшмәкәре булараҡ зирәклеге, сәйәси ихтыяры, тәүәккәллеге, бер үк ваҡытта килешеүгә бара белеүе, бер осраҡта ныҡышмалылыҡ әм ҡәтғи эҙмә-эҙлеклелек күр әтеп, икенсе осраҡта компромисҡа әм килешеү эҙләргә әҙер булыуы асыҡ күренгән.

М.Ғ. Рәхимовтың сәйәси портретын шулайыраҡ яҙған Мәскәү журналисы Константин Шахов менән был осраҡта ризалашмау мөмкин түгел.

Артабан инде, бик күп сәйәси алыштар аша үткәс, Мортаза Ғөбәйҙулла улы ысын күңелдән шулай тип әйтә алыр: " еҙгә суверенитет нимә бирҙе уң, тип ора-алар, мин, тәүге сиратта, республикабыҙ әм тыуған илебеҙ яҙмышы, үҙ эшебеҙ өсөн яуаплылыҡ бирҙе, тип яуапланым. Хәҙер беҙ федераль органдарҙан финанс ярҙамы ла, беҙҙең ҡарамаҡҡа күскән мәсьәләләр буйынса директивалар ҙа көтмәйбеҙ. Ҡай ы бер сәйәсмәндәрҙең, йәнә е, беҙҙең республика Үҙәккә аҙ бирә, ә күберәк ала, тип үҙ ҡуйыртыуы ла нигеҙ еҙ. Бының булыуы мөмкин түгел, сөнки Башҡортостан — Федераль үҙәк менән килешеүҙәр буйынса федераль бю-

джетҡа бик мул алым индереүсе аҙ ғына субъекттарҙың бере е. Ә беҙ унан бер ниндәй ҙә дотация алмайбыҙ".

Үҙаллылыҡ, ул нисек кенә сикләнгән булма ын, Башҡортостан Президенты өсөн республиканың маҡсатлы үҫеше, иҡтисадтағы әм социаль өлкәләге хәлде яҡшыртыу, Башҡортостанда йәшәүсе барлыҡ халыҡтар өсөн дуҫлыҡ әм туғанлыҡ шарттары булдырыу, конкрет ҡала, район, ҡасаба, ауылдың конкрет проблемаларын хәл итеү тигәнде аңлатты.

Рәхимов әм уның команда ы ҡулында эшлекле инструментҡа әйләнгән үҙаллылыҡ әм яуаплылыҡтың шундай логик әм тәбиғи берлеге, ваҡыт күр әткәнсә, дәүләт мәсьәләләрен хәл итеүҙә урындағы идараның роле күтәрелеү тенденцияларына яуап бирә икән, был, бер яҡтан, Федерация субъекттарына төбәктең социаль-иҡтисади әм мәҙәни-рухи проблемаларын оператив хәл итергә мөмкинлек бир ә, икенсенән, федераль органдарҙы уларға хас булмаған ғәйәт күп анлы функциялар башҡарыуҙан азат итә.

Әйткәндәй, урындағы идара итеү субъекттарына күберәк үҙаллылыҡ биреү идея ы 1996 — 2002 йылдарҙа республика районлары әм ҡалалары хакимиәттәре башлыҡтарының күсмә семинарҙарын үткәреүҙә үҙенең дауам ителешен тапты. 1996 йылдың 12 февралендә М.Ғ. Рәхимов семинарҙар циклын "Башҡортостан Республика ында ижтимағи-сәйәси әм иҡтисади үҙгәрештәрҙе тормошҡа ашырыуҙа урындағы идара органдарының бурыстары" тигән доклад менән асып ебәргәйне.

Бына шунда үҙ-үҙебеҙгә ораy бирергә лә, оҡланырға ла, хөрмәтебеҙҙе белдерергә лә сәбәп бар: шул хәҡиҡәт, ахыр килеп, идеаль конструкциялар булыуҙан уҙып, реаль сәйәсәт булып кәүҙәлән ен өсөн Мортаза Ғөбәйҙулла улына күпме көс әм энергия түгергә тура килгән! әм әле бул а ни ҡәҙәр тырышлыҡ кәрәк! Тағы ла ҙурыраҡ тырышлыҡ әм ныҡышмалылыҡ талап ителә, сөнки республика алдында торған проблемалар кәмемәй. Уинстон Черчилль әйтмешләй, "күҙебеҙҙе йомоп әм уларға ҡарамау менән генә беҙҙең проблемалар юҡҡа сыҡмаҫ".

Меңдәрсә мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнеп, әр урынға өлгөрөп әм дөйөм федераль күләмдәге сәйәсмән булып, М. Ғ. Рәхимов асылы менән эскер еҙ ауыл малайы булып ҡала. Ата ы Ғөбәйҙулла Зөфәр улы, ғаиләне ис ҡасан бер ыныҡ икмәк еҙ ҡалдырма а ла, Мортазаның бала сағы әм йәшлеге туҡтау ыҙ эш менән үтте. Ерҙе маңлай тире менән уғарған кеше генә икмәк ҡәҙерен белә. Крәҫтиән хеҙмәтенең осо-ҡырыйы булмай. Нефть техникумында, артабан нефть институтында уҡығанда ла, инде сәнәғәтсе-инженер булып киткәс тә ул тыуған ауылы менән бәйләнеште ис кенә лә өҙмәй, ата йортона йыш ҡайта әм ең ыҙғанып өй эштәренә тотона. Уның салғыға ла, балтаға ла әләте бар. Президенттың ергә тартылыуының сәбәптәрен, игенсе хеҙмәте менән оҡланыуының әм уны хөрмәт итеүенең тамырҙарын, бәлки, шул крәҫтиән мәшәҡәттәре ара ында формалашыуынан эҙләргә кәрәктер. Әгәр ул уға ғына хас ялҡын менән, әр бер дәүләттең байлығы ерҙән, тимәк, ауылдан килә, иң яҡшы, иң талантлы кешеләр шунда тыуа, тип раҫлай икән, Президент быны ихлас күңелдән әйтә. Ауылда йәшәү кешегә хеҙмәт тәрбиә е биреп әм тыуған ергә мөхәббәт, игелеклелек, сабырлыҡ кеүек иң яҡшы кешелек сифаттары тәрбиәләп кенә ҡалмай, бәлки, ысын яуаплылыҡ тойғо о ла тыуҙыра: хужалыҡтағы күп анлы эштәрҙе иртәгәгә ҡалдыра йәки икенсе кешегә тапшыра алмай ың. М.Ғ. Рәхимовтың әйтеүенсә, "Көсөргәнешле әм арымай-талмай эшләү, үҙ ереңде яратыу әм аҡлау, тормошҡа әм тәбиғәткә ҡарата аҡыллы әм түҙемле мөнәсәбәт кеүек гүзәл, быуаттар буйына формалашҡан сифаттар ауыл кеше е менән бәйләнгән. Крәҫтиән әр халыҡтың телен, юғары әхлаҡи ҡиммәттәрен әм традицияларын төп аҡлаусы булып тора". Республика районлары әм ҡалалары хакимиәттәре башлыҡтарының юғарыла

әйтелгән семинарҙарында әм уларҙың материалдарын дөйөмләштереүҙә ҡатнашып, мин, был донъяла байтаҡты күргән кеше, ауылдағы үҙгәрештәргә хайран ҡалдым. Ҡала халҡы күҙ алдына килтергәнсә, ауыл хәҙер йоҡом орап ятмай. Ул үҙенең көс-ҡеүәтен яңынан тойҙо, торғонлоҡ тышауҙарын сисеп ташланы, йәшәргәндәй булды. Ауыл, үҙе өсөн эшләгәнлеген әм дәүләт уны үҙ проблемалары ҡаршы ында яңғыҙ ҡалдырмаҫын белеп, дәртләнеп донъя көтөргә тотонто. Шуны ла әйтәм: уңғы йылдарҙа ғына Рәсәй карта ынан эреле-ваҡлы 14 мең ауылдың юғалыуын белеп, иҫ-аҡылым киткәйне. Үҙенең тыуған нигеҙенән, ата-бабалары ҡәберенә баш эйеүҙән мәхрүм ҡалғандарҙың хис-тойғоларын күҙ алдына килтереү ауыр. Юғалтҡанды кире ҡайтарыуы еңел түгел. Бәхетебеҙгә, хафалы әм ауыр ваҡыттарҙа ла беҙ ундай ҡазаларға юлыҡманыҡ. Ауылдарҙың йөҙөн үҙгәртеп әм ундағы тормошто икенсерәк ойоштороп, беҙ юлдар менән газ магистралдәре генә алмайбыҙ, ә әсәләр, балалар, ғаилә, өлкән йәштәгеләрҙең яңы донъя ын асабыҙ. Ауылда, ни айәт, хеҙмәт баҙары эшләй башланы. Был — беҙҙең өсөн бик мө им билдә, сөнки ауыл хужалығы — беренсе сиратта, иҡтисадтың ҙур секторы, әм уның баҙар закондары әм талаптарына таянып йәшәүе шатландыра.

М.Ғ. Рәхимов характерындағы тағы бер ыҙатты күптәр телгә ала. Президент өсөн әр нәмә — мө им. Бының сәбәбе ябай: әр урында, оло әм кесе эштә кешеләр бар, ундағы эштең торошона тиҫтәләрсә әм йөҙҙәрсә ғаиләләрҙең йәшәйеше бәйләнгән. Ә ул Президент өсөн төп нәмә. Бына ни өсөн Мортаза Ғөбәйҙулла улы урынға килгәс иң тәүҙә производство менән таныша ла халыҡ менән кәңәшләшергә китә. Уның белеп әйтелгән, урынлы фекергә ҡолаҡ алмаған сағы булмай.

Ауыл кеше е ис ҡасан иҙелеп әм түбәнселеккә ҡалып йәшәмәйәсәк. Быны Президентыбыҙ әйтте. Туҡ анынсы йылдар башында, команда ы менән бергәләп ауылды тергеҙеүҙең стратегик йүнәлештәрен эҙләгән саҡта әйтте. Бында дәүләттең Башҡортостан халҡы мәнфәғәттәрен яҡлауға киҫкен рәүештә боролоуы төп фактор булды. Социаль тармаҡты үҫтереү буйынса республикабыҙ Рәсәй төбәктәренең алдынғы төркөмөнә инә. Беҙ ҡалала ла, иң алыҫ ауылдарҙа ла уңайлы тормош шарттары булдырыуға ынтылабыҙ. Уҙған йылдарҙа тиҫтәләрсә мең саҡрым автомобиль юлдары, йөҙҙәрсә күперҙәр төҙөлгән. Ялтырап ятҡан асфальт юлдар ауылдарға ла етеп бара. әм беҙ асфальтҡа өйрәнеп тә киттек, юл өҙөклөгө тигән нәмәне онотточ, даими автобус маршруттары, өйҙәрҙәге газ, телефон, телевизор тура ында өйләп тә тормайбыҙ. Бөгөн ауылдарҙың 98 проценты ышаныслы юлдар менән тоташҡан. Ауылдарҙы газ менән тәьмин итеү күләме 61 проценттан ашып китте.

Әгәр беҙ республикала торлаҡ төҙөлөшөнөң киң ҡолас йәйеүе тура ында өйләйбеҙ икән, был йә эттән илдә алдынғылар рәтендә булыуыбыҙҙы әм уҙған йыл 2,2 миллион квадрат метр торлаҡтың ҙур өлөшө ауылға тура килеүен дә онотмайыҡ. Хәҙер ауыл ерендә йыл айын игеҙ йөҙ мең квадрат метрҙан күберәк торлаҡ төҙөлә. Ауылдар яңыра, ундағы йорттарҙа уңайлыҡтар ҡала фатирыныҡынан кәм түгел. Былар бары ы ла ҡыуандыра, тыуған яғыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғо о уята. Йәштәр урамдарында, йәшәргән әм күркәмләнгән ауылдарҙа бәхетле ғаиләләр ҙә күп булыр, тип ышанғы килә.

үҙ ыңғайында әйткәндә, ғаиләләрҙә сабыйҙарҙың күберәк булыуын Президент дөйөм дәүләт проблема ы тип иҫәпләй. Яйы тура килгәндә, ул ғаилә ҡороу менән тоҡкарланған йәштәрҙе аталарса тәнҡитләп тә ала. Минең ҡарашҡа, балалар менән осрашыуҙар, уларҙың шат тауыштарын ишетеү, аралашыу М.Ғ. Рәхимовҡа оло ҡыуаныс килтерә. Балалар ҙа Президентҡа мөхәббәт, оҡланыу, хөрмәт менән яуап бирә.

Эш Президенттың күп балалы ғаиләләрҙең, уғыш әм хеҙмәт ветерандарының

хәлен еңеләйтеүгә, әләтле балаларҙы, талантлы йәштәрҙе дәртләндереүгә йүнәлтелгән указдарының анында ла түгел. Тормоштары әле үк батырлыҡҡа әйләнгән ҡатын-ҡыҙҙарға "Әсәлек даны" миҙалдарын тапшырғанда М.Ғ. Рәхимов үҙенең хис-тойғоларын рәсмилек артында йәшерергә тырышмай ҙа, ошо хәлдең уға сик еҙ ҡәнәғәтләнеү килтереүен йыш ҡабатлай.

уңғы йылдарҙа Президент башланғысы менән тормошобоҙҙа тағы бер матур ғәҙәт урын алды. Бергә-бергә тормош юлын 50, 60 әм 75 йыл үткән парҙар халыҡ алдында данлана. Ә инде рәсми ҡағыҙҙар теленә күс әк, ғаиләне, әсәләр әм балаларҙы яҡлау буйынса дәүләт саралары ябай кешегә ихлас ихтирам менән уғарылған. Айырыуса күп балалы әм ныҡлы ғаиләләрҙең ауылда йәшәүен иҫәпкә алғанда, социаль сәйәсәттең төп йүнәлешен тоҫмөрләүе ауыр түгел.

әм, үҙҙе йомғаҡлар алдынан, әйтелгән фекерҙәрҙе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың өҙөмтәләре менән тамамлау урынлы булыр:

— Ауылдың социаль-мәҙәни үҫеше, ундағы демографик хәлде яҡшыртыу өсөн күп нәмә эшләгәндә беҙ бер нәмәне онотмайбыҙ: традицияларыбыҙҙың тамыры, рухи ҡиммәттәребеҙҙең сығанағы, халыҡ аҡылының саф шишмә башы, гүзәл таланттарыбыҙҙың бишеге — ауылда. Әгәр ауылыбыҙ йәшә ә әм сәскә ат а, Башҡортостаныбыҙҙың да лайыҡлы киләсәге булыр. Шуға иманым камил.

Уның ауыл райондары буйлап сәфәрҙәренә тағы ла әйләнеп ҡайтып, Мортаза Ғөбәйҙулла улының, мәҫәлән, ниңә таулы-урманлы Бөрйәндә, Белоретта йә Ҡариҙелдә иген игергә мәжбүр итеүҙәренә ғәжәпләнеүен уртаҡлашам. Шул ҡәҙәр яфалар менән үҫтерелгән икмәктең әсе булыры билдәле бит инде. Шөкөр, өрөп иген сәсерлек ерҙәрҙе Хоҙай Башҡортостандан йәлләмәгән. "Шуны айырыуса ыҙыҡ өҫтөнә алырға теләйем, — тине М.Ғ. Рәхимов сығыштарының бере ендә, — әр зонала баҫыусылыҡты алып барыуҙың үҙ система ы бар. Республиканың әр төбәгендә иң юғары продукция биреүсе культуралар ғына игелергә тейеш. Стратегик йүнәлеш булараҡ, минималь эшкәртеүгә әм энергия аҡлаусы технологияларға күсеүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Быны ауыл хужалығының иҡтисади хәле генә түгел, бәлки, экологик факторҙар ҙа талап итә. Тәбиғәткә алды-артты ҡарамайынса унан тартып алынғанды — йылғаларҙың әм ауаның сафлығын, туғай әм көтөүлектәрҙе ҡайтарырға кәрәк".

Президентыбыҙ хаҡлы. Ауылға уның рухын, иманын, романтика ын, унда эшөйәр, таҙа, ҡунаҡсыл, шат күңелле кешене тыуҙыра торған тормош рәүешен әм фәлсәфә ен ҡайтарып биреү фарыз. Ҡасандыр унда әр кем йырсы ла, гармунсы ла, бейеүсе лә булған. Ауылда, бөрсәне дағаламаған хәлдә лә, өй күтәреп инерлек оҫталарҙы эҙләп тормағандар. Хәтерегеҙҙәлер, ауылда ат туғарып егә белмәгән егеттең күҙен астырмағандар йәки бәлеш бешерә, таҫтамал сигә белмәгән ҡыҙға кейәү табылмаған. Шуға оҡшаш проблемаларҙы хәл итә барып, Башҡортостанда Президент башланғысы менән халыҡ өнәрҙәрен, башҡорт, татар халыҡтарының кәсептәрен тергеҙеү эше алып барыла. Билдәле бит, әр ауылда кейеҙ йәйеү йә- и ә быйма баҫыу, туҡыу, хуш еҫле икмәк бешереү мөмкинлеге бар. Хәҙер беҙ Хәйбулла районындағы экосистеманы тергеҙеү кеүек ҡоласлы проекттарҙы тормошҡа ашырыуға ғына түгел, республиканың төрлө тарафтарындағы тиҫтәләрсә быуаларҙа ыу булыуына, тимерлектәр, тирмәндәрҙең эшләп китеүенә лә шатланабыҙ.

Миңә байтаҡ йылдар Белорет әм Бөрйән яҡтарында эшләргә әм Үрге Әүжән, Ҡағы, Үҙән кеүек ҙур поселоктарҙың бөлгөнлөккә төшөүенә ша ит булырға тура килде. Ә Түбәнге Әүжән ауылын халҡы ташлап китте әм ҡасандыр шәмдәй ҡарағайҙарҙан төҙөлгән ныҡлы йорттар буш ҡалды. Йөрәктәргә ҡан ауҙырған ғибрәтле күренеш. Быны төҙәтер әмәл бармы икән?

Көрсөктән сығыу юлдарын Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың уй-фекер-

ҙәрендә табырға мөмкин: "Республикала умартасылыҡты үҫтереү өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Башҡорт балын етештереүҙе күпкә арттырырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта дарыу үләндәрен үҫтереү әм эшкәртеү менән дә шөғөлләнергә була".

Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: өнәрселек училищеларында тракторсы, комбайнсы, шоферҙарҙы йөҙәрләп әҙерләйбеҙ, шул уҡ ваҡытта ниңә егеттәрҙе әм ҡыҙҙарҙы башҡа өнәрҙәргә лә өйрәтмәҫкә? Тағы бер нәмәне йәшермәйек: училище тамамлаған әр кем ауылға өйрәнеп китә алмай, сөнки уларға ауылда көн дә кәрәкле өнәр юҡ. Шул уҡ ваҡытта ауыл ерендә оҫта умартасылар йәки йәшелсәселәр кәрәк, ә оҫта ҡуллы электрикты, столярҙы, тире-күн оҫта ын, мейес сығарыусыны сыра яндырып эҙлә әң дә табырмын тимә. Яңырған, яңынан аяҡҡа баҫҡан ауылдарҙа улар бик кәрәк. Бөгөн ауыл кеше енең ҡулынан барлыҡ эш тә килергә тейеш әм ул, тормош талап иткәнсә тотон а, шуны булдырырға, ғаилә енә лайыҡлы йәшәү шарттары тыуҙырырға бурыслы.

...Хәтер тағы ла туҡ анынсы йылдарға, уларҙың башына алып ҡайта. Майҙандарҙа, яңыра барыусы республика парламентында үҙ өйөрмә е тынмай. Айыҡ аҡылды йыш ҡына хистәр күмеп китә. Ҡай ы саҡ шомло, йөрәкте өшөткөс хәбәрҙәр ҙә ишетелә: ниндәйҙер бер ахмаҡ парламент бина ы башынан Рәсәй дәүләт флагын алып ташлаған, ҡыҙып алған аҡыл ыҙ бала-саға Телерадиокомпа- ния бина - ына үтеп инергә тырышҡан. Ул арала милләттәр ара ында хөсөт таратыусылар килеп сыҡты. Был инде кухняла тел сарлау түгел...

Көтөлмәгән кәртәләрҙе еңеп, хәүефтәрҙән арынып, иҫкергән, әҙәмсә эшләргә әм лайыҡлы йәшәргә ҡамасаулаусы барса нәмәне индән алып ташлап, яңы Башҡортостан тыуҙы. Шаулап торған халыҡ ара ында ла Республика Юғары Советы Рәйесе Рәхимовтың буйсан, ныҡлы кәүҙә е әллә ҡайҙан күренеп тора. Ул киҫкен өйләшеүҙәрҙән, йөҙгә бәреп әйтелгән ораузарҙан бер ваҡытта ла ситкә тайпылмай. Тура үҙлелегендә, халыҡ менән улар телендә өйләшеүендә, көсөргәнешле ваҡыттарҙа тапҡыр әйтем, шаян үҙ менән кәйефте күтәреп ебәреүендә — быларҙың бары ында ла эскер еҙ, ҡыйыу ауыл егетенең сифаттары күренеп ҡала. Мортаза Рәхимовтың характерындағы күп ғәҙәттәр уның ата ынан, иҫ киткес эшсән, намыҫлы әм асыҡ йөҙлө Ғөбәйҙулла Зөфәр улынан әм әсә е, изге күңелле Ғәлимә апайҙан килә.

Әйтеүемсә, бөгөнгө өйләшеү бер яҡлыраҡ булды. М.Ғ. Рәхимов кеүек киң билдәле дәүләт эшмәкәренең тормошо тәрән өйрәнеүгә әм ба алауға лайыҡ. Был бурыс башҡарылыр, тип ышанырға кәрәк. Үҙ Президенты тура ында халыҡ та үҙен әйтер. Әммә бөгөн миңә, автор булараҡ, уҡыусы алдында аҡланыу өсөн кире ҡаҡҡы ыҙ дәлилдәр бар. Президент етәкселегендә нимәләр эшләнгән – бары ы ла күҙ алдыбыҙҙа. Әгәр архитектураны ташта ынланған музыка тип атайҙар икән, мендәрсә матур йорттарға, мендәрсә саҡрым юлдарға, газ үткәргестәргә, ҡала, ауылдарыбыҙға ысын цивилизацияның килеүенә ниндәй исем бирәйек? Рәхимов и ә уларҙың бары ын, ябай ғына итеп, эш тип кенә атай. Барлыҡ Башҡортостаныбыҙҙы күҙ алдында тотоп, Мостай Кәрим: "Милләт өсөн үҙ дәүләте — кеше өсөн үҙ йорто менән бер. Унда әр башланғыстың бишеге тирбәлә", — тигәйне. Республика башында күп йылдар тороп, М.Ғ. Рәхимов нимә генә эшләмә ен, улар — йортобоҙ әр саҡ йылы, яҡты, ҡунаҡсыл бул ын әм кешеләр унда мул тормошта әм татыу йәшә ен өсөн оло хәстәрлек.

Ошонда мин, тағы ла уҙғандарға әйләнеп ҡайтып, Мостай ағайҙың 1993 йылдың 25 декабрендә М.Ғ. Рәхимовтың Президент вазифа ын ҡабул итеү тантана - ында өйләгән сығышынан өҙөк килтермәй булдыра алмайым.

"Президент — ил башлығы, ул – илдең терәге, яҡлаусы ы әм өмөтө. Ул — ил нервыларының төйнәлеше, уның тупланған аҡылы, ул дөйөм халыҡ тарафынан

айланған.

...Башҡортостандың барлыҡ халҡына, ихтыяждары әм мәнфәғәттәренән сығып, уның әр милләтенә оҙаҡ ваҡыттар йән-тән менән бирелеп хеҙмәт итеү генә беҙ биргән тауыштарҙың дөрөҫлөгөн раҫлар. Был мәсьәләлә минең шигем юҡ, сөнки Юғары Советыбыҙ Рәйесе булып эшләп, Мортаза Рәхимов ысын дәүләт ир-егетенә хас булырға тейешле юғары эш, шәхси сифаттарын күр әтте. Был — Башҡортостан Республика ы мәнфәғәттәренә тотороҡло, тотҡан урында даимилек әм принципиаллек, айыҡ фекер, замандаштарының мохтажлыҡтарына ҡарата иғтибарлылыҡ. әм тағы ла выждан әм намыҫлылыҡ".

Ул башҡарған оло яуаплылыҡ йөгө иңдәребеҙҙә ятмағас, беҙгә Президенттың шәхес булараҡ кисерештәре тура ында үҙ йөрөтөү ауыр. Уны шик-шөб әләр ҙә яфалайҙыр, ни өсөндөр үпкәләйҙер, ыҙланалыр: Президент та бит, беренсе сиратта, – әҙәм бала ы. Президентты эштең асылын аңламайынса тиргәүҙәренә, уйҙырмалар менән тәкәтен ҡоротоуҙарына эс боша, уны йәлләй ең, ләкин ярҙам итер сара юҡ. Ялғандан, уҫал үҙҙәрҙән юғары статус та, рейтингтар ҙа, наградалар ҙа хәҙерге заманда аралай, ҡурсалай алмай шул. Шундай ваҡыттарҙа Президентҡа беҙҙең хөрмәтебеҙ әм рәхмәтебеҙ ярҙам итер, тип ышанғы килә.

Президентыбыҙ таҫма тел дә түгел. Ул кем менәндер әшнәлеккә лә юл ҡуймай. Конфуций әйткәнсә, "кешелеклелектең матур үҙҙәр әм йылмайыу менән йәнәш килеүе ирәк була". Уның ҡарауы, барлыҡ Башҡортостан халҡы уның ябайлығын, әр кемде яҡын күреүен, уны тыңлай әм ишетә алыуын белә. Кешеләр Мортаза Ғөбәйҙулла улы өсөн элитаға әм ябайға бүленмәй.

М. Ғ. Рәхимов Мәскәүҙә лә, алыҫ әм яҡын илдәрҙә лә, башҡорт халҡынан бигерәк, күп милләтле тотош Башҡортостанды кәүҙәләндерә. Раҫлауҙарынса, Рәсәйҙә М. Ғ. Рәхимов менән дәүләт ҡоролошонон, хужалыҡты алып барыуҙың төрлө мәсьәләләре буйынса кәңәшмәгән төбәк етәксе е юҡ. Тәжрибәле дәүләт эшмәкәре әм хужалыҡ етәксе е булараҡ, уның абруйы бик юғары, ошо хөрмәт, тәбиғи рәүештә, республикаға ла ҡағыла. Мортаза Ғөбәйҙулла улының Рәсәй Президенты Д. А. Медведев, Хөкүмәт Рәйесе В. В. Путин, Мәскәү ҡала ы мэры Ю. М. Лужков, Татарстан Республика ы, Свердлов, Силәбе өлкәләре етәкселәре М. Ш. Шәймиев, Э.Э. Россель, П.И. Сумин менән тиң әм иптәштәрсә мөнәсәбәте оҡланыу ҙа, республикабыҙҙың киләсәге өсөн ышаныс та уята.

Беҙ ҙә Президентыбыҙға шундай ышаныслы терәк булайыҡсы. Уның асыҡлығын, ихласлығын белеп, ҡай ы берәүҙәр быны үҙ маҡсаттарында файҙаланыуҙан да тартынмай. Ул йыш ҡына ҡаты ҡуллы була, әммә асыуынан тиҙ ҡайтыусан. Ләкин уның характерындағы был сифатты йомшаҡлыҡ йәи ә либераллек тип ҡабул итеү хата булыр ине.

Президент ялғанды әм буш үҙҙе ғәфү итмәй әм таш менән атҡанға аш менән ата. Уның донъяға ҡарашы әм инаныуҙары шундай.

...Әйткәнемсә, Ғөбәйҙулла Зөфәр улы Рәхимов етәкләгән "Наҡаҫ" колхозын ҡасандыр "йөҙ ҡырҡ пенсионер колхозы" тип йөрөткәндәр. Хәҙер уның улы Мортаза Рәхимовтың иңендә — дүрт миллиондан күберәк ватандашы йәшәгән ҡеүәтле республика. Башҡортостанды, әйҙә, бәхетле кешеләр иле тип ата ындар. Был ғәҙел булыр.

**Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ,**
**публицист.**

---

**Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ,**
**Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты**

## *Башҡортостан Президенты*

Хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа
бағышлайым был шиғырымды

*Ололарҙы  әр саҡ ололоҡлап,*
*Кеселәргә өмөт бағлаған,*
*Күҙ ҡарашынан уҡ әҙәмдәрҙең*
*Моң- ағышын,*
*ғәмен аңлаған*
*иҙгер йәнле,*
*зирәк ил аға ы —*
*Мортаза ла тигән ир булыр.*
*үҙ сурытып ҡат-ҡат  өйләмәҫ ул,*
*Әйткән  үҙе уның бер булыр.*

*Атайсалдың бөтә моң-зарҙарын*
*Үҙ йөрәге аша үткәргән,*
*Милли бәҫен,*
*милли дәрәжә ен,*
*Көс- тир түгеп,*
*эште күтәргән;*
*ай, арҙаҡлы*
*ажар ил хужа ы —*
*Мортаза ла тигән ҡа арман,*
*Ул бит тыуған ергә ҡот өҫтәргә*
*Аҫыл шәхес булып яралған.*

*Сал Мәскәүҙең төрлө ҡыҫымына,*
*Баҫымына ҡаршы торорлоҡ,*
*Ҡот осорлоҡ*
*хәтәр саҡтарҙа ла*
*Күк Уралға терәк булырлыҡ;*
*Көслө рухлы,*
*ҡыйыу ил башлығы —*
*Мортаза ла тигән азамат,*
*Уның йөрәгендә мәңге дөрләр*
*Олатайҙан ҡалған аманат,*
*Дөрөҫ юлдарынан тайпылмаҫ ул,*
*Намыҫына ҡылмаҫ хыянат.*

*Сая Салауаттай айбарланып,*
*Халҡы менән булып бер төптән,*
*Ялт-йолт иткән утлы йәшен  ымаҡ*
*Заман я илдарын өркөткән,*
*Ҡуш йөрәкле,*
*ғорур ил батыры —*
*Мортаза ла тигән ыласын,*
*әр милләткә*
*дуҫлыҡ ҡулын  уҙып,*
*Йәйеп тора, ана, ҡоласын.*
*Башҡортостан халҡы шуны теләй:*

*Сәләмәт бул,*
*ныҡ бул,*
*бул таҙа.*
*Ҡан ыҙ Тәфтиләүҙәр көтмәгәндә*
*Илгә килтермә ен ҙур ҡаза.*
*Тауҙай эштәр атҡарғанда иңә*
*Алла ҡеүәт бир ен,*
*Мортаза!*
**1993.**

---

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ,**
**Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты**

## *Хәҙер беҙҙе донъя таныны*

Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа

*Башҡортостан башлығынан уңды –*
*Ил теҙгене тоғро ҡулдарҙа.*
*Алға алғас халыҡ хыялдарын –*
*Уңып тора тотҡан юлдар ҙа.*

*Күрә бары ы өмөт аҡланғанын,*
*Күрә меңәр йылдар көткәнен.*
*Артта мең ғазаптар кисергәнен,*
*Инде беҙҙең көндәр еткәнен.*

*ыйынышып барса милләт менән,*
*Ҙур терәкте тойоп эргәлә,*
*Бер үк маҡсат менән алға бара,*
*Бөтә Рәсәй менән бергәләп.*

*Эшен күреп бары ы, күңел биреп,*
*Әйҙәүсегә ихлас тартылды.*
*Шуға бөгөн ғаләм ҡаршы ында*
*Күпме артылышҡа артылдыҡ.*

*Донъя күҙ алдында күтәрҙе ул*
*Башҡортостан тигән ҡаяны.*
*Ышаныслы юлда халыҡ уға,*
*Ул халҡына ғына таяныр.*

*Ел-дауылдар әле булмаç, тимә,*
*Аяҡтарҙа ныҡлы торорбоҙ.*
*Боролошло мәлдә аҙамаусы*
*Башлығыбыҙ менән ғорурбыҙ.*

*Белә бөгөн халыҡ киләсәген,*
*Нисек атасағын таңының.*
*Хәҙер беҙҙе донъя ныҡлы белде,*
*Хәҙер беҙҙе донъя таныны.*

*Беҙҙә күрергә тип тормош серен*
*Тирә-йүндән килә көллө ө.*
*Башҡортостан бөгөн — эш өлгө ө,*
*Башҡортостан — йәшәү өлгө ө.*

---

**Рәмил ЙӘНБӘК**

## *Күгәрсенем*

*Ағиҙел әм Эйек урта ында*
*Йәйрәп ята тыуған ергенәм.*
*Күгәрсенем — изге илем минең,*
*Иң яҡыным, берҙән-бергенәм.*

*Ил батыры Шә ит тыуған индә,*
*Күгәрсенем — изге илгенәм.*
*Яҙмыш еле ҡайҙа илткәндә лә,*
*Мин бит гелән иңә елкенәм.*

*Ил инә е Зәйнәб апай бында*
*Рухҡайына ҡеүәт туплаған.*
*Бәрәкәтле ерем, гүзәл халҡым,—*
*Ғүмер буйы еҙгә оҡланам.*

*Ил аға ы Мортазаның иле —*
*Күгәрсенем — ғәзиз еркәйем.*
*Мәңгелек бер Мәккә итеп ине*
*Йөрәк түркәйемә теркәйем.*

*Ағиҙел әм Эйек урта ында*
*Йәйрәп ята тыуған ергенәм.*
*Күгәрсенем — изге илем минең,*
*Иң яҡыным, берҙән-бергенәм.*

---

**Рәйес ТҮЛӘК**

## *Президент Рәхимовҡа*

*Иңдәреңдә ил яҙмышы,*
*Ил теҙгене ҡулыңда.*
*ин халыҡҡа батша ың да,*
*ин халыҡҡа ҡол оң да.*

*Тамыр йәй илгә имәндәй,*
*Бөркөттәй үргә талпын.*
*ин үҙ халҡыңды ташлама,*
*Ташламаç ине халҡың.*

*... Бойомға аш ын уйҙарың,*
*Сәфәрҙәрең уң бул ын.*
*ин халыҡтың ата ы ың,*
*ин халыҡтың улы ың.*



**Фәндидә ХАРРАСОВА**

# *ҠАПҠА ТӨБӨНДӘ...*

**ПОЭМА**

...Мөхәббәт ул — телдән төшмәй торған
Иң боронғо моңло йыр ымаҡ.
Уй-хистәрҙең иң йылы ын эҙләп,
Саф донъяға ҡарап юл сығам...

**Илдар Юзеев.**

*Ҡайттым бына, тик ин көтмәгән ең,*
*Ҡалған бары моң оу иҫтәлек.*
*Киләсәктә киләсәкте көтөп*
*Йылдар үткән, иҫең китәрлек.*
*Киләсәк тә кисәгелә ҡалып,*
*Баҡыйлыҡҡа күскән тын ғына.*
*Мөхәббәттең айырылғы ыҙ пары —*
*ағыш килеп йәнгә ыйына.*
*Дауаламай ваҡыт, дауаламай,*
*Үтә алмай күңел түренә,*
*Тәҡдир уға — бары уҙылған юл*
*Менгән саҡта ғүмер үренә.*
*Бәхәсләшәм:*
*—Ҡыуып етермен, —тим,—*
*Атла, ваҡыт, ә мин туҡталам.*
*Йөрәгемә көс әм дарман бирер*
*Ғүмерем таңына мин уҡталам.*

*Фәндидә Харрасова Благовар районында тыуған. Медицина училище ын, БДУ-ның юридик факультетын тамамлай. “Толпар” журналының бүлек мөхәррире булып эшләй. БР Яҙыусылар союзы ағза ы. Өс шиғри йыйынтыҡ авторы.*

***

*Күктәге ай, йондоҙ гөлләмә е*
*Оҙатып килә ҡапҡа төбөнә.*
*– Таңға тиклем керетмәйем,– тип ин*
*Пинжәгеңде алдың иңемә.*
*– Юҡ, керәм,– тип тартҡылашҡан булдым,*
*Ҡосағыңа алып ин көлдөң.*
*Үҙ үҙле ең, имеш, егет кеше,*
*Әтәс ҡысҡырғансы көттөрҙөң;*
*Мин – Ләйлә е, ин Мәжнүне булдыҡ*
*Яҙмыштарҙы бәйләр ул төндөң.*
*Икенсе кис... Йәнә ҡапҡа төбө,*
*Таңға саҡлым тотоу иҫәбең.*
*– Юҡ, керәм, – тим, – сама белеү кәрәк.*
*(Ҡәҙер еҙгә ҡал ам, нишләрмен?)*
*– Тимәк, яратмай ың? Йә, яуап бир,*
*Өҙә еңме шулай араны?*
*Мин тиҙерәк күсәм шаяртыуға:*
*– Күпте белеү ифрат зарарлы.*
*– Йә, әйт инде, борғоланмай ғына,*
*Ҡасма, зин ар, ысын яуаптан.*
*Ә мин и ә тел сарлайым аман –*
*Күҙҙәреңә ҡарап шаяртам:*
*– Үҙең әйт уң, нисек яраталар,*
*Аңламайым уны мин аман?*
*Ә ин бына, бик аҡыллы булғас,*
*Аңлатыр ың тиеп ышанам!*
*– Кил, аңлатам! – Йылы ҡосағыңа*
*Этә-төртә «ябып» ҡуя ың:*
*– Етте, ҡыҙыҡай, артыҡ шаяра ың.*
*Бала-саға менән уйнар ың.*
*Нисек яраталар? Белгең кил ә,*
*Йөрәгемде бына тыңлап тор!*
*– Йә, ебәр, тим, ҡолаҡ тоноп бөттө,*
*Йөрәк түгел индә, ә мотор.*
*– Ышандыңмы инде?*
*– иңәме ни?*
*– Тыңланың да ба а йөрәкте!*
*– Ә ул миңә бер ни өйләмәне,*
*Туҡылдап тик тибеп күр әтте...*
*Ирешә бирәм. инең и ә минән*
*Ишетә ең килә тик бер үҙ.*
*...Сабыр иткән – мораҙына еткән,*
*Ашыҡтырма мине, йәме, түҙ!*

***

*ағыныуҙарыма түҙә алмай,*
*Ҡәләм алам, ҡуям ҡат-ҡабат.*
*Күңелдәге хистәр ялҡынынан*
*Яралалыр шиғыр – сәләм-хат.*

*Күҙ алдымда тора инең үрәт:*
*Көлә ең ин, никтер көлә ең.*
*Зәңгәрләнеп янған күҙҙәреңде*
*Иркәләгем килә, үбә ем.*
*Ысынында, мәктәп йылдарынан*
*Биләнең бит хыял-уйымды.*
*Күҙҙәреңдең зәңгәр осҡононда*
*Шул хыялдың сиге юйылды.*
*Күңелдә наҙ, юҡтыр башҡа тойғо,*
*ин ағынмай нисек түҙә ең?*
*Аҡ ҡағыҙға күсә наҙлы хисем,*
*Тартынмайым хәҙер, күрә ең.*
*Ҡыйын ынмайынса тура бағам*
*үрәттәге серле күҙҙәргә.*
*Күрәләтә «янған» утҡа ингәс,*
*Сара юҡтыр, кәрәк түҙергә...*
*Күңелем илай, ә ин көлә ең,*
*Көлмәйенсә булмай, күрә ең...*

***

*Яҙҙар, яҙҙар, еҙҙең яр ыу ҡеүәт*
*Елкендермәй ҡалмаҫ кемде лә.*
*Мин мәшриҡтән, ин мәғриптән ҡайтып,*
*Осрашабыҙ ҡапҡа төбөндә...*
*ағынған ың, иҙәм, осрашҡас та*
*Ҡосағыңа ҡармап ала ың.*
*үҙҙәр артыҡ, күҙҙәр өйләшкәндә,*
*Йөрәк менән йөрәк серләшкәндә,*
*үҙ еҙ, өн өҙ генә яна ың...*
*ағыныу хисе үреләме төшкәс,*
*ин, ни айәт, телгә килә ең:*
*– Яратмай ыңдыр ин, йыш ҡайтмай ың,*
*Күрешмәйсә нисек түҙә ең?*
*Ә мин и ә, ҡайтып аҙна айын,*
*Кис еттеме, бында йүгерәм.*
*Ҡайтыр юлдарыңа текләп бағып,*
*Зар-интизар булдыҡ ай менән.*
*– Ә мин иңә ағынып хат яҙҙым, – тим.*
*– Нишләп ул хатты мин алманым?*
*– аҡлайым мин уны күңелемдә...*
*– Шаярта ың, ҡыҙыҡай, ин тағын...*
*– ағыныу хисем, шиғри юлдар булып,*
*Ғаләм аша иңә юлланды.*
*Күңелем тулҡындары, ине эҙләп,*
*Мәғрип яғын нисә ураны.*
*Ә ин аман бында икән ең,*
*Ҡапҡа төбөн тапап бөткән ең.*
*Көлөп ебәрә ең:*
*– А , шаянҡай,*
*Тик белеп ҡуй: бүтән отолмам,*
*Бынан кире тапанмайым бында,*

*Эҙләп китәм үҙем артыңдан.*
*Ирешәбеҙ шулай, көлөшәбеҙ,*
*Ҡаршылайбыҙ яҙғы иртәне.*
*— Бар инде ҡайт, ана, әней торҙо!*
*— Бөгөн кискә мине көт, йәме!..*

***

*Киске эңер төшә башлау менән*
*Йәнләнәләр ҡапҡа төптәре,*
*Кемдәргәлер килә көтмәгәне,*
*Кемдәргәлер килә көткәне.*
*Олораҡтар ғәмле гәп ҡоралыр,*
*Йәш йөрәктәр үҙ еҙ аңлаша,*
*Ҡапҡа төптәрендә тормош ҡайнай,*
*Тормош ҡайнап тора таңғаса.*
*Түбән оста магнитофон уйнай,*
*Юғарыла гармун тауышы.*
*Эх, өҙҙөрә! Егет-елән булыр,*
*Моңға алған йөрәк ағышын:*
*«...Ғәйебе юҡ, өйөү уңламаған,*
*Ул бит күрәсәкте уҙа алмаған,*
*Үтенәмен, яҙмыш, ҡабаланма,*
*Яҙғаныңды кире тартып алма...»*
*Диҡҡәтләнеп тыңланым был йырҙы,*
*оҡланып йәш, моңло тауышҡа.*
*Кем уйлаған, ағышлы был юлдар*
*Ҡағылыр тип беҙҙең яҙмышҡа...*
*... Йә, ни хәлдә, йоҡоң туйҙырҙыңмы?*
*Көткәнебеҙ килде беҙгә лә.*
*Күҙләп торам еҙҙе, тигән ымаҡ,*
*Ай үрләне күрше түбәгә.*
*— Уҡы әле, — ти ең, — берәр шиғыр.*
*— Ҡотло бул ын, индә үҙгәреш,*
*Физигыбыҙ әллә лирикаға*
*Ғашиҡ булған инде? Харап эш...*
*— Көлә йәнә... инең шиғыр «енең»*
*Керә инде хәҙер төшөмә.*
*Уның менән бәхәс ҡороп бер көн,*
*уңға ҡала яҙҙым эшемә.*
*...Көләм. Күктә, ҡеүәтләгән кеүек,*
*Күҙ ҡыҫалар шаян йондоҙҙар.*
*Йәшлек бит ул — яҙылмаған шиғыр,*
*Ул шиғырҙа ин дә, мин дә бар.*
*Ил амланып ила и кис менән*
*(Ҡапҡа төбө ҡала бер мәлгә),*
*Ай күр әткән уҡмаҡ буйлап ҡына*
*Йүнәләбеҙ йәшел үҙәнгә.*
*Ҡаршы ала беҙҙе йәш ҡайындар,*
*Суҡ шәлдәрен алып иңенә.*
*Етәкләшеп килеп керәбеҙ беҙ*
*Асылмаған шиғыр иленә.*

*Йәнебеҙгә яғылырҙай булып,*
*Дымландырып керпек остарын,*
*Юҡ, аҡ томан түгел, хыял тулы*
*Серле донъя аса ҡосағын...*
*Ай ыу аған, ана: күлгә төшөп,*
*Ҡырын ятыбыраҡ ыу эсә,*
*Ә тулҡындар, супылдата биреп,*
*Тал ҡыҙҙары менән үбешә.*
*Яҡты донъям, бары индә генә*
*Үҙ-үҙемде таба аламын.*
*Ана шуның ҡәҙерен белгән өсөн,*
*Бер самими булып ҡаламын.*
*Шуға микән, тамам әсир итте*
*Мөхәббәттең сихри дауылы.*
*Наҙлы ирендәрең яулап алды,*
*Ялмап алды кеүек йәнемде.*
*Баш әйләнде, әллә инде ҡапыл*
*Ер ҙә микән Күккә тартылды?*
*Ә йөрәгем күкрәк ситлегенән*
*Сыға яҙып шундай талпынды...*
*Мөхәббәттең тылсым көсө менән*
*Үҙгәргәндәй, ниҙер үҙгәрҙе,*
*Йондоҙҙармы яҡыная төштө,*
*Нур ибеүсе инең күҙҙәрме?*
*Көткәнемде шунда ишеттем мин,*
*Ул үҙҙәргә юҡтыр, юҡ тиңдәр:*
*— Мин яратам ине, Ғәлиә! — тип*
*Бышылданы утлы ирендәр.*
*— Ишеттегеҙ микән? Ул ярата!*
*( өрәнләнем, килде бүлешкем.)*
*Үҙән! индә иң-иң ҡиммәтле е,*
*Хистәремдең иң-иң зиннәтле е —*
*Ғишҡи халәт, тәүге үбешеү...*

***

*Төнгө йы ан йондоҙ балҡышында —*
*Күҙ иңләмәҫ сик еҙ бер донъя.*
*Ҡитғаларҙы, ҡалаларҙы бәйләп,*
*Шул донъянан күпме юл уҙа.*
*Авиа юлдан юллар хәбәрем юҡ,*
*Йөрәк серен илтер юл башҡа —*
*Аҙаштырмаҫ кейек ҡаҙ юлынан*
*Сәләм китә инең тарафҡа:*
*— Өндәш миңә, өҙөлөп ағынғанда,*
*Ара алыҫ тимә — тойормон.*
*инең наҙлы, йылы хистәреңдән*
*Сәскә ата инде хыялым.*
*Өндәш миңә, йәнең үртәлгәндә,*
*Тоймаҫ тимә — барыбер тойормон.*
*Борсолоуың кил ә елдәр менән,*
*Ел ҡапҡамды асып ҡуйырмын.*

*Өндәш миңә, бары өндәш кенә,*
*Барлығыңды тойоп инанайым.*
*Күрешә е көнөм яҡындыр, тип*
*Бөгөнгө ө менән йыуанайым.*

***

*Ҡапҡа төбө! Үпкәләмәсәле,*
*Онотто, тип, мине ғашиҡтар.*
*Юл башында әр бер яҙмыштың бит*
*Рухландырыр ҡапҡа төбө бар.*
*Күрмәйсә лә торам: күршегә лә*
*«Ҡунаҡланы» килеп ике пар.*
*Билла и,тим, ҡапҡа төптәренең*
*Ниндәйҙер бер тартыу көсө бар.*
*Бөйөк Ҡөҙрәт ғаләм үҙәгенә*
*Килтергәнме тәңгәл уларҙы?*
*Киҫешәме ҡапҡа төптәрендә*
*Параллель әм меридианы?*
*Эш ниҙәлер, әммә тартыу көсө*
*өҙөмтәле, мәгәр уңышлы,*
*Таныштыра, аҙаҡ табыштыра,*
*Мөхәббәтле итә тормошто.*
*Яңғыҙ айҙы күҙләп, бер яңғыҙым*
*Ултырамын ҡапҡа төбөндә.*
*Нисәнсе кис күҙ талдырып көтәм —*
*Ҡайтмаған ың, тимәк, бөгөн дә.*
*Аҙна айын ҡайтып йөрөй, имеш,*
*Ҡапҡа төбөн беҙҙең аҡлай,имеш...*
*үҙ ҡуйышҡан көнгә ҡайтманың,*
*Өмөтөмдө, егет, тапаның...*
*Көйләй еңме икән үҙ көйөң?*
*Алҡымымда әсе бер төйөн...*

***

*Үтеп бара йәйҙәр, туп ала — көҙ.*
*Көҙҙөң йөҙө ары алтындан,*
*Хистәр генә аман... әле йәшел,*
*Бөрөләрҙә ҡалған яҙ ымаҡ.*
*Эйе,эйе, мин яҙҙарҙа аман,*
*Ел ағышын тоймай сабырлыҡ,*
*Йәнең өҙөлә яҙып ағыныр өсөн*
*Кәрәктер ул, бәлки, яңғыҙлыҡ?*

***

*Әҙерлек еҙ индем ул ҡыштарға,*
*Әҙерлек еҙ... Күңелем күшекте,*
*Елдәр ике ауыл ара ында*
*Йән өшөткөс хәбәр йөрөттө.*
*өйләнеләр, Хәлил өйләнә, ти,*
*Күп ҡалмаған икән туйға ла.*
*...Киңлектәрҙе айҡар хыял атым*
*Башын эйеп ҡайтты ҡураға.*
*Ел-гәйбәтсе яҙалауын белде,*

*Килеп ҡағып урам ҡапҡа ын.*
*Урамдарға йүгереп сығыр булдым,*
*индер, индер, тиеп, ҡайтҡан ың.*
*Яндым, киптем, сират күперен үттем,*
*Ғазап уттарында йән көйҙө.*
*Ул иңрәгән айын, буран, яр ып,*
*Ҡапҡа төптәренә ҡар өйҙө...*
*Мин ыҙландым, буран олоно,*
*Геүләп торҙо ауыл урамы.*

***

*Тергеҙәйем, тиеп, усағымды,*
*Ҡуҙҙарына улыш өрәмен.*
*Ялҡын теле бейеп йәнләндер ен*
*алҡынлығын ғәм еҙ төндәрҙең.*
*Мейес, бесәй әм мин – беҙ өсәүбеҙ,*
*Үҙ өйөбөҙ шунда, көйөбөҙ.*
*ыйыныштан булып, йылынышып*
*Үтеп тора бирмеш көнөбөҙ.*
*...Ел ҡапҡаны асып кемдер инде,*
*алмаҡ баҫып, ҡаты аҙымлы...*
*Ҡот өҫтәгән кеүек алҡын өйгә,*
*үнеп барған усаҡ ҡабынды.*
*Күшеккәнде усаҡ яҡынайтыр...*
*ыйынайым яңы өмөткә.*
*Яҙмыш тигәндәре минең генә*
*Ҡаныҡмағандыр бит елеккә.*
*Хәлил булма а ни...Бүтәндәр уң*
*өйөү әләтенән мәхрүмме?*
*Яңғыҙ сарсап наҙҙар эҙләгәндә,*
*Булыр ың, тим, Раббым, рәхимле.*
*Ихлас кеүек, ана, ҡарашы ла,*
*Уйнамайҙыр, күңеле уйлайҙыр.*
*...А , тәҡдирем, яҙғаны шул, тиеп*
*Йәшәп кенә – йәшнәп булмайҙыр.*
*Абынмаҫ ың, хәҡиҡәттән ҡасып,*
*Хыялыңа ғына ыйын да!..*
*Өлөшөмә төшкән баҡыр булған,*
*Ә көмөшөм яттар ҡуйынында.*
*Хистәремде шулай ерләнем мин,*
*Хәҡиҡәтте... Белдем уңынан!*
*Эй, яҙмышым! Минең өйөүемде*
*Ник йөрөттөң яңылыш юлынан?!*
*Ят мөхиттең моң оҙ көйөн көйләп,*
*Мин барыбер түҙә алманым.*
*– Ирегемде быуған ҡоршау ин! – тип*
*Атып бәрҙем никах балдағын.*
*...Төнөм менән көнөм буталғанда,*
*Ҡайын арҙан иҫте таң еле.*
*ағышымдан япраҡ кеүек улып,*

*Сирәмеңдә аунап илар булып,*
*Тыуған ергә ҡайттым мин кире...*

***

*Кире ҡайтмай ваҡыт, кире ҡайтмай,*
*Кире ҡайтмай үткән көндәргә.*
*Аҡ ҡайындар, шыбыр-шыбыр килеп,*
*Сер янсығын сисә елдәргә.*
*Елпенешеп улар ҡаршы килә:*
*– Хәлил ҡайтҡан, Хәлил ауылда!*
*Ишеттем мин, уны йыш күрәләр*
*Ҡайын арлы күлдәр янында.*
*Әйткәйнеләр уны теге ваҡыт,*
*Өйләнә, тип, эйе, хаҡ булған.*
*Тик кәләше сит-яттарҙан түгел,*
*Мин – Ғәлиә тигән зат булған.*
*Имеш, алдан әйтә алмаған,*
*Тормош ҡорор фатир юллаған,*
*Төҙөлөштә үҙең ҡатнашып,*
*Асҡыс алыу – үҙе ҙур шатлыҡ!..*
*...Ваз кисмәгән, тимәк, хисенән –*
*Сығармаған аман иҫенән –*
*Шиғыр илен – йәшел үҙәнде,*
*Йәш аралаш көлгән күҙҙәрҙе...*

***

*«...Йөрәк, гүйә, тотош яра,*
*Табылырлыҡ түгел дауа,*
*улҡылдап әр тибешенән,*
*Йәшәү дәрте үнә бара.*
*Хушлашырға ваҡыт, тиеп*
*Әйтә алмайым күҙгә ҡарап.*
*Бәхетле бул, инде күңел*
*Көтмәй инән башҡа яуап».*
*...Был хушлашыу хатым ине иңә,*
*Әрнеп сыҡҡан күңел ауазы,*
*Ҡайындарға ырылып тороп ҡалды,*
*Күк ҡатына етә алманы.*

***

*Пар-пар булып ыйынышып баҫҡан*
*оҡланырлыҡ ҡайын-тиңдәргә.*
*Бер йәнемдең мең ғазаплы мәле –*
*Таянайым икән кемдәргә...*
*Шиғри донъям – аҡ ҡайынлы ҡәғбәм,*
*Күңелемдә төйөр, ғәм, үпкә.*
*инән инген ила илыҡ, күрсе,*
*Бәғзеләрҙе нисек тилмертә.*
*Хыялдарҙан азат итеп күңелем,*
*Төшөр әңсе күктең ҡатынан.*
*Мин ай ҡыҙы түгел, ә ерҙеке.*
*әм башҡаса күккә тартылмам.*

***

*Август төнө. Йондоҙ атылғанда*
*Беҙ ҙә булдыҡ бәхет юрарға.*
*Эштәр бөткәс, әней менән бергә*
*Етәкләшеп сыҡтыҡ урамға.*
*Ҡапҡа төбө айын йәш-елкенсәк,*
*Кемдер йырлай, кемдер тиргәнә.*
*Күрше эте олой айға ҡарап,*
*Маташамы зарын өйләргә.*
*Ҡайтмай ҡалған арыҡ көйшәп ята,*
*Кибет ишегенә терәлеп,*
*Ейәнсәрен эҙләп Мансаф бабай*
*Ана нисек йөрөй елләнеп...*
*Көлөм өрәп ҡуйҙы, хәтерләпме*
*Әней беҙҙең үҫмер саҡтарҙы:*
*— уңлап ҡайтыр бул а, ағайың, — ти,—*
*Майлап ҡуя ине ҡапҡаны.*
*Ә ин инде... Гелән уяу булдыҡ,*
*Күҙ өҫтөндә ҡаш ың...Ҡыҙ бала...*
*Хәлиләңде үҙ ит әк тә — атаң*
*Күҙ яҙҙырмаҫ ине аҙға ла.*
*Кисен сыҡ аң, орап ҡына торҙо:*
*— Ҡайҙа йөрөй, бар, — тип, — ҡарап кер.*
*Күҙ ала ла тыныслана инем:*
*Ҡапҡа төбөндәләр, мең шөкөр!*
*...Тартып алыр булам йондоҙҙарҙы,*
*Ник кенә лә бере е атыл ын,*
*Күңелемдә йөрөгән хыялыма*
*Ник кенә лә бере е тап бул ын.*
*Минең йондоҙ күптән атылғандыр,*
*Йоҡо оҙ төн барыбер йөҙәтә,*
*Ҡапҡа төптәренә алып сығып,*
*Үткәндәрҙән абаҡ өйрәтә.*
*Баштан ыйпап әней теләк теләй,*
*Күктән яуа йондоҙ ямғыры.*
*Күрше эте генә аман олой,*
*Хәйерлегә бул ын ахыры...*
*Сеү! Кем килә? Беҙгә табан, буғай,*
*Таныш аҙым, әллә ул инде?*
*— Хәлил? инме?*
*— Мин, Ғәлиә, мин был...*
*Бер күрәйем тинем үҙеңде.*
*Хәл-әхүәлдәр орашҡас та, әней*
*Кереү яғын тиҙерәк ҡайыра.*
*Ә беҙ тыйнаҡ ҡына гәп атабыҙ,*
*үҙ ялғана үҙгә яй ғына.*
*— Ҡыҙың тыуған икән...*
*— Ишеттеңме?*
*— Ишеттем...Тик, Хәлил, төнө менән*
*Был тарафта нишләп йөрөүең?*

*— ине күргем килде. Асыуланма,*
*уңғы ылыр, бәлки, килеүем.*
*— Килешмәҫ бит, кеше нимә тиер,*
*Ғәйбәт хаҡы әр саҡ түләүле.*
*— Етер инде, кеше үҙен тыңлап,*
*Янған утҡа алдың берәүҙе...*
*Ни әйтә алам, эйе, ғәйеп миндә,*
*Яза ы ла төштө үҙемә.*
*Тик уң инде, нимә эшләй алам,*
*Бәхет ҡошом ятта тилмерә...*
*... Ә үҙәндә аман сәскә еҫе,*
*Йүгереп килеп йәнгә яғыла.*
*Иңдәреңдән ташлап донъя йөгөн,*
*Их, икәүләп шунда ҡалырға.*
*Ул беҙҙеке, күңел береккән ер —*
*Иркен улыш алып ҡуямын,*
*Гүзәллектең төҫө миңә таныш,*
*Саф асылын бында тоямын.*
*Күҙҙәреңдә инең сихри балҡыш:*
*Күк ҡабағы әллә асылды?*
*Тыйылғы ыҙ наҙың сорнап алып,*
*Әйләндерҙе, буғай, башымды...*
*Ер сайҡалды төҫлө, күк ауышты,*
*А , зи енем тамам яңылышты,*
*Елпенде лә*
*Төн ҡанатын йәйҙе,*
*Ике йән әм тынлыҡ ҡауышты...*
*— Ғәлиә, ин тик минеке генә,*
*Йәшәй алмам ин еҙ мин башҡа!*
*Күңел ярҙарына ыйыша алмай,*
*Тулҡын-тулҡын булып наҙ таша.*
*Битем ҡуям йылы устарына,*
*Ирендәрем менән ҡағылам,*
*Әйтер ең дә, минең күрәсәгем*
*Устарына уның яҙылған.*
*Табындарҙа бары ым ындырып,*
*Татылмаған ризыҡ затлылыр.*
*Ҡуйынынан сыҡҡан исем-атым*
*Мөйөш айын, бәлки, атылыр.*
*— Матурым, тим, ниндәй уйға баттың,*
*Риза ыңмы минең тәкдимгә?*
*— Ниндәй тәкдим?*
*— Алып китәм ине,*
*Йә, риза бул, зин ар, Ғәлиә!*
*Шөб әләнмә, йәшәр торлаҡ булыр,*
*Мин түрә бит әле, онотма.*
*Ҡайтҡаныңды инең көтөп алдым,*
*орауҙарҙан туйҙым. Ҡуй нөктә!*
*ағыныуға сара табып булмай,*
*Башҡа ына, былай, түҙелә.*

*Нисә йылдар инде табандарым*
*Тарта еҙҙең ҡапҡа төбөнә.*
*– Ым ындырма, Хәлил, ҡуй, кәрәкмәй,*
*Кеше өлөшөнә кем керә?*
*Хыялыбыҙ-толпар күптән инде,*
*Башын сайҡап, ары елдерә.*
*– Сеү! Кәрәкмәй! инең, минең яҙмыш –*
*Китап итеп яҙыр бер ҡисса.*
*«Хәлил, Ғәлиәгә – мөхәббәт!» тип*
*Күктән төшкәйне лә фатиха.*
*– өйөү биргәс, нишләп ҡауыштырып*
*Ҡуймаған уң яҙмыш?Ни сәбәп?*
*... Ай бойоғоп ҡына тыңлай беҙҙе...*
*ауаларҙан ишелә сәғәҙәт...*

***

*Көндәрҙән көндәргә моң тама,*
*Күңелдә баҙлайҙыр өмөт-ут.*
*Тик унан нисек ваз кисергә,*
*Нисек уң әйтергә: юҡ, онот...*
*өйөүҙе – йәшәүем шишмә ен*
*Йә, Хоҙай, ҡалайтып юяйым.*
*Кемдеңдер емереп бәхетен,*
*Нисек уң бәхетле булайым?*
*ыҙланыу бәғергә төш ә лә,*
*Түҙем бар – аман да көтә ең.*
*Түҙерлек тәҡәте ҡалмаған*
*Хыялый Мәжнүнем нишләр уң?*
*– Нисек унда, мин еҙ донъяла?*
*Өшөйҙөр ҙә йәнең, эй Алла.*
*Яҡтырт ам да, йылым еталмай,*
*Тыйыу сиге аша үталмай.*
*Яңғыҙаҡҡа донъя битараф,*
*Ник ыҡтамай икән әр тараф.*
*өйөү гона булып танылған,*
*Таныусылар әр саҡ табылған.*
*Шул ҡәҙерле гона хаҡына*
*Ҡул елтәргәме ни бары ына?*
*Был йәшәйеш тигән вокзалда*
*Поезд көтәм, әммә ҡайҙарға?..*

***

*Ғүмеремдә онота ым юҡтыр.*
*иҫкәндерә хатта ул бөгөн.*
*Ул төн йәнгә инеп уйылғандыр,*
*Әле бул а тоям әрнеүен.*
*...Бар донъя – ут, ул ҙурая барып,*
*Ялмап ала ялҡын мине лә.*
*Төшөммө был? Нишләп ауыртыуға*
*Түҙеп булмай, йәнем илерә?*
*Өндәгеләй тәнем бешә, яна,*
*Йөрәк, гүйә, утлы ҡоршауҙа.*
*Тауышым сыҡмай, булмай ҡуҙғалып та,*
*Бар булмышым утлы тышауҙа.*

*Таңда ғына зи ен асылғандай,*
*Ут ипкене барыбер йөрәктә.*
*Йөйө ҡалма а ла, ғүмерем буйы*
*Килеп-килеп сәнсеп йөҙәтә.*
*Аңланым мин: мөхәббәткә ниндәй*
*Ҡөҙрәт биргән Хоҙай Тәғәлә.*
*өйгәнеңдең йән халәтен тойоу –*
*Насиптыр тик ғашиҡ бәндәгә.*
*...Ул әләкәт ошо төндә булып,*
*Ғазаптарың миңә ирешкән.*
*Мөхәббәттең ғүмере оҙон, тиҙәр,*
*Әйтсе, Тәңрем,*
*Ғашиҡ ғүмере ҡыҫҡа нилектән?*
*...Заводыңда кинәт янғын сыҡҡас,*
*ин-етәксе алдан кергән ең.*
*Хистәр уты ғынамы ни янғын!*
*Янған ың шул утта, бөлгән ең...*
*... Тыуған ергә – уңғы юлға ине*
*Мәғрип яғы ҙурлап оҙатҡан.*
*Баш осоңда торған мәрмәр ташты*
*ыйпай- ыйпай рухың уятам:*
*– Бына килдем, ә ин көтмәгән ең,*
*Көтмә әң дә ҡайттым, ағынғас.*
*Бүтән беҙгә осраша ы түгел,*
*Ер аҫтарынан да юл булмаҫ...*
*Инанамын, тәнең ерлән ә лә,*
*Ғашиҡ йәндән ерҙә нур ҡала.*
*Ул – мөхәббәт нуры. Килер көндөң,*
*Ер-әсәнең рухын уғара.*
*Юғалтыуым йәнде айҡа а ла,*
*Тоғро ҡалам рухи ҡиблама:*
*Мөхәббәтте данлар ҡәләмем бит*
*Мөхәббәттән генә көс ала...*

***

*Тәҙ(е)рәмде асам, киске эңер,*
*Именлектә, шөкөр, көн үткән.*
*Сеү! Кем унда сылтыр-сылтыр көлә –*
*Ҡапҡа төбөн беҙҙең үҙ иткән?*
*айрашалар. Ике йөрәк ҡылы*
*Бер нотаға, иҙәм, көйләнгән.*
*Тойоп торам: моңдары,эх, наҙлы,*
*Айырыла башҡа көйҙәрҙән.*
*– Ярата ыңмы уң, йә, әйт инде?*
*– Ә яратыу нисек була ул? –*
*Үткер телле йәнә бер Ғәлиә*
*Егет йөрәгенә ала юл...*
*... әр яҙ айын, донъя йәшәргәндә,*
*Йәнләнәләр ҡапҡа төптәре.*
*Кемдер унда көтә киләсәген,*
*Мин йыуанам – барлап үткәнде...*



**Муса
СИРАЖИ**

## Былбыл әм халыҡ моңо

андуғастар айрауынан
Көнө-төнө тынмайҙар.
айрайҙар ҙа үҙ моңдарын
Үҙҙәре үк тыңлайҙар.

Нисек киң, иркен алын а
Күкрәктәге улыш, тын,
Шулай тәбиғи ярала
андуғастан сыҡҡан моң.

Шуғалыр ҙа бик серлеләр,
Тылсымлылар ул моңдар.
Тик бер моңдо ике тапҡыр
Ҡабатламай былбылдар.

“Сут-сут”тарын йә күтәреп,
Йә уҙып, йә нескәртеп
Йәшәй улар, үҙ көйҙәрен
Бер туктау ыҙ эшкәртеп…

Халыҡ шулай камил иткән
Тыуҙырған моңдарын да.

*Муса Сиражи 1939 йылдың 1 февралендә Туймазы районының Төпкилде ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Башҡортостан Яҙыусылар союзы аппаратында, матбуғатта эшләй. Үрге Йәркәйҙә йәшәй.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 70 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ!*

*Нисек бар шулай йәшәй ул*
*Үҙенең йырҙарында.*

*Милли көйҙө эшкәртеүсе*
*Көйсөләр бел ен шуны:*
*Үҙгәртеүгә мохтажмы ни*
*Былбыл  әм халыҡ моңо?!*

## Ниңә?

*Әҙәм булып тыуыу ғына әле*
*Бирмәй беҙгә кеше исемен.*
*Был есемгә  ыйырға тейешле*
*Бар ғүмере,  йәне кешенең.*

*Тар бишектән төшөп киң донъяға,*
*Уҙған саҡта юлды гүргәсә,*
*Беҙ йәшәргә тейеш кешеләрсә,*
*Беҙ йәшәргә тейеш ирҙәрсә.*

*Тик ҡай саҡта бөтә зи ен менән*
*Яҡшы аңла аҡ та беҙ уны,*
*Кеше исеменә лайыҡ булып*
*Кисәлмәйбеҙ ниңә донъяны?*

*Нилектән  уң берәү саҡ-саҡ ҡына*
*Абын а ла, шундуҡ йығыла?*
*Ник бәғзебеҙ еңел юлды  айлап,*
*Ситтәр ҡояшында йылына?*

*Ниңә икән аҡыл кәрәк саҡта,*
*Алтын булыр саҡта баҡыр беҙ?*
*Күп осраҡта янғын  үнгәс кенә,*
*Яуҙар үткәс кенә батыр беҙ?*

*Саңдар  уғыр саҡта ниңә икән*
*Яңғырамай беҙҙең ҡыңғырау?*
*Күп мәлдә беҙ кеше ҡайғы ына,*
*ыҡрауына хатта  аңғырау?*

*үҙебеҙ бар, ләкин өндәшмәйбеҙ,*
*Күҙебеҙ бар, ләкин күрмәйбеҙ.*
*Түрәне лә үҙе юҡта ғына*
*Эттән эткә  алып тиргәйбеҙ.*

*Тилебәрән ҡапма аҡ та, ник  уң*
*Әйләнәбеҙ тиле бәрәнгә?*
*Беҙ бит бик йыш халыҡ масса ы тик,*
*Нисек әйләнәйек әҙәмгә?*

*Ҡайҙа хаҡлыҡ, ҡайҙа хоҡуҡ беҙҙең?*
*Ҡасанғаса йәшәр был хурлыҡ?*
*Ҡасанғаса йәшәр был ҡурҡаҡлыҡ,*
*Тормош түбәнлеге – был ҡоллоҡ?*

*Хәл итмә әк, был ораућар беҙҙе*
*Ырғытмаҫмы яҙмыш ярына?*
*Кешелеккә кешелек өҫтәмәгәс,*
*Ниңә кәрәк беҙ Ер шарына?*

## Сабый илай

*Геү килеп тора илауҙан*
*Бала тыуҙырыу йорто.*
*Әммә унан арта ғына*
*Был йорттоң йәме-ҡото.*

*Яңы тыуған бала илай…*
*Юҡ, иламай – йырлайҙыр.*
*Был сабый шулай үҙенсә*
*Ерҙә йәшәү даулайҙыр…*

*Сабый илауы – илаумы?*
*Тормошҡа ул талапмы?*
*Үҙен “төргән” меҥ орауға*
*Әйтәлмәгән яуапмы?*

*Мин дә шулай яралдым бит*
*Тәүге шиғырым менән.*
*Мин дә шулай илап тыуҙым*
*Тәүге моң-йырым менән.*

*өйөү йәнде тетрәндергәс,*
*Ергә мин ҡабат тыуҙым:*
*Яратыу үҙен әйткәндә,*
*Донъяға яратылдым.*

*… Сабый илай. Әсәгә ул –*
*Киләсәге әҙәмдең.*
*Ә ғаләмгә – бер дауамы,*
*Ышанысы ғаләмдең.*

## Йырыма

*Ҡояш, ғаләм түшәгенән*
*Көн дә тороп иртән иртүк,*
*Төн йәштәрен – ысыктарҙы*
*Үләндәрҙән ала өртөп.*

*Кешеләрҙең күҙ йәштәре*
*Хәсрәттән сыҡ а эркеп,*
*Киптер, йырым, ҡояш кеүек,*
*Күңелдәргә якты бөркөп!*

## Ҡурай

*Көтөүсе ҡарт ялан яңғыратып*
*Уйнап ебәргәйне “Урал”ды,*
*Ҡарағайҙар ҡапыл тынып ҡалды,*
*Япраҡтарға моңдар уралды.*

*Ҡурай моңо шундуҡ шып туҡтатты*
*aҡмарымдың ылыу боланын…*
*Уны тыңлап, тылсымланып, буғай,*
*Уйға сумды ер- ыу, урманым.*

*Был өндәргә тыуған тупраҡ еҫе,*
*Йәйғор төҫө, гүйә, ҡушылған.*
*Ағиҙел дә, хатта Уралтау ҙа*
*Яралғандар ымаҡ шул моңдан…*

*ыҡта а ла, ыҡран а ла ҡурай,*
*Гел үҙ иткән ҡояш нурҙарын.*
*Шул тиклем дә ихлас ҡауышыр икән*
*Тәбиғәт әм кеше моңдары!*

## Ауылдаштар – тамырҙаштар

*Ер улышын, ер йылы ын йәнә*
*Алырға тип ҡайттым, ауылым.*
*Мин бит инән башҡа бер ерҙә лә*
*Тамыр йәйәлмәгән тамырың.*

*ин дә – тере тамыр. Ҡайҙа бар ам,*
*уҙыла ың шунса саҡырым.*
*Йырҙа тыным бөт ә, юлдар йәйеп*
*Ҡайтара ың мине саҡырып.*

*Улай ти әм, ин дә йөрәгемә*
*Ебәргән ең, буғай, тамыр ныҡ:*
*Ҡалаға йыш килеп сыға ың бит,*
*Иңдәреңә төш ә ауырлыҡ…*

*Кил ин, әйҙә, болоттарың менән,*
*Ҡояштарың менән, ауылдаш.*
*Ауыл менән шағир мәңге бергә –*
*Мәңге ерҙәш, мәңге тамырҙаш.*

## Зәңгәр төҫтө күр әм

*Әллә нисек, зәңгәр төҫтө күр әм,*
*Үлеп китәм.*
*Кискә кер әм,*
*Зәңгәр иртәләрҙе көтәм.*
*Иртә менән*
*зәңгәр сәскәләрҙе*
*өйөп- ыйпап үтәм.*
*Сал диңгеҙгә кил әм,*
*зәңгәр киңлектәрҙе*
*Ҡом оҙланып йотам.*
*Зәңгәр ялҡындарҙы күр әм,*
*Ҡараштарым менән*
*Ҡайырып алам уттан.*
*Зәңгәр ауаларҙы*
*улыштарым менән*
*Тартып алам күктән.*
*Мин эҙләйем күптән*
*әр нәмәнән*
*“Зәңгәр”ҙәрҙе шулай.*

*Эҙләй-эҙләй*
*ҡара күҙҙәрем дә*
*Зәңгәрләнде, буғай…*
*… Зәңгәр ине уның күҙҙәре лә.*
*(Зәңгәр менән яҙҙым*
*ошо үҙҙәрҙе лә.)*

## Йәшәү – яныу

*Мин, быҫҡымаҫ өсөн, йөрәгемдең*
*Гел ҡуҙғатып торҙом ҡуҙҙарын.*
*Бынан уң да ғүмер яландарын*
*Быҫҡып ҡына атлап уҙмамын.*

*Йәндә – хаҡлыҡ, ерҙә – йәшәү йәмен*
*Йәшәтергә тиеп йәшәнем.*
*Халҡым менән бергә улыш алдым,*
*Бергә яндым, бергә йәшнәнем.*

*Был донъянан бер саҡ мин китермен*
*Йөрәгемде тамам яндырып,*
*Киткәндә лә быҫҡып янғандарға*
*Дөрләп яныуымды ҡалдырып!..*

## Тел асҡысы

*Ярулла ҡарт яуҙан яраланып*
*Тел еҙ ҡайтты тыуған еренә.*
*Тел асҡысы эҙләп, табиптарҙың*
*Күренмәне икән кеменә!*

*Бер дауа ла ләкин килешмәне,*
*Өмөт эҙләү китте оҙаҡҡа.*
*Тел асҡысы барыбер табылманы,*
*Тел сыҡманы биктән-йоҙаҡтан.*

*Ә бер көн ул ҡулына гармун алды,*
*Әй, өҙҙөрҙө моңло көйҙәрҙе!*
*Уйнай торғас, ҡапыл – о, мөғжизә! –*
*Ул үҙе лә йырлап ебәрҙе.*

*Гүйә, шул саҡ тыйылып торған вулкан,*
*Быуылып торған шишмә урғылды.*
*Кинәт кенә, кеше көтмәгәндә*
*Бәхет тауҙарына ырғылды.*

*Ул донъяға ҡабат тыуҙы ымаҡ*
*Был ила и, изге минутта,*
*Ҡояш сыкты кеүек яҡтылыкты*
*Ҡаплап торған ҡара болоттан…*

*Тан ыҡ моңдо тыңлап тынып ҡалды*
*Сатый тауы, Нөгөш талдары.*
*Бәләләрҙән ҡотҡарыусы йырҙы*
*Бар тәбиғәт үҙе тыңланы…*

## Өсән ҡыҙына

*Иҫеңдәме инең, иҫеңдәме*
*Өсән буйындағы уҡмаҡтар?*
*Иҫеңдәме ошо уҡмаҡтарҙа*
*Икәүләшеп яҡҡан усаҡтар?*

*Өсән буйындағы ул усаҡтар*
*Йәндә яна аман кистәрен.*
*Ҡосаҡ-ҡосаҡ өйөү усаҡтары –*
*Яҡтылығы беҙҙең хистәрҙең!*



**Камил**
**ФАЗЛЫЙ**

## *Мәктәп*

*Миңә ҡал а, оло мәктәп*
*Икән беҙҙең Ер шарыбыҙ.*
*Мәктәп эсләп йүгереүсе*
*Уҡыусылар беҙ барыбыҙ.*

*Илдәр бында бала кеүек:*
*Бар ҙурҙары, кеселәре,*
*Америка шикелле е,*
*Гватемала ишеләре.*

*Ҙур илдәр – ҙур кәүҙәлеләр,*
*Былар – өлкән уҡыусылар,*
*Мәктәп эсен дер елкетеп*
*Ҡулдарында тотоусылар.*

*Көс барҙа аҡыл кәрәкмәй,*
*әр нәмәне көс хәл итә.*
*Өлкән синыф алдан үтә*
*Ашханаға, этә-төртә.*

*Йомшаҡ, яйлы урын уға,*
*– Кит бынан!– тип әйтеп ҡара!*
*Илдәр ҙә тап мәктәптәге*
*Бала-сағa булып бара.*

---

*Камил Фазлый 1949 йылдың 15 февралендә Бәләбәй районының Тоҙлоҡуш ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Яҙыусылар союзы ағза ы. Мәктәптә уҡыта.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

*Көсө еткәс, Америка,*
*Күр, Ираќты уғып йық́ты.*
*Боснияны утка тоттто,*
*Ә Вьетнамды күпме ытты!*

*имереп еткән Израиль*
*Кейгән кейеменә ыймай –*
*Күрше е Палестинаны*
*Яға ынан алып ќыйнай.*

*Эстония, Грузия ы,*
*Буйы етмәй, йоҙроќ төйнәй.*
*Тыныс йәшәп булмаймы ни,*
*Бер-береңдең башын төймәй?!*

*Эх, ошо тәртип еҙҙәрҙе*
*Килтерергә ипкә, тимен.*
*Баҫтырыр инем мөйөшкә,*
*Директоры бул ам Ерҙең!*

## Үҙебеҙҙекеләр

*Беҙҙең хоккей команда ы*
*Американдарҙы еңде.*
*Көйәрмәндәргә – тамаша,*
*Иллә ќыҙыќ булды инде.*

*Ќунаќтарҙың файҙа ына*
*Асыл а ла тәүҙә ќапка,*
*Голкипер Макнамарабыҙ*
*Ќаршы торҙо ырлап аќта.*

*Американдар ќыҙҙылар:*
*Сэр Үтәбай, мистер Зәки,*
*Гол артынан гол индереп,*
*Ыҙаланылар бит тәки.*

*Командабыҙ егеттәре*
*Патрик, Джеффер яуап бирҙе:*
*Яға ынан йолќоп алып,*
*Американдарҙы борҙо.*

*Аяғын уғып ындырҙы*
*Сэр Үтәбай тигәненең.*
*Күҙ төбөнә фингал ќуйҙы*
*Башќа фәлән-төгәненең.*

*Судья ы ла ауыҙ япты,*
*Сәкән төшкәс елкә енә.*
*Американдар үрелде:*
*Уйнай саќ-саќ, ауа-түнә.*

*Бишкә ете менән еңдек*
*Сит континент ҡунаҡтарын.*
*Көйәрмәндәр алҡышынан*
*Тоноп бөттө ҡолаҡтарым.*

*Аҙаҡ, уйын тамамланғас,*
*Ҡул ҡыҫышты хоккейсылар.*
*Ял ит ендәр инде хәҙер,*
*Илдәренә ҡайтып былар:*

*Сэр Үтәбай, мистер Зәки,*
*Голкипер Ғәбделбаҡый.*
*Флагтары буйлы-буйлы,*
*Унда илле йондоҙ балҡый.*

*Үҙебеҙҙең егеттәргә*
*Почет хәтәр, ана, ҡара:*
*Устан-уска осоп бара*
*Патрик, Джеффер, Макнамара…*

## **“Собес”та**

*Мин дә тик ятманым –*
*Көс түктем йөрәктән.*
*Юлландым “собес”ҡа*
*Пенсия кәрәктән.*

*Документ-фәләндең*
*Бөтә ен килтерҙем.*
*Уларын юллап та*
*Табанды бөтөрҙөм.*

*Яҙыуҙы аҡтарғас,*
*Хеҙмәткәр үҙ ҡатты:*
*– Яҙыуҙа ин түгел! –*
*Тип миңә күҙ атты.*
*– “Факил”мы? “Факиль”ме?*
*Яҙыуҙар төрлөсә.*
*Документ тап килмәй –*
*Исемең бер нисә!*

*Шуны ла иҫләмә,*
*Балалар уҡытып.*
*Пенсия тәтемәй,*
*Әйтмәйем ҡурҡытып.*

*… Асылын аңланым*
*Шикелле был эштең:*
*Мин ҡабат бер ғүмер*
*Эшләргә тейешмен.*

Хоҙайға ғариза
Яҙырға иҫәбем:
Бирелгән ғүмерҙең
Арттыр ын иҫәбен.

Эшләгән йылдарҙы
Сүплеккә аттым мин.
Тап сирек быуатҡа
Йәшәреп ҡайттым мин.

## Рецепт

Шаҡ ҡаттылар Гөлбәҙәргә:
Вәт үҙгәргән Гөлбәҙәр!
Нисек ябыҡты икән ул
Зифа гөлдәй был ҡәҙәр?

 орау яуа ҡатын-ҡыҙҙан:
– Мискә инең килбәт еҙ,
Ҡай ы дарыуҙар килеште?
Ҡулландыңмы иҫәп еҙ?
– Я аныңмы гимнастика?
– Кишер ыуы эстеңме?
– Эҫе мунса килештеме?
– ыу инергә төштөңмө?
– Әйт рецебыңды!– тип ҡыҙға
Ультиматум ҡуйҙылар.
– Яратҡан эшемдән остом –
Ашхананан ҡыуҙылар…

## Көтмәгән

Бәпес табыу – үтемле эш
Хөкүмәт аҡса ына.
Урынлаштырыуы ауыр
Балалар баҡса ына.

Сөнки хәҙер, көнләп, айлап,
Баҡсаға сират арта.
Бөгөн, хатта, ыңар баҡса
Ун баҡса йөгөн тарта.

Әйтәләр ата-әсәгә:
– Сабыр ит әгеҙ ине.
Сират беҙҙә ыу буйылай,
Түҙеп көт әгеҙ ине.

Нисә йылдар көтә торғас,
Саҡырыу килгән көткән.
… Сабыйҙар ғына көтмәгән –
Мәктәптә уҡый күптән…



**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

## *Шул уҡ атай йорто…*

Әсәйем Зәкиә Сәйфелмөлөк ҡыҙы
Вәлитованың яҡты рухына

*… Шул уҡ атай йорто, ишек алды,*
*Тәҙрәләрҙә шул уҡ яҡтылыҡ.*
*Тик мөрйәнән сыҡкан зәңгәр төтөн*
*Күңелемә бирмәй йылылыҡ.*

*Йорт-ҡуралар етем ерәп ҡарай,*
*Кем икән был, тигән шикелле.*
*Тынлыҡ шаршау беҙҙең арабыҙҙа,*
*Таралыуы уның икеле.*

*Әсәйемдең изге рухын аҡлай*
*Ошо тынлыҡ, ошо етемлек…*
*уңғы юлға әсәй мин еҙ киткән,*
*ағыштарҙан сәсрәп китерлек!*

*Ғазаптарын, ҡайғы- ағыштарын*
*алманы ул донъя ыртына.*
*Балаларын кеше иткәс кенә*
*Китеп барҙы уңғы йортона.*

---

*Зөфәр Вәлит 1949 йылдың 1 февралендә Стәрлетамаҡ ҡала ында тыуған. Бала сағы, йәшлек йылдары Күгәрсен районының Күгәрсен ауылында үтә. Өфөлә урман хужалығы техникумын тамамлай. Бер нисә китап авторы. Яҙыусылар союзы ағза ы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

*Бергә саҡта әсәм фатиха ын*
*Берҙе түгел, күберәк алғанмын.*
*Унын ғүмеренең дауамы мин,*
*Ана шуға тороп ҡалғанмын.*

*Киткән саҡта изге йортобоҙҙан*
*Шул уҡ тынлыҡ мине ялманы…*
*Хушлашыуҙы көткән туп абыҙға*
*“Хуш бул”! тиеп әйтә алманым.*

2007 йыл.

## Аңламайым

…Аңлай ыңмы, беҙҙең ғүмерҙәрҙең
Етте рәхәт сағы?..

***(Хәниә Фәрхи йырынан)***

*Хыялдарым менән көн буйына*
*Меңәрләгән саҡрым юл үтәм.*
*Асыҡ күңелдәргә рәхмәт уҡып,*
*Йомоҡтарҙан йүнле үҙ көтәм.*

*Рәхәт саҡты эҙләп, төндәрен дә*
*Төштәремдә осам аташып.*
*Ә ул мине аман таба алмай,*
*Йөрөй микән ерҙә аҙашып?..*

*Өнөбөҙҙә алыҫ йөрөп булмай,*
*Кеҫәләрҙә уйнай ел генә,*
*Бер ҡалала йәшәп, дуҫтарҙың да*
*Белеп булмай хәлен гел генә.*

*Ярай әле, ҡулда телефон бар,*
*Уны ы ла тормай гел эшләп.*
*Пенсиәне көтөп, хыялланып*
*Ултырыла өйҙә тел тешләп.*

*Аңламайым, беҙҙең ғүмерҙәрҙең*
*Булыр микән рәхәт саҡтары?!*
*“Теге донъя”ларҙа “рәхәт саҡ”тың*
*Күпме тора икән хаҡтары?..*

## Элегия

Был кешелек ҡайҙа бара уң ул?..

I

*Ҡайҙа ла шул донъя малы туплау,*
*Алдау, урлау, кеше үлтереү.*
*Ҡайҙа инде намыҫыңды ҙурлап,*
*Үҙ-үҙеңә иман килтереү!*

*Уйҙар – атлыҡ, тормош – бәллүр сәхнә,*
*Кәсеп кенә унда бейеү ҙә.*
*Мөхәббәтте кемдер клонлаштыра,*
*Ҡол буласаҡ, тимәк, өйөү ҙә…*

*Яҙмыш – ынау, ҡырҡ ямауын ала,*
*Юҡ бәхетте ҡайҙан таба ың?*
*Йән аҫырау өсөн (байыу ҡайҙа!)*
*Таңдан кискә саҡлым саба ың…*

*Был кешелек ҡайҙа бара уң ул,*
*Беләме икән ҡайҙа барғанын?..*
*… Ҡояш ҡына күрер Ер-Әсәнең*
*Аҡылынан нисек яҙғанын…*

II

*Ышанысым, ҡайҙа ҡастың?*
*Юлдарым сатлы-сатлы.*
*Уйҙарымдан арынып булмай*
*ары таңдарға саҡлы.*

*Хәйерселек өй түрендә,*
*Ауыҙын асҡан баҙҙар…*
*Күңел түрендә ҡаңғылдай*
*Ишен юғалтҡан ҡаҙҙар.*

*Улар күрәлер ҡояшҡа*
*Ынтылған яңғыҙ йәнде.*
*Уны күккә осororға*
*Ҡулымдан килмәгәнде.*

*Ниҙер өмөт итеп, күккә*
*Мөлдөрәп ҡарай күҙҙәр…*
*Күңелдә – ҡаҙ ҡаңғылдауы,*
*Кәрәкмәй артыҡ үҙҙәр.*

***

*орамасы минән ярлыҡауҙы,*
*ине миңә яҙҙар килтерҙе.*
*иңә генә булған өйөүемде*
*Яҙҙар түгел, үҙең үлтерҙең.*

*Ҡараштарың бөгөн йән әрнеткес,*
*Ул ҡараштар түгел инеке.*
*Яҙҙарҙың да була боҙо, ҡары,*
*Ләйсәндәре барыбер беҙҙеке.*

*Ҡараштарың менән өтмә йәнде,*
*Мәғәнә еҙ хәҙер ҡаш төйөү,–*
*Ожмах ҡошо булыр саф өйөүгә*
*Кәрәк ине элек баш эйеү.*

*Өй артында муйыл сәскә ата,*
*Күңелемдә ирей боҙло ҡар…*
*Күргән, биргән ғазаптарың өсөн*
*Хоҙай ине үҙе ярлыҡар.*

## Бер йыр яҙ

*Алданған күңелде йыуатып,*
*Тылсымлы ҡәләмең уйнатып,*
*Ғашиҡтар хыялы ишеләй,*
*Балаңдың иң татлы төшөләй*
*Бер йыр яҙ, ғүмерлек йыр бул ын!*

*Донъяны тултырып йырларлыҡ,*
*уңынан ултырып иларлыҡ*
*Бул ын ул, йөрәктән сыҡ ын ул,*
*Кәрәк ә, бәреп тә йыҡ ын ул*
*Донъяны яманлап йөрөгәнде!..*

*Был йырың тылсымлы көс менән*
*Ауылдар, ҡалалар өҫтөнән,*
*Урмандар, далалар өҫтөнән*
*Кешегә генә хас хис менән*
*Ағыл ын мәңгелек йортона…*

## Барам әле…

*Тирәктәрҙә йәшел күбәләктәр,*
*Офоҡтарҙа зәңгәр күперҙәр.*
*Иртәгә ен ошо күперҙәрҙән*
*Йәш йөрәктәр йәшнәп үтерҙәр…*

*Йәнгә йылы эҙләп барам әле,*
*Донъя сере бөтмәҫ-төкәнмәҫ…*
*Кеше,*
*Йондоҙҙарға буйы еткәндә лә,*
*Ер ҡуйынынан ары китәлмәҫ!*

Роберт
БАЙЫМОВ

# КАРУАН КИЛӘ БАҒДАДТАН*

**Тарихи-документаль роман**

## Икенсе киҫәк

## Изгеләр гона ы

— Ғәфү итегеҙ, Әхмәт хәҙрәттәре, еҙ ниңәлер беҙҙекен хурлап, үҙләрегеҙ табынған динде генә күтәрер булып киттегеҙ. әр кемгә үҙ дине ҡәҙерле. Беҙҙең Тәңребеҙ нимә е менән оҡшамай? — орау биреүсе арттараҡ тора, шуға, ишетмәҫ типме, әллә асыуҙан, ҡысҡырып өндәшә. — Ислам, Алла ... Улар ғәрәптәрҙең бик тә ҡиммәтле инаныуҙарымы?

Артыр бей, Төрк Тәкин, Фалис заде кеүек ышаныслы юлдаштары уратма ында ултырған Ғәрәп илселеге сәркәтибе Әхмәт ибн Фаҙлан, ағайыбыраҡ, бер нисә ҡат тығыҙ рәт булып сүгәләгән башҡорт зыялыларына ҡарап алды. Араларында кисә үҙҙәрен ҡаршы алған бер нисә ғәскәриҙе сырамытҡандай итте, ҡараштары менән орау биреүсене эҙләп тапты. орау ис тә бер ҡатлы түгел, унын хужа ы тарихи мәғлүмәтле булырға оҡшаған. Ана, башҡалар ҙа, яуап көтөп, көсөргәнешле тынып ҡалды.

Был турала кисә лә өйләшкәйнеләр бит, юрамал ынайҙармы?

...Ғайса пәйғәмбәрҙән уң, биш йөҙ етмеш йыл үткәс, Мәккәлә ергә Алла тарафынан ебәрелгән уңғы пәйғәмбәр тыуҙы. Ата ы Абдулла, әсә е Әминә исемле ине. Унын донъяға килере хаҡында Муса* менән Ғайса* пәйғәмбәрҙәр изге китаптарҙа әйтеп ҡалдырғандар.

Бөйөк пәйғәмбәр килерен иҫкәрткәндәй, ошо йылды ғына Мәккәлә ғәжәп хәлдәр булып ала.

Йемендең Абраа исемле насара* динен тотоусы ҡан ыҙ батша ына ғәрәптәрҙең Ибра им пәйғәмбәрҙән үк ҡалған иҫке ҡәғбәгә — Раббылар йортона табыныуҙары

---

*Моисей.
*Иисус Христос.
*Христианлыҡ.

---

*Аҙағы. Башы 1-се анда.

ис тә оҡшамай. Сана ҡала ында ул күктәргә ашҡан мө абәт сиркәү төҙөтә лә: "Бынан ары ғәрәптәр ҡәғбәгә түгел, ә ошо сиркәүгә табын ын!" – тигән әмер сығара. Тик ғәрәптәр уны тыңламай. Асыуы ҡабарған тәкәббер Абраа изге ҡәғбәне емереп, ер йөҙөнән епереп ташлар өсөн Мәккәгә баштан-аяҡ ҡоралланған ҙур ғәскәр ебәрә. Ғәскәре алдына уғыш өнәренә, ҡәлғәләрҙе емереү та ылына махсус өйрәтелгән дә шәтле филдәрҙе ҡуя. Бына улар Мәккәгә лә яҡынлаша...

Баштан-аяҡ ҡоралланған ғәскәргә, бар нәмәне ҡырып-емереп барған дә шәтле хәрби филдәргә ҡаршы ҡуйырлыҡ көс мәккәләрҙә, әлбиттә, булмай. Улар тырымтырағай ҡала янындағы тауҙарға ҡаса. Изге ҡәғбә, барса кешелектең иң тәүге илаи ҡорамы, яҡлаусы ыҙ тороп ҡала. Мәккәне бер кем дә аҡламауын күргән яуыз илбаҫарҙар шатлыҡтарынан шашыныу сигенә етә, аҡыра-баҡыра филдәре менән ҡәғбәгә табан ташлана. Тик (бына мөғжизә!) нәҡ шул мәлдә барса күк йөҙөн, хатта ҡояшты ҡаплап, ҡайҙандыр суҡыштарына эре таштар эләктергән ҙур-ҙур ҡоштар килеп сығалар ҙа ауыр йөктәрен ғәскәр өҫтөнә ташлай башлайҙар. Ғәрәсәт ҡуба, ҡәғбәне емерергә килгәндәрҙең күбе е әләк була, башҡалары, ҡоттары осоп, кирегә ыпырта.

Ә ҡәғбәгә бер ни булмай, Алла аҡлай уны. Буласаҡ пәйғәмбәргә йөклө Әминә лә башҡалар менән бергә дошмандан ҡасып, йөрәк аҫтындағы ғәзиз бала ын ҡурсалап, тауҙар ара ына киткәйне. Яуыз батша Абрааның ғәскәре Мәккәнән мәсхәрәле ыпыртҡас, изге Әминә лә әйләнеп ҡайта. Ике ай үтеүгә, донъяға нурлы йөҙлө, шалҡандай ныҡ ир бала тыуа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был ваҡытҡа сабыйҙың ата ы Абдулла, уны Алла ожмахта ит ен, ҡаты сирҙән вафат була. Улына исемде Әминәнең үҙенә айларға тура килә. Баланың йөҙө, ҡыланыштары шул тиклем асыҡ, өйкөмлө, саф – уға әр кем оҡланып ҡарай. Шуға әсә е уға Әхмәт (хөрмәткә лайыҡ, мәртәбәле кеше) тигән исемде айлай. Ата ы булмағанлыҡтан, тәрбиәсе булып ҡалған олата ы Абдул Моталлаб та йөҙөндә ила и нур балҡып торған баланы ҡулына алыу менән, оҡланыуын йәшерә алмайса, уға Мөхәммәт тип өндәште. Мәғәнә е менән Мөхәммәт тә "Әхмәт"кә яҡын, әммә ғәрәптәрҙә ирәк осрай. уңыраҡ Абдул Моталлаб аҡ аҡалдан: "Ни тип ейәненә ғәрәптәрҙә ирәк осрай торған исемде бирҙең?"– тип орағас, сабыйҙың киләсәк яҙмышын шул саҡта уҡ дөрөҫ белгән ымаҡ: “Мин уның ерҙә лә, күктә лә берҙәй мәртәбәле булыуын теләнем", – тип яуап биргән, имеш.

...Ҡырҡ йәшендә Алла көҙрәте менән Мөхәммәттең пәйғәмбәр булыуы танылды. Изге китап уны Рәхмәтул-Әлә Мин, йәғни Барса халыҡтар өсөн Алла Рәхмәте тип нарыҡланы. Хәҙер уның исеме әр кем теләндә, дуҫтарҙың да, дошмандарҙың да... Мөхәммәт ғәрәптәрҙе әләк булыуҙан ҡотҡарҙы, донъя алдында бик юғары бейеклеккә күтәрҙе. Бик борон замандарҙа изге Ибра им әм уның улдары тәьҫирендә Ер әм Күкте тыуҙырған бер Раббыға табынған ғәрәптәр уңынан был тәғлимәттән ныҡ ситләштеләр. Таштарға, балбалдарға табыныр булып киттеләр, әр ғәрәп ырыуының, хатта әр ғаиләнең үҙ Раббы ы булыр, үҙҙәре я ап ҡуйған ошо ындар шәрәфенә кешеләрҙе лә ҡорбан рәүешенә килтерерҙәр ине. Пәйғәмбәрҙәргә лә, баҡый донъя тәғлимәттәренә лә ышанманылар, кеше ғүмере уның үлеме менән генә сикләнде. Шуға яуызлыҡ әм яуыздар яза ын алманы, изгелек, мәрхәмәт тигән төшөнсәләр аяҡ аҫтында тапалды. Бар ерҙә үлтереш, талау, вәхшилек хакимлыҡ итте.

Хәйер, ул замандағы Рум менән Иран кеүек бөйөк дәүләттәр ҙә рухи тарҡалыу осорон кисерҙе. Насаралар ҙа, йә үдтәр ҙә Алла ы тарафынан ебәрелгән төп тәғлимәттәренән ситләшә, үҙ-ара бәхәстәр, уғыштар, дошманлыҡ тыуҙыра башланы. Әүәлге пәйғәмбәрҙәрҙең үҙе онотола, барса донъя аяу ыҙ уғыш әм ҡан ҡойоштан ыҙа сигә, ғона диңгеҙенә сума барҙы...

Ислам тыуыр-таралыр алдынан унда ла Ғәрәп ярымутрауының күп өлөшө ят-

тар ҡулында ине. Төньяғы, йәнә Сүриә менән Мысыр Византия хакимлығында бул а, көньяғындағы Парса ҡултығының яр буйҙары, Месопотамия Ирандың сасаный тоҡомло ша тарынан яфаланды. Улары ғәрәптәрҙе ҡорал, ғәскәр менән генә түгел, рухи йә әттән дә ҡыҫырыҡлай бирҙе. Византия ғәрәптәргә насара динен, ә иранлылар үҙҙәренең Заратуштра, Манихәй тәғлимәттәрен көсләп тағырға маташты. Ғәрәптәрҙең тик Мәккә, Ясриб ҡалаларына, йәнә Ғәрәп ярымутрауының үҙәк өлөшөнә генә баҫҡынсыларҙың ҡулы етеңкерәмәне, улары бойондороҡоҙлоҡтарын аҡлап ҡала алды. Тик был биләмәләрҙә лә татыулыҡ етешмәне, мәжүсилек, ҡырағайлыҡ хөкөм өрҙө. Абуталип улы Али әйткәнсә, Алла Мөхәммәтте нәҡ ошондай гона ҡа батҡан ҡәүем-кешеләрҙе хаҡ юлға баҫтырыр, ялғандан ҡотҡарыр өсөн ебәргән. Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙҙең тәбиғәте, ысынлап та, ике йөҙлөлөктө, хәйләне ҡабул итмәне, ялған тәғлимәттәргә аяу ыҙ булды, Алла ына тоғро ҡалды.

Был хаҡта өйләшкәйне лә ә башҡорттар менән Әхмәт Фаҙлан улы, маҡсаттары нимәлә, әллә хәҡиҡәтте төптән белгеләре киләме? Әллә бында ла бәшнәк, уғыҙҙарҙа булған ғәжәби сәйер хәлдәр ҡабатланырмы?

...Кисәнән бирле ауыр өйләшеүҙәр алып бара ибн Фаҙлан башҡорттар менән. Ислам тәғлимәтен, уның өҫтөнлөктәрен аңлатырға тырыша ҡорт күселәй мыжғып, ҡоралға тотонорға ғына торған ошо ҡырағай мәжүсиҙәргә. Томаналыҡ – бар, аңлатып ҡара!

Ғәрәп илсе е үҙен ярым түңәрәк я ап ураҡҡан, күбе е хәрби кейемдә булған башҡорттарға күҙ ирпеп алды. Ҡырағай ти әң дә, ғәскәриҙәренең кейемдәре ыҡсым да, ҡупшы ла: күк буҫтауҙан тегелгән сәкмән, иҙеүҙәренән ап-аҡ яға күренә, балаҡтарына ҡыҙыл таҫма үрелгән, эйәрҙә сабырға уңай иркен салбар, киң ҡайыш билғау... Баштарында осло, ситтәре бөгөлөп, юғары ҡайтарып ҡуйылған аҡ йөн кәпәс, ҡай ылары, күрә ең, эстән тимер күлдәк тә кейеп алған: сәкмәндәре ҡабарып сыҡҡан. Ҡоралдары ла төрлө: уҡ- аҙаҡ, өңгө, тура ҡылыс, тешле-ороло суҡмар...

Башҡорттар менән былай йөҙмә-йөҙ осрашыу – тәүге тапҡыр. Күпме йылға кистеләр, мең яфа менән ҡабаҡ-ташлы урындарҙы үттеләр, әммә дала аман сик - еҙ әм буш кеүек тойола. Хәйер, илселек башта уҡ күмәк халыҡтар йәшәгән урындарҙы урап үтергә тырышты. Юҡ а, буш ымаҡ тойолған был даланың хужа ыҙ түгеллегенә ибн Фаҙлан аҙым айын ышана килде. Бәшнәк менән уғыҙ ерҙәрендә лә, хәҙер бына башҡорт биләмәләренә аяҡ баҫҡас, үҙҙәренең әр саҡ күҙәтеү аҫтында барыуҙарын бар булмыштары менән тойоп килделәр. уңғы ваҡыт үҙҙәрен оҙата килгән ҡораллы ыбайлылар йәшеренеп тә тормай, ара-тирә осраған ҡалҡыулыҡ ырттарына йә берәмләп, йә төркөмләп сабып сыға ла йыраҡтан ғына илселек үтеп киткәнен ҡарап ҡала. Әлегәсә улар ғәрәптәргә уҡ етер алыҫлыҡҡа яҡынлашманы, ниндәйҙер теләктәре барлығын да белдермәне. Бер мәл йөҙләгән ыбайлы илселек барған юлда ҡалҡыулыҡтарҙа, епкә апланған мәрйендәр ымаҡ, төҙәк ярым түңәрәк теҙмәгә баҫып оҙатып ҡалғайны. Улар яғынан яуызлыҡҡа оҡшаш хәрәкәт булма а ла, башҡорттарҙың быдай ҡылыҡтары бик ағайта ине илселекте.

Нисектер осрашырға, уң булмаҫ, уғыш сыҡмаҫ борон аңлашырға, билдә еҙлектән ҡотолорға теләү хисе көсәйҙе. Шуны иҙгән кеүек, был аҙымды алдағы көндә башҡорттар үҙҙәре я аны. Дөрөҫөрәге, ғәрәптәрҙең ҡоттарын алып, тоташ хикмәтле бер тамаша ҡорҙо.

...Ниндәйҙер оҙон ялпаҡ түмәләс итәгенән вайым ыҙ ғына үтеп баралар ине. Боролманан ҡапыл, офоҡто ялҡын ялмап алғандай, сағыу ал япмаға төрөнгән ыбайлылар ағымы елдереп килеп сыҡты ла, илселектең юлын киҫеп, ҡаршы яҡ

ҡалҡыулыҡҡа атылды. Ғәжәп күренеш! Хәүефте лә онотоп, Ғәрәп илселегe ҡапыл туҡтап, сихырланғандай, ошо ут ағымына ҡарап торҙо. Ә улары, ҡалҡыулыҡҡа менеп еткәс, оҙон ҡыҙыл бер таҫмаға әүерелеп, илселеккә табан боролоп, таш ын кеүек ҡатып ҡалдылар.

— Кемдәр былар? — тине ҡурҡа төшкән ибн Фаҙлан.

— Ҡыпсаҡ яугирҙары, — тине Артыр бей. — Уларҙың хәрби кейемдәре шулай — ҡыҙыл...

"Ғәрәп ғәскәре лә әүәл ҡыҙыл йөндән тегелгән сапанға төрөнгән булған,— тип уйлап ҡуйҙы ибн Фаҙлан. — Ә тағы ла әүәлерәк, исламғаса, ҡара төҫтән...” Ләкин ул, тулҡынланып, башҡаны әйтте:

— Ә нишләп ҡыҙыл сапан ҡыпсаҡтар бында йөрөй? Башҡорт биләмәләрендә түгелме ни беҙ?

— Башҡорттоҡонда. Тик төркиҙәр бында ҡушылып-аралашып бөткән, бер үк биләмәләрҙә күсенеп йөрөй, үҙ-ара ыҙғыштар ҡупмағанда, көтөүлектәре лә уртаҡ. Шуға ал, ҡыҙыл, ары бөркәнсек ябынған йәшендәй йылдам ҡыпсаҡ ыбайлыларының бәшнәк, башҡорт, уғыҙ ерҙәренә күҙ-колаҡ булып, ҡыҙырып йөрөүҙәре был яҡта ис тә ғәжәп түгел.

— Башҡорттар үҙҙәре ҡайҙа икән уң?

Шул мәл ян-яҡтағы ағастар артында ғына тағы күмәк ат тояҡтары дөпөлдәне. Ирек еҙҙән, бары ы ла шул яҡҡа боролдо. Күп тә үтмәй, унан йәнә иллеләп ыбайлы юрттырып килеп сыҡты ла илселек алдына килеп туҡтаны. Баштан-аяҡ ҡоралланған ҡарағусҡыл йөҙлө, эйәрҙә төптәй ныҡ ултырған ир-егеттәр бары ы ла игеҙәктәй күк аттарға атланғандар. Фаҙлан улы, ирек еҙҙән, юнан тарихсы ы Геродоттың Скифия артындағы тауҙарҙа “аргиппей” тигән етеҙ ыбайлылар йәшәүе, уларҙың бары ы ла тик күк аттарға ғына атланып йөрөүе хаҡындағы үҙҙәрен хәтерләне. Уның иғтибарын бигерәк тә алда торған өс ыбайлының урталағы ы тартты. Үҙен хужаларса тотоуына ҡарағанда, быны ы — төркөмдөң сардарылыр. Баҫҡанерендә бейеп торған толпарының эйәр-өпсөнө лә затлы: зиннәтле таштар, көмөш киҫәксәләре, башҡа биҙәктәр менән нағышланған. ыбайлының йөҙө тимер торҡа битлеге менән ярым ябыҡ, әммә күҙҙәре асыҡ, тишеп ҡарай. Ул кейеме менән дә башҡаларҙан айырылып тора. Хәрби кейеме өҫтөнән тимер күлдәк кейеп алған. Башында осло түбәле ҡорос торҡа. Ғәскәриҙәрҙең аяҡ кейемдәре лә тик күндән тегелгән. Яурындарында киреүле әҙернә-йәйә, уҡ тулы ҡалъян; билдәрендә ҡиммәтле таштар менән биҙәлеп я алған затлы ҡында әллә оҙон хәнйәр, әллә ҡылыс. Сардар уң ҡулына оҙон өңгө тотоп алған. Хәйер, башҡаларының да ҡорал-ҡорамалдары, кейемдәре сардарҙарыныҡынан әллә ни ҡайтыш түгел.

— Башҡорттар әр саҡ шулай ҡурсаҡ ымаҡ кейенәме? — тип ораны ибн Фаҙлан Төрк Тәкиндән, йәне ҡуҙғыуын йәшермәйсә.

— Былары хан ғәскәренән килгән булыр, уларҙы шулай кейендерәләр. — Төрк Тәкиндең йөҙөндә үҙгәреш иҙелмәне. — әр тарафтан етеш, бөхтә әм туҡ яугир ғына ихлас уғыша, тип иҫәпләй башҡорттар.

Ләкин ыбайлылар уларға иркенләргә форсат бирмәне:

— еҙ кем? — тине әлеге алда торғаны үҙ телендә. — Ҡайҙа йүнәлдегеҙ? Маҡсатығыҙ ниндәй?

Ибн Фаҙлан, әлбиттә, уны аңламаны. Артыр бей, ирек еҙҙән, алға ынтылып ҡуйғайны, — уға ышанып етмәй инеме, Әхмәт хәҙрәттәре Төрк Тәкингә ишараланы. Уны ы алғараҡ сығып, ҡыҫҡа, әммә төплө аңлатып бирҙе.

Башҡорт ғәскәри төркөмө башлығы бер аҙ нимәлер хаҡында уйланып торған ымаҡ булды. Унан ҡырҡа ғына:

— Аңлашыу өсөн ғәскәриҙәрҙән башҡаларығыҙ беҙҙең арттан барыр, — тине. —

Ә хәрбиҙәрегеҙҙе, ана, теге бөркөттәр кәрәк ергә илтеп урынлаштырыр. – Төркөм етәксе е әле аман ҡаршы яҡ ҡалҡыулыҡта үрә ҡатып торған ҡыҙыл сафтарға ишараланы. – Ҡурҡмағыҙ, яуызлыҡ менән йөрөмә әгеҙ, бер кемгә бер ни булмаç...

Ошонан уң илселекте барған юлдарынан ярай ы уҡ алыç ятҡан, бик күп тирмәләр ибелгән ниндәйҙер ҙур йәйләүгә алып килделәр. Йәйләүҙең тирә- яғында күҙ күреме ик еҙ-сик еҙ далала ат өйөрҙәре, ыйыр, арыҡ, кәзә көтөүҙәре ер ҡаплап, иркен утлап йөрөй. Бары ын алдан белеп торғандарҙыр, күрә ең, – уларҙы тотҡарлыҡ ыҙ үҙҙәренә тәғәйенләнгән айырым тирмәләргә тараттылар... Ашыу, ҡымыҙ тәкдим иттеләр. Ләкин ике-өс сәғәт үттеме-юкмы, уларҙы тирмәләренән йыраҡ түгел тыныс, иркен яланға саҡырып алдылар. Унда әлеге ғәскәриҙәрҙең вәкилдәре, йәйләү башлыҡтары, йәнә ниндәйҙер ҡапыл ғына өндәшеп бармаç олпат кешеләр йыйылғайны. Бер-бере е менән танышыуҙан, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауҙан башланған әңгәмә торған айын ҡыҙа, унын айын шиктәр ҙә арта барҙы.

Бына ошондай хәлдәр алдында тора әле Фаҙлан улы Әхмәт. Әңгәмә йыш ҡына үҙ-ара әрепләшеү төçөн дә алғылап китә. Күрәләтә дошманлыҡ күр әтеп торған ошо әҙәмдәргә ғәрәп илсе е әүәл бик күп семит ҡәбиләләренең юғары күк Раббыларының, төркиҙәрҙең Тәңреләре ымаҡ, уртаҡ булыуын, "Эл" тип йөрөтөлөүен, тик төрлө ҡәбилә уны төрлөсә әйтеүен, йә үдтәрҙә “Эла им”, уғыш суҡмары финикийҙарҙа “Илу ”, ә ғәрәптәрҙә “Алла ” булыуын, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең уны берҙән-бер Раббы итеп иғлан итеүен тәфсилләп төшөндөрә алмай бит инде. өйләй ҡал а ла, уны аңламаясаҡтар, фекерҙәре буталып ҡына бөтәсәк. Әммә нисектер шик ҡалдырмаçлыҡ итеп яуап бирергә кәрәк. Фаҙлан улы Әхмәт йәнә башҡорт зыялыларына ынамсыл ҡарап алды. Иншалла, тәүге мәлдәге ымаҡ улар йөҙөндә әллә ни хәүеф иҙелмәй. Шуға, тыныслана төшөп, тура ын әйтергә булды:

– Пәйғәмбәребеҙ, Алла илсе е Мөхәммәт ғәлиәсәлләм килгәнсә, Ғәрәп ярымутрауындағы күпселек ҡәүемдәр, бына еҙҙең кеүек, балбалдарҙы – төрлө ынидолдарҙы изгеләштерҙе. Йәмәндә кешеләр – Ай менән Ҡояшҡа, Мәккәлә таштарға, ағасҡа, башҡа төрлө хайуандарға табынды. Ғәрәп иленең барса тарафтарында ла ҡырағай мәжүсилек сәскә атҡайны, әр ҡәүем үҙ балбалына инанды. Хатта иң тәүге пәйғәмбәребеҙ Ибра им төҙөткән Раббы йорты – Изге ҡәғбә бина ы ла ошо төрлө ҡәбиләләр табынған балбалдар менән шыплап тултырылғайны...

– Беҙ балбалдарға табынмайбыҙ, үҙебеҙ инаныр Тәңребеҙ бар! – Баяғы асыулы тауыш ғәрәп илсе ен бүлдерергә тырышты. Ләкин уны шунда уҡ башҡалар тыйҙы. Фаҙлан улы Әхмәттең тәкәбберләнмәй, тыныс өйләүе тыңлаусыларға оҡшай төштө, шикелле, йөҙҙәрендә ҡыҙыҡ ыныу уянды. Быны күргән ибн Фаҙлан тағы ла асыла төштө:

– Ғәрәп илендә ул саҡта тәртип бөткәйне, бәй еҙлек, енәйәтселек, хаинлыҡ алға сыҡҡайны. Ил тәхетенә уғрылар, кеше үлтереүселәр үрләне, ҡан ыҙ тирандар хакимлык итте, барса халыҡты үҙҙәренә ҡол я аны. Ғәрәптәргә Парса, Рум, Юнан баçҡынсылары ла тынғылыҡ бирмәне, айбалта, ҡылыс сыңлауында, уҡ, өңгө ыҙғырыуында, уғыш-ҡыйралыш афәтендә шатлыҡлы ауаздарға урын ҡалмағайны, бар донъя ҡан баҙарына әүерелгәйне... Кешеләр үҙҙәре лә ҡырағайлана барҙы, ҡан ыҙ йыртҡысҡа әүерелде, ҡояш яҡты ын томаналыҡ, наҙанлыҡ өрөмө баçып китте...

Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ ислам динен халыҡҡа бына ошо шарттарҙа алып килде. Күп Раббыға табыныусы мәжүсиҙәрҙе ул яратманы, Алла ына ғына табынды, Раббылар йорто Изге ҡәғбәнән, "Алла берәү!" тип, барса башҡа балбалдарҙы сығарып ырғытты...

Сәйәхәтсе Әхмәт тыңлаусыларҙың иғтибарын ярай ы уҡ яулап алыуын үҙе лә аңлағайны инде. Шуға тауышы ла нығына төштө. "Алла пәйғәмбәре Мөхәммәт

ана шулай халыҡтарҙы ялғандан, әшәкелектән, гона тан ҡотҡарыу өсөн килде, — тине ул. — Бер-береңә мәрхәмәтле булырға, биш ваҡыт намаҙ уҡырға, ҡоллоҡ бығауҙарын өҙөп, вәхшилектән, томаналыҡтан арынырға саҡыра!"

— Мәрхәмәтле булыу кәрәк, әлбиттә, тик көнө буйы намаҙ уҡып, ғибәҙәт ҡылып ҡына ултырыуҙан тамаҡ туямы? — Шулай кирегә тартты ибн Фаҙлан тынысландырҙым тип уйлаған башҡорттарҙың берәү е. — Ҡырағай дала шарттарында анау әүеректәрҙе (әлеге башҡорт тирмә араларында ибелеп йөрөгән бала-сағаға төртөп күр әтте), йәнә бөтә ырыуҙы нисек йәшәтмәк кәрәк? еҙҙә бит теге е лә тыйыла, быны ы ла ярамай...

— Эйе, үҙҙәрең хаҡ, — Фаҙлан улы Әхмәт тыныслығын юймаҫҡа тырышты. — Изге Ҡөрьән, шәриғәт ҡанундары әр төрлө бәй еҙлекте, аҙғынлыҡты тыя, сабырлыҡҡа өйрәтә. Сабыр ыҙлыҡ йыш ҡына гона ҡа батыра, ҡайғы килтерә. Алла ының иңә ҡарата мәрхәмәтен белгең кил ә, үҙеңдән түбәнгә ҡара, фә ем ал, Раббы биргән бәхеткә ҡәнәғәтләнә бел. Мөхәммәт пәйғәмбәр үҙе лә бик тотанаҡлы йәшәгән, байлыҡҡа ҡыҙыҡмаған. "Кешеләрҙе ғәҙеллеккә әм изге эштәргә үҙең менән түгел, ә үҙеңдең эшең, тәртип-ҡылыҡтарың менән өндә!" — тип өйрәткән...

Тыңлаусылар ара ында, күрә ең, ислам тарихын яҡындан белеүселәр ҙә ултырған.

— "Тотанаҡлы" булған өсөнмө ни Мөхәммәт пәйғәмбәрегеҙ тиҫтә сама ы кәләш алып йөрөгән? — тип ҡуйҙы башҡорттарҙан ялпаҡ битле е. — Был ниндәй әхлаҡҡа ыя?

Тирә-яҡта күпмегәлер тағы көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Йөҙө тыныс күрен ә лә, ибн Фаҙландың эсендә бындай көфөр үҙҙәрҙән дауыл уйнаны, шикелле, тауышы ҡалтыранныбыраҡ сыҡты:

— Эйе, был хәҡиҡәт, — тине. — Тик еҙ, ил ағалары, үҙегеҙгә үҙегеҙ ҡаршы киләгеҙ түгелме? Әле генә берәүегеҙ, "теге ярамай", "был ярамай" тип ислам бары ын тыя, тигәйне, ә хәҙер килеп артыҡ иркенлектә ғәйепләмәксе егеҙме? Ислам, ысынлап та, кеше ихтыярын сикләмәй, кире енсә, муллыҡта, шат тормошта йәшәргә, әрпеш булмаҫҡа, үҙ-үҙеңде таҙа тоторға, затлы кейемдәр кейергә, күңел сафлығына ынтылырға ҡуша. Сөнки Алла инсафты, гүзәллекте, камиллыҡты ярата... Ә пәйғәмбәребеҙҙең никахтары анына килгәндә... еҙ бында ла хаҡлы түгел. Исламғаса нисек булған? Ул саҡта мәжүси ғәрәптәр ҙә үҙ-ара өҙлөк өҙ уғышып, бер-бере ен ҡырып-үлтереп бөтөрә яҙған, ә уларҙың бисәләре хужа ыҙ ҡалған. Шунан файҙаланып, иҫән ҡалған ир-ат, нәфселәре аҙып, бихисап ҡатын тотҡан. Ислам бына нимәгә ҡаршы сыҡҡан: пәйғәмбәребеҙ нәфсене тыйырға, ҡатындарҙы дүртәүҙән дә арттырмаҫҡа саҡырған...

— Башҡаларҙы сикләгән, ә үҙе?

— Уны ы ла хаҡ, — Фаҙлан улы тынслығын юймаҫҡа тырышты. — Тик был, еҙ уйлағанса, ис тә аҙғынлыҡ түгел, ә тарихи мохтажлыҡ: пәйғәмбәребеҙ бер-бере е менән низағлашып, уғышыуҙан бушамаған, тырым-тырағай йөрөгән ырыуҡәүемдәрҙе, уларҙың үҙҙәренең теләктәре буйынса, ана шулай ҡәрҙәшлек ептәре менән бергә бәйләгән, бер йоҙроҡҡа төйнәгән. Уның урынына, хәҙер Бөйөк хәлифәт илселәрен генә түгел, иман килтереүсе уның еңелмәҫ ғәскәрҙәрен дә бар донъя халҡы шатланып көтөп ала, ҡәҙер-хөрмәт күр әтә, хаҡ юлға баҫа... Бөгөн ислам Ғәрәп ярымутрауынан ташҡындай атылып сығып, шәреҡ халыҡтарында ғына түгел, ер сигендәге мәғриб дарья ына саҡлы таралды. Хәҙер бына еҙҙең тараф халыҡтары ла уға тартыла. Сәфәребеҙ Иҙел болғарҙарына... Алла юлы — хәҡиҡәт юлы, бәрәкәт әм берҙәмлек юлы, еҙ ҙә уңға ҡала күрмәгеҙ, Мөхәммәт өммәте сафтарына килегеҙ...

Бер ҡыҙып, бер үрелеп, был әңгәмә оҙаҡ дауам итте. Әллә ни үҙгәреш и-

ҙелмә ә лә, Фаҙлан улы Әхмәт быны ына ла ҡәнәғәт: ошондай әңгәмәләре, ни маҡсатта йөрөүҙәрен аңлатыуҙары менән үҙҙәренең баҫҡынсы түгеллектәренә бер аҙ ышандырҙы, буғай, башҡорттарҙы. Былары хәҙер юҡҡа-барға сәпсеп, ҡорал күтәрергә ашығып бармай. Тик кем белә инде уларҙы, әлбиттә, иҙгерлекте лә юғалтырға ярамай...

***

Ғәрәп илселеге иҫәбендә башҡорттар менән osрашыуҙа фарсы сығышлы Фалис исемле кеше лә ултыра. Әхмәт ибн Фаҙлан уны Бағдаттан сығып, Джурджания* аша үткәндә юл күр әтеүсе рәүешендә яллағайны. Ләкин илселектә анаулы ғына кеше булғанда бер генә өнәр менән сикләнеп буламы? Ҡатнаштыралар уны ла әр эшкә... Ана шунда уны аҡ өйәктәрсә "заде" тип ололай башланылар ҙа инде. Әхмәт ибн Фаҙлан, Төрк Тәкин әм башҡалар башҡорттар менән бәхәсле әңгәмә алып барғанда, Фалис заде, мөкиббән китеп, был халыҡтың өйләштәренә иғтибар итеп ултыра. Туҡталыуҙарына әҙ генә ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, илселек урынлашҡан ерҙә кисәле-бөгөнлө күп кенә ил ағалары, хәрбиҙәр, үҙ оҫталары, урындағы ҡәүем вәкилдәре уртала булырға өлгөрҙө. Әлбиттә, ибн Фаҙлан улар менән тылмас аша аралаша. Ләкин иғтибарлыраҡ тыңла аң, төркиҙәр ара ында, Иран Туранында йәшәгән фарсы Фалис өсөн, әңгәмәнең тулы мәғәнә е аңлашылып етмә ә лә, башҡорттарҙың айырым үҙҙәре үтә лә таныш ымаҡ тойола. "Хәнийәр", "шө рәт", "йән", "падиша ", "туфан", "йәбер", "ахмаҡ", "арба", "ватан", "сер" тиҙәр улар нәҡ фарсылар ымаҡ,– "мәрхүм", "ми ырбан", "дөрөҫ", "рәсми", "хана", " әҙиә", "хәйәт", "бәрәкәт”... Ана, усаҡ тирә ендә ҡайнашҡан ҡатын-ҡыҙ әллә нисә ҡат "сыуал", "шурпа", "таҡта" тигән үҙҙәрҙе ҡабатланы, башҡа байтаҡ үҙҙәрҙең дә айышына тешөнөп була кеүек. Әлбиттә, күп кенә үҙҙәрҙе үҙгәртеберәк, ниндәйҙер "ҙ", "ç", " " өндәре аша әйтәләр: "чибәр" тимәй – "сибәр", "кесә" урынына "кеçә" тиҙәр... Хатта бында ыйыр малын да “ әү- әү", " әүкәш" тип саҡыралар, имеш. Ә " әү" тигәне иран - фарсы телендә лә " ыйыр" йә "үгеҙ" тигәнде аңлата ла ба а!

Баштараҡ Фалис заде ошондай үҙҙәрҙе дәфтәренә яҙып та булашҡайны. Аҙаҡ ҡул елтәне: бик күп улар. Унан үҙен ынамаҡта ошо айырым үҙҙәр аша тәржемәсе аңлатканға тиклем үк әңгәмәнең мәғәнә ен тойомларға тырышты әм йыш ҡына ошо тойомлауҙың бермә-бер тап килеүен күреп ғәжәпләнде. Бындай яҡынлыҡты башҡа төркиҙәрҙә әлегәсә осратҡаны юҡ ине каруандар оҙатып йөрөгән, күп халыҡтар менән аралашҡан Фалистың...

Ул арала ҡаҙан аҫылған усаҡ тирәләй ҡайнашҡан ҡатындарҙың бере е үҙенә табан шыр яланғас йүгереп килгән дүрт-биш йәштәр сама ындағы ҡыҙыҡайға:

– Кит, нишана, үҫкән ең дә ә ят кешеләр алдында шәрә йөрөргә, ҡапла тәнеңде! – тип ҡысҡырып ебәрҙе. – Бар, Азат ағайыңдан күлдәгенде орап ал!

Барса үҙҙәрҙе аңлап етмә ә лә, Фалис заде йәнә "нишана", "тән", "шәрә", бигерәк тә "Азат" тигәндәрен ап-асыҡ ишетте. Башҡорттарға ҡайҙан килгән был үҙҙәр? Нимә аңлата? Хәйер, төпсөнмә әң дә була, "шәрә" тигәне шәрәлекте аңлатма а, әсә е әлеге ҡыҙ балаға нимә өсөн асыуланыр ине? А бына "азат" тигәндәре... Иранда ла бик тә ҡәҙимге үҙ, боронғо парса-пә ләүи телендә "азат" – аҫыл зат, у ныраҡ "батша нәҫеленән", "хакимдар", "ирекле кеше" тигән тешөнсәләрҙе биргән. Ә башҡорттарҙа нимә аңлата икән ул?

Был орауын Фалис заде эргә ендә ултырған Төрк Тәкингә төбәне. Ләкин уны ы орауҙы, күрә ең, бер яҡлы ғына күрҙе:

– Анау килгән баланың аға ы булыр, әсә е шулай ти бит. Малайҙар исеме...

*Хәҙерге Ургенч.

Төрк Тәкин – илселектә ифрат абруйлы кеше, бөкөрәйеберәк йөрө ә лә, Артыр бей ымаҡ бә леүән кәүҙәле. Хатта илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт тә уға ололап ҡына өндәшә, сабыр өйләшә. Шулай булмай, Төрк Тәкин әүәл ошо тарафтарҙа йәшәгән, Уралда атаҡлы тимерсе булып танылған. Әле илселек йүнәлгән Болғар дәүләте менән дә күп йылдар сауҙа эштәре алып барған. Унның даны шул саҡта уҡ был яҡтарҙа ғына түгел, Туран, Парса, Ғәрәп илдәрендә лә киң таралған. Сөнки ер ҡаҙып, унан табылған мәғдән, таштарҙы иретеп, унан төрлө рәүешле матур, кәрәкле ындар я ау серен белеүсе тимерсегә күп халыҡтар боронборондан оло хөрмәт күр әткән. Бер үк ваҡытта шикләнеп, мөғжизәүи көскә эйә кирәмәтсе, сихырсы күреп, уға ҡурҡып та, ағайып та ҡараған. Тимерсе кешеләргә өңгө, ҡылыс кеүек төрлө дә шәтле ҡорал да, уҡ үтмәҫ тимер күлдәк тә я ап биргән. Бындай оҫта тылсымлы сихыр көсөнә эйә, ул күҙгә күренмәҫ итә торған кейем дә, хатта, хәреф әм үҙҙәрҙе генә түгел, йыр, мондо ла сүкеп бирә ала, тип иҫәпләгәндәр. Төрки халыҡтарының олонхо тип йөрөтөлгән бер ҡары үҙендә, тере ыу эҙләүсе батырҙы тимерсе, ут диңгеҙе, ажғыр йыртҡыстар, мәкерле дошмандар ара ынан имен-аман үтеп кит ен өсөн, еңел өңгө рәүешендә сүкеп эшләгән, тип әйтелә. өңгө рәүешендә булыуы арҡа ында ошо батыр себен дә ыймаған аралыҡтарҙы йыртып үтеп, теләгән еренә барып еткән, ҡурҡышҡан аҡсыларҙы икегә айырып, хәйлә тоҙаҡтарын урап үтеп, мораҙына ирешкән.

Тимерсенең ҡулынан килмәгән эш юҡ, тип уйлағандар, шуға уларҙың мәртәбәләре лә юғары булған. Ирандың, ана, Ҡәүи атлы тимерсе е мең йыл ша лыҡ иткән, халыҡты ҡан илатҡан иблис Зоххаҡҡа башта бер үҙе ҡыйыу ҡаршы сыҡҡан, уны тәхетенән алып ташлаған әм яуызлыҡтары өсөн ҡаяға ҡаҙаҡлап ҡуйған. Ябай халыҡ ҡына түгел, тимерсене шуға батшалар ҙа хөрмәт итергә мәжбүр булған. Зоххаҡты ҡыйратыусы әлеге тимерсе Ҡәүиҙе хөрмәтләп, Иран халҡы унның тимерлектә кейә торған эш алъяпҡысын, ҡиммәтле таштар менән биҙәп, ил байрағы итеп күтәргән... Фарсылар шуны әлегә саҡлы үҙҙәренең дәүләт әләме итеп йөрәтә икән!

Ғәрәп илселегендәге башҡалар ымаҡ, Фалис заде лә ныҡ хөрмәт итә ошо филгә оҡшаш йөрөшлө бә леүән Төрк Тәкинде, хатта, унның тылсымлы сихырына ышанып, бер аҙ шөрләп тә ҡуя. Ләкин, күренеүенсә, башҡаға ма ир Төрк Тәкин тел мәсьәләләрендә Фалис задегә ис тә ярҙамсы түгел. Тик Фалистың ҡыҙыҡ ыныуы ғына үрелмәне, кире енсә, күҙ ҡырыйы менән генә усаҡ тирә ендәгеләрҙе иғтибарлыраҡ күҙәтә башланы.

Әлеге ҡыҙыҡай әллә әсә енең иҫкәртеүҙәрен ишетмәне, әллә тыңламаҫтан, алпан-толпан атлап килеүен дауам итте.

– Кит! Ҡас, килмә, тим бит! – Сыбыҡ елтәп, әсә е бала ына ҡаршы китте. – Ана, Папаҡ килә! Тыңлама аң, хәҙер тотоп үҙенде Папаҡҡа бирәм!

Был үҙгә фарсы Фалис заденең ҡолаҡтары йәнә "ҡарп" итеп ҡалды, түҙмәне, ғәжәпләнеп, эргә ендәге тылмасҡа өндәште:

– Нимә ти ул? "Папаҡ" тиме, әллә яңылышаммы? Кем ул "Папаҡ" тигәне?

Тылмас хәбәрҙар түгел ине, ни әйтергә белмәй тотлоғоп ҡалды. Шунан аптырабыраҡ:

– Әллә тағы... Ен-пәрей микән, шулай бала-сағаны ҡурҡыталар инде бында...

Тылмастың да был эштә файҙа ыҙ булыуын аңлаған Фалис заде артабан төпсөнөп торманы. Шулай ҙа, көтөлмәгән оҡшашлыҡтарҙан нимәлер аңлағандай, үҙе лә юғалыбыраҡ ҡалды. Тик уйҙарын ҡапыл ғына тышҡа сығара ы килмәне. Нимә ята икән был оҡшашлыҡтар тамырында?

Ғәрәп илселеге вәкилдәре башҡорттарҙың урындағы ырыу башлығында булғанда унда нәфис үҙ оҫталары килгәйне. "Сәсән" тип таныштырҙылар бере е ме-

нән. Киң абруй яулаған нәфис үҙ оҫталарын шулай "сәсән" тип ололай икән бындағы халыҡ. Исламғаса булған Заратуштра динен тотоусы иранлы арийән ҡәбиләләренең иң юғары руханиҙарын да шулай "сәсән" тип йөрөткәндәр. Уларҙың "сәсән" тигәндәре хатта батшаларға ҡарағанда ла өҫтөн торған.

Шуғалырмы, Иран ша инша тары, батшалыҡ итеү менән генә ҡәнәғәтләнмәйсә, сәсәнлек дәрәжә ен дә үҙҙәре биләр булған, исламғаса дүрт-биш йөҙ йыл сама ы элек Иран империя ында хакимлыҡ иткән көслө Сасаный династия-ын булдырған. иҙемләүе раҫ бул а, "Папаҡ" тигәндең тамырында ла Иран батшаларының сасаный батшалары тоҡомон башлаусы, нигеҙ алыусы Сәсән Арташир Папаҡан атлы бөйөк шәхес тура ында үҙ бармаймы? Румиҙар, юнандар, төркиҙәр менән туҡтау ыҙ уғыштарҙан, эске низағтарҙан бөтөнләй емерек хәлгә килгән Парфян дәүләте ҡалдыҡтарынан өр-яңы империя төҙөүҙә парса аҡ өйәктәре маздасы руханиҙар менән бер төптән эш итә. Эра башының өсөнсө йөҙйыллығында өҙлөк өҙ ҡанлы уғыштар өҙөмтә ендә истахр ҡәбилә е башлығы Арташир Папаҡ Сәсән көллө Парса дәүләтенә хаким булып ала. Шуның менән Парса-Персияла оҙаҡ йылдар хакимлыҡ иткән сасаный нәҫелле батшалар тарихына нигеҙ ала. Тырым-тырағай таралып бөткән Иран ҡәбиләләренән мәш үр ил төҙөү өсөн Арташир Папаҡанға, әлбиттә, үҙ ҡәүемдәре ара ында ла ҡан ҡойошло бихисап уғыштар алып барырға тура килгән. Шул саҡтағы Рум, Македония, Византия, Ассирия кеүек бөйөк империяларға ҡаршы торорға ла кәрәк булған. Заманында уның исеменән генә лә, ябай кешеләр генә түгел, мәш үр батшалар ҙа "Арташир Папаҡ яу асҡан!", "Папаҡ килә!" тип дер ҡалтырап торор булған. Хәҙер и ә был тарафта "Папаҡ килә!" тип бала-саға ҡурҡыталармы, юғи ә? Ҡайҙан килгән был исем мәжүсилек хәсиәтенә батҡан дала башҡорттарына?!

Ләкин Фалис задене ғәжәпләндергәне ул ғына ла түгел. Барса донъя Сәсән Арташир Папаҡанды юнандарса: "Сасан Ардашир Бабакан" ти, ә бына башҡорттар нәҡ фарсыларҙың үҙҙәренсә "Арташир Папаҡ", "Арташир Папаҡан" ти! "Сәсән" тигәндәре лә ғәжәп! Иран маздасыларында ул — ила иәткә хеҙмәт итеүсе рухани дин башлығы. Башҡорттарҙа ла бар "сәсән", ул да юғары рух эйә е, тик башҡорт сәсәне дин ә еле түгел, ә юғары рухлы нәфис үҙ оҫта ы. Хәйер, әр осраҡта ла сәсәндәр — батшаларға баш бирмәҫ ила и хакимдар. Юҡҡа ғына ярты донъяға хужа бөйөк Арташир Папаҡан, ша тар ша ы ша инша булыуға ғына хуш ынмай, илдең дини башлығы вазифа ын да үҙенә алғанмы ни! Уның урынына "Сәсән Папаҡан" тип ололағандар үҙен. Арташир Папаҡандан уң килгән Иран батшалары ла Сасаный исемен йөрөткән, шуның менән хакимлыҡ иткән бөйөк империяны нығытҡан. "Нимәлер бар был ауаздашлыҡта, ис шик еҙ булырға тейеш, — тип ығымта я ай Фалис заде. — Тик ниндәй? Сәбәптәре нимәлә? "

Сал тарихтан килгән бер риүәйәт ишеткәне бар фарсы улы Фалистың. Бик боронғо замандарҙа, ер йөҙөндә изгелек менән яуызлыҡ типә-тиң булып, үҙ-ара аяу ыҙ алышҡан, әле быны ы, әле тегене е өҫкә сыҡҡан дәүерҙәрҙә булған был хәл. Яуыз көстәр — дейеү-пәрейҙәр, иблистәр, убырлы ҡарсыҡ-сихырсылар ҡара эштәрен үҙҙәре генә түгел, башҡалар ҡулы менән дә башҡарырға тырышҡан. Бигерәк тә ша -батшаларға ырышҡан улар, төрлө юлдар менән аҙҙырырға, хаҡ юлдан яҙҙырырға ынтылған. Ныҡ торған хаҡлыҡ юлында Иран батшалары. Тик ҡара көстәргә ҡаршы тороп була, ә бына... нәфсегә? Шундайҙарҙан Зоххаҡ тигән берәү, ҡайҙандыр сит-ят тарафтарҙан килеп, Иран тәхетенә ултыра. Сығышы менән фарсылар яратмаған туранлы ла булған, тиҙәр уны. Өҙлөк өҙ мәкер менән йәшәүсе яуыз көстәр Зоххаҡтың да йомшаҡ яҡтарын эҙләй башлай әм, әлбиттә, таба.

Ул замандарҙа кешеләр йәнлек үлтереп ит ашамаған, бары тик үҫемлек менән

генә туҡланған. Иблис бына ошоно файҙалана ла. Башта ул кеше үрәтенә инеп, Зоххаҡ батшаға ашнаҡсы булып яллана. Эйе, батша аҙығына шул замандарҙа ярамаған тәмләткестәр, аҙҙыртҡыс ашамлыҡтар өҫтәй башлай. Башта ҡыҙҙырылған ағуна, унан быҙау ите лә батша өҫтәленә килеп ҡунаҡлай. Оҡшай был аҙыҡтар Зоххаҡ батшаға, маҡтай-маҡтай оғона... Кинәнә Иблис, үҙе теләгән көн тантаны килерен көтә, әкренләп батша ышанысына ла инә... "Барса был эштәрең өсөн үҙеңә нимә теләй ең? – ти Иблистән ҡәнәғәт Зоххаҡ. – Нимә ора аң, шул булыр". "Миңә бер ни кәрәкмәй, – тип хәйләләшә Иблис. – Бөйөк ша инша ым ҡәнәғәт бул а, шул еткән". "Юҡ, юҡ, хеҙмәтең оло ба аға лайыҡ, – шулай ныҡыша Зоххаҡ. – Нимә кәрәк, батшалыҡмы, алтын-көмөшмө?" "Мохтажлыҡтарым, ысынлап та, юҡ,– тип наянлана бирә Иблис. Тик оҙаҡҡа түгел, аҙағыраҡ, йомшара төшкәндәй: – Әгәр ша инша тары рәхмәтен белдерге е кил ә, – тигән була, уңай ыҙланғандай ҡыланып, – ул саҡта мәрхәмәте килеп, ҡулбаштарынан үбергә генә рөхсәт ит ен. Беҙ, ҡолоғоҙ, шуға ла мәңге рәхмәтле булырбыҙ”.

Рөхсәт итә Зоххаҡ, үҙенең бөйөклөгөнән, үҙенә булған ошондай өйөүҙән ләззәтләнә. Әммә Иблистең батша ҡулбаштарына ҡағылып үбеп алыуы була, шунда уҡ уның ике яурынынан ике тере йылан башы ҡалҡып та сыға! Яуыздар үҙҙәре, уҫал ыҫылдап, төрлө яҡҡа борғолана, хатта батшаның үҙенә лә ҡом оҙ ынтыла был баштар... "Сабып ташлағыҙ шуларҙы!" – тип аҡыра Зоххаҡ, аҡылдан яҙыр сиккә етеп. Ләкин ша инша аҡсыларының ҡылыс менән елтәнеп, йылан баштарын сабып ырғытыуҙары була, шунда уҡ иҫкеләре урынына тағы ла ҙурыраҡ әм уҫалыраҡ яңы баштар ҡалҡып сыға. Батша сәбәләнә, ҡурҡышынан, ерәнеүҙән ни эшләргә белмәй үрле-ҡырлы икерә, аптырағас, ҡараштары менән Иблисте эҙләй, тик уны ының инде эҙҙәре лә ыуынып өлгөргән... "Берәй әмәлен табығыҙ, исма ам, тынысландырығыҙ шуларҙы,– тип ялбара башлай тирә-йүндәгеләргә Зоххаҡ. – Нимә кәрәк икән уларға?"

Тик шунда ғына, үҙе күренмә ә лә, ҡайҙандыр йыраҡтан, ер аҫтынан Иблистең тауышы ишетелә:

– Мөхтәрәм ша , йыландар аҙыҡ орай, аслыҡтан тулаша улар, – ти, мыҫҡыл иткәндәй. – Тик уларға ябай аҙыҡ түгел, ә йәш егеттәрҙең мейе е кәрәк. Егеттәрегеҙҙе йыландарға ҡорбан итегеҙ, шун ыҙ тынысланмаҫ улар...

Көн үтә, төн үтә, йылан баштары шашып аҙыҡ даулауын дауам итә, батша арайында тыныслыҡ бөтә. Түҙер әмәл ҡалмағас, Зоххаҡ ышаныслы кешеләренә Иблис ҡушҡанды үтәргә ҡуша. Йәшертен килтерелгән ике етем егет мейе ен ашағас, йылан баштары, ысынлап та, тынысланып йоҡлап китә. Әммә бер тәүлек тә үтмәй, йылан баштары ашарға орап, затлы аҙыҡтарға иғтибар ҙа итмәй, йәнә ғауғалаша башлай. Бына ошонан алып башта йәшерен генә, артабан асыҡтанасыҡ көн айын батша арайына ике егет килтерер булғандар, уларҙы ҡорбан итеп, мейеләрен йылан баштарына ашатҡандар... Мең йыл буйы дауам иткән был ҡанлы туй, күпме аҫыл егеттәр шулай әләк ителгән!

Был хәл хатта арай хеҙмәтселәрен дә оло хафаға алған: эштәр ошолай бар а, туймаҫ йылан баштары оҙаҡламай Ирандың барса киләсәген оғоноп бөтәсәктәр ҙә ба а!

Уйлай торғас, шундай хәйлә ҡора улар: көн айын арайға килтерелгән ике егеттең бере ен генә ҡорбан итәләр ҙә, икенсе ен йәшереп ҡалып, уныҡы урынына йылан баштары аҙығына арыҡ бәрәсе мейе ен ҡушалар. Ә йәшереп ҡалдырылған егеттәр ике йөҙ-өс йөҙ булып йыйылып кит ә, уларҙы аҫтыртын ғына берәй яҡҡа – йә кеше аяғы етмәҫ тау араларына, йә икенсе берәй ил ғәскәренә яугир итеп ҡушып ебәргәндәр. Парсаларҙан башҡа ҡәүемдәр, шул иҫәптән туран халыҡтары ла, имеш, ана шулай барлыҡҡа килгән. Фарсылар турандарҙы төркиҙәрҙең ата-баба-

ы анай... Яуыз Зоххаҡ та, имеш, шулар нәҫеленән. Улар раҫлауынса, йылан-батшанан йәшерелеп ситкә оҙатылған егеттәр юҡҡа сыҡмаған. ытыҡ сырайлы, үтә шиксел, башҡалар менән аралашып бармаусан, тау араларында, кеше йөрөмәгән ерҙәрҙә йәшәүсе күп кенә ҡәбиләләр, шул иҫәптән курд ҡәүемдәре лә йәнә е, ана шул ҡасҡын егеттәрҙән таралып барлыҡҡа килгән. Шуға улар башҡа иранлыларға асыулы, яңғыҙ унар итеүҙе өҫтөн күреүсе уҫал халыҡтар, бына был башҡорттар ымаҡ, аҫтыртын, ҡырыҫ, яуыз тоҡом. Курд – баш-курд – баш-ҡорт тигән ауаздашлыҡтар ҙа уйға ала бит әле уның...

Ошолар хаҡында бер мәл Фалис заде илселек менән килеүсе мөслим Артыр бейгә лә үҙ ҡатып ҡарағайны. Ләкин уны ы быға әллә ни аптырамаңы ла шикелле.

– Иҫең китмә ен, ундай уртаҡлыҡтарҙы тора-бара тағы ла күберәк осратыр ың әле, – тине. Унан үҙҙе үҙе дауам итте:

– Бына ин, фарсы булараҡ, боронғо Иран ша тары хаҡындағы тарихнамәләр менән әҙ-мәҙ таныш ыңдыр, моғайын. Иранлылар унда үҙҙәренең халыҡ батыры Рөстәмдәре менән бер ҡатарҙан Искәндәр исемле румлыларҙың бөйөк сардары Александр Македонскийҙы ла күккә күтәреп маҡтайҙар. Йәнә е, ул донъяла иң аҡыллы ы, иң ғәҙеле, иң ғилемле е... Башҡа илдәрҙе, халыҡтарҙы ул баҫып алмай, ә уларға бәхет, ирек килтерә... Шуға Искәндәр-Александрға ҡала әм илдәр ҡаршылыҡ ыҙ бирелә, нығытма- ҡәлғәләрҙең асҡыстарын уны аҡлаусылар, бер уҡ та атмай, үҙҙәре сығарып бирә... Ә бүләк ителгән алтын-көмөш, кәнизәктәр, башҡа байлыҡтың иҫәбе- аны юҡ... әр ерҙә оло хөрмәт күр әтеп, ҡунаҡ итәләр...

Шунан, фекер ағышын бороп, Артыр бей ҡапыл орай ҡуйҙы:

– Йә, әйт әле, индостанды яулап алғас, ундағы бик шө рәтле бер аҡыл эйә е Искәндәргә нимә бүләк иткән?

Көтмәгән орауҙан Фалис заде ҡапылда юғалыбыраҡ тор а ла, иҫенә төшкәс, йылмайып яуап бирҙе:

– Күпме эс әң дә ыуы бөтмәй торған сеүәтәме? Искәндәрҙең быға ғәжәпләнеүенә ҡаршы, ул ыуҙың тирә-яҡ ауа дымынан магнит тартҡандай йыйылыу ысулын да аңлата ҡуйҙы.

– Афарин, Фалис әфәнде, юрамал орағайным, ул тиклем тәфсилләп белеүенде көтмәгәйнем.– Сырайы яҡтырып киткән Артыр бей үҙҙәренең юл күр әтеүсе енә хөрмәт менән ҡараны. – Әммә иң ҡыҙығы шунда: ошоға бик оҡшаш тылсым башҡортта ла бар. Унда ла тау мәгәрә ендә йәшәгән аҡыл әм ғилем эйә е бер аҡ аҡал юлсы ба адирҙарға бәләкәй генә туҫтаҡта ит осмото тәҡдим итә. Кесе телгә лә йоҡмаҫ был ит киҫәгенән ике батырҙың кәйефе кит ә лә, уны йотоп ебәреүгә туҫтаҡта яңылары тыуып тора. Ашайҙар былар, ашайҙар, ләкин барыбер ашап бөтә алмайҙар...

– Эйе, оҡшаш мөғжизә шул, ғәжәп. Тик нишләп, Иран, индостандағы ымаҡ, сеүәтәлә ыу түгел, ә ит булды икән?

–Уны ы ла аңлашыла, тип уйлайым. – Күпте күргән, күпте белгән кешеләргә хас булғанса, Артыр бей йылмайып, тыныс, ышаныслы өйләй. – Борон-борондан кешеләр үҙҙәрендә нимә юҡ, нимә бик кәрәк – шуны мөғжизә, тылсым аша бул а ла табырға тырышҡан. Иран, индостан, Ғәрәп ярымутрауы кеүек ҡом сахраларында эҫе ауалы ил халыҡтары өсөн нимә иң ҡиммәте? Әлбиттә, саф, алҡын ыу! Әммә эсер ыу бик әҙ ул тарафтарҙа. Шуға уны табыу ҙа бер мөғжизә! Ана, Ҡөрьәндә лә "Ендәр" сүрә ендә Алла ы исеменән мөслим булмағандар тура ында: "Әгәр улар тура юлда тор алар, беҙ уларға мул ыу эсергән булыр инек", – тиелә. Был бит мотлаҡ ғәрәптәр хаҡында яҙылған – ыуға мохтаж улар, унда ыу бик ҡәҙерле. Ә хәҙер бына был беҙ үткән әм бара ы яҡтарға ҡара: аҙым айын үтә күренмәле көҙгөләй йылтыр күлдәр, саф ыулы эреле-ваҡлы йылғалар... Ҡуйы йәшел хәтфә яландар, шау сәскә болондар, быу күтәрелеп торған дым тулы ундырышлы ерҙәр... Ә ин иртән төшкән ысыҡҡа иғтибар иттеңме? Улар шул тиклем мул,

әлеге инд сеүәтә ен ошо көмөштәй саф ысыҡ менән генә лә тултырып була. ыуға мохтажлыҡ юҡ бында, шуға уның өсөн тылсымлы сеүәтә лә кәрәкмәй. Шуға башҡорттар "мул ыу эсергән булыр инек" тигән вәғәҙәгә " ыу ҙа булдымы аҙыҡ" тип көлөп кенә ебәрер. Был тарафтағы тәбиғәттә зыңлап торған сафлыҡ, малай саҡта өлкәндәр беҙгә, бик сарса аң, ат-тояғы ҡалдырған соҡорҙа йыйылған ямғыр ыуын да эсергә ярай, тип өйрәтерҙәр ине...

Ҡыҙыҡ инде был Артыр бей, үҙе бөттөмө-юҡмы, аңламаç ың, атының ҡабырғаларын тибенгеләре менән төйөп, алдағыларҙы ҡыуа китте. Әммә ошо өйләшеүҙән уң Фалис заде Артыр бей менән йыш осрашыр булды. Шул арҡала, иранлы булараҡ, Фалис заде үҙе өсөн дә күп кенә ҡыҙыҡлы нәмәләр асты. Ана, башҡорттарҙың "Урал" тигән бөйөк тарихнамәләрендә лә иранлылар рухына, хатта бына бая иçкә алған Зоххаҡ батша мажараларына оҡшаш хәл-ваҡиғалар тулып ята: дейеү пәрейҙәре, иблистәр... Йыландар батша ы Ҡә ҡә ә, уның улы Зәрҡүм... Зәрҡүм – Зоххаҡ – Ҡә ҡә ә ... исемдәрендә үк ниндәйҙер уртаҡлыҡ иҙелә. Йыландар "Урал"да ла шулай кеше ашап туҡлана, ашаған бер кеше иçәбенә уларға яңы баш, яңы ҡеүәт өçтәлә. Шуға унда бер башлы дейеүҙәрҙән ете, туғыҙ, ун ике башлыларына тиклем бар. Әммә иң ҡыҙығы – "Урал" дастанында ла көтөлмәгән мөғжизәләр йылан-батшаларҙы үбеүҙән башлана: Зоххаҡты – ҡулбаштарынан, Ҡә ҡә әне – теленән... Улай ғынамы уң? Башҡорттарҙың бөйөк ҡомартҡы ында иранлылар үҙҙәренеке тип анаған омай әм Сәмреғоштар, Тере ыу уртлап үлем - еҙгә әүерелгән, шуға ла башҡаларҙы, хатта сардар Искәндәрҙе лә унан яҙлыҡтырған аҡ аҡаллы Хызыр Ильястар йөрөп ята. Урал тигән ҡа армандары, Иран ша - тары ымаҡ уҡ, еңеү яулаған әр ерҙә сибәр ҡыҙҙарға өйләнә. Улар ара ында нәҡ фарсы сығышлы Гөлстан исемле ҡыҙ ҙа, батырҙарҙы йәшәртер тере ыу әм өт йылғалары ла бар. Кисә башҡорттарҙың "Урал"ын тыңлағанда ҡай ылыр мәлдә үҙ Апастак, йә булма а боронғо Иран дастан-ҡиссаларындағы бә леүәндәр хаҡында бара ымаҡ та тойолоп ҡуйҙы. "Урал"дағы башҡорт ҡары үҙендәге ағалы-энеле Урал менән Шүлгән йөҙөндә изгелек әм яуызлыҡтың үлемесле алышы Апастактағы аҡыл раббы ы Ахура Мазда менән ҡара көстәр батша ы Анра Майна алышыуын хәтерләтте. Башҡорттарҙа, ана, Шерияздан тигән исемдәр ҙә бар икән. Ә "яздан", "мазда" – шул уҡ Заратуштра тәғлимәте Раббы ы ла ба а! ис тә тиктәçкә генә түгел был!

Йәшәйеш шарттарының, рухи сығанаҡтарҙың бер иш тамырлы булыуҙарынан да киләлер был. Шулай булма а, дәүерҙәр төпкөләндә йәшәгән Рум батша ы Александр Македонский, йәки шәреҡсә әйт әк – Искәндәр-Зөлҡәрнәйен, хаҡындағы хикәйәттәр башҡортта ла тулып ятыр тип кем уйла ын? Әле яңыраҡ ҡына, башҡорттар менән аралашҡанда, Артыр бей, Фалис заденың ҡыу көпшәнән сыҡҡан серле моңға әсир булып ултырыуын күргәс, "ҡурай" тип аталған был мөғжизәнең табылыу тарихын да өйләгәйне. Имештер, борон бер батша үҙенә сәс ҡырыусы саҡырта. Оçта ки уның баш кейемен алдырыуы була, үҙе лә шунда йығылып китә яҙа: батша... мөгөҙлө!

Әлбиттә, сәс алыу оçта ы был хаҡта берәүгә лә белдермәçкә тейеш. Кире енсә икән, уны үлем көтә. Бына шунан уң кешеләр менән ауыҙ асып өйләшеүҙән ҡурҡып, оло ҡайғыға ҡалып, дала ҡыҙыра был. Шул саҡ урман ауыҙынан килгән ниндәйҙер сәйер ҙә, үҙе ымаҡ зарлы-моңло ла ауаз ишетә. Барып ҡара а, кибеп барған көпшәле үлән... Буйҙан-буйға елгә тишелә лә башлаған. Оçта уны ҡулдарына ала ла, тишектәренә баçҡылап, ел урынына үҙ тынын өрөп, баяғы моңло ауаздарҙы ҡабатларға тырыша... Ҡурай тигән мөғжизә башҡорттарҙа ана шулай табыла...

Артыр бейҙе бик ҡыҙыҡ ынып тыңлап килгән Фалис заде шунда үҙе лә иҙмәçтән әйтә алды:

– Улай а, мин дә бер хикмәт өйләйемме? Беҙҙең фарсы хикмәтен. Тик иңә

эйәреп, бер үк нәмәне ҡабатлай, тип кенә уйлай күрмә.

Артыр бейҙе өгөтләй е түгел, ҡары үҙ ти әң, утҡа осҡан күбәләктәй атыла. Шуға Фалис заде унының ризалығын көтөп торманы:

– Шәреҡтә ин күп йөрөгән кеше, беләһеңдер, Искәндәр-Зөлҡәрнәйенде мөгөҙлө батша итеп кенә түгел, ә ғәжәп ҙур ҡолаҡлы ла итеп үрәтләйҙәр, – тине. – Башҡаларға күр әтмәҫ өсөн бөйөк сардар ҡорос хәрби торҡа ы эсенән ҡолаҡ тәңгәле тирәләй киң алтын таҫма-ҡоршау кейеп йөрөгән. Шуға ла батшаның сәсен, аҡалын ҡырыусы балыҡтай тел еҙ, ышанысл ы кешенән башҡа берәү ҙә быны белмәгән. Тик, нишләй ең, сәғәте килеп еткәс, аҡал ҡырыусы ла ҡапыл вафат булған. Унының урынына килгән икенсе оҫта батшаның бөҙрәләнеп торған күбәләй ҡалын сәстәрен күтәрә төшөп, әлеге алтын таҫма-ҡоршауҙы ысҡындырыуы булған, шунда уҡ ушын да юғалтҡан: киң таҫма аҫтынан бөкләп-бөтәрләп тығылған ҙур табаҡтай ике ҙур, оҙон ҡолаҡ тарбаңлап килеп сыҡҡан!

Оҫтаның мөшкөл хәлен бөйөк сардар аңлаған, әммә киҫәтеүҙе онотмаған: "Әле ин күргәнде әҙәм затынан булған башҡа берәү ҙә ишетергә тейеш түгел!"

Әммә үҙеңә кәрәкмәгән хәүефле серҙе белеүгә ҡарағанда, аҡлауы ҡыйын. Сәс ҡырыусыны ла бик йонсотҡан, яфалаған батша сере, арыға абыштырған. Кемгә бул а ла серҙе сисә алмағас, аптырап, әлеге оҫта тәрән ҡойо эргә енә килгән дә, эскә башын тығып: "Батшабыҙ мөгөҙлө генә түгел, ғәжәйеп ҙур ҡолаҡлы ла икән!" – тип әмәлен табып, серенән бушана алған. Унан, батша киҫәтеүен боҙмауына шатланып, ҡайтып киткән. Ләкин иртә шатланған. Ҡойо төбөндә көпшәле ҡамыш үлән үҫеп ултырған икән. аҡал ҡырыусы ысҡындырған серҙе шул үлән үҙенә еңдергән. Әгәр көпшә үҙ үлеме менән ҡороп үл ә, унының менән бергә сер ҙә юғалыр ине. Тик көпшәгә Алла ы икенсе яҙмыш биргән: ҡойо янына мал уғарырға килгән көтөүсе ҡамыш-көпшәне күреп киҫеп ала ла, унының тәнендә тишектәр тишеп, ыбыҙғы я ай... Оҫта уйнай ыбыҙғыла көтөүсе, әммә көпшә тишектәренән моң ғына түгел, әлеге сәс ҡырыусы килтергән батша сере лә арҡылып килеп сыға, киң сәхрәгә тарала...

Мәле еткәс, бөйөк сардар-батша ла ишетә был хаҡта. Ләкин көтөүсене лә, сәс ҡырыусыны ла язаламай. Күрә ең, икәү белгәнден бер ваҡытта ла сер булмауына, уны донъя ҡолағынан йәшереп булмауына төшөнә.

Фалис заде, өйләп бөткәс, ни әйтер ең тигәндәй, Артыр бей яғына ҡарап алды. Тик уны ы әллә ни ғәжәпләнеү белдермәне.

– Эйе, ишеткәнем бар ундай хикәйәттәрҙе, – тине уйсан ғына. – Халыҡтар бит, беҙҙең Әхмәт хәҙрәттәре әйткән йәджудж менән мәджудждар ымаҡ, тау эсендәге ҡорос диуар артында бикләнеп кенә ятмай, бер-бере е менән аралашып йәшәй...

ине ҡеуәтләп кенә йәнә шуны әйтә алам: Искәндәр-Зөлҡәрнәйенгә йә унының тормошона ҡағылышлы ҡары үҙҙәр башҡортта, ысынлап та, байтаҡ. Унының сәбәптәрен, әлбиттә, юллай ы, тикшерә е бар. Башҡортта хатта сардар Искәндәр-Александрҙың башҡорт еренә яу сәфәре, ундағы мәш үр Аҡташ ханды буй ондорорға тырышып, бихисап ғәскәр килтереүе хаҡында ата-бабаның хәтер-ҡомартҡы ы ла аҡланған. Көслө булған Аҡташ хан иле, даны йыраҡтарға, Төрки донъяына, бөйөк Мысырға барып еткән... Шуға, оҙаҡ йылдар серәш ә лә, тамам еңә алмаған Искәндәр Аҡташ ханды, кире үҙ иленә ҡайтып китергә мәжбүр булған.

Шунан Артыр бей ҡапыл йәнләнеп өҫтәй ҡуйҙы:

– Бына ин: "Искәндәр мөгөҙлө генә түгел, ә ҙур ҡолаҡлы ла булған", – тинең. Ә белә еңме, шәреҡ ҡисса-хикәйәттәренә ҡарағанда, нәҡ йәджудж менән мәджудждарҙы урындағы халыҡ бөйөк Искәндәргә "оҙон ҡолаҡлылар" тип таныштырған бит. Йәнә е, был халыҡ кейем киймәй, яланғас тәндәрен ошо ҡолаҡтары менән ҡаплап йөрөй. Бына мин уйлап торам: уларҙың ҡай ы ы оҙон ҡолаҡлы: йәджудж, мәджудждармы, әллә Искәндәр үҙеме? Атта оҫта йөрөүсе ҡыйыу был халыҡты асыҡ яуҙа еңә алмағас, хурлыҡтан ҡасып, бөйөк сардар үҙ гона ын, бәлки, уларға

тағып киткәндер?

Артыр бейҙең күҙҙәре мут ялтырауын күреп, Фалис заде унынң шаяртыуын аңланы, үҙ көрәштереп торманы. Күреп йөрөй ул, был мөслим башҡорт илселек сәркәтибе ибн Фаҙландың урындағы ҡәүемдәргә кәм етеүле ҡарашын өнәп бөтмәй. Хатта юҡ-юҡ та Әхмәт хәҙрәттәре теленән үгенеүгә оҡшаш ысҡынған "йәджудж", "мәджудж" тигән үҙҙәргә лә битараф ҡала, уларға яман үҙ тейҙертә е килмәгәндәй хатта. Барса шәреҡ халҡы бәддоға уҡыған йәджудж, мәджудж халыҡтарын яҡлағандай, әле лә ул: "Шундай оҙон ҡолаҡтары булғас, нисек донъя хәлдәрен ишетмәй-белмәй ҡырағай хәлдә йәшәрҙәр икән? – ти, бәхәсләшкәндәй. – Искәндәрҙең баштан-аяҡ ҡоралланған, донъяны яулап алған ҡеүәтле тимер ғәскәрен дә, кейемдең ни икәнен дә белмәй яланғас йөрөгән ҡырағайҙар таш балта йә таяҡ менән генә ҡыуып ҡайтармағандарҙыр бит? Тимәк, уларҙың ҡоралдары ла Рум ғәскәрҙәренекенән ис тә кәм булмаған, камилыраҡ та булма а әле..."

Төрлө ил каруандары менән бар донъяны тиерлек арҡыс-торҡос йөрөп сыҡҡан Фалис заде белә: күсмә тормош менән көн күреүсе халыҡтар өсөн тимер диуар ымаҡ сиктәр юҡ. Иран ҡәүемдәре лә, малсылыҡ менән шөғөлләнгән бихисап башҡалар ымаҡ уҡ, борон-борондан Рум диңгеҙенең төньяғынан алып Алтайға әм Көнсығыш Төркөстанға, Көньяҡ Урал битләүҙәренән Иран Ялпаҡ таулығына саҡлы ғәләмәт киң арауыҡтарҙа, ик еҙ-сик еҙ киңлектәрҙә мал үрсеткән, кәзә, арыҡ, ыйыр көтөүҙәре йөрөткән. Улар ара ында нишләп ошо башҡорттар йә хатта әлеге йәджудж менән мәджудждарҙың варисҭары булмаҫка тейеш уң? уныраҡ, ер эшенә әүәҫләнеп, башҡорттар ултыраҡ тормошҡа күсә башлағас, ошо үҙҙәре мал йөрөткән киңлектәрҙә уларҙың ҡәлғә-ҡалалар төҙөүҙәре хаҡында ла мәғлүмәттәр бар ҙа ба а!

Фалис заде юл күр әтеүсе булып бер бөгөн генә йөрөмәй, былар хаҡында элегерәк тә ишеткәйне ул. Сәфәр мәлендә ораштырып та ҡараны, тик аман бер нәмәне асыҡлай алмай әле ул. Оҡшашлыҡтар аҙым айын, бындағыларҙың күптәре, нәҡ ирандар ымаҡ, Раббыны ла "Хоҙай" ти. Юҡтан ғына түгелдер был, башҡорттарҙың был тирәләге тармағы арйәндәрҙең берәй сыбыҡ осо түгелме, тип нисек уйламаҫ ың. Был хаҡта илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт менән дә өйләшеп ҡарағаны булды. Тик уны ы, ниңәлер, башҡорттар тура ында ошондай фараз үҙҙәр ишетке е килмәй. Күрә ең, үҙе лә әлегә уйҙарының осона сыға, фекерҙәрен бергә берләштерә алмай яфалана. Урындағы халыҡтарҙың затлы булыуҙары Фаҙлан улы Әхмәттең зитына тейә, йыш ҡына үҙ-үҙенә хужа була алмай ҡыҙып китә, уйламаған фекерҙәр ысҡындыра... Шуның менән илселектең именлеген хәүефкә ҡуйыуын аңламаймы икән ни үҙе?

***

уңғы көндәрҙә Артыр бей Фалис заденең берҙән-бер яҡынына әүерелеп бара. Теге өйләшеүҙән уң, күрә ең, үҙ-ара ышаныстары ла арта төштө. Үҙе лә башҡорт булғас, был тарафтарҙы унан да яҡшы белгән кеше юҡ. Әлбиттә, Төрк Тәкин дә күпте күргән. Ләкин ул үҙенән түбән Фалис ымаҡтар менән бик өйләшеп бармай, текәрәк кеше. Ә Артыр бей ғилеме менән Төрк Тәкиндән өҫтөн тор а ла, үҙен ябай тота, йылмайып өйләшә, инәлтмәй, белеме менән тәкәбберләнмәй, орауҙарға ихлас яуап ҡайтара. Күп нәмә ҡыҙыҡ ындыра Фалисты ла, гел осрап тормай уға Артыр бей ымаҡ хазина андыҡтары.

Әле килеп Фалис Артыр бейҙән башҡорттар менән иранлылар ара ындағы үҙе күҙәткән, әлегә яуаптарын таба алмаған уртаҡлыҡтар хаҡында ораны.

– Ғәжәпләнә е юҡ, – тине быны ы. – Төркиҙәр Иран халыҡтары менән боронборондан бергә йәшәгән, хатта өлөшләтә бер халыҡты тәшкил иткән, диндәре лә уртаҡ булған. Быны төркиҙәрҙең килеп сығыуҙары хаҡындағы бик күп мәғлүмәттәр ҙә раҫлап тора.

"Олуғ Хан Ата Битексе" тигән бик боронғо төрки телле тарихнамә бар. Уны Мысыр төрки зыялы ы ижад иткән. ижрә 211 йылында Жәбрил Бәхтишыу тигән икенсе берәү уны фарсы теленә лә ауҙарған.

– Осратҡаның булманымы? – тип ораны көтмәгәндә Артыр бей Фалистан ошо хаҡта.

Быны ы ундай китапты белмәй ине, башын сайҡаны.

– Бына шунда тәү кеше хаҡында ла мәғлүмәт бар, – тип дауам итте Артыр бей.– Көслө ямғырҙарҙан уң хасил булған балсыҡ ҡатыш батҡаҡлы шыйыҡса, йәнә е, Ҡаратау тигән тау мәмерйә енә ағып төшә. Унда ошо лайлалы ҡушылма кеше кәүҙә енә оҡшаш тар ярыҡтарға эләгә. Туғыҙ ай ҡояш әм ел туҡтау ыҙ иркәләй торғас, шунан әҙәм бала ы ярала. Мәмерйәләге сатраш ярыҡтар, күрә ең, әсә ҡарыны вазифа ын үтәгән. Тағы бер аҙҙан ошо рәүешле ҡатын-ҡыҙ енесе лә барлыҡҡа килгән.

Ләкин ғиллә е бына ниҙә: әлеге ут, ыу, ер әм ауанан яратылған ир менән ҡатын енесле тәү кешеләр үҙ-ара өйләнешкәс, уларҙан ярты ы ир, ярты ы ҡатын-ҡыҙ булған ҡырҡ бала донъяға килгән. Үсеп еткәс, улары ла үҙ-ара өйләнешкән. Донъяла хәҙер йәшәп ятҡан күп анлы халыҡтар бына ошо ҡырҡ бала вариҫтары, имеш.

– Быңдай фараздар күп халыҡта, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, бар. Уларҙың бере ендә әйтелгәнсә, Әҙәм менән ауа донъяға бере е ул, икенсе е ҡыҙ булған етмеш игеҙәк килтерә. Өйләнешеп, улар донъяны башлап ебәрәләр. Күрә ең, был имеш-мимештәрҙең сығанаҡтары ла уртаҡ.

– Фарсыларҙың маздасылыҡ тәғлимәтен хәтерләй ендер... – тине Артыр бей, көтмәгәндә үҙ ағышын үҙгәртеп.

"Маздасылыҡ" тигәс, Фалис заде ағарынып ҡуйҙы: Артыр бей әллә юрамал уны ынамаҡтан орайммы? Фалис заде хәҙер күптән мосолман, мәжүсиҙәр динен нимә тип хәтерләргә тейеш уң әле?

Әңгәмәсе енең икеләнеүҙәрен күреп торған Артыр бей уны оҙаҡ яфаламаҫҡа булды.

– Ана шул маздасылыҡтың Заратушра пәйғәмбәре тәғлимәтендә лә тәү кешеләр – Машйа менән Машйана – ҡауышҡандан уң туғыҙ ай үткәс, уларҙан игеҙәк малай менән ҡыҙ тыуа. Аҙаҡ улар донъяға тағы ете пар игеҙәк бүләк итә. Кешелек тарихы, тормош ана шуларҙан башлана...

–Тимәк, айырма тик бары анда ғына, – Фалис заде тынысланғайны инде, иҫе китмәгәндәй генә өйләнде: – Бере ендә – егерме, икенсе ендә – утыҙ биш, өсөнсө өндә – игеҙ пар... Ә ғәмәле нимәлә уң?

– ин тағы бер айырманы онота ың, – Әйткәндәрен йә өт кенә үҙенсә иҫәпләп сығарыуын аңлап, Артыр бей йылмайып ҡуйҙы. – Иң ҙур айырма шунда: төркиҙәр ҡомартҡы ы ҡасан яҙылыуын әйтә алмайым, әр хәлдә, беҙҙең эра баштарынан да элек түгелдер, башҡорттарҙың әм башҡаларҙың ҡары үҙҙәрендә лә шулай. Ә бына иран-фарсыларҙа был бик күп әүәл ижад ителгән. Сөнки Апастакты бар иткән Заратуштра пәйғәмбәр беҙҙең эраға тиклем VII–VI йөҙйыллыҡтарҙа йәшәгән. Бына шунан уйла инде: кем кемдән мәғлүмәт алған...

– Уны ы шулайҙыр, тик ин миңә шуны әйт, – Фалистың ҡыйыулығы ла, ҡыҙыҡ ыныуы ла арта барҙы, шикелле. – Әллә ҡасанғы фарсы тәғлимәте йәджудж, мәджуджлар тарафына нисек килеп эләкте икән?

орау бер ҡатлы ымаҡ тойол а ла, Артыр бей яуап бирергә ашыҡманы.

– Үҙемдең дә был хаҡта уйланғаным булманы түгел, – тине бей бер аҙҙан. – Йөрөгән ерҙәремдә Заратуштра пәйғәмбәргә эйәреүсе маздасы руханиҙарҙың төрлө өн күрергә тура килде. Ә маздасылар, ул тарафтарҙа ислам хакимлыҡ ит ә лә,

Иранда ла, индостанда ла, башҡа илдәрҙә лә етерлек. Бына шулар минең сығышым ҡайҙан икәнлекте ишетеү менән: " ин, Артыр бей, изге урындарҙы ситтә түгел, ә үҙ илеңдә, Уралда, эҙлә, шунда ҡайт, бында йөрөмә. Ундағы әр төрлө хазина тулы бейек-бейек тауҙар – донъя кендеге, Раббы әм уның пәйғәмбәре үҙ иткән төйәк. Ҡайт, ырыуҙаштарыңа шул изге төйәкте яман күҙҙәрҙән ҡурсаларға ярҙам ит!"– тиерҙәр ине. Ҡыҙыҡ ынып, аҙаҡ мин Апастак китаптарын да уҡып сыҡтым. Ғәжәпкә ҡаршы, унда ла Урал тарафына хас тәбиғәт үрәтләнешен, донъя кендеге бейек тауҙар теҙмә ен, хатта башҡорттар "Яйыҡ" тип йөрөткән "Джаик" даръя атама ын да осраттым. Тағы бына нәмә ҡыҙыҡ: үҙенән уң киләсәк башҡа дин пәйғәмбәрҙәре ымаҡ, Заратуштра ла үҙ илендә яҡлау тапмай, ашығыс ҡасып китеп, ҡайҙалыр йыраҡ бер илдә, тау мәмерйә ендә күп ғүмерен уҙғарырға мәжбүр була.

– Шул ил Башҡорт тауҙары булған, тип әйтергә теләй еңме? – Фалис задэнең тауышында асыҡтан-асыҡ көлөү ауаздары ишетелгәндәй булды.

– ы-ы, ундай ихтималлыҡ та юҡ түгел, – Артыр бей төрттөрөүҙе аңламағанға алышты. – Әле бынан өс мең йылдар әүәл дә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе арйән ҡәбиләләре Рум диңгеҙенең төньяҡ ярҙарынан Алтайға, Көнсығыш Төркөстанға, Урал тауҙарынан Иран ҡалҡыулыҡтарынаса булған арауыҡтарҙа күсеү күскәндәр, ер эшкәрткәндәр, аралашып йәшәгәндәр... Иран ҡәбиләләре өсөн Көньяҡ Урал ис тә йыраҡ, ят ерҙәр булмаған...

– ин әйткән китапта Заратуштра ҡайҙа ҡасып ятҡан? – тине Фалис заде баяғыса сағыулы. – Уны ы әйтелмәгәнме ни?

– Әйтелгән, ниндәйҙер "Виштасп" тигән илдә йәшәгән ул. Ләкин Виштасп тигән ил тарихта теркәлмәгән. Уның урынына, Апастакта әйтелеүенсә, Зароастризм Раббы ы Ормазд- Ахура Мазда донъяны "Эранвеж" атамалы илдән я ай башлай. Апастакта был ил бына нисек тасуирилана: "Унда ун ай ҡыш, тик икәү е генә йәй". Үҙең уйлап ҡара, Урта Азияның йыл әйләнә е йылы көндәренә тура киләме ошондай тәбиғәт?

– Ҡыҙыҡ былар, бик тә ҡыҙыҡ, – Быны ын Фалис заде ихлас әйтте. – Күпме донъя гиҙеп, ис тә ишеткән юҡ ине...

– Ә... иң ҡыҙығын әйтмәгәнмен әле, – Артыр бей Фалис задегә ҡарап, хәйләле күҙ ҡыҫып алды. – Апастактың "Вендидат", йәғни "Дейеүҙәргә ҡаршы ҡанундар" тигән китабында Раббы Ормазд үҙенең тәү кеше е Йимаға, ябырылып килгән үлемеселе ыуыҡтарҙан аҡланыу, ер йөҙөндәге тереклектәрҙе ҡотҡарып ҡалыу маҡсатында, таш әм балсыҡтан ябыҡ ҡала-нығытма төҙөргә бойора. Бере е эсендә икенсе е урынлашҡан өс божра рәүешендә ҡоролорға тейеш була ул ҡоролма. Йима үҙенең Раббы ы ихтыярын үтәй, ундай ҡаланы төҙөй. Ҡай ы бер тарихи яҙмаларға, йәнә маздасы руханиҙарға ышанғанда, ул ҡала бына беҙ йүнәлгән тарафтарҙан йыраҡ түгел ерҙә ятыуы бик тә ихтимал. Эҙләп барғанда табыуы әллә ни ҡыйын булмаҫ ине. Сөнки ҡәлғә-нығытманы уратып алған йәлпәк ҡалҡыулыҡтарҙың бере е Зароастризм Раббы ы исеме менән "Аҡыл тауы" тип йөрөтөлә икән. "Ахура Мазда" – Аҡыл Раббы ы, Аҡыллы раббы тип тәржемә ителә бит инде. Күрә е ине, ҡаланың урыны бул а ла ҡалғандыр, бәлки. Тик беҙ ул тауҙарҙы ситләтеберәк үтәбеҙ шул...

Был үҙҙәрҙән Фалис заде хатта икерә яҙҙы:

– Ә ниңә уны Фаҙлан улы Әхмәт хәҙрәттәренә әйтмәй ең? Быны ул белергә тейештер ҙә ба а?!

– Юҡ, юҡ, – тине ниңәлер хафалы ашығып Артыр бей. – Уның вазифа ы мәжүсиҙәрҙең ниндәйҙер ҡаласығын эҙләп йөрөү түгел, ә Болғарға хәлифәт әмерен еткереү, ислам тәғлимәтен таратыу...

Шунан Фалис задене тағы иҫкәртә ҡуйҙы:

– Был хаҡта артыҡ шауламай тороу яҡшыраҡ булыр, тип уйлайым. Файҙа килтермәҫ, ә үҙеңә ҡарата шик уятыуың бар...

***

Уйланып ултырып, Фалис заде онотолоп киткән, илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт башҡорттар менән бәхәстә яңғыҙы ҡалып бара икән дә. Ана, бер башҡорт нимә ти:

– еҙҙә ҡатын-ҡыҙ бикле йәшәй, ирҙәр янына сыҡмай йә ҡара пәрҙә бөркәнеп йөрөй, ә ҡай ы берҙә ҡыҙ балаларҙы тыуыу менән үлтереп тә торалар, тиҙәр. Хаҡмы шул? – ороу бары ы өсөн дә ҡыҙыҡ инеме, яуап көтөп күптәр Фаҙлан улына уҡталды. – Ҡатын-ҡыҙ үлемдән ҡал а ла, йөҙөн асырға ла ҡурҡып, шулай ҡояш күрмәй йәшәйме ни еҙҙә?

"Был башҡорттар ғәрәптәр тура ында ниҙер ишеткән булыр, – тип уйлап алды Әхмәт Фаҙлан улы. – Тик дәүерҙәрҙе генә бутаған. Исламғаса заманда, ысынлап та, ир кешегә бала ы тыуыуы хаҡында хәбәр ит әләр, ул башта аҡ ҡына орай торған булған: "Кем?" Әгәр улы тыу а, әлбиттә, шатланған, әгәр "ҡыҙ" ти әләр, яҙыҡ эш эшләгәндәй, мыҫҡыл ителгәндәй, барса дуҫ-иш әм таныштарынан ҡасып йөрөгән. Ә берәүҙәр хатта үҙ ҡулдары менән ҡыҙыҡайын терелә й ергә лә күмеп ҡуйған... Хәйер, әле лә донъяла аҙмы халыҡ ҡатындарға ирҙәрҙең гона ына сәбәпсе, аҙҙырыусы зат, яуызлыҡ сығанағы, иблис тоҡомо итеп ҡарай ҙа ба а. Шуға ла Фаҙлан улы Әхмәт башта: "Кире енсә, ислам элек ҡол булып йәшәгән, тауар ымаҡ атылып йөрөтөлгән ҡатын-ҡыҙға ирҙәр менән тиң хоҡуҡ, азатлыҡ килтерҙе, – тип ғәҙәти генә яуапламаҡсы булғайны. – Ҡөрьәндә "Ҡатындар" тигән айырым сүрә индерелеүе, унда, ирҙәр кеүек, уларҙың да белем алыуға, фән, сауҙа, иҡтисад эштәре менән шөғөлләнеүгә хоҡуҡлы булыуҙарының әйтелеүе ошо хаҡта өйләмәйме ни?" Тик шунда үҙҙәренән йыраҡ түгел кемделер күреп, ҡапыл фекерен үҙгәртте:

– Ҡояшҡа күренәйем тип... анау ханым ымаҡ асып ебәрергә кәрәкме ни? – тине Әхмәт, сабыр етдилеген боҙоп, зә әр йылмайҙы. Ә башҡалар, ирек еҙҙән, уның ул бармағы төбәлгән яҡҡа ҡараны. Ә унда өҫтөнә ыбайлыларса киң, ҡыҫҡа күлдәк кейгән йәш ҡатын аяҡтарын үтә иркен айырып ебәргән дә бер ҡулы менән тубығында ике-өс йәшлек бала ын өстәтә, икенсе е менән асыҡ ҡалған сат-бот төбөн тырнап маташа... Быны күреп, түңәрәктәгеләр ҙә көлөп ебәрҙе.

– Дала беҙҙе иреклеккә өйрәтә, – тине шунда урта йәштәрҙәге ир.– Йыш ҡына күҙ күреме алыҫлыҡтарҙа бер үҙең ҡала ың. Кемдән тартынырға? Тәбиғәт балалары бит, аттар, арыҡтар, ыйырҙар кеүек тәбиғи йәшәйҙәр. Ана, күрә еңме? – тип көтмәгәндә йылмайып, яҡында ғына йәш бейәне өйөрөп йөрөп, ҡапыл арт аяҡтарына баҫып тороп ҡаплаған ажар айғырға ымланы. – Бер ҙә эргәлә генә мосолман илселәре, олуғ хәҙрәттәр күҙәтеп ултыра тип тормай. Уға тик үҙ эше генә эш... Тик бының боҙоҡлоҡ, аҙғынлыҡ менән бер ниндәй уртаҡлылығы юҡ, – тип өҫтәүҙе кәрәк тапты тағы. – Енси боҙоҡлоҡҡа хөкөм ҡаты беҙҙә. Эйе, беҙҙә лә...

Был үҙҙәрҙән уң илселәр ара ында ултырған Артыр бей ниңәлер ҡапыл тулҡынланып, ағарынып китте. Фаҙлан улы Әхмәт быға иғтибар итмәне. Белә ул, бәшнәктәрҙә ишеткәйне. Йәнәшә үҫкән ике ығылмалы, беше ағастарҙы бау менән ергәсә бөгәләр ҙә зина ҡылған гона эйә енең ике аяғын ошо ике ағас осона бәйләп ҡуялар. Ҡотоң осор: ағастарҙы ысҡындырып ебәрәләр.

Дала ҡатын-ҡыҙҙарының ҙур ирек менән файҙаланыуын, ирҙәр алдында үҙҙәрен ирәүән тотоуын Фаҙлан улы Әхмәт, әлбиттә, быға тиклем дә ишетә йөрөнө. Бала саҡтан уҡ малайҙар менән бергә үҫеп, улар менән бергә уҡ атып, ыбай

йөрөп, хатта ир-егеттәр менән бил көрәштәрендә ҡатнашып, ҡыҙҙар ҡыйыу, көслө булып үҫә. Күсмә тормош, дала шарттарында шун ыҙ мөмкин дә түгел. Йыш ҡына ҡатын-ҡыҙға яуға киткән йә үлеп ҡалған ирҙәрен алмаштырырға, балалар үҫтерергә, хужалыҡты етәкләргә, малдарҙы, көтөүлектәрҙе ҡайғыртырға, кәрәк икән, хатта ҡорал тотоп ырыу биләмәләрен баҫҡынсыларҙан аҡларға ла тура килә. Был тәңгәлдә күпмелер хәҡиҡәт тә юҡ түгелдер әлеге бәхәскә ынтылып торған мәжүси башҡорт аңында. Ни әйт әң дә, мәғрибтә лә, мәшриҡтә лә ҡатын-ҡыҙ бындағылай ирек татығаны юҡтыр, моғайын. Уларҙы күберәк кәм етергә тырышалар, кешегә анамайҙар. Ана, хатта Тәүратта ла ҡатын-ҡыҙға "гона сүлмәге" тигән мө өр уғылған. Ислам шәриғәте лә, әйтә е юҡ, ҡатын-ҡыҙға ҡаты талаптар ҡуя. Ҡатын-ҡыҙҙың тубыҡтан юғары, беләҙектән ары ерҙәре асыҡ йөрөүе ғәфү итмәҫлек хәрәм анала. Ләкин быларҙы өйләп, аңлатып тороуҙан ни фәтеүә? Шуға ла:

– Көс, та ыл, ирек кешене бәй еҙлеккә, тотанаҡ ыҙлыҡҡа түгел, ә шундай уҡ юғары рухиәткә, сафлыҡҡа илтергә тейеш. Әҙәп, әхлаҡ, әхирәт хаҡында уйланыу фарыз. Ә белә егеҙме? – тип ҡапыл йәнләнеп китте Фаҙлан улы. – Йөҙ сырайын, тәнен ҡаплап йөрөү ғәрәптәрҙә барса ҡатын-ҡыҙға ла рөхсәт ителмәй. Был – өҫтөнлөк, дәрәжә, затлылыҡ билдә е. Азат, юғары даирә ҡатындары ғына файҙалана ала бындай хоҡуҡ менән. Шуның менән ят күҙҙәрҙән, бысраҡ ҡараштарҙан сафлығын, нәфислеген аҡлай. Ә бына ҡол ҡатындары, еҙҙәге ымаҡ, нисек теләй шулай йөрөй, хатта шәрә ҡал а ла бер үҙ юҡ...

Быны ын белмәйҙәр инеме, дәғүәселәр бер аҙға тын ҡалды.

Шуның менән бәхәс тамамланған да булыр ине, тик баяғы башҡорт ҡына әллә үҙен аҫта ҡалдырырға теләмәне, әллә "ҡол ҡатындар" менән сағыштырыуҙы оҡшатманы:

– ы, ы... – тип мәғәнәле йылмайып тамаҡ ҡырып алды ла ғорур, ҡырыҫ ығымта я аны:– Ана шул "тәнен ҡояшҡа асҡан" ҡатын бит инде кисә генә Фалис әфәнденең ҡотон алған "башкиҫәр!" Кәрәк саҡта улар ысынлап та яугир ҙа була, үҙ ил-йортон сит-яттарҙан ирҙәрҙән кәм яҡламай!

Башҡорт ауыҙынан көтмәгәндә үҙ исемен ишетеп, Фалис заде ҡапыл ҡаушай төштө. Унан тотлоға-тотлоға:

– Кем? Кем ти ул?– ти алды. – Кисә мине әсир итә яҙған яугир тимәксеме?

– Эйе, нәҡ үҙе!

– Булмаҫ! –Ҡысҡырып ебәргәнен Фалис заде үҙе лә иҙмәй ҡалды. – Ул бит ир кеше, яугир кейемендә ине... Арҡа ындағы уҡ- аҙаҡтарын да ап-асыҡ күрҙем!

– Кейеме икенсе бул а ла, үҙе кәнде шул инде, – тип йылмайҙы башҡорт. – Ҡатын-ҡыҙ кейемендә ыбай йөрөү ис тә ҡулай түгел, бары ы ла ирҙәрҙекен, яугир кейемен кейә. Ә ҡоралға килгәндә ... Ун ыҙ дала буйлап беҙҙең бала-саға ла сәфәр сыҡмай...

Ғәрәп илселегенә юл күр әтеүсе Фалис уҙаман, ышанмағандай, тағы диҡҡәт менән бала ын иркәләп, ярай ы уҡ иркен таралып ултырған әлеге ҡатынға ҡараны. Оҙаҡ ҡарап торҙо, күрә ең, төҫмөрләне, ҡуйы ҡыҙарып ҡуйҙы, бер ни өндәшмәне.

... Эйе, кисә булды был хәл. Фалис үҙе ғәрәп булма а ла, сәйәхәтсе мосафир Фаҙлан улы Әхмәт, уны, нишләптер, яҡын күрә, төрки дала ына инер алдынан юл күр әтеүсе сифатында ғына ялла а ла, серҙәрен дә унан йәшермәй. Парсылар төркиҙәр менән аралашып йәшәй, бер-бере ен яҡшы белә, тип тә уйлайҙыр. Улай ғына ла түгел, Әхмәт Фаҙлан улының үҙенең дә тамырҙары иранлы парсыларға барып тоташа, тигән имеш-мимеш ишетеп ҡалғайны Фалис заде. Тик әлегә хәтлем Әхмәт хәҙрәттәренән орашырға ғына ҡыйыулығы етмәй. Ошолар сәбәпсеме, башҡамы, әммә тирә-яғындағыларға бик үк ышанып бармаған Әхмәт ибн Фаҙлан

сәфәр буйы уны үҙ эргә енән ебәрмәне лә тиерлек. Бәлки, фарсы Фалиста ҡанҡәрҙәшен тойомлап та яҡынлаштырғандыр уны илселек сәркәтибе? Ә тел яғынан бер ниндәй тотҡарлыҡ юҡ, ғәрәп телен Фалис парсыға ҡарағанда ла яҡшы белә. Ислам байрағы аҫтында ғәрәптәр, башҡа илдәр ымаҡ, Иранды ла буй ондорғас, ике йөҙ йыл сама ы барса мәҙәни тормош та ғәрәпсәгә күсә. Хәҙер Саманый тоҡомло ша инша тар Иран ҡәүемдәрен йәнә бөйөк дәүләткә тупланы, Рудаки ымаҡ мәш үр шағирҙар туған телдә йәнә бөйөк шиғриәт тыуҙырҙы. Әммә ғәрәп теле лә ис тә юғалырға теләмәй, әр тарафта парсы теле менән ярыша, күп кенә ҡәләм оҫталары, өйрәнелгәнсә, ижадтарын ғәрәп телендә дауам итә тора. Фалис үҙе лә телә ә парсы, телә ә ғәрәп була ала. Ләкин ислам милләт айырымлыҡтарын түгел, "Мөхәммәт өммәте" тигән дөйөм халыҡты ғына таный. Шуға хәҙер ин ғәрәпме, парсымы, төркиме йә башҡамы, уны ы әллә ни мө им түгел, ин — мосолман, Мөхәммәт өммәте мөслиме. Шул еткән. Парсы Фалис заде лә хәҙер үҙен парсымы, ғәрәпме тип айырып тормай, иң тәүҙә ул — мөьмин мосолман, бына нимә берләштерә төрлө ҡәүем кешеләрен бер өммәт-милләткә. Сәфәр барышында Фалис заде, мосолманлығы арҡа ындалыр, Әхмәт хәҙрәттәренең ышанyслы кеше енә әүерелде.

Кисә ибн Фаҙлан үҙенең юл күр әтеүсе ен саҡырып алды ла, яҡын кеше е менән серләшкәндәй, аҡ ҡына:

— Иғтибар итә еңме? — тине.— Бындағы башҡорттар артыҡ йәнләнеп китмәнеме? Иртәнән кискәсә ҡораллы ыбайлылары сыуала. Ана, теге элемтәгә ҡуйылған башҡорт та ҡайҙалыр сығып сапты, ә беҙҙең ғәскәрҙәрҙе юрамал артҡа, алыҫыраҡ ҡуйҙырҙылар. Мәкер юҡмы бында? Тирә-яҡты күҙәтеп килергә ине, берәй ҡараңғы төбәктә ғәскәр туплап, киҫәк кенә килеп баҫмаҫтармы?

Илселек сәркәтибе ҡушҡанды тыңлап, элекке көн ошо маҡсат менән сығып киткәйне парсы Фалис. Байтаҡ ер ҡыҙырҙы, тик тирә-яҡта ғәскәр түгел, яңғыҙ ыбайлы ла осраманы. Шуға ирәйеп тынысланды, йәшел келәм кеүек күпереп ятҡан тигеҙлектәр, бәрхәт йәшеллеккә төрөнгән йәлпәк убалар үтте. Атын ҡыуманы, үҙ иркенә ҡуйҙы, кеше ҡулы теймәгән, ат тояғы иҙмәгән яҙғы дала ауа ына кинәнеп, уйланып барҙы. Үҙ яйына ҡуйғас, аты ла башын эйеп, ара-тирә үлән ялмаштыра-ялмаштыра бара. Бындағы утлы аҙыҡ, күрә ең, уға бик оҡшай. Ошондай йыраҡ сәфәрҙәр, өнәренә ярашлы, ҡабатланып тор а ла, йәшәгән ере Джурджанияны ныҡ ағына Фалис уҙаман. Унда бейек тауҙар ҡуйынында бәләкәй генә балсыҡ өйө, унын эргә ендә селтер арыҡ менән уғарылған кескәй генә емеш баҡса ы ла бар. Тик бындағы кеүек ҡотороп үҫкән йәшеллек кенә юҡ, тирә-яҡ ҡом да мәте, мәте лә ҡом. Нимәлер үҫтерәм ти әң, күпме ыу табырға кәрәк. Ә бындағы үҫемлектәр шундай утлы, сағыу ҡояш яҡты ында гәлсәр күҙәнәктәреләй ем-ем итеп тора. Бал еҫе бөркөлгән сәскәләр, хуш еҫ аңҡыған үләндәр... Шуға ҡарап ибн Фаҙландың башҡорттарға ҡырыҫлығын да аңлағандай Фалис парсы. Көнсөллөк сире ҡағылманымы икән ғәрәп илсе енә? ыуыҡтар үтеп, яҙ башланғас, бындағы тәбиғәттең шундай дәррәү уяныуын, тирә-яҡ хозурлығын юл буйы күҙәтеп килә, йөҙө ҡараңғыланып уйсанлана бара. Бындағылай бай биләмәләргә нишләп Алла үҙе ҡабул иткән, донъяла тәү ҡат Раббы йорто — Изге ҡәғбәне төҙөгән ғәрәптәр түгел, ә ошо хозурлыҡтың ҡәҙерен белмәгән ҡырағай, бысраҡ мәжүсиҙәр хужа булыуына күңеле әрнейҙер, бәлки. Фалис белә: ис тә көнләшерлек түгел исламлы ғәрәптәр яҙмышына ла, Ғәрәбстан ярымутрауын арҡырыға ла, буйға ла гиҙеп сыҡҡан кеше бит әле. "Ғәрәптәр иле", "Ғәрәптәр утрауы" тип йөрөтәләр, "утрау" тиҙәр, сөнки, ысынлап та, был биләмәләрҙең әр тарафы тиерлек ыу донъя ы: Ҡыҙыл диңгеҙ, инд океаны, Фарсы ҡултығы, Үле диңгеҙ... Йәнә Тигр, Ефрат,

Иордан йылғалары...

Ләкин әр яҡлап ыу менән уратып алыныуға ҡарамаҫтан, Ғәрәп ярымутрауы йәшәү өсөн ис тә уңайлы түгел, уның күп өлөшөн ташлы тауҙар, ырланып ярылып ятҡан таҡырҙар, сүллек әм ярым сүллектәр тәшкил итә. Үҙән-тарлауыҡтар, ҡорғаҡ ып ятҡан ыу ыҙ ерҙәр... Төньяҡ-көнбайыштан көньяҡ-көнсығышка табан Ҡыҙыл диңгеҙ буйлап Хиджаз тауҙары уҙыла, Фарсы ҡултығы тирә ендәге өҙәк тауҙарҙы ла ташлы дала, ирәк-мирәк йәшеллектәрҙе ярым сүллектәр уратма-ы алмаштыра. Арыраҡ, төньяҡҡа табан Сүриә, Исфуд, Дахъя сүллектәре башлана. Унда әҙәмсә йәшәү мөмкин дә түгел, тәүлек әйләнә енә тиерлек күктә эленеп торған аяу ыҙ эҫе ҡояш аҫтында барса тереклек ҡатып-янып бөтә. Тик ҡыш айҙарында ғына, ҡойма ямғырҙар үткән хәлдә, ара-тирә бында ла йәшеллектәр баш төртә...

Ғәрәп утрауының тик көньяғында, инд океаны тирә ендә генә яуым-төшөм йыл әйләнә енә була, шуға ла бында Оман, Йемен, Хиррамаут кешеләре боронборондан ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән. Хәйер, Ғәрәп ярымутрауының сүллек, ярым сүллектәре лә, әлбиттә, буш ятмаған, йән биргәнгә Раббылар йүнен дә күрәткән. Ғәрәп ҡәүемдәре ундай ерҙәрҙә күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгән, ҡайҙа тәбиғәт шарттары әйбәтерәк, шунда кәзә, арыҡ көтөүҙәре менән бергә күсенеп йөрөгән. Был көтөүҙәр ғәрәптәр өсөн ит аҙығы ғына түгел, ә ҡоро сүллек шарттарында ыу ын ҡандырыу сара ы — өт шишмәләре лә булған. Бигерәк тә дөйә ҡотҡарған уларҙы. Оҙаҡ ваҡыт ыу ыҙ йәшәй алған был әр еҙ хайуан йыл әйләнә е ыуын ҡандырыр өт биреп торған. Алла тары дөйә бүләк иткән изге ғәрәптәргә, дөйәләре булма а, күсмә ғәрәптәрҙең күбе е сарсап ҡырылып бөтмәҫ ине, тип кем әйтер? ыуға сарсай, ыу ыҙ интегә инде Ғәрәп иле, Алла ҡөҙрәте менән генә көслөләрҙер ҙә улар, бәлки.

Ғәрәп риүәйәттәренә ҡарағанда, хатта изге Мәккәләге Раббы йорто — ҡәғбә ергә ендәге Зәмзәм шишмә е лә исламға тиклем үк мөғжизә арҡа ында ғына барлыҡҡа килгән. Тәү атабыҙ Ибра им пәйғәмбәр менән бәйләйҙәр уны. Имештер, уның ҡатыны Сарра, бала таба алмағас, иренә Хәжәр исемле ҡол ҡатынды бүләк итә. Ә уны ы оҙаҡламай Исмәғил исемле ул таба. Тик Раббыларға уңлап бул а ла Сарраның да бала орап ялбарыуҙары барып етә, ҡартайып бөт ә лә, ила иҙар ярҙамы менән ул да донъяға Исхаҡ исемле ул килтерә. Ләкин тиҙҙән ике көндәш ҡатын ара ында аяу ыҙ көнсөллөк уты ҡабына. Сарра иренә Хәжәрҙе бала ы менән кеше йәшәмәгән берәй ергә алып барып ташларға ҡуша. Ибра им, үҙе теләмә ә лә, сабыйы менән Хәжәрҙе Раббылар күр әткән ерҙә — Ғәрәп ярымутрауының Мәккә тирә ендәге эҫенән көйөп янған ҡот оҙ ҡаялар, йән еҙ түбәләр ара ында күрәләтә үлем ҡосағына ҡалдырып китергә мәжбүр була. Улын ҡотҡармаҡ булып, әсә кеше аҡтыҡ хәленә саҡлы тирә-йүнде ҡыҙырып ыу эҙләй, тик бында уның әҫәре лә булмай. Ә уттай ҡыҙған ерҙә ятҡан сабый сарсауҙан үлем аянысы менән тыпырсынып илай, ҡороға сығарып ташланған сабаҡ кеүек сәбәләнә, кескәй үксәләре менән ҡорғаҡ ыған үлек ергә тибенә, әм ошо мәлдә — о, мөғжизә! — сабый тибенгән ер ҡуйынынан Алла ихтыяры менән ҡапыл көслө саф шишмә бәреп сыға! Бына шулай ҡотолоп ҡала изге әсә Хәжәр менән уның улы, уңынан ғәрәптәр тоҡомон башлап ебәреүсе ила и Исмәғил... Зәмзәм шишмә ен дә изгеләштерә аҙаҡтан ғәрәптәр, уны матурлап кәртәләп алалар, бөгөнгәсә ҡәҙерләп сафлығын да аҡлай киләләр... Эйе, ғәрәптәр илендә ыу табыу — үҙе бер мөғжизә. Ә бында?! Күҙ күреме киңлектәрҙә баш төрткән утлы, ҡуйы йәшеллек... Сыуаҡ көн булыуға ҡарамаҫтан, ауа дымлы... Ҡотороп үҫә барса тереклек...

...Уйҙарына бирелеп, Фалис заде мауығып киткән, тирә-яҡты ентекле күҙә-

тергә кәрәклеген дә оноткан. Капыл асылған күренештән ул койолоп төштө. Үҙ иркенә ебәрелгән аты уй ыулыкты үтеп, ниндәйҙер йәлпәк калкыулыкка килеп менгән икән. Калкыулыктың аръяк битләүен тултырып мал көтөүҙәре ибелгән, ә был яғындағы бейек убала, арттарак, Фалис заде үтеп киткән юлға якын ғына, ике ыбайлы какай баҫкан. Аралар ярай ы ук алыҫ бул а ла, аркаларындағы ук-аҙактары ап-асык күренә. "Башкорт бағауылдары!" тигән куркыныс уй телеп үтте унын мейе ен. Уба каплап торғанмы, әллә уйҙарына мөкиббән киткәнме, Фалис уларҙы күрмәй уҙған. Ә хәҙер уға артка ла юл ябык.

Ул да булмай, уба өҫтөндәгеләр ҙә уны күреп калды — бере е йә әт кенә атын шакара бороп, сигенеү юлын киҫеп, атын яр ытып сабып килә башланы. "Кемдәр булыр, нимә кәрәк уларға яңғыҙ юлсынан? — тигән уй борғосланы Фалисты. — Бәлки, унын кем икәнен белергә генә теләйҙәрҙер?" Шунда унын күңелендә капыл ибн Фаҙландың "Башкорттар төркиҙәрҙең иң уҫалы, иң яуызы, далала дошманын күр ә, башын киҫеп ала ла китә" тигән киҫәтеүҙәре яңғырап куйҙы. Ирек - еҙҙән күҙ алдары караңғыланды, быуындары йомшарҙы, ихтыяры ынды. Артка юл юк, тимәк, убаны ашатлап урарға тура килә... Фалис, үҙе лә көтмәгәндә, тыныс кына барған саптарына камсы менән ыҙырҙы, эйәренән йығылып калмаҫ өсөн ялына йәбешеп, урау юлдан сабып китте. Күпме юл йөрөй, әммә былай ук куркканы, ошоғаса ихтыярын юғалтканы юк ине әле, күрә ең, көтөлмәгәнлек каушатты, атын камсылай-камсылай кыуҙы Фалис. Унын касыуын күргән ыбайлы ла, сәмләнепме, өҙәңгеләренә баҫкан килеш эйәрендә күтәрелә төшөп, айт- айтлап уны кыуа, ниҙер кыскыра, эҙәрлекләй башланы. Бына-бына кыуып етер... Кыуып етер ҙә башын өҙә сабыр...

Фалис заде як-яғына карамай, дөп-дөп килгән ауаз ғына ишетә: әллә йөрәге, әллә эҙәрләп килгән ат тояғы... Килгән юлына кире төшөр өсөн анау текә убаны ғына урап сыға ы бар, менге аты бына тигән саптар, бәләкәй генә килбәт еҙ кыраҕай башкорт атына бирешмәҫ, иншалла, котолоу юлы якын.

Фалис заде атын шул түбәгә йүнәлтте. Ләкин өҫкә атылып килеп сыккас, убаның теге яғы текә яр икәнен, ә аҫта уба итәгендә генә ниндәйҙер яңғыҙ тирмә ултырыуын иҫләп калды: аяк аҫтында ғына упкын күргән яр ыу ат, өркөп, аяғүрә баҫты. Шул ук мәлдә алға ынтылған кәүҙә ен еңә алмайса, эйәренән кубарылып, меҫкен ыбайлы түбәнгә осто... Текә ярҙан тәгәрәй-тәгәрәй, аңын юғалтыр сиктә әлеге тирмә алдына ук килеп төртөлдө. Уны эҙәрлекләүсе, күрә ең, кыҫкарак юлды айланы: ерҙә яткан Фалис заде бер үк вакытта тиерлек үҙенең бите янында ғына бейеп торған ат тояктарын шәйләп тағы тетрәнде. Ләкин күтәрелеп карарға баҙманы, ергә ылашып-бөрөшөп ятыуын белде, күндәм генә елкә ен үлемесле кылыс ялкыны өтөүен, күкрәгенә өңгө йәки аяу ыҙ ук каҙалыуын көттө...

Ул арала шау-шыуға тирмәнән ир урта ы кеше килеп сыкты. Күрә ең, ул йәйрәп йөрөгән анау малдарҙы бағыусы ине. Эйәренән төшмәйенсә генә әлеге эҙәрлекләп килеүсе ыбайлы уға кырка ғына ниҙер әйтте, тамак төбө менән быны ы ниҙер яуапланы. Шунан тирмә хужа ы аман ерҙә яткан байғош янына килеп, уға үҙ кушты. Ләкин Фалис уны аңламаны. Быны күргән ир ак кына унын кулбаштарына кағылып, тороп баҫырға ишараланы. Аяғүрә күтәрелеү менән Фалис заде йә әт кенә ыбайлыға күҙ ирпеп алды: акал ыҙ шыма түңәрәк йөҙ, ынсыл асык караш... Фалис задегә ул, мыҫкыллағандай, көләм өрәп карап алды ла, атын кырка кирегә бороп, тағы йән-фарман сабып китте.

Ә тирмә хужа ы, урта йәштәрҙәге калын кәүҙәле ир, кулдарын кунаксыл йәйеп, Фалисты тирмә эсенә сакырҙы. Үҙен әсир тойған Фалис каршылашманы, тик эскә ингәс хужа кешенең сеүәтә менән кымыҙ оноуы ғына уны бер аҙ тыныс-

ландыра төштө.

Шулай тамамланды Фаҙлан улы ҡушыуы буйынса башҡарылған сәфәре. Был ваҡиғаны хәҙер башҡорттар ҙа, үҙенең юлдаштары ла белә, уға еңел түгел, юлдаштарының кәм етеүле ҡарашынан Фалис нисек ҡотолорға белмәй. Нишләйең, булғаны булған. Ул тағы бер ситтәрәк бала ын иркәләп, башҡалар алдында ис тартынмай яланғас оса ын тырнап ултырған әрпешерәк әлеге йәш бисәгә ҡыҙыҡ-ынып ҡараны: уны эҙәрлекләгән яугир кейемендәге ыбайлы ысынлап та шулмы? Түңәрәк йөҙ, ирҙәрсә мыҡты, көслө беләктәр, теремек ҡыйыу күҙҙәр... Фалис заденең ныҡыш күҙәтеүен ҡатын да иҙҙе. Йә әт кенә күтәрелеп ҡараш ташланы ла, иҫе китмәгәндәй, ғорур ғына көләм өрәп ҡуйҙы. Тертләне Фалис был юлы: кисәге көләм өрәү ҙә, бөгөнгө ө лә үҙ-үҙенә ныҡ ышанған көслө кешенең мыҫҡыллабыраҡ көләм өрәүе бит!

Уңай ыҙланыуҙан ул тағы ҡыҙарҙы, ләкин өндәшмәй ҡалыуҙы килештермәне.

— Беҙҙең ҡатындар үҙ йортон ир-аттарҙан кәм яҡламай, тинегеҙ , — тине аҡланғандай Фалис заде. — Ә ниңә ҡыуып еткәс, ул миңә ҡаршы ҡоралын ҡулланманы йә әсирлеккә алып китмәне?

— Беҙҙең халыҡ нисек кенә уҫал яугир булма ын, сәбәбен асыҡламайса, дала буйлап зыян ыҙ заттарҙы аулап йөрөмәй, дошман булма а әгәр... — тине башҡорттарҙың өлкәнерәге. — Әлеге осраҡта хатта дошман бул а ла әсир итә алмаҫ ине...

Шунан, башҡаларҙың ораулы ҡараштарын тойоп, өҫтәп ҡуйҙы:

— Йола ҡушмай, ата-баба йола ы... Башҡорт тирмә енә ҡан дошманың ин ен — тейергә ярамай, ул изге ҡунаҡҡа әүерелә. ин иң башта оло хөрмәт күр әтергә тейеш ең. — Шунан был, ниңәлер, тағы көләм өрәп ҡуйҙы: — Илселек кеше ен был юлы осраҡлыҡ та ҡотҡарған: атынан йығылып, ул бит туранан-тура тирмә алдына килеп ятҡан. Уны кемгәлер тоттороп ебәр ә йәки йәберләтә ҡал а, тирмә хужа ы үҙен мәңгелек хурлыҡҡа дусар иткән булыр ине. Ә унан бына беҙ ҙә барып ҡыҫылдыҡ, хәлде аңлаттыҡ...

"Ҡай ылай оҡшашлыҡ бар йолаларҙа! — тип эстән генә уйлап ҡуйҙы баянан бирле үҙ еҙ ултырған Әхмәт ибн Фаҙлан. — Был бит барса күсмә халыҡтарҙа ла, әйткәндәй, ғәрәптәрҙә лә шулай. Хатта ҡан дошманы ла, хужа сатырына бармағы менән генә лә ҡағылырға өлгөр ә — ҡотола, ҡәҙерле ҡунаҡҡа әүерелә. Әммә ошо ата-баба йола ын тотмай икән, ул халигә әйләнә, ырыуҙан ҡыуыла. Ә бына ил еҙ, ырыу ыҙ кешене йәки халиҙы телә ә нимә эшләтергә, хатта тотоп үлтерергә лә мөмкин булған. Бына ниндәй уртаҡ ҡанундар нығытҡан халыҡтарҙы ырыу-ҡәбилә шарттарында".

Ғорур халыҡҡа оҡшай был башҡорттар. ис тә бирешер ымаҡ түгелдәр, ул күрергә теләгән ҡырағай мәжүсиҙәргә лә оҡшамағандар, инаныуҙарынан да ҡапыл ғына баш тарта алып бармаҫтар. Йөҙҙәрендә ҡурҡыу йә күндәмлектең әҫәре лә юҡ, үҙ ба а ын яҡшы белгән бәҫле халыҡҡа тартҡандар.

Шуға ла Фаҙлан улы үҙен ике ут ара ында ҡалғандай тоя: башҡорттарҙа бындай сифаттарҙы күреү уның Бағдадта саҡта уҡ күңеленә төйнәлгән “тарихи серҙәр асыу” хыялын юҡҡа сығара бара түгелме?

## Башҡорт ҡото йәки мандрагора

*— Апай, әйтегеҙ әле, борон беҙҙең халыҡ «раббы» тип ирҙәр ғәүриәтенә табынғанмы? Уҡымышлыларса әйт әк, «фаллизм» була инде. Бөгөн ҡай ы бер ғалимдар ҙа шулай яҙа. еҙ, апай, шуға ышана ығыҙмы?*

*— Атаҡ-атаҡ... Нишләп ышанмай ти? Беҙ ни, бисәләр, ғалимдар ни әйтер, тип көтөп тормайбыҙ, әле лә ул нәмәгә*

*ихлас табынабыҙсы. Әгәр ул ысынлап та табынырлыҡ бул а инде ...*

**Фольклор экспедиция ындағы шаян әңгәмәнән.**

Әхмәт Фаҙлан улының иғтибарын башҡорттарҙағы тағы бер хикмәт ныҡ йәлеп итте. Уларҙың әр бере енең муйынына ағастан юнып эшләнгән, ҡурсаҡҡа оҡшаш ниндәйҙер кескәй генә ын аҫылған. Тора-бара ул быңдай ындарҙың тирмә эстәрендә лә, ишек баштарында ла – төрлө ергә ҡуйылыуын күрҙе. Башта Фаҙлан улы быға әллә ни аптыраманы, ҡырағай халыҡтар муйындарына нимә аҫып йөрөмәҫ, берәй кәрәк-яраҡтыр шунда... Ләкин аҙаҡ башҡорттарҙың был ҡурсаҡҡа мөнсәбәттәре бик үк ғәҙәти булмауына ғәжәпләнә ҡалды. Быңа әле лә... үҙара аралашыу өсөн хәбәрсе рәүешендә тәғәйенләнгән омғол йәш яугир фарман көтөп ғәрәп илсе е алдында торған килеш ваҡыт-ваҡыт шул нәмәне ҡулы менән аҡ ҡына тота ла әллә уны иркәләй, әллә уға нимәлер шыбырлай. Быны ында Фаҙлан улы түҙмәне, ниңәлер, төҫө боҙолоп, асыуланғандай, тылмасҡа ла мөрәжәғәт итеп тормаҫтан, тура яугирҙың үҙенән белеште:

– Нимә аңлата ул инең шул ағас тәтәйең! Нимә тип иркәләй ең уны, ниҙәр шыбырлай ың?!

Башҡорттар үҙҙәренең ғәрәп телен белмәгән кеше ен аралашсы итеп ҡуймаҫ. Әммә йәш яугирға әллә орауҙың ҡырыҫ, хатта тупаҫыраҡ ҡуйылыуы оҡшаманы, аңламағанға алышты. Йылмайғандай итте лә, «Миңә ниндәй фарман булыр икән?» тигәндәй, илтифатлы ҡараштарын тылмасҡа төбәне. Быны ы өндәшмәгәс, ләм-мим баҫып тора бирҙе.

Ләкин башҡорт муйынына аҫылған әйбер ғәрәп илсе енең аптыраулы иғтибарын йәлеп итергә өлгөргәйне инде. Тарих төпкөлөнән килгән, боронғо Мысыр, Рум, Фарсы-Иран йола ы булған бер мөғжизәүи инаныуҙы иҫкә тешөрҙө. Тик быға ышанғы ы ғына килмәне: «Әллә мандрагорамы?!» Ҡайҙан белә "йәджудж түгелме?" тигән был ҡырағайҙар шул тылсымлы ҡурсаҡты? Шәреҡтә бик борондан билдәле был үҫемлек серле инаныуҙарға төрөнгән... Мысыр имселәре уны ауыртыуҙы баҫыу сара ы булараҡ исламғаса ҡәҙәр меңйыллыҡтарҙа, мифтар заманында уҡ, файҙаланған. Күп йыллыҡ үҫемлек, абағы оҙон түгел, уның ҡарауы, бер төптән сатырҙай тырпайып сыҡҡан япраҡтарының яҫылығы ике метрға етә. Урта диңгеҙ, Пиреней ярымутрауы, Гималай әм Тибетҡаса аралыҡта таралып үҫә. Тылсымлы мандрагора хаҡында Аристотель, Плутарх, Гален, Плиний кеүек бик боронғо Юнан, Рум ғалимдары әм табиптары ғәжәпләнеп тә, оҡланып та яҙып ҡалдырған. (Шәреҡтә бик ирәк осраусы серле дауа рәүешендә был дарыу-әмәл аман да билдәле, табиптар, шамандар, күрәҙәселәр уның япраҡтарын, емештәрен файҙалана.)

Ә тамырынан ошондай кескәй кеше ындары я ап, юғары мәҙәниәтле Шәреҡтә бик боронғо замандарҙан уҡ бетеү рәүешен дә муйынға тағып йөрөткәндәр. Хәйер, мандрагора тамырының рәүешендә ҡулы, аяҡтары, башы булған кеше ынына оҡшаталар. Юҡҡамы ни, боронғо Юнан аҡыл эйә е Пифагор мандрагораны – «кешегә оҡшаған үҫемлек», ә Калумелла тигәне «ярым кеше, ярым үлән» тип атамағандыр. Маздасылыҡ тәғлимәтендә лә, тәү кеше башта үҫемлек хәлендә булған, "рәүән" тигән көпшәктән яралған, тиелә бит. Ә быңа боронғо Мысырҙа мандрагораның атамалары тағы ла серлерәк булған: «ҡойроҡло кеше» йәки «дар ағасы емеше» тип тә нарыҡлағандар. Сөнки, нишләптер, мандрагора гел тиерлек дар ағастары төбөндә, яза урынында ғына ҡалҡып сыға икән. Аҫып ҡуйылған ир кешенең үлем алды көсөргәнеше арҡа ында ирек еҙҙән ағып төшкән енси орлоғонан шыта, тип иҫәпләгәндәр был үҫемлекте. Ә уның тамырынан я алған әлеге

кескәй ындарҙы «әҙәм», «әҙәм башы» тип тә йөрөткәндәр Шәреҡтә. Мандрагора әм унының кеше ынына оҡшап торған тамыры бәхет килтереүсе, түл еҙлектән дауалаусы бетеү рәүешендә насара динендә лә урын алған, емештәре түл еҙлектән дауа сифатында ул хатта Тәүратта ла иҫкә алына. Ғәрәптәр и ә мандрагора тамырын «әл-роун», йәғни «тылсымлы тамыр» тип атаған. Мысыр, Фарсы табиптары унан ауыртыуҙы баҫа йә ир кәрен арттыра торған дарыуҙар әҙерләгән. Хатта унан шарап та әсеткәндәр. Мандрагора тамырынан эшләнгән кескәй ын йәки тоҡсайға ваҡлап турап тултырылған бетеү бәхет килтереүсе, мөхәббәтте яр ытыусы, сихыр ҡайтарыусы, тәмле йоҡоға талдыртыусы сара тип тә иҫәпләнгән. Шуға ул никах түшәктәре аҫтына алынған, ишек, ҡура баштарына эленгән.

Былары мәғлүм Әхмәт Фаҙлан улына. Тик уны ғәжәпкә ҡалдырғаны – ошондай уҡ бетеүҙәрҙе бөгөн башҡорт муйынында күреү. Сөнки, ни әйт әң дә, мандрагора серен ата-бабаның рухи ыны рәүешендә быуаттар төпкөлөнән алып килеү, унын мөғжизә тулы серҙәренә төшөнөү, дауа итеп файҙаланыу,– ис шик еҙ, юғары мәҙәниәтле халыҡтар шөғөлө. Ә бына ошо бысраҡ, әрпеш варварҙарға, айҙар буйы ат өҫтөнән төшмәй, тиргә ҡатып бөткән кейемдә йөрөгән башҡорттарға бындай рухи юғарылыҡ, инаныу ҡайҙан килер икән?! Әллә исламғаса, улай ғына түгел, элегерәк дәүерҙәрҙә лә ошо ҡәүемдәрҙең иранлылар менән бергә Рум, Византия, Мысыр тарафтарына яу сабыуҙары хаҡындағы хәбәрҙәр дөрөҫмө? Утҡа табыныусы иранлыларҙың исламғаса булған Заратуштра тәғлимәтендә лә изге өс уттың бере е "бөрйән уты" тип аталып, аҙаҡ башҡорт ырыуы атама ын алыуы нимәгә бәйле?

Ғәжәпләнеүен еңә алмайынса, Әхмәт Фаҙлан улы башҡорттарҙы артабан да мөкиббән күҙәтә бирҙе. Былары уны бетеү ымаҡ аҫып ҡына йөрөтмәй, уға ниндәйҙер өмөт менән ҡарай, ығына, кәңәшләшә лә кеүек. Берәй яуаплы эш башҡарамы, хәүефле юлға сығамы, үҙенә бәхет теләйме – ошо ағас ынды ҡулдары менән аҡ ҡына тотоп ала ла наҙлап ыйпай, сәждә итә. "Бәхетем мөлдөрәмә тулы бул ын, йә, ила ым, дошмандарҙан ҡурсала!" тип ялбарып та ҡуя. Ошо күренеш нығыраҡ ғәжәпләндерә Фаҙлан улын. Сөнки боронғо Рум, Месопатамия, Мысыр халҡы ла мандрагоранан, унын тамырынан юнып эшләнгән ындарҙа мәңге яңырып тороусы тылсымлы көс, донъя башланғысы, ата-баба рухы сығанаҡтарын күргән. Мандрагораға тейеп- ҡағылып ҡына алыу ҙа изге тамырҙарың менән мөнәсәбәткә инеүгә, йы ан мәңгелек йәшәү инештәре менән аралашыуға, уларҙың йәшәү ихтыярына ҡушылыуға мөмкинселек бирә, тип аналған. Бәй, башҡорттарҙың ҡылыҡтары ла шуға оҡшай ҙа! Ана, ҡаршы ында баҫып торған әлеге аралашсы йәш яугир ҙа, ғәрәп илсе енән фарман алыу менән, муйынындағы әлеге ынды, иҙҙермәҫкә тырышып, аҡ ҡына ыйпаштырғас: "Мәрхәмәтеңдән яҙҙырма, ят күҙҙәрҙән аҡла, дошман үҙҙәренән ярлыҡа!"– тип шыбырланы. Әхмәт Фаҙлан улының фараз шиктәре көсәйә төштө: ниндәй мәғәнә ала ошо кескәй ағас ынға был мәжүси башҡорт? Шәреҡтең юғары мәҙәниәтле бөйөк халыҡтары менән башҡортта ниндәй уртаҡлыҡтар бар? Үҙҙәре ымаҡ ҡырағай был далала мандрагора үҫмәйҙер бит? Әллә былар ҙа шул ила и шәреҡ мәҙәниәтенең бер ярсығымы? Нимәлер орарға ынтылып, Фаҙлан улы урынынан ҡалҡынып ҡуйҙы. Ләкин турайып өлгөрмәне, йәш яугир йә әт кенә эйәренә икерҙе лә ҡушҡанды үтәр өсөн саптырып китеп тә барҙы. Был ғәрәп илсе ен сығырынан сығара яҙҙы: "Нимә йәшерәләр унан, ниңә ҡасалар?"

Әхмәт Фаҙлан улы кәйефе ҡырылыуын йәшермәне.

– Шуларҙың берәй енән ора әле, – тине ул тылмас-тәржемәсегә, ситтәрәк урын алған башҡорттарға ишаралап. – Бынау әлеге яугир ымаҡ ҡыланыуҙың ни хәжәте бар? Нимә тип ғәүриәткә оҡшаған ағас киҫәгенән Тәнре я айҙар?

Эргә ендәге башҡорттарға тылмас ибн Фаҙлан үҙҙәрен, "ғәүриәт" тигәнен дә йомшартып тормай, тураға ауҙарҙы, шикелле, тирә-йүндәгеләрҙең йөҙҙәре ҡапыл асыулы салшайып китте, ә ҡай ылары ҡоралдарына үрелгәндәй ишара я аны. Күптәр ҡара янып, уҫал йылмайышты... Ҡыҙа барған болалы шау-шыуҙы аралағы аҡ аҡал тыйҙы. Ләкин бары ы ла унын менән килешмәне, биш-алты ир йә әт кенә ҡалҡынды ла, ҡоралдарын барлап, эйәрләнгән аттарына табан атланы. Оҙаҡламай уларҙың ҡайҙалыр сабып сығып киткәне генә ишетелде. Ҡорҙа бер килке күңел еҙ тынлыҡ урынлашты.

...Әлбиттә, әлеге аҡ аҡал дорфа ғәрәпкә бетеү серен ентеклерәк тә аңлата алыр ине. әр инаныуҙарҙың иң башта тормош шарттарына бәйле икәнен белә лә ә ул. Урал буйындағы ҡуйы урмандарҙа йәшәгән халыҡтар өсөн борон-борондан Ут берҙән-бер көнитмеш таянысы булған, кешеләрҙе ыуыҡтан әм йыртҡыстарҙан аҡлаған. Утты башҡорттар ҙа изгеләштерелгән, Тәңре биргән ата-баба рухы итеп анаған. Имештер, Тәңре күктән бере е аҡ, икенсе е ҡара ике таш алып төшкән дә уларҙы бер-бере енә бәреп ут табыу ысулын өйрәткән. "Был ут ата-бабаларыбыҙҙың ҡөҙрәтенән сыҡҡан ялҡындыр", – тигән. Утты бөгөн дә аталыҡ, ата исеме менән бәйләйҙәр. Ырымсылар, шамандар ҙа доғаларын утҡа ҡарап "Атабыҙ тоҡандырған ут" тип башлайҙар. Был яҡтан Әхмәт хәҙрәттәре, борон осҡон сығарып ут ҡабыҙыу өсөн дә файҙаланылған ошондай ағас ындарҙы ир-ат ғәүриәтенә оҡшатып, әллә ни яңылышмайҙыр ҙа, хәлбүки? Ләкин аҡ аҡал быларҙы ҡысҡырып әйтмәне, тыйнаҡ ыҙ ғәрәпкә унын да хәтере ҡалғайны, шикелле:

– Беҙҙең Тәңре нәҡ исламдағыса берәү генә – ул күктә, – тине сал ҡарт тәртип боҙған баланы әҙәпкә өйрәткәндәй тыныс ҡына. – Ә был ындар тамыры бик тәрәндә ул, бик боронғо ҡомартҡы. Хәҙер унын төп тәғәйенләнешен белгән кеше лә ирәктер. әр кем уны үҙенсә аңлай, бәхет, рух, ғәйрәт бетеүе итеп ҡарай, әр кем үҙенә кәрәген орай, изгелек өмөт итә...

– Эйе, эйе, кем нимәгә оҡшата ла нимә орай бит. еҙ әйткәнсә, ана, беҙҙең ҡатындар ҙа уға икенсе ҡөҙрәт, өмөт итеп табына, – Шулай төрттөрә ҡуйҙы тағы икенсе ҡорҙашы. – Мөхтәрәм илсе уны үҙе әйткән нәмәгә оҡшата икән – унын ихтыяры, барыбыҙ ҙа шунан яралғанбыҙ. Ә беҙҙең өсөн был ын – борондарҙан килгән изге ҡот, тоҡом уты, йыу ан яралғы ы... Уға ыйынмай нимәгә ыйына ын, кәрәк саҡта ул йәшәү өсөн ут, көс бирә...

Мәжүси башҡорттоң үҙен нисек уҫал тешләп алыуынан үте ытылғандай бул а ла, Әхмәт хәҙрәттәре уртын сәйнә ә сәйнәне, әммә өндәшмәне, күрә ең, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе тағы ла ҡырҡыулаштырырға теләмәне. уңыраҡ әлеге үҙсән башҡорттоң "кәрәк саҡта ул йәшәү өсөн ут, көс бирә" тигәнен ораша- ораша йөрөп, үҙе өсөн өлөшләтә асыҡланы ла. Башҡорттар был ынды телә ә ниндәй ағастан түгел, ә тиҙ ҡабыныусы "йыла" тигәненән я айҙар икән. Күсмә тормош шарттары бөгөн дә үтә ҡырыҫ, ут аҡлауҙары ла еңел түгел. Шундай саҡтарҙа ошо ындар эсенә йәшерелгән осҡондарҙы саҡырып сығаралар, ышҡып, ялҡын ҡабыҙалар, тигән фаразды ла ишетеп ҡалды. Әммә башҡорттарҙың үҙҙәренән был ындарҙың төп мәғәнә ен дә, уларҙың тарихи сығанаҡтарын да асыҡлай алманы. Күптәре «Боронғо ата-баба тамыры»... «Әүлиәләр рухы»... «Тәңре көсө»... тиеүҙән уҙманы. Ошо ын ярҙамында улар ямғыр ҙа, бәхет тә орайҙар, ел дә сығаралар, уңыш, еңеү теләйҙәр, тоҡомдарын яңырталар, Тәңреләренә лә мөрәжәғәт итәләр. Донъя тотҡа ы был ын башҡорттар өсөн, бар сихәткә дауа, изге инаныс...

Быларын аңлай Фаҙлан улы. Тик кәйефен үргәне, өмөттәре аҡланмау сәбәбе башҡала: юғары мәҙәниәтлелек осратырмын тип ашҡынып көттөмө ни ул башҡорттар менән осрашыуҙы?! Уға бит Искәндәр-Зөлҡәрнәйен ҡойған тимер диуар әм унын артына бикләнгән йәджудж, мәджуджлар кәрәк ...

***

...Ут... Тоҡом уты... Тәңре ҡабыҙған ут... Шаҡ ҡатырыуҙан туҡтамай был башҡорт тигәндәре Фаҙлан Әхмәт улын. Осрашыуҙарының икенсе көнөндә үк уларға кис буйы башҡорттарҙың ниндәйҙер бер үҙ оҫта ын тыңларға тура килгәйне. "Сәсән" тип ололайҙар икән ундайҙарҙы бында. Күсмә халыҡтарҙың үҙҙәренең ҡары үҙҙәрен кис буйы ғына түгел, бигерәк тә ҡыштарын көндәр, хатта аҙналар дауамында бергә йыйылып тыңлауҙарын ишеткәне бар ине. Уның иғтибарын тартҡаны — ҡары үҙҙе күмәкләп йыйылып тыңлау түгел, ә шуны өйләүсенең "сәсән" тип исемләнеүендә. Иран ҡәүемдәренең, көтөүлектәр эҙләп, исламғаса булған маздасылыҡ тәғлимәтен мал көтөүҙәре менән бергә был тарафтарға — Көньяҡ Уралға ла алып килеүҙәрен белә илсе. Ислам таратыр сәйед Әхмәт, әлбиттә, тарихты белергә тейеш. Ентекләп өйрәнде. Ана шул маздасылар динендә лә иң юғары рухниҙарын "Сәсән" тип ололауҙарын хәтерләне. Ошонан уң Фаҙлан улы тылмасты үҙ эргә енә ултыртты ла башҡорт сәсәне үҙҙәрен тәржемә итә барыуын үтенде. Ә артабанғы үҙҙәр Фаҙлан улы Әхмәтте бөтөнләй аптырашта ҡалдырҙы: "Сәсән" тигәндәре, маздасы Сәсән ымаҡ уҡ, үҙмә- үҙ тиерлек Заратуштра пәйғәмбәр яҙған Апастакты өйләй! Нисек Ер, Күк, донъя яратылған, туфан ҡалҡҡан, йәшәү-тормош өсөн изгелек менән яуызлыҡ раббылары ара ында барған үлемесле алыш... Тик исемдәре генә башҡа, Апастакта — Мазда менән Әхриман, ә башҡорт ҡары үҙендә — Урал менән Шүлгән...

Ибн Фаҙланды ғәжәпләндерере алдараҡ була ы икән. Бына бер саҡ башҡорт сәсәне, амаҡлай- амаҡлай, ниндәйҙер Ҡатил батшаның яуызлыҡтарын теҙеп китте: "Ҡатын-ҡыҙҙар, ир-атты, айырмаҫтан йәш-ҡартты, ҡул-аяғын бәйләтеп, арыуҙарын айлатып, йыл да бер ҡат йыйҙыра, арайына алдыра. Ҡыҙы айлай егетен, үҙе айлай ҡыҙ-ҡырҡын, ҡалғандарын тағы ла ярандары ҡарайҙар, үҙҙәренә айлайҙар"... Ҡатил батшаның яуызлығы бының менән генә сикләнмәй, сәсән әйткәнсә, халыҡтың бер өлөшөн ҡол итеп айлағандан уң, "Бүтәндәрен аямай, ҡанлы йәшкә ҡарамай, тереләтә, ау көйгә, ҡыҙын күлгә алдыра, ирен утҡа яндыра; Атаы өсөн, үҙе өсөн, ярандары даны өсөн, үҙе тыуған көнө өсөн, йыл да бер ҡат Тәңре өсөн ҡанлы ҡорбан уҙҙыра..."

Ошо Ҡатил батша әм уның ҡылыҡтары аптырашҡа алды йәнә Фаҙлан улы Әхмәтте, уға маздасылар тәғлимәтенә, уның пәйғәмбәре Заратуштраға, Иран тарихына бәйле тағы ла боронғораҡ бер Раббыны — күпләп ҡорбан килтереүҙе талап иткән ут әм уғыш раббы ы Бал Молохты хәтерләтте.

Финикеяла тыуған был ҡан ыҙ дин Иранға Ассирия уғышсылары әм руханиҙары тарафынан уңыраҡ көсләп индерелгән. Маздасылыҡ тәғлимәте барлыҡҡа килгәнсе, Хәрәзм әм уның тирә-яҡ халыҡтары ара ында ошо рәхим еҙ уғыш раббы ы хакимлыҡ иткән. Яндырғыс ҡояш әм уғыш раббы ы Бал Молох шәрәфенә әр ерҙә иләм еҙ ҙур ғибәҙәтханалар, күпләп ҡорбан килтереү ҡоролмалары төҙөлгән. Уларҙың иң ҙуры ы Карфаген ҡала ында булған. Башы үгеҙҙеке, ғәләмәт ҙур кәүҙә е әҙәмдеке булған Молохтың күктәргә ашыр эсе ҡыуыш баҡыр ыны ла ҡоролған. Баҡыр ын эсендә гелән дөрләп ҡыҙыу ут янып торған. Молохтың йәшерен сығырҙар ярҙамында күтәрелгән уҫлаптай яҫы усына ҡорбанды бәйләп алғандар. Сығырҙар уны ындың күкрәк тәңгәленә еткереүгә сиктән тыш көслө ялҡын ҡорбанды шунда уҡ көл-күмергә әүерелдергән. уғыш әм ут раббы ы туя белмәгән, бындай йола йыш-йыш ҡабатланып торған. Сәбәптәре лә табылған: яуға сығыр алдынан Молохтан еңеү ялбарып, күпләп йәш егеттәр ҡорбан ителгән, орағандары тормошҡа аш а, рәхмәт йөҙөнән иң ылыу әсирәләрҙе ҡорбан ҡылғандар. Хәйер, башҡа сәбәптәр ҙә етерлек булған: хакимдарҙың оло йәшкә

етеүе, ҙур уңыш алыу йә, кире енсә, уңыш ыҙ ҡалыу; ҡоролоҡ йә башҡа төрлө берәй афәт.... Ҙур тантана менән үткән был йола, ә ҡорбандарҙы йәлләү, сеңләү, хатта сабыйын ут рәшәткә енә алған әсә кешегә лә ыҡтау ҡәтғи тыйылған. Ә инде тантана мәлендә ҡорбандың сыҙай алмай аҡырып ебәреүҙәрен ишеттермәҫ өсөн, шөңгөрлө барабандар ҡағып, орнайҙар олотоп торғандар, көслө шау-шыу сығарыусы башҡа уйын ҡоралдарын да эшкә еккәндәр... Хәйер, утта яндырыу Молохҡа ҡорбан килтереүҙең берҙән-бер ысулы булмаған, йәп-йәш егет әм ҡыҙҙарҙы терелә йергә күмгәндәр, ыуға батырып үлтергәндәр. Ирандың, уңынан скифтар батшабикә е Тамарис тарафынан ҡыйратылған Кир атлы илбаҫары, ғәскәре менән китеп барғанда, юл сатының "Ете юл" тип аталыуын ишеткәс, шунда уҡ ошо ерҙә урындағы ете аҫыл егетте терелә йергә күмеп китергә бойорған...

Быңдай ҡан ыҙ эштәрҙең ҡабатланып тороуы хаҡында билдәле юнан тарихсыы Геродот та "фарсыларҙа был — ғәҙәти күренеш" тип яҙып ҡалдырған.

Былары мәғлүм Фаҙлан улы Әхмәткә. Тик уларҙың шаңдауы башҡорттарға нисек килеп эләккән? Улар, ис шик еҙ, Заратуштра тәғлимәтен, улай ғына түгел, был тәғлимәттең шул Молох менән аяу ыҙ көрәштә тыуыуын тәрәнтен белгән. Мәгәр Ҡатил батшалары йөҙөндә исламғаса ғына түгел, хатта маздасылыҡҡа саҡлы дәүерҙәрҙәге Молох ҡыланыштары төҫмөрләнә икән, башҡорттар үҙҙәре ҡасанғы халыҡ булып сыға уң? Хәйер, кеше үлтереүсе йәджудж, мәджудждар үҙҙәре лә шул ҡан ыҙ Молохтан нимәләре менән кәм? Фаҙлан улы Әхмәт үҙ иҙемләүҙәренә үҙе ышана ы килмәне. Былай уйлау ҡырағай мәжүсиҙәрҙе мөьмин мосолман, ислам сафлығы менән йәнәшә ҡуйыу булыр ине. Ләкин бының менән килешеү түгел, башына ла килтерге е килмәй Фаҙлан улының. Улай була ҡал а, бар хыялдары юҡҡа сыға тигән үҙ. Бағдадта уҡ йәджудж, мәджудждар хаҡында булған яҙмаларҙы өйрәнеп, сағыштырып ҡарағанда, был ҡырағай халыҡтар Ҡыпсаҡ урмандарында йә юлда осраған башҡа мәжүси халыҡ биләмәләрендәлер ымаҡ тойолғайны. Йәшәү рәүештәре менән таныша барған айын, йәджудж, мәджудж тигәндәре Шәреҡтә ҡурҡып телгә алынған башкиҫәр башҡорттар ымаҡ күренгәйне. Тора-бара был уйы нығына ғына барҙы. Сөнки башҡорттар ҙа, әлеге йәджудж, мәджудждар кеүек, ҡалын урманлы тауҙарҙа йәшәй, бигерәк тә яу мәлендә ғаиләләләрен, барса яҡындарын мәмерйәгә индереп, малдарын ҡаялы тау аралары ндағы тар ғына тарлауыҡтарға ҡыуа. Ә иң мө име, башҡорт тауҙары тимергә әм әр төрлө башҡа ҡиммәтле мәғдәнгә бик бай. Үҙҙәре менән бергә сәйәхәт иткән Төрк Тәкин әйтеүенсә, был байлыҡтар менән Болғар әм башҡа шәреҡ илдәре генә түгел, Скандинав тарафы ла ныҡ ҡыҙыҡ ынған. Әйткәндәй, шул уҡ Искәндәр-Зөлкәрнәйен дә йәджудж, мәджудждарҙы үҙ ҡаялары, тау аралыҡтарына бикләп ҡуйыр бейек диуар өсөн бихисап тимер иретмә ен әллә ҡайҙан ташып йөрөмәгәндер бит. Тик күргәндәре ис тә Фаҙлан улы файҙа ына түгел, башҡорттар ҙа ул фараз иткән ҡәүемдәр булмай сығамы инде? Был, әлбиттә, уны тынысландырмай, асыуын ғына ҡабарта.

Әлбиттә, Әхмәт хәҙрәттәре быларҙы әлеге Бағдад илселеге сафындағы мөслим башҡорт Артыр бей менән дә хәл итә алыр ине. « өнәрмән, ҡулынан килмәгән эше юҡ, донъя күргән уҡымышлы әҙәм, – тигәйнеләр уның хаҡында илселекте ойоштороусылар. – Ҡырағай халыҡтарҙан бары ын көтөргә була, исламға тоғро, башҡорт тарафында ла үҙ кеше, сәфәр барышында файҙа ы теймәй ҡалмаҫ...»

Илселек сәркәтибе Әхмәт хәҙрәттәре уға ышанып етмәй, бәлки, дөрөҫ тә эшләйҙәр. Бик асылып бармай илселек сәркәтибе алдында Артыр бей тигәндәре. Мәлен тура килтереп, унан әлеге йәджудж, мәджудждар хаҡында ла ҡылын тартып ҡарағайны. Тик бей нәфрәт ҡатыш мыҫҡыллы ҡараны ла бер ни белмәмешкә алышты, тиҙерәк ситкә китеү яғын ҡараны. Ә бына уның "ҡулынан килмәгән эше

юҡ" тигәндәре, әлбиттә, хаҡ, күпме сетерекле хәлдәрҙән ҡотҡарып ҡалды шул Артыр бей. Егет сағында уҡ ниндәйҙер мөхәббәт фажиғә е кисергән, тиҙәр. Шуны күтәрә алмай, сауҙа каруанына эйәреп, илен ташлап киткән. Ниндәй генә сүрәткә инмәгән, ниндәй генә мажараларға осрамаған! Барлы-юҡлы тапҡан малын юғалта... Юлбаҫарҙарға эләгә, төрлө илдәр яғында яуҙарҙа ҡатнаша... Табип өнәрен үҙләштерә. Йәнә сауҙа эшенә тотоноп ҡарай, бөлә. Парса, Туран, Ғәрәп илдәрен ҡыҙырып йөрөй, Саян, Алтай тарафтарына, хатта Чин дәүләтенә барып сыға. Бер үк ваҡытта ғилемгә ынтыла, иҫке китаптар уҡый, белем туплай. "Донъя күргән уҡымышлы әҙәм" тиеүҙәре лә ошонандыр, моғайын. Быларына хәбәрҙар Әхмәт хәҙрәттәре, шуға ышанып тә етмәй: юлбаҫарҙар ара ында йөрөгән кешенең уйында нимә ятмаҫ? "Артыр бей" ти әләр ҙә, кемгә нимә арттыралыр бит әле. Сауҙагәр халҡы хәйләкәр, берәй ваҡыт төп башына ултыртып китмәҫ тимә.

Нишләй ең, илселектә был мәжүси төркиҙәрҙе, уларҙың фиғыл-холоҡтарын Артыр бейҙән дә яҡшы белгән кеше юҡ. Шуға ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр менән бик йөҙәтмәй уны Фаҙлан улы, ирәк- аяҡ үҙенең ҡай ы бер яҙмаларын күсереп яҙҙырыуын иҫәпкә алмағанда, уның атап ҡына әйтерлек тәғәйен вазифа ы ла юҡ. Хәйер, ҡулдары бик шифалы, табиплығы бар. Йылы яҡтарҙы үтеп, был тарафтағы түҙеп торғо оҙ ҡаты ыуыҡтарға дусар булғас, илселектә ауырымаған кеше ҡалманы. Кәңәштәре, ниндәйҙер үҙе генә белгән дарыуҙары менән күпме кешене ҡотҡарып ҡалды ошо аҙ үҙле Артыр бей. Фаҙлан улы Әхмәт үҙе лә әҙме татыны уның ҡул тылсымдарын. Үҙе ымаҡ, ҡулдары ла ҙур уның, йомшаҡ әм бик йылы. Шул ҡулдары менән аҡ ҡына инең барса ерендә ылай, ауыртҡан ерҙәрендә үҙе эҙләп таба, ҡатҡан тарамыштарҙы ыуып яҙылдыра, уҡмашҡан ҡан тейөрҙәрен таратып ебәрә...

— Ҡайҙан белдең нәҡ шул ер ыҙлағанын? — тип ғәжәпләнеүгә, ул, иҫе лә китмәгәндәй:

— Устарым менән күрәм,— ти. — Ауыртҡан ерҙе улар үҙҙәре табып ала, шул урында усҡа үткер энә ҡаҙалғандай була...

Мәгәр илселектең сәфәре иркен төрки далаларына күскәс, Артыр бейҙең ярҙамы бермә-бер артты. Әхмәт Фаҙлан улы үҙе лә, илселек етәксе е Әр Расси ҙа, Төрки Тәкин дә урындағы халыҡ менән тыуған сетерекле хәлдәргә, ғөрөф-ғәҙәттәрен белмәгәс, бик ҡатнашмаҫҡа тырыша. Былдай саҡта теге йәки был ҡәүем, юлда осраған ҡай ы бер ҡоралы төркөмдәр менән осрашҡанда аңлашыу өсөн улар, ғәҙәттә, ошо Артыр бейҙе ебәрә.

Ә быны ы күп үҙле түгел, ҡушҡанды үтәй, ора аң — яуап бирә, орама аң, кәрәк саҡта ла әллә ни ҡыҫылып бармай. Үҙе менен тоҡсай-тоҡсай кипкән үләндәр йөрөтә, шуларҙан төнәтмә я ап эсә, башҡаларҙы ла дауалай. Биш меңлек ғәрәп илселеге каруанының әлегәсә әллә ни ҡаршылыҡҡа осрамай ҡырҡма а-ҡырҡ ҡырағай ҡәүемдәр ара ынан йөҙҙәрсә фарсах арауыҡ үтеүендә Артыр бейҙең хеҙмәте ба алап бөткө өҙ: әр урында ла ерле халыҡ телендә өйләшә, ҡыҙып бармай, илселектең хәүеф түгел, ә именлек алып килеүен аңлатырға тырыша. Шуғалырмы, дәрәжә е яғынан Төрк Тәкин юғарыраҡ баҫҡыста тор а ла, илселек сәркәтибе йыш ҡына уға түгел, Артыр бейгә мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Бының сәбәбе Әхмәт хәҙрәттәренең Төрк Тәкингә лә ышанып етмәүендәлер, бәлки. Хәрәзм хакимында булғанда уны ының Төрк Тәкингә ҡарата асыулы үҙҙәр әйтеүен онотҡан ти еңме ни Фаҙлан улы? "Бағдадтан Болғарға барыуҙы еҙҙең Тәкин тигән бәндәгеҙ мәкер менән юрамал уйлап сығарған, — тип теше-тырнағы менән Ғәрәбстан илселеген төрки далаларына үткәрмәҫкә тырышҡайны бит. — Әүәл был кеше дин еҙҙәр араында йәшәп, тимер ҡорал әм ҡорамалдар менән атыу иткән. Әле лә мослмандарҙы ҡайғырта ти еңме ни уны, аман мәжүсиҙәр файҙа ын ҡарай. Хәйлә, мәкер...

Ана, нисектер әмәлен табып, сәкәлибтәр батша ы мәктүбен мөьмин мосолмандар хакимы Джафар Әл Мөҡтәдиргә тапшырырға мәртәбәле Нәзир Әл Хәрәмиҙе лә күндерергә өлгөргән!”

Фаҙлан улы Әхмәтте, күрә ең, Хәрәзм вәлиенең ошо үҙҙәре шиккә алған. Хәйер, Урал, Урта Азия, Оло Иҙел төбәктәрендә йәшәүен, ул саҡтағы шөғөлөн Төрк Тәкин үҙе лә йәшермәй. Бер ҡара аң, илселек сәркәтибенең Төрк Тәкингә генә түгел, башҡаларға ла бик үк ышанып бармауының сәбәптәрен дә аңларға була. Юл оҙон, илселек ҙур, әр яҡлап хәүеф; бары ын да күҙҙән үткәреп, алдан күреп бөтөү мөмкин түгел. Етмә ә, уларҙың сәйәхәте лә гелән тиерлек дошмансыл ҡәүемдәр биләмәләре аша үтә. Бағдадта саҡта ғына дәүләт ныҡ, илдә тыныслыҡ тип уйланыла ине, ә бында ят ҡәүемдәр генә түгел, хәлифәткә буй онғандары ла тыштан "Хәлиф хәҙрәттәре", "Мосолмандар әмире" тип ололаған булып ҡылан алар ҙа, уның талаптарын үтәргә ис тә ашҡынып тормайҙар. Әлеге Хәрәзм вәлие лә, ана, хәлифәт илселәрен мәртәбәле ҡунаҡтар ымаҡ хөрмәтләп ҡаршы алды, ял итер өсөн әйбәт шарттар тыуҙырҙы, асыҡ йөҙ күр әтте. Әммә илселәр ораған дың берен дә эшләмәне. Улай ғына ла түгел, "Ғүмерҙәрегеҙҙе әләкәт аҫтына ҡуйып, мин еҙҙе ҡыраҒай халыҡтар тарафына ебәрә алмайым, — тигән ылтау табып, илселек эшенә таяҡ тығып та маташты. — Бағдад менән Болғар ара ында бихисап дин еҙ халыҡтар йәшәй. Ғүмеренде әләкәткә ҡуйып, ни бысағыма ундай хәүефле сәфәргә сығырға? Сәкәлиб батша ына хәлиф мәктүбен бына беҙ, Хәрәзм йә Хөрәсән мосолмандары башлыҡтары, еткерә алмаҫ инекме ни?"

Ниндәй генә шарттарға юлыҡманылар Бағдадтан сығып киткәне бирле: әле сүл селлә е, ҡом бурандары, әле, кире енсә, туңып үлерлек ыуыҡ, ҡарлы-боҙло даръя кисеүҙәр... Юл аҙаптарына түҙмәйенсә, Бағдадтан бергә сыҡҡан күптәр, шул иҫәптән ислам, шәриғәт ҡанундарына өйрәтергә тейеш мөғәллим әм факихтар Джурджанияла уҡ тороп ҡалды. Фаҙлан улы даирә енән хәҙер илселектә әлеге Төрк Тәкин менән Барыҫ ҡына тиерлек ҡалды. Ә илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт түҙә, улай ғына түгел, дилбегәне лә ныҡ тота, артыҡ иркенләргә бирәүгә лә форсат бирмәй. Артыр бейҙе ғәмләндергәне тағы шул: ниндәй генә шарттарҙа булма ын — йәш кеше лә тимәҫ ең — ул биш намаҙын ис ҡалдырмай. Ҡар йә ҡом буранымы, ямғыр йә боҙ яуамы, тигеҙ ерме, әллә тау-ташмы, былар уға кәртә түгел, ҡайҙа ғына булма ын, мәлен тоҫмаллап, намаҙлығын йәйә ала. Дингә шулай инанғанмы, әллә башҡаларға өлгө күр әтәме? Нисек бул а ла, илселек сәркәтибенең ныҡышмалылығы, сабырлығы оҡшай ине быҒаса Артыр бейгә.

Бөгөн Әхмәт Фаҙлан улының артыҡ дорфалығына ул да түҙмәне:

— Башҡорттарҙың изгеләштерелгән ҡомартҡыларын фаллосҡа тиңләп, уларҙы үпкәләтмәнегеҙ микән, Әхмәт хәҙрәттәре? — тине, аҙаҡ үҙҙәре генә ҡалғас. — Ила - иҙарҙы «кешеләштереү», кешеләрҙә ила илыҡ күреү башҡорттарҙа ғына түгел, бик боронғо халыҡтарҙа ла ғәҙәти йола... Румда, Мысырҙа, Фарсыла мөғжизәүи мандрагора тигән үҫемлектең әҙәм ынына оҡшаш тамырын бетеү рәүешендә муйынға аҫып йөрөүҙәрен, «әҙәм башы» тип атауҙарын еҙ, Әхмәт хәҙрәттәре, белмәй булмаҫтыр. Башҡорттарҙың әлеге ындары ла шуның бер ауазы түгелме, тим?

Фаҙлан улы Әхмәткә быҒаса тыйнаҡ ҡына йөрөгән Артыр бейҙең әлеге үҙҙәре оҡшаманы. Хәйер, башҡорттарға мөнәсәбәтенең бик үк ғәҙел булмауын Фаҙлан улы үҙе лә иҙә, тик, нишлә ен, тыйыла алмай, көткәне аҡланмауына яр ый. Шуға башҡорттарҙың үҙҙәрен мәҙәниәтле кешеләргә генә хас булғанса итәғәтле, тыныс тотоуҙары, хатта уға йәлләгәндәй ҡарауҙары ла зитына тейә. Хәҙер, ана, үҙенә ялсылыҡҡа алынған Артыр тигән мәүләүи ҙә уны өйрәтеп маташа. Үҙен илселек сәркәтибенән дә белдеклерәк анаймы?

“Ошо ҡыраҒай йәджудж, мәджуджлармы ни?”— тип ысҡындыра яҙҙы Фаҙлан

улы Әхмәт. Тик үҙен кинәт төҙәтергә булды.

– Бетеү аҫып йөрөгән ошо томана мәжүсиҙәрме ни "бөйөк халыҡтар"? Ҡайҙан килер икән ундай сифаттар? Хәйер, ин үҙең дә...

Илселек сәркәтибенең тәкәбберлеге бейҙең дә намыҫына тейҙе. «Мин яллан-ғанмын, әммә ҡол түгелмен» тип, риза ыҙлығын йәшермәне.

– Улайға кит ә, Әхмәт хәҙрәттәре, «бетеү» төшөнсә е үҙе үк ғәрәптәрҙең ислам-ғаса инанған Раббылары торған «бәйет әл-алла» (Алла йорто) тигәндән барлыҡҡа килмәгәнме ни? – тине ул, сәркәтипте сәмләштергәндәй. – Бәхет килтерә тип, әлеге башҡорт ымаҡ, ғәрәптәр ҙә был ындарға ҡағыла торған булған, хатта сауҙа эштәренә сыҡ а, яуға барғанда үҙҙәре менән йөрөткән. Ислам бетеү йөрөтөүҙе мәжүсилек тип ата а ла, был тарафтарҙа әлегә ҡәҙимге ғәҙәт...

Ләкин Әхмәт ибн Фаҙлан Артыр бейҙе аҙаҡҡаса тыңларға теләмәне, бәхәскә инмәне, мыҫҡыллы ҡарашын үндермәйсә, бер кемгә иғтибар итмәҫтән, үҙенә шәхсән ҡоролған сатырына йүнәлде. Артыр бей хужа ының мөнәсәбәтенән ҡау-шабыраҡ ҡал а ла, үкенмәне: ниңә шулай мөрхәт енмәй Әхмәт Фаҙлан улы башҡ-орттарҙы? Нимә оҡшамай уға: уларҙың тормош кимәлеме, үҙҙәрен ғорур, азат то-тоуҙарымы? Көнкүрештәренә, ғөрөф-ғәҙәттәренә лә, ни ғилләләр, кәм етеп ҡа-рай? уңыраҡ күрҙе ул: Фаҙлан улы үҙенең юл яҙмаларына ла әлеге хәлде “башҡорттар фаллосҡа табына...” ымағыраҡ мәғәнәлә теркәп ҡуйған.

Хәйер, кисерештәрен аңлағандай ҙа була Артыр бей илселек сәркәтибенең. Бағдадтан сыҡҡаны бирле әр ерҙә тиерлек ул аҫтыртын ғына ниндәйҙер “йәд-жудж, “мәджуджлар”, алтын көмөштән генә торған тауҙар, “Искәндәр диуары” хаҡында ишетеү-ишетмәүҙәрен ораша. Әлбиттә, Артыр бей шәреҡтә саҡта, ғәрәптәр әйткәнсә, “етенсе климат”та йәшәүсе был серле ҡәүемдәр тура ында ишетмәне түгел. Ләкин едтигә алманы, әҙме ни шәреҡ дастандарында ундай тыл-сымлы уйҙырмалар? Артыр бейҙе ағайтҡаны уңыраҡ, башҡорт биләмәләренә ки-леп ингәс, булды. Ялға туҡтағайнылар, илселек сәркәтибе Артыр бейҙе үҙ янына саҡыртып алды.

– еҙҙең яҡтарҙа Македонскийҙың булыуы-булмауы билдәле түгелме? – тине ул, үҙ ара ында яҡын кеше е менән серләшкәндәй.

Артыр бей шунда уҡ әңгәмәсе енең ҡай ы яҡҡа ҡайырыуын аңлап алды: йәнә е, Александр күргән ҡырағай йәджудж, мәджуджлар шул башҡорттар түгелме? Тик аңламаған кешеләй:

– Кем белә инде уны? – тине, күҙҙәрен йәшереп. – Башҡортта, юғи ә, Искән-дәр-Александр тура ында ҡары үҙ күп. Уларҙың бере ендә, ана, уның Аҡташ хан ғәскәре менән алышыуы ла бәйән ителә.

Артыр бей шунда, башҡорт риүәйәтендә әйтелгәнсә, сардар Александрҙың ту-паҫ үҙҙәр менән Аҡташ ханға баш алырға бойороп илселәр ебәреүен, хандың уны хәйләләп ҡунаҡҡа саҡырыуын, шунда уны ҡыйратып ташларға самалауын, хәйлә е барып сыҡмағас, оҙаҡ йылдар йонсоҡос яу сабыуҙарын өҙөк-йырыҡ өйләп бирҙе.

– Улай икән... – тине Фаҙлан улы, орағанын ала алмаған үсексән бала ымаҡ, кәйефе ҡырылып. – Ә бына Ҡөрьәндә лә, Шәреҡтәге башҡа тарихи нәмәләрҙә лә Зөлкәрнәйен-Искәндәрҙең ниндәйҙер йәджудж, мәджудж тигән халыҡтар менән алышҡаны, аҙаҡ уларҙы ике тау ара ындағы мәмерйәгә тимер ҡапҡа ҡойоп бикләп китеүе хаҡында яҙалар. Ишеткәнең булманымы, ҡай ы тарафта икән ул?

– Мин дә был хаҡта тик шәреҡ сығанаҡтарынан ғына беләм шул, – тине бей ихласлап. – Башҡорттарҙан ундай мәғлүмәтте ишеткән юҡ... – Шунан уның күҙ-ҙәре хәйләле ҡыҫылғандай итте: – Аҡташ хан ғәскәрен яу яланында еңә алмай, кире боролорға мәжбүр булғас, бәлки, Искәндәр әм уның яугирҙары аҡланыу

өсөн үҙҙәре уйлап сығарғандыр ул еңелеү белмәҫ йәджудж, мәджудж тигән ҡот осҡос ҡәүемдәрҙе?

Фаҙлан улы өндәшмәне, эҙләп-эҙләп тә тәтәйен таба алмаған бала ымаҡ турайып, йәнә үҙ эсенә бикләнде. Ысынлап та, йәджудж, мәджудждар серен асырға йөрөгәндә юғары мәҙәниәткә юлығыуы, хыялдары юҡҡа сыға барыуы кәйефеҙләндерә ине уны.

Мәртәбәле сәркәтип бүтәндәр әйткән кәңәштәргә лә ваҡытында ҡолаҡ алып бармай шул. Ошо арҡала, урындағы ғөрөф-ғәҙәт, йола, көнкүреш хәлдәрен ентекле белмәгәс, көлкөгә лә ҡалып ҡуйғылай. Фаҙлан улы Әхмәт ваҡыт-ваҡыт сәфәр барышында күргән-ишеткәндәрен ҡағыҙға теркәп бара. Ашыҡ-бошоҡ ҡына теркәлгәндәрен ҡай саҡ таҙаға күсереп яҙыуҙы Артыр бейгә ҡуша. Шунда Артыр бей ҡыҙыҡ ҡына тойолған бер өйләмгә юлыҡты. "Уғыҙҙар ара ында мин ундарса мең ат, йөҙ меңдәрсә баш арыҡ көтөүҙәре йөрөтөүсе кешеләрҙе күрҙем, – тип яҙа Әхмәт хәҙрәттәре. – Уларҙың арыҡтары аяҡ аҫты аҙыҡтары менән туҡлана. Тояҡтары менән тибенеп, ҡар аҫтынан ҡороған үлән эҙләйҙәр. Әгәр үлән табылма а, ҡар ашайҙар әм сиктән тыш имерәләр. Был арыҡтарҙың көрҙөктәре хатта ергә өйрәлеп йөрөй. Йәй етеү менән улар йәнә үлән ашауға күсә әм ябыға башлай".

Каруан сәркәтибенең бер ҡатлылығына Артыр бей ирек еҙҙән көлөп ебәрҙе: "Ҡар ашап арыҡ имерә тиме?" Бындағы әр малсы белгән ябай ғына нәмәне шарап, шиғыр, кәнизәктәр донъя ында ғына йөҙә белгән Бағдад аҡ өйәге ана нисегерәк аңлаған. Хәтерләй Артыр бей был хәбәрҙең юҫығын. Ерле халыҡ менән көтөүлектәр, күп мал аҫырау ауырлыҡтары хаҡында өйләшеп ултырғанда кемдер: "Әле үлән яңы баш төртә, мал ябыға, улар көҙөн епшек ҡарҙа ныҡ имерә", – тигәйне. Фаҙлан улы Әхмәт шуны "мал ҡар ашап имерә" тип аңлаған. Ә сәбәп бөтөнләй башҡала бит. Көҙ аҙаҡтарында был яҡтағы ер өҫтө тәүге ҡар менән ҡапланғас, йәйле-көҙлө ҡырҡыу дала елдәренән ҡыуарып кибеп, ҡатып бөткән дала үләне еүешләнә, йомшара. Тибендә йөрөгән мал ( арыҡтар ғына түгел, йылҡы, тана-торпа әм башҡалары) ошо йомшарған, ашҡаҙаны еңел үҙләштерер татлы аҙыҡты кинәнеп ашай. Етмә ә, йылдың был мәлендә йәйҙәрен малды йөҙәткән серәкәй, себен, күгәүендәр ҙә булмай. Еүеш аҙыҡ ашағас, сарсап эсер ыу эҙләп йөрөй ө лә юҡ. Шулай иркен йөрөп туҡланған мал бер-ике аҙна эсендә күҙгә күренеп имереп китә. "Көҙөн епшек ҡарҙа мал ныҡ имерә" тигәндә нәҡ ошоно күҙ алдында тотҡайны бит теге малсы.

Артыр бей был хаҡта Фаҙлан улы Әхмәткә әйтеп тә, аңлатып та торманы, яҙманы ла нисек бар шулай ҡалдырҙы. Илселек сәркәтибенең холҡон аңлап алғайны шул. Бына әле лә... Муйынға ағас ҡурсаҡ тағыу уға Раббы итеп табыныу тигән үҙ түгел дә ә, бетеү Раббы буламы ни? Улайға кит ә, башҡортта борон-борондан йәнә "мал ҡото", "түл төйөмө" тигән ырым бар. Айғыр, тәкә йә үгеҙ кеүек ата хайуандың енес ағза ын киптереп төйөп, шуны сепрәккә төрөп малдың мөгөҙө төбөнә бәйлә әң йә кәртә-кура егенә ҡыҫтырып ҡуй аң, мал түлле була, тип иҫәпләгәндәр. Йәш яугир муйынындағы әлеге "ҡурсаҡ" та, бәлки, кешеләргә ҡарата шундай уҡ тылсымлы "түл төйөмө", "башҡорт ҡото" булалыр? әр хәлдә Тәңре йә Алла ы түгел дә инде был ырымдар. Ана, ҡурыҡан тамырлы уранхай халыҡтары быңдай ындарҙы ҡайын туҙынан, ағас сөрөгөнән, ә уңыраҡ төрлө металдан я ап, шуға табыналар. Тиренән, ағастан йә башҡа берәй нәмәнән я алған ата-баба йә шаман ындары төрки, монгол халыҡтарында, Алтай, Саян ҡәүемдәрендә лә ныҡ таралған. Ғәжәпләнә е юҡ, «әҙәм башы» йә башҡаса аталған талисман-бетеүҙәрҙе халыҡтар әллә ҡасанғы томанлы замандарҙан, донъя яралғаны бирле тағып йөрөй. Башҡорттарҙың ошондай ын-бетеү йөрөтөүе лә уларҙың бик боронғолоғон, тәрән тарихи тамырлы булыуын раҫлап тормаймы ни? Баш-

ҡорттар таҡҡан ын мандрагора тамырынан түгел, ә ағастан юнып я алған. Ләкин башҡорттар ғына шулай эшләйме? Мандрагораның донъя буйлап даны шул тиклем таралған, уның мөғжизәүи ҡөҙрәте хаҡындағы имеш-мимештәр шул хәтлем күп ки – был үҫемлек тамырын табыу йылдан-йыл ауырлаша ғына бара. Мандрагораның үҙ даны уның үҙен әләкәткә илтә, күпләп ҡырылып, ирәк осраусы үҫемлек булып ҡала. Ләкин уға эйә булырға теләүселәр ис тә кәмемәй. Шуға мандрагора үҫмәгән йәки инде ҡырып бөтөрөлгән ерҙәрҙә алдаҡ кәсеп барлыҡҡа килә, тиҙәр. Ишеткәне бар Артыр бейҙең: изгеләштерелгән мандрагора үҫмәгән тарафтарҙа бындай ын-бетеүҙәрҙе рәүештәре шулай уҡ әҙәм кәүҙә енә оҡшап торған башҡа үҫемлек тамырҙарынан: тау уғаны, имбир, женшень, беладонна тамырҙарынан, йыла, тирәк ағастарынан да я айҙар, ҡай ы саҡ мандрагора тип бик ҡиммәт хаҡҡа алдап та аталар, имеш. Башҡорттар уны, күрә ең, йыла ағасынан я арға өйрәнгән...

Ошо кескәй кеше ындарын халыҡтар, инаныуҙарына ҡарап, төрлөсә файҙаланған, уларҙы изгеләштереп, бик ҡәҙерләп аҡлаған. Сөнки халыҡтар өсөн был изге ындарҙың тылсым асылы уларҙың ниндәй есемдән эшләнеүендә түгел, ә атабабаның уға ниндәй мәғәнә алыуында, изге тип табыныуында, тәбиғәтте, кешене, донъяны танып белеүҙәге боронғо тамырҙар сығанағы итеп ҡарауында; тәбиғәттең бөйөклөгөнә, йәшәү көсөнә ышаныуҙа. Ошо ағас ындарҙың көсө лә шул бик борондан билдәле мөғжизәле мандрагораға, уның тылсымлы сифаттарына барып тоташыуы ап-асыҡ. Мандрагора тамырының тылсым көсөн дә, инәбеҙ а-уа менән бер үк ерҙән яратылыуынан, тип аңлатыу осраҡлы түгел. Мандрагораға инаныу, уны изгеләштереү йә үдлек, насаралыҡ, мосолманлыҡ килгәс тә юғалмаған, мөғжизәүи яҡтары көсәйтелеп, был тәңгәлдә аман үҙ бурысын атҡара килгән.

***

... Артыр бейҙең бөгөн әллә ни мәшәҡәте юҡ, ғәскәри мәсьәләгә ул ҡыҫылмай, ә башҡалар менән аралашыуға уны хәҙер, илселек сәркәтибе менән бөгөн үҙгә килешеүенән уң, бик үк яҡынлаштырып бармаҫтар. Шуға ул, урынынан ҡуҙғалмайса, уйланып ултыра бирҙе. Мандрагора, мандрагора... Иҫке яҙмаларҙа Артыр бей мандрагора тамырын ниндәй шарттарҙа әм нисек йыйыу кәрәклеген ынландырған үрәттәрҙе лә күргәне бар. Бере ендә ҙур уғыш үткән йә ниндәйҙер фетнә баҫтырылған ер күр әтелгәйне, ахыры ы, ярым ҡараңғылыҡ йәйелгән шомло, тауташлы бер урында рәт-рәт дар ағастары теҙелеп киткән. Уларҙың әр ҡай ы ына кешеләр аҫылған... Берәү е янында – гигант япраҡтары тарбайып торған мандрагора. Ул бау менән ҡара эт муйынына бәйләп ҡуйылған. Әҙ генә ситтәрәк мандрагора тамыры йыйыусы кеше күккә ҡарап борғо ҡысҡырта. Моғайын, ҡара эт тамырҙы йолҡоп сығарған мәлдә мандрагораның үлемесле тауышын ишетмәҫ өсөн ҡысҡырта ул борғоно. Мандрагора – ярым үҫемлек, ярым тере йән, тип раҫлауҙар тиктомалға түгелдер шул. Дар ағасы аҫтында – ялҡын төҫлө ял: сатыр ымаҡ киң япраҡтар гөлләмә ен – ялпылдап торған ҡалын сәсле баш, түбәнерәк айырылып киткән тамыр суҡтарын – бармаҡтары тырпайып торған, тер әктән бөгөлгән ҡулдар, ә иң аҫтағы саталарын – аяҡтары тип, ир йәки ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә тасуриланған. Мандрагора «аяҡтары»на йыш ҡына ҡара эт бәйләп ҡуйыла торған булған. Рум осоро ғалимы Иосиф Флавий шуғалыр мандрагораны, ҡара эт ярҙамында урып ала торған ялҡын төҫөндәге ҡот килтереүсе үҫемлек, тигән.

«Ҡара эт ярҙамында» йәки «үлем менән алышып яҡкан ҡара эт» тигәндәренең, әлбиттә, үҙ мәғәнә е бар. Ул мандрагораны табыу әм ҡаҙып алыу ни тиклем хәүефле шөғөл икәнен иҫкәртә. Был хаҡта ла уҡығаны бар Артыр бейҙең. Ялған

Әпүләй тигән бик боронғо икенсе бер Рум ғалимы уҡымышлы ының «Гербарий йәки үҫемлек дарыуҙары» тигән китабында ла мандрагораны нисек эҙләп табыу әм ҙур аҡлыҡ менән ҡаҙып алыу юлдары күрһәтелә. Әгәр мандрагораға яҡынлаш аң, төндә уның башы шәм ымаҡ яҡтырып тора, ти ул. Ләкин мандрагораны шунда уҡ урып алырға ашыҡмаҫҡа кәрәк. Сөнки уны ерҙән йолҡҡан саҡта үҫемлек тамыры бик йәберләнә, ыңғыраша, үҙәк өҙгөс әшәке тауыш менән ҡысҡырып та ебәрә. Быны ишеткән әр кем торған ерендә үк йән бирә. Тауышы менән генә түгел, йолҡа башла аң, имеш, мандрагора ағыуы менән дә бәреп йығырҙай тәьҫир итә. Йәшерәк үҫемлек еҫенән кеше аңын юғалта, ә өлгөргән мандрагора үлтерергә лә мөмкин. Шуға, мандрагораны тап аң, тейергә ашыҡма, йә әт кенә уны тылсымлы тимер ҡорал (хәнйәр ҙә ярай) менән ыҙып, түңәрәк эсенә ал. Өс ҡат түңәрәк эсенә ал аң, тағы ла әйбәтерәк. Шулай итмәгәндә, бигерәк тә әгәр мандрагораға яуыз кеше ҡағыла икән, ул ҡаса, бик тиҙ күҙҙән юғала ла ҡуя.

Мандрагораны түңәрәк эсенә “бикләп” ҡуйғас та әле уға тимер менән дә, ҡул менән дә ҡағылырға ярамай. Тамырын асыу өсөн ерҙе үҫемлек тирәләй тик фил өйәгенән я алған таяҡ менән генә ҡаҙырға кәрәк. Ошолай аса торғас, башта мандрагораның ҡулдары, унан аяҡтары күренер. Шул саҡ уның биленән ныҡ оҙон бау менән йә әт кенә бәйләп өлгөрөргә кәрәк. Ләкин үҫемлеккә үҙең барыбер ҡағылма, мандрагораның үҙәк өҙгөс зарлы тауышын ишетмәҫ өсөн ҡолаҡтарыңды ыҫмала йәки балауыҙ менән ылап ҡуй ҙа бауҙың икенсе осон ҡара эт муйынына бәйлә. Тик ошоғаса этеңде бер-ике көн ашатмай тот, муйынына бауҙың икенсе осон бәйләгәс кенә эт алдына ит ырғыт... Ас эт ябырылып ашарға ташланыр әм шул ыңғай мандрагораны төбө-тамыры менән ерҙән урып та сығарыр...

Әлбиттә, мандрагораның ҡарғыш тауышын ишеткән байғош этең шунда уҡ йән бирер, ә үҙен ҡаҙып алған кешегә тылсымлы тамыр зыян килтермәҫ, хужа ғанар, көс бирер, эйә енә хеҙмәт итер.

– Әгәр этеңде бик ҡыҙған аң, әләк иттерә ең килмә ә, – тип дауам итә Әпүләй, – мандрагораны йолҡоп алыуҙың икенсе юлы ла бар. Эт урынына таш атҡыс ҡорал – манганға оҡшаш ҡоролма эшләп алырға. ығылмалы оҙон ағас ҡолғаны ергә ҡаҙып ултыртырға ла, уның башын ергә эйеп, мандрагора тамырына бәйләгән бауҙың икенсе осон шуға нығытырға. Эйелгән ағасты ирегә ебәр әң, ул, алмауырға әүерелеп, турайған саҡта ҡапыл ғына мандрагораны төбө-тамыры менән урып та сығарыр...

Был осраҡта ла кеше үтә аҡ эш итергә тейеш. Тамырҙы көпә-көндөҙ түгел, эңер төшкәс, байып барған ҡояшҡа ҡарап урып алыу мотлаҡ. Унда ла мандрагора тауышын ишетмәҫ өсөн ҡолаҡтарҙы ыҫмала йә балауыҙ менән ыларға, көслө итеп мөгөҙ борғо ҡысҡыртырға кәрәк.

Үҫемлекте шулай урып сығарғас та, уны япраҡтары менән бергә быяла ауытҡа “бикләп” ҡуйырға ҡушалар. Сөнки уның тамыры ғына түгел, япраҡтары ла кешегә көслө тәьҫир итә, иҫтән яҙҙыра, тилеләндерә, бәғзе саҡта телдән яҙҙырыуы ла ихтимал.

Уның урынына, кеше ҡиәфәтендәге мандрагора тамырын үҙендә йөрөткән кеше әр ерҙә башлыҡ, түрә була, нимә телә ә шул ысынға сыға, мөхәббәттә лә тиңдәш еҙлек яулай, бәхет күрә, балда-майҙа ғына йөҙөп йәшәй.

Ауырып кит әң дә, мандрагора – көслө дауа. Ундай саҡта сырхауҙың ҡай ы ере ауырт а, мандрагора тамырының да шул ерен ашарға ҡушҡандар: ҡулы ауырт а – ҡулын, аяғы ауырт а – аяғын... Тамырҙан я алған ын-бетеү сихырҙан, зәхмәттән аҡлай, түл еҙлектән ҡотолдора, ирлек кәрен арттыра... Хәйер, мандрагора дауаламаған сир донъяла юҡ: ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан, баш әйләнеүҙән, быума сиренән... Ҡолаҡтар, быуындар ыҙлағанда ла, ашҡаҙан-эсәк юлдарын таҙартыу маҡсатында ла файҙаланғандар. Шәреҡтә, боронғо Румда мандрагоранан эшләнгән шарап та мөхәббәт эсемлектәре рәүешендә киң билдәле булған. Ҡатын-

ҡыҙ мандрагоранан ирҙәрҙе үҙҙәренә ҡаратыу, башын әйләндереү, ғишыҡ көсәйтеү бетеүҙәре я атҡан; юнандарҙың мөхәббәт ила иә е Афродитаның ғишыҡ көсөн дә нәҡ ана шул мандрагора мөғжизә е менән бәйләйҙәр бит. Мандрагора тамырынан я алған, тип йәшереп кенә шифалы май, өртөнөү әйберҙәрен, мөхәббәт бетеүҙәрен бик ҡиммәткә Бағдад баҙарҙарында тәҡдим итеүҙәрен Артыр бейҙең үҙенең дә күргәне-ишеткәне бар.

Хәлбүки, мандрагора тылсымы хаҡындағы имеш-мимеш Урал тарафы төркиҙәре, бигерәк тә ислам төбәктәрендә булып ҡайтҡандары ара ында барса сирҙән ауыҡтыра торған кешегә оҡшаш «тере үлән» рәүешендә ишетелеп ҡуйғылай ине. Унын башҡорттарҙа киң таралған ошо кескәй ҡурсаҡ ын менән ниндәйҙер ҡәрҙәшлеге булыуын ул саҡта Артыр бей ҡайҙан бел ен? Аҙаҡ шәреҡ илдәрендәге сәйәхәтендә ул мандрагора хаҡында аҙым айын ишетеп йөрөнө, ҙур ҡала баҙарҙарында ниндәйҙер йылғыр әҙәмдәрҙең сама ыҙ ҡиммәт хаҡҡа, йәнә е, «ир ҡеүәтен арттырыусы бетеү», «йоҡо дарыуы», «мөхәббәт үләне» тип атыуҙарына, хатта башҡорт муйынындағы әлеге кескәй генә ынға оҡшатып юнып эшләнгәндәренә лә осраны. Мандрагора хаҡында күберәк белгән айын Артыр бейҙең унын менән ҡыҙыҡ ыныуы ла арта барҙы. Ислам дине был үҫемлекте ҡабул итмәй, сөнки, баҡти әң, мандрагораның серле ҡеүәте лә, мәжүсиҙәрҙеке ымаҡ, ике яҡлы икән: берәүҙәр уны әр яҡлап изгеләштер ә, икенселәре ҡара, яуыз көстәр менән бәйләй. Быға мандрагораның йыш ҡына дар ағасы аҫтынан үҫеп сығыуы, үлем менән бәйле булыуы ла сәбәптер, моғайын. Был үҫемлектең өҫкө яғы ҡараңғыла ялҡын төҫөн алыуы, яҡтырып тороуы арҡа ында уны «иблис шәме», «убырлы ҡарсыҡ сәскә е» тип атау ҙа бар. Бер Алла ҡа инанған мосолман руханиҙары, әлбиттә, быңдай күп раббылыҡты ҡабул итә алмай. «Иблис шәме»нә, «убырлы ҡарсыҡ сәскә е»нә йәки үлемгә нисек табына ың ти инде?! Мандрагоралағы ике яҡты — ике раббылылыҡты улар Ҡөрьәнгә тиклем булған Апастак тәғлимәте менән бәйләй әм уны күп раббыға табыныусы мәжүсилек тип анай. Апастак тәғлимәте, нисек кенә сәйер тойолма ын, быңа нәҡ башҡорттарҙа тәрән эҙ ҡалдырған. Анау көн башҡорт йыраусы ы «Урал» тигән боронғо ҡомартҡыларын өйләп-көйләп ултырғайны. Фаҙлан улы Әхмәттең шул саҡ төҫө үҙгәрҙе, оло йәштәрҙәге сәсәнде тыңлап та бөтөрмәйсә, әҙәп еҙлек күр әтеп, тороп китте. Сөнки аҡ аҡал шул ҡомартҡыны, әҫәрҙәге Урал батыр менән Шүлгән аша, исламға ҡаршы булған, әлеге ике раббылыҡты раҫлаған Заратуштра пәйғәмбәр әм унын изге китабы аналған Апастак тәғлимәтен тасуирлап ултырҙы ла ба а! Ибн Фаҙландың башҡорттарҙы яратып бөтмәүенең йәнә бер сәбәбе лә "йәджудж, мәджудж ҡырағайҙары" тип йөрөгән мәжүсиҙәрҙең бик тә боронғо юғары мәҙәниәткә бәйләнешле булып сығыуҙары булды, шикелле.

Шәреҡ илдәрендә саҡта Артыр бей әлеге шул мандрагора тигән нәмәне үҫеп ултырған ерендә үҙ күҙҙәре менән күрергә күпме тырышманы, әммә был шөғөл ете йоҙаҡ аҫтындағы хәүефле өнәр булып сыҡты. әр кем эҙләй алмай икән уны. Мандрагораның ҡайҙа үҫеү ихтималлығын тоҫмаллаған хәлдә лә, ул телә ә кемгә бирелеп бармай, бигерәк тә насар уйлы кеше яҡынлашҡанын иҙеп ҡал а, ҡаса ла китә, имеш. Шуға ла мандрагораны бик саф, бик та ыллы кеше генә эҙләй-йолҡа ала. Артыр бей бихисап таныштары аша ошондай үләнсе менән осрашып ҡарарға булды. Ләкин был эш тә бик үк ябай түгел икән, « унарсылар» уға асылып барманы. Нисек кенә инәлмә ен, күпме генә хаҡ ҡуйма ын, ошондай эшкә Артыр бейҙе эйәртеп барыу хаҡында ишетергә теләүсе лә табылманы. Күп тырыша торғас, шулай ҙа тапты берәүҙе Артыр бей. Унда ла үҙенең табиплыҡ өнәре арҡа ында.

Табиплыҡҡа ул бер ҡайҙа ла уҡыманы, оҫталарға эйәреп, үҙаллы төпсөнөп өйрәнде. Хәйер, күп йылдар сит-ят тарафтарҙа йәшәгәндә әр саҡ табип эҙләп тә йөрөп булмай, Артыр бей ҙә тора-бара үҙен үҙе дауаларға өйрәнде. Хәҙер ул кеше-

нең эсендә булған барса ағзаны, ҡайҙа урынлашҡанын, ауырыуы сәбәбен... барыын теүәл белә, күҙен йомоп та күр әтә ала. иҙгер бармаҡтары сирле кеше тәне буйлап шыуып йөрөп, сирле ерҙе үҙҙәре табып ала. Мандрагора “ унар”ына йөрөүсе лә Артыр бейгә ошо арҡала үҙе килеп эләкте, гәрсә табиплығы ярҙам итте. Кем икәнен, исемен бер ҡасан да белмәне Артыр бей, «сырхау мосафир» тип кенә таныштырҙылар уны, ашҡаҙаны, бауыры яфалай, ябыға, күҙгә күренеп кибә, тинеләр. Кемдәргә генә барып ҡарамаған ул, ниндәй генә им-том күрмәгән, « әр сырхауҙан ауыҡтыра торған» мандрагора төнәтмә ен эсеп тә, тамырын ашап та ҡараған, тик өҙөмтә е булмаған. Бына шул «мандрагора» тигән үҙ арбаны ла инде Артыр бейҙе: «Ҡайҙан тапты икән уны? Бәлки, үләнселәрен беләлер?» Был кеше менән оҙаҡ өйләшеп ултырып, тәнен ентекле тикшереп сыҡҡас, Артыр бей сирҙең асылын ярай ы тиҙ асыҡланы: йығылыпмы, ауыр күтәрепме, мосафир кендек бәйләмен ҡуҙғатҡан. Был — бик хәүефле хәл, кендек бәйләме ҡуҙғал а, ул эстәге бар нәмәне үҙ артынан ситкә тарта. Шунан китә: йөрәк ауырта, ашҡаҙан, бауыр... Артыр бей, ныҡышып, мосафирҙан ҡайҙа былай имгәнгәнен төпсөндө. Теге е бик асыла ы түгел ине, тик сәбәбен белмәйсә дауалап булмаясағын әйткәс кенә, мандрагораға “ унар” мәлендә уны тартып сығара ы ҡолға- алмауырҙың ҡапыл ысҡынып китеп, иҫен яҙҙырғансы эсенә килтереп уғыуын таныырға мәжбүр булды. «Күрә ең, мандрагораны йәберләнем,— тип тә өҫтәне. — Шуға ярлыҡамаҫ ул мине...» Артыр бей, әлбиттә, башҡаса уйланы. Был осраҡта мандрагора ыуы түгел, әллә нимә эс әң дә, унан имгәнеү бөтмәй. Уның өсөн эске ағзаларҙы ҡайтанан урындарына ултыртып сығырға кәрәк. Бына ошо әмәле менән хайран итте лә инде Артыр бей әлеге кешене, аҙаҡ үҙен мандрагора ҡаҙыу өсөн иптәшкә алырға күндерҙе.

...Юлға иртүк сыҡтылар. Мандрагора эҙләүсе — алдан, Артыр бей уны күрәкүрә генә байтаҡ арттан төштө. Мосафирҙың төп шарты шундай: мандрагораны ҡурҡытырға ярамай. Бик оҙаҡ барҙылар, ниндәйҙер тау-таш, кеше аяғы баҫмаған ташландыҡ ерҙәрҙән үттеләр. Инде кисләтеп тә бара, ҡара эт етәкләгән (бер бәләгә ҡалғас, был юлы ул ҡолға- алмауыр ҡулланмаҫҡа булды) мосафирҙың ыны ла хәҙер томанлы ғына күренә... «Шул ылтау менән күҙ яҙҙырырға уйлаймы әллә?» тигән шикле уй килде бер мәл Артыр бейгә. Ҡояш батыуға алыулай, ә мандрагораны ул байып бөтмәҫ борон алалар... Ә ә, туҡтаны... йә әт-йә әт ян-яғына ҡаранып алды. Ниндәйҙер ҡараңғы, сүп үләндәре баҫҡан шомло үҙән... ул яҡлап тау күләгә е төшөп ҡараңғылатҡан ҡыуаҡтар өйкөмө... «Әллә таптымы эҙләгәнен?» Артыр бей иҙҙермәй генә мосафирға яҡын килде. Уны ы, эйелеп, башы ялҡындай ялпылдап торған үҫемлек төбөнә тубыҡланған. Ай- ай, япраҡтары ниндәй яҫы, дәү! Дегәнәк япраҡтарына оҡшаған, тик быныҡы шыма, йылтыр, елкәүестәй киң...

Мосафир биленән тимер сыбыҡ урып алды ла, аяғүрә ҡалҡынып, ошо таяғы менән әлеге үҫемлекте түңәрәкләп ыҙып сыҡты. Унан кеҫә енән кескәй көрәккә лә, ҙур ҡалаҡҡа ла оҡшаған икенсе бер аҡ нәмә сығарып, әлеге түңәрәк ыҙыҡ буйлап үҫемлектең тамырын тупраҡтан әрсей башланы.

Мосафирҙың ниңә шулай эшләүен дә аңланы Артыр бей. Әлеге Әпүләй тигән ғалимдың мандрагораны нисек йыйыу хаҡындағы кәңәштәрен беләләр. Мандрагора инән ҡасма ын ти әң, уны күргәс тә, әлеге мосафир ымаҡ, эргә- тирә ен тимер сыбыҡ менән сыйып алырға ла ошо түңәрәк буйлап ҡына тамырын тупраҡтан таҙарта башларға кәрәк. Мосафир шулай эшләй ҙә. Артыр бей таш артына ышыҡланыбыраҡ тағы ла яҡыная төштө. Мосафирҙы хәҙер ул ҡабырға яҡтан, әлеге ҡыуаҡлыҡтарға яҡын ерҙән күҙәтә, шуға бары ы ап-асыҡ күренеп тора. Мосафир шәп эшләй, үҫемлек тамырының ярты ы асылған инде, “аяҡ”тарын ғына бер аҙ таҙарта ы бар. Унан тамырҙы ҡара эт муйынына ҡушарлап бәйләргә лә, мандрагора тауышынан иҫте юғалтмаҫ өсөн, ҡолаҡтарҙы балауыҙ менән ылап,

бер ынтылыуҙа үҫемлекте тартып сығар ын өсөн, ас эт алдына ит киҫәге ырғытырға ғына кәрәк . . .

Артыр бей шулай уйлап өлгөрмәне, ҡапыл яҡындағы ҡыуаҡлыҡ артынан ҡара атҡа атланған, ҡараға бөркәнгән ниндәйҙер ыбайлы йән-фарман сабып килеп сыҡты ла мосафир өҫтөнә ташланды... Шул уҡ мәлдә тиерлек Артыр бейҙең дә башына тупаҫ нәмә килеп бәрелде. Күк ишелгәндәй быңдай ауырлыҡтан Артыр бей аңын юғалтты...

...Иҫенә килгәндә ҡараңғы төн ине. Эргә ендә эт тә, мосафир ҙа юҡ. Артыр бей ушын йыя алмай оҙаҡ ултырҙы. Шунан ғына хәл-әхүәлен тойомлап, шомло урынданирегә табан шыуыша башланы.

Ошонан уң Артыр бей теге мосафирҙы башҡаса күрмәне. Үҙе лә, эҙ яҙҙырмаҡ була, йә әтләп икенсе тарафтарға йүнәлде. Әммә әлеге ваҡиғаны ла ниндәйҙер сихыр көсө тип ба аларға ашыҡманы. Мандрагора йыйыусыларҙың үҙ-ара бик көнсөл мөнәсәбәттәре йыш ҡына бер-бере ен үлтереүгә үк етеүен белә ине ул.

Артыр бейҙе үкендергәне бүтән ине: күпме йыйынып, күпме ныҡышып мандрагора йыйыусыны табып ал а ла, уның аша был тылсымлы үҫемлек хаҡындағы барса имеш-мимеште дөрөҫләй ҙә, кире ҡаға ла алманы. Башҡаса ул был кәсептә йөрөүсе башҡа берәүҙе лә осратманы...

Шулай ҙа оло хәүеф менән ҡаҙып алынған мандрагораның киң таралыуы әм тәғәйенләнеше ирлек төшөнсә е менән нығыраҡ бәйле, буғай. Мандрагораның дар ағасына аҫылған ирҙәрҙең йән бирер алдынан ҡойолған ирлек орлоҡтарынан шытып сығыуы, ирҙәр көсөн арттыра, ирлекте яр ыта торған дарыуҙар эшләнеүе, тамырынан башлы ындар я ап, муйынға аҫып йөрөүҙәре... Бәлки, ошоларҙы тоҫмаллап, Фаҙлан улы башҡорт муйынындағы кескәй ынды «әҙәм башы» ҡиәфәтенән әллә ни айырылмаған нәмәгә сағыштырғандыр? Уға яуап биреүсе мут башҡорт та тылсымлы ындың ғәрәп илсе е сағыштырған нәмәгә оҡшашлығын тоҫмаллап йылмайғандыр...

Нисек кенә булма ын, ибн Фаҙлан хәҙрәттәренең урындағы халыҡты күрәләтә кәм етергә, хайуандарға, тағы әллә ниндәй юҡ-барға табынған, енси тотанаҡ ыҙ, рухи тамырҙары булмаған бысраҡ мәжүсиҙәр итеп кенә ҡарарға тырышыуы оҡшап етмәй Артыр бейгә. Исламға тоғро булмау, бигерәк тә мәжүсилек – Фаҙлан улы өсөн, күрә ең, иң әшәке сифат, уларҙың көнкүреше лә, инаныуҙары ла, теллөгәттәре, мәҙәниәттәре лә насар, бик түбән, ҡырағай хәлдә. Шуға ла илселек сәфәренә таяҡ тығып маташҡан Хәрәзмша биләмә ендәге Ардакуа ҡәрйә ендә йәшәүселәр өйләше, унынса, "баҡа баҡылдауы"на оҡшаш. Баҡти әң, был халыҡ, мосолман булыуына ҡарамаҫтан, " әр доғаларын мөслимдәр әмире Али Ибн абу Талиптан баш тартыу" менән тамамлай икән. Эйәктәре аҫтында тар ғына аҡал йөрөтөүсе мәжүси төркиҙәр Әхмәт хәҙрәттәре өсөн "алашар", бет ашаусы, хатта ки "кәзә тәкә е!" Үҙҙәрен күпмелер әсирлектә тотҡан уғыҙ ғәскәр башлығы Ҡатаған улы Әтрәк бысраҡ, әрпеш, "тиргә ҡатып, теткеләнеп, йыртылып бөткән эске күлдәктә йөрөй..."

Хәйер, илселек сәркәтибенең урындағы ҡәүемдәргә кәм етеүле ҡарашының, бәлки, башҡа шауҡымы ла барҙыр. Ысынлап та, көнөнә нисәмә ҡат йыуынып-таҙарынып, ҡол ҡыҙҙарынан тәненә махсус майҙар өрттөрөп, ыланып- ыйпалып батша арайҙарында ғына йәшәгән, йылы, йомшаҡ келәмдәргә баҫып, атлас юрғандар аҫтында йоҡлап, иркә наҙҙа ғүмер кисергән нәзәкәтле аҡ өйәккә быңдағы мал аҫыраусы, аҙналар, айҙар буйы өҫ кейемен алмайса ҡыр бысрағына буялып, ҡола яланда көн күреүсе кешеләр нисек күренергә тейештәр уң?! Уйла аң, ғәрәптәр үҙҙәре лә әле ҡасан ғына шул хәлдә түгел инеме ни? Халыҡтар яҙмышын әлеге тәҡдир хәл итә, был хатта уларҙың ҡайҙа йәшәүенә лә бәйле.

Ярты донъяны әйләнеп сыҡҡан Артыр бей башҡорттарға ла ғәрәптәрҙең нисек шулай күбәйеп, күтәрелеп китеүҙәрен аңлатып бирергә, ислам диненең ә әмиәтен

күр әтергә теләй. Халыҡтарға ғәрәптәрҙән үрнәк алыу фарыз. Улар, ана, ислам динен әм сауҙа юлдарын ныҡ файҙаланды. Әлбиттә, Ғәрәп ярымутрауы аша күп сауҙа юлдары үтә: Фарсы, Сүриә, индостан, Рум, Византия, Чин, тағы ла алыҫыраҡ илдәр... Ҡояш сығышынан ул барып батҡан ерҙәргәсә уҙылған сауҙа юлдарының иң оҙоно – Төрки донъя ы... Сауҙа бер ваҡытта ла буш тормаған Бөйөк ебәк юлы... Быны ы бигерәк тә мө им, хатта Ғәрәп ярымутрауында уғыштар башланып кит ә, Ебәк юлы ваҡытлыса ҡоронан диңгеҙгә – ыу юлына күсә. Ғәрәп ярымутрауының көньяғынан каруандар хуш – еҫле үҫемлектәр, туҡыма, Африканан – ҡолдар, фил өйәге, алтын ҡомо, Сүриәнән – уғыш кәрәк-яраҡтары, ҡорал, үҫемлек майҙары, ашлыҡ; Ҡытайҙан – ебәк, Парсы ҡултығынан ынйы ташыйҙар. Каруан юлдары буйлап өр-яңы тауар келәттәре, юлаусылар өсөн махсус йорттар төҙөлә, баҙарҙар ҡорола. Былар бары ы сауҙа юлына тура килгән ғәрәп ҡәүемдәрен бөтәйтте, үҫтерҙе, милләттең йәшәү сығанағына әүерелде. Сөнки барса байлыҡты, сауҙа каруандарын аҡлау мохтажлығы тыуҙы. Ошо арҡала урындағы халыҡ үҙенә эш тапты. Бай каруандар хәүеф еҙлеген күсмә ҡәбиләләр ҡораллы аҡсылар, юл күр әтеүселәр менән тәьмин итте, үҙ биләмәләренән үткән өсөн сауҙагәрҙәрҙән иғәнә алды, үҙ сиратында, уларға тире, йөн, дөйә атыу мөмкинселеге тыуҙы. Эш менән тәьмин ителерҙәй быңдай урындарға өнәрселәр күпләп күсеп ултырҙы, өнәрселек үҫте. Шуға ла сауҙа эшен йәнләндереүгә күсмә ҡәүемдәр ҙә ихлас ярҙам итте, әкренләп ултыраҡ тормошҡа өйрәнә, өнәрсе, сауҙагәр булып китә башланы. Нисек аңлатырға ошоларҙы аман да мәжүсилектә йәшәп ятҡан халыҡтарға?

Ә бит быларҙың әммә е тиктәҫтән түгел, ә үҙ мәлендә хәлифәт башлыҡтарының аҡыллы фекер йөрәтөүенән, иҫке ҡараштарҙы еңеп, дөрөҫ юл айлай белеүҙәренән килеп тыуған. Миҫалға Бағдад ҡала ын ғына ал. Хәҙер ул – хәлифәттең баш ҡала ы, донъяның гүзәл бер төйәге булып дан ҡаҙанды. Ләкин был борондан уҡ шулай булмаған, ислам үҙәге булып элегерәк Алла илсе е изге Мөхәммәт пәйғәмбәр йәшәгән әм ерләнгән Ясриб ҡала ы хеҙмәт иткән. Тик ислам үҙәге донъя менән аралашыу юлдары сикләнгән, ыу ыҙ ҡомлоҡта ятҡан ошо Ясрибта аман ҡала бир ә, Ғәрәп иленең даны бөгөн шулай йыраҡтарҙан-йыраҡтарға таралыр инеме икән?

Бағдадтың барлыҡҡа килеүе хаҡында ла, әйткәндәй, тарихсылар төрлө өн өйләй. Имештер, хәлифәттең үҫә, нығына барыуын, әммә төпкөл сүллектә ятҡан Ясрибтан бүтән дәүләттәр менән аралашыу торған айын ауырлаша барыуын күргән хәлиф Мансур үҙенең төп арайын ҡайҙа алырға кәрәклеге хаҡында оҙаҡ баш ватып йөрөгән. Ләкин бер ҡарарға ла килә алмаған. Аптырағас, ил ағаларының кәңәш ҡорон йыйған. Унда ла бер фекергә килә алмағандар, ҡаты бәхәс ҡупҡан: күптәре « ис шикләнә е юҡ, хәлифәттең үҙәге булып Мәккә, Мәҙинә кеүек изге урындар ҡалырға тейеш» тигәндәр. Ҡаршы килергә, билдәле, күптәрҙең ҡыйыулығы ла етмәгән. Тик шунда хәлиф Мансурҙың быға са үҙгә ҡыҫылмай тын ғына ултырған яҡындарының бере е итәғәтле генә үҙ ораған: «Хәлифәттең төп арайын Тигр ярында алырға кәрәк, – тип көтөлмәгән тәҡдим әйткән. – Тик ул Ефрат йылға ына ла яҡын урында бул ын. – Йәнә былай тип өҫтәгән: – Ил, донъя менән идара итеү өсөн шунан да уңайлы урынды табыу ҡыйын буласаҡ”.

Хәлиф Мансур, күрә ең, зирәк кеше булған, үҙ фекерен өҙөп кенә әйтмә ә лә, уйға ҡалған: «Ысынлап та, әгәр баш ҡаланы ошонда төҙөгәндә, диңгеҙгә аҡҡан Тигр йылға ы ғәрәптәргә ярты донъяны асасаҡ. Месопатамия... Әрмән иле... Ә Ефрат аша Сүриәнән, шул тирәләге башҡа бик күп илдәрҙән уларҙа нимә бар – бары ы бында ағып торасаҡ...».

Бына шулай хәл ителә ҡом сүллегендә бикләнеп ятҡан ғәрәптәрҙең киләсәк яҙмышы. Яңы ҡаланы төҙөүгә төрлө илдәрҙән йөҙ меңләп оҫта килтерелә. Ике ҡат ҡәлғә стена ы менән уратып алынған майҙан урта ында иң тәүҙә йәшел көмбәҙле

гүзәл Хәлиф арайы ҡалҡып сыға. Күп тә үтмәй, уның тирәләй аҡ мәрмәрҙән алынған хөкүмәт биналары, ҡупшы мәҙәниәт арайҙары, бай йорттар пәйҙә була. Сауҙагәрҙәр өсөн каруан арайҙар төҙөлә, ҡала майҙандарында күккә олғашырҙай фонтандар атыла, урамдары сәскәгә күмелә... «Бағдад» тип исем бирәләр уға. Ғәрәп илселеге Иҙел болғарҙарына сығып киткән мәлдә, был ҡалала ике йөҙ мең йортта ике миллионға яҡын кеше йәшәй, тиҙәр ине. Китапханалар, дауаханалар... Ҡалала утыҙ меңгә яҡын мәсет, алтмыш меңләп мунса... Саф ҡала, таҙа ҡала, мәҙәниәтле ҡала... Тигр йылға ы буйлап меңдәрсә ҡайыҡ-көймәләр йөҙә, порттарҙа төрлө ил тауарҙары тулы йөҙҙәрсә караптар тора... Каруан юлдарында туҙан болоттары баҫылмай...

Баҙары ныҡ күтәрелә Бағдадтың. Шағирҙар уны данлап ҡасыдалар яҙа, ғәзәлдәр сығара, ғалимдар, сәйәхәтселәр ҙә уны ушы китеп маҡтай: Бағдад йылъяҙмаларға, тарих китаптарына инеп китә, «Мең дә бер кисә» кеүек бөйөк әҫәрҙәрҙә сағылыш таба. Ғәрәптәр үҙҙәре лә тырыша, донъяға билдәле ҡаҙаныштарҙы ныҡ файҙалана. Астрономия, математика, философия, медицина буйынса боронғо Юнан, Рум китаптары ентекле йыйыла, ғәрәпсәгә тәржемә ителә. Фарсы әм инд мәҙәни ҡаҙаныштары үҙләштерелә. Тәржемә эше әлеге хәлиф Мансур дәүерендә бигерәк тә ныҡ йәйелдерелә. Ошо ваҡытта юнандарҙың «Илиада», «Одиссея» китаптары тәржемә ителә, хәлиф Мансур үҙ ҡулы менән Византия императорына математика буйынса ҡулъяҙмалар ебәреүен үтенеп хат яҙа... Хәҙер семәрле ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған китаптар бар донъяла ысын сәнғәт әҫәре ымаҡ ҡабул ителә.

Әле Бағдад хәлифәтендә Ибн Макла вәзир булып йөрөй. Яңы ғәрәп каллиграфия ына нигеҙ алыусыларҙың бере е, тиҙәр уны, ошо таланты арҡа ында күтәрелгән ул арайҙағы ҙур дәрәжәгә[1]. Ә эш нисек башланған уң? Ҡағыҙ я ау серен ул саҡта Ҡытай өнәрмәндәренән башҡа белеүсе лә булмаған. Тик миләди 762 йылда Бағдад хәлифе Мансурҙың Сәмәрҡәндтәге вәкиле бер уғышта Ҡытайҙың ҡағыҙ эшләү менән шөғөлләнгән ике яугирын әсир итеп ала. Оҙаҡламай Сәмәрҡәндтә ҡағыҙ фабригы барлыҡҡа килә. Аҙағыраҡ ошондай фабриктар Бағдадта, Дамаскыла төҙөлә... Тора-бара ғәрәптәр ҡытайҙарҙың үҙҙәренән дә уҙҙырып ебәрәләр: ҡағыҙҙы улар иҫке-моҫҡо сепрәктән дә я арға өйрәнә...

Хәлиф Мансурҙың: «Баш ҡаланы Ефраттан йыраҡ булмаған Тигр ярында» төҙө әң, унда ярты донъя байлығы ағып киләсәк» тигән юрамышы төрлө яҡлап дөрөҫкә сыға. Ошоға бәйле бер ҡыҙыҡ хәлде лә иҫкә алғылап ҡуялар Бағдадта.

Хәлиф Мансурҙан күпкә уңыраҡ хәлифәт менән идара итеүсе Мөтәвәкилдең кесе малайы, тәхет вариҫы, аҡ ыҙлыҡ арҡа ында, Тигр йылға ы буйлап ағып китә. Тере ҡалыуына шикләнә әләр ҙә, көндәр, аҙналар буйы эҙләйҙәр уны. Ни айәт, ап- ау, яр буйында уйнап йөрөгән килеш табалар. Хәлиф, астан интеккәндер тип, уны йә әт ашатырға бойора. Тик кескәй малай ризыҡтан баш тарта. Ғәжәпкә ҡалған кешеләргә: «Көн дә йылға буйлап ябыҡ ауытта миңә егерме көлсә ағып килә ине, шулар менән туҡландым», — тип тә өҫтәй.

Йәнә ғәжәпкә ҡалған хәлиф Мөтәвәкил йылғаға көн дә көлсә ташлаусыны эҙләп таптыра ла: «Ниңә шулай эшләй ең?», – тип орай. Быны ы ябай ғына яуаплай: « еҙ, хәлиф ғәли йәнәптәре, изгелек эшлә лә ыуға ал, ваҡыты еткәс, ул иңә байлыҡ килтерер, тигән мәкәлде ишеткәнегеҙ бармы? – ти. – Миндә көлсәнән башҡа нәмә юҡ ине, шуға йылға буйлап шуларҙы ғына ағыҙҙым...»

Тәхет вариҫы булған малайын иҫән- ау табыуҙан түбә е күккә тейгән хәлиф шунда уға, ысынлап та, бик күп алтын-көмөш, зиннәтле әйберҙәр әм кешеләре

---

*[1]Макла улының артабанғы яҙмышы фажиғәле. Ул арай ыҙғыштарына ҡушылып китә лә дөрләп яна. Бик тә мәкерле язалай уны хәлиф: ҡағыҙға оҡланғыс хәрефтәр төшөрә торған уң ҡулын киҫеп ташларға бойора. Әммә рәссам-каллиграф унда ла бирешмәй, ҡырҡылған күлтә енә ҡәләмен бәйләп яҙа торған булған. Ә уңынан ул ҡулы менән дә оҫта яҙырға өйрәнгән.*

менән бергә биш ауыл бүләк иткән. Бик байып киткән, ти, ошонан уң Тигр йылға ына көн дә егерме көлсә ырғытып йөрөүсе әҙәм. Уның варисҭары әле ла Бағдад ҡала ында балда-майҙа ғына йөҙөп йәшәп яталар, имеш...

Ә иң ҡыҙығы: «Изгелек эшлә лә ыуға ал – балыҡ белер, балыҡ белмә ә, халыҡ белер» тип әҙ генә үҙгәртелгән мәҡәлде Артыр бей әүәл башҡорт илендә лә ишеткәне бар ине. Күрә ең, ғәрәптәр менән бер бөгөн генә аралашмайҙыр бындағы халыҡтар...

Ғәрәптәр шулай күтәрелде, ә шул уҡ тарихи шарттарҙа йәшәгән башҡалар, әйтәйек, төркиҙәр? Юҡ шул, мәш үр ундар тоҡомонан булған, империяларҙы дер ҡалтыратҡан төркиҙәр уңғы дәүерҙәрҙә кирегә китте. Башта Ҡытайҙан Уралғаса әм унан да ары ярты донъяны эсенә алған дәүләт төҙөнөләр. Унан, Көнсығыш әм Көнбайыш ҡағанаттар тип, илде икегә бүлделәр. Шунан тоҡанды инде үҙ-ара ыҙғыш. Ата-баба васыятына, берҙәмлек рухына хыянат төркиҙәрҙе эстән ҡаҡшатты, көрсөккә терәне. Тырым-тырағай бар донъяға ибелделәр. Бына бит ул нисек, ярты донъяны биләгән төркиҙәр барын юғалтты, ә ярымутрауҙа, шөкәт еҙ ҡырағай тәбиғәттә мәжүсилектә йәшәгән ғәрәптәр донъяны яулау ысулын, халыҡтарҙы бер йоҙроҡҡа берләштереү яйын тапты. Мөхәммәт пәйғәмбәр саҡырыуы хәҙер бына мәжүсилек хөкөм өргән ҡырағай тарафтарға ла килеп етте. Башҡорттарға ла кәрәк булыр ул, әгәр үҙ мәнфәғәттәрен тәрәнерәк аңлай ҡал алар...

Эйе, Артыр бей хаҡлы: башҡорттарҙа күргән кескәй ағас ындар мәжүси сикләнгәнлек кенә түгел, уның тамырҙары, ис шик еҙ, мәңгелек серҙәренә, тормош яралыуға, тәбиғәт көсөнә ышаныуға барып ялғана. Тораташ ындар-бетеүҙәр төркиҙәрҙә лә, монголдарҙа ла, барса башҡа халыҡтарҙа ла, хатта шул уҡ ғәрәптәрҙең үҙҙәрендә бар. Улар кейеҙҙән, балсыҡ-таштарҙан, ҡайын ағасы туҙынан я алғандар, хайуан тиреләренән эшләнгәндәре лә булған. Был ындарҙы халыҡтар муйындарына ла таҡҡандар, кәртәләргә, ишек баштарына йә бағаналарға элеп ҡуйғандар. Яҡлау эҙләгән әҙәм бала ы тәбиғәт серҙәренән, үҙе аңлағанса уларҙы ила илаштырған, ындарын я ап хөрмәтләгән. Оҙайлы сәфәргә, хәүефле яуға, хатта унарға киткәндә лә ошо үҙҙәре уйлап сығарған ҡурсаҡ-бетеүҙәрҙән, тораташ ындарҙан мөғжизә өмөт итеп, уларға тәңкә аҡса ипкәндәр, ауыҙҙарына май ҙа яғыр булғандар... Мандрагора үҙе лә тәбиғәттән тыш уйҙырма түгел, ә ысынбарлыҡта булған үҫемлек. Фәнни яҡтан ул тик уңғы быуаттарҙа ғына ныҡлап өйрәнеләсәк, уның тылсымлы көсөнөң серҙәре ғилем телендә асыласаҡ. Тик мандрагораның ысын көсө, моғайын, уның серлелегендә, мөғжизәләргә төрөлөүендә, уның изге ҡеүәтенә ихлас ышаныуҙа. Юҡҡамы ни сал тарих төпкөлөнән алып бөгөнгәсә мандрагораны «әҙәм башы», «әҙәм тамыры» тип атауҙары? Кескәй кеше ындары рәүешендәге бетеү-талисмандары, мандрагораның тылсымлы көсө әр заман фекер эйәләре, үҙ оҫталары теленән төшмәй.

Ана, Шәреҡтең бөйөк мөхәббәт йырсы ы Хафиз үҙенең ғәзәлдәрендә:

*Я твой смуглый увидел пушок.*
*И из райских садов мандрагоры*
*Потребовать сладостный плод, –*

тип елкенгән. Мандрагораның дәрт биреүсе мөғжизәүи көсөн Бокаччо үҙенең үлем еҙ «Декамерон» китабында, Шекспир «Ромео әм Джульетта», «Антоний әм Клеопатра»ла, Гете «Фауст» әҫәрендә данлаған. Мандрагора тылсымын Томас Манн, Вальтер Скотт, Рэй Бредбери кеүек мәш үр әҙиптәр ҙә урап үтмәгән.

Ләкин быларын Төрк Тәкин дә, Артыр бей ҙә, хатта Фаҙлан улы Әхмәт тә, әлбиттә, белмәй, улар быға ғәйепле лә түгел. Сөнки ундай заман әлегә тыумаған. Буласаҡ әҫәрҙәр, асыла ы белемдәр монарлы алыҫ киләсәктә ята.

Фаҙлан улы Әхмәттең Бағдадтан Болғарға барыу сәфәре хаҡындағы яҙмалар ҙа тик мең йылдар сама ы үткәс кенә табылыр. Яңы шарттарҙа егерменсе быуат башҡорт дәүләтен төҙөүсе, олуғ ғалим, ҡа арман яугир Зәки Вәлиди, үҙ иленән ҡа-

сып китергә мәжбүр булып, йыраҡ Мешхедта саҡта таба был яҙмаларҙы әм уңыраҡ, сит-ят илдәрҙә баҫтырып, донъяға тарата. Шуның менән тарихынан мәхрүм ителгән халыҡҡа уның ҡа арман үткәнен ҡайтарып бирә. Изге эш менән йөрөүсе Ғәрәп хәлифәте илселәренең ғәйеп-гона тары башҡала: үҙҙәре теләгәнме-юҡмы, улар йәшәү рәүештәре башҡаса булғандарға дорфалыҡ, дини фанатлыҡ юғарылығынан, үҙ ҡыйығы юғарылығынан ғына ҡарай, асылын ентекләп тикшермәйсә, ашығып үҙҙәре теләгән кәм етеүле ба а бирә. Шуның менән халыҡтың рухи терәген, изге тип анаған ынтылыштарын шик аҫтына ҡуя, тормоштарындағы тылсымлылыҡты, мөғжизәләргә ышаныуҙы емерә: ата-баба аманатын юҡ-барға тупаҫ оҡшатып, рухтарын ҡаҡшата, көндәлек ергә төшөрә, кеше күңелендәге бер ҡатлы ихлас ила илыҡҡа ҡара таптар тамыҙа. Хәйер, тарих уҙымында быны бик теләп, ысынбарлыҡты боҙоп, милләттәрҙе низағлаштырыу өсөн юрамал эшләүселәр ҙә булған. Ана, төрки донъя ының билдәле шәхесе Ши абетдин Мәржәни ҙә, ҡәрҙәш милләттәргә ҡарата кәм етеүле ҡарашын үткәреү маҡсатында, ибн Фаҙлан үҙҙәрен әллә ысынлап аңламай, әллә аңламағанға алышып, башҡорттарҙы фаллос культына йәбештереп ҡуйырға маташҡан. Әлбиттә, үҙ ялғанын оло мөхиткә үткәрә алмаған. Кире енсә, башҡорттарҙың бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, шуның менән ул күп кенә төрки зыялыларын үҙенә ҡаршы ҡуйған. Ә Муллаҡай ауылының данлыҡлы имамы Абдулла ишан и ә оло мир алдында Мәржәни китабын утҡа яҡҡан...

Тик утта китаптарҙың изгеләре генә түгел, изге булмағандары ла янмай ҡала шул. Шулай булма а, ибн Фаҙландың башҡорт еренән китеп, күп дәүерҙәр үткәс, уның кәйеф еҙ сағындағы үҙ ыңғайында ғына ысҡынған тыйнаҡ ыҙ сағыштырыуы, ҡапыл тағы ҡалҡып сығып, хаҡ хәҡиҡәт рәүешендә, имеш, «башҡорттар фаллосҡа табынған, муйындарына ағастан юнып я алған ирҙәр ғәүриәтен тағып йөрөгәндәр» ымағыраҡ «фәнни теориялар» барлыҡҡа килеүен ни менән аңлата ың? Фаҙлан улы Әхмәт әм Ғәрәп илселегендә булған башҡа изгеләр, үҙҙәренең аҡ ыҙ, ос оҙло әйтелгән үҙҙәренең күп быуаттар үткәс тә етдигә алынып, ошо хаҡта мәҡәләләр, китаптар, хатта диссертациялар яҙылыр, Урал тауҙары – салҡан ятҡан иргә, ҡалҡып ерәйгән тау-ҡаялар, тәбиғәттә даими тырпайып торған барса нәмә әҙәм бала ының ошо ағза ына оҡшатыла башлар, тип баштарына килтерҙеләр микән? Юҡтыр, әгәр шулай бул а, халыҡтың изге тип анаған төшөнсәләрен тупаҫ сағыштырыуҙарҙан, тотанаҡ ыҙ үҙҙәрҙән улар ҙа тыйылған булыр ине. Нишләй ең, тарих юлдары ымаҡ, изгеләр ҙә гона ыҙ түгел шул...

## Тәңреләр күктә ҡала

Алдағы көн Артыр бей ибн Фаҙланға: "Быңдағылар еҙгә тәҡдим я ай, – тигәйне. – Телә ә, башҡорт туйын күреп кит ен. Туйҙың ҡайҙа буласағын да әйттеләр. Беҙҙе шунда ҡатнашырға, ҡунаҡ булырға саҡырҙылар".

– Унда кемдәр буласаҡ уң?– ти алды Фаҙлан улы.– Нисек үтә ул "туй" тигәндәре?

– Кемдәр була, нисек үтә, ти егеҙме? – Фаҙлан улының ябай ғына орауынан Артыр бей, үҙ яҙмышын хәтерләп, ҡапыл ҡаушап ҡалды.– Нисек үтәме? – тип ҡабатланы йәнә. Нимә әйтергә икән быға, тип юғалып ҡалды уҙаман. Үҙ яҙмышын өйләп бир енме? Кәрәкме иркә яҙмышлы был ҡупырыҡ ғәрәпкә инең әллә ҡасанғы "мәжүси ғишыҡ-кисерештәрең"?

– Йола ын йола ит әң... – тине ул, аптырағас,– ҡәҙимгесә, үҙ тәртибендә, майлаған ымаҡ шыма үтәлер ул "туй" тигәндәре.

Фаҙлан улының сәйер енеп ҡараш ташлауын тойомлаған Артыр бей үҙен йә әтерәк ҡулға алырға тырышты:

– Башҡорттарҙа никахҡа инеүҙең байтаҡ сикләүҙәре бар,– тине, тыныслана

биргәс. – Туйсылар бик йыраҡтан килә, үҙ ырыуындан ҡыҙ алыу борон-борондан тыйыла башҡорттарҙа. Шуғалырмы, уларҙың ҡисса-дастандарында ла батырҙары кәләш эҙләп йә ер аҫты, йә ыу төбө батшалыҡтарына уҡ төшөп китә... Сөнки ҡан-ҡәрҙәшкә өйләнеүселәрҙе ырыуҙаштарының ҡә әре, илдән ҡыуылыу, ҡатынын тартып алыу йәи ә үлем яза ы көткән. Нишләй ең, йәшлектең үҙ ҡанундары...

Тағы тотлоҡто Артыр бей, үҙенең аянысла яҙмышы иҫенә төштө.

...Артырҙы ла "бей" тип түгел, уйындарҙа ал, көрәштәрҙә бил бирмәҫ, быуындары нығына барған алсаҡ егет итеп кенә беләләр ине. Ата-әсә енең берҙән-бер тан ыҡ улдары булды ул. Шәреҡ аҡыл эйәләренә тартым яҫы маңлай, оҙонса аҡ йөҙ уны, үҙе теләмә ә лә, башҡаларҙан өҫтөн ҡуйыр, ҡатын-ҡыҙ иғтибарын да тартыр булды.

Ул көндө Артыр унарҙан ҡайтып килә ине, сарсап, күрше йәйләүҙәге ата ының таныштарына уғылды. Менеп килгән нәҫел айғырын, күпереп үҫкән яҙғы үләнде утлай тор он тип, иреккә ебәрҙе. Уны бәйләргә лә, тышауларға ла кәрәкмәй – аҡыллы хайуан, йыраҡ китмәй, хужа ын таный, саҡыр аң, " ә" тигәнсе килеп тә етә. Ләкин был юлы Артыр, әллә таныштарында оҙағыраҡ ултырған, әллә башҡа сәбәп – тирмәнән кире сығыуға айғыры, үлән утлай ы урында, яҡындағы ҡалҡыулыҡ битләүендә ниндәйҙер йәш бейәне өйөрөп йөрөй ине. Нишләгән уның дөлдөлө, юлда осраған әр ылыуҡайға ылышып бара торған ғәҙәте юҡ инесе! Айғырын саҡырып, ыҙғырып та ҡараны. Ләкин уны ы, бығаса хужа ының әр ымына иғтибарлы мәхлүк, боролоп ҡына ҡараны ла саҡырған ергә түгел, үҙен әүрәткән әлеге бейәгә табан ыпыртты. Ҡара ин уларҙы, башҡа баш ҡуйып, ирендәрен тешләшеп нисек иркәләшәләр! Айғыр ҙа оҙон сираҡлы, йоморо шыма тәнле омғол ылыуҡайҙың бер алдына, бер артына сыға йә, ҡосаҡларға теләгәндәй, алғы аяҡтарын уның муйынына тызый. Хәс әҙәми заттар инде. Мөхәббәт тигән нәмә әллә уларҙа ла була микән?

Ә иң ҡыҙығы... бер яҡ ситтәрәк ошо күренеште, алсаҡ йылмайып, ниндәйҙер йәш кенә ҡыҙыҡай күҙәтеп тора. Бейә, күрә ең, уларҙыҡы.

Үҙенә яҡынлашып килгән аяҡ тауыштарын ишетеп, ҡыҙыҡай ялт итеп әйләнеп ҡараны. Унан ҡапыл йөҙөн йәшерҙе.

Ләкин Артырҙың үткер ҡарашы ҡыҙҙың сейәләй тулышҡан ал ыу биттәрен, муйылдай йылтыр теремек ҡара күҙҙәрен, ығылмалы ылыу кәүҙә ен шәйләп өлгөргәйне инде. Ҡыйыуланып, ҡыҙҙың исемен ораны.

– Көн ылыу,– тине уны ы ишетелер-ишетелмәҫ кенә.

Шулай ҙа Артыр бында артыҡ мыштырламаны, айғыры эште ҙурға ебәрмәҫ борон, уны көс менән тиерлек айырып алып, йә әтләп ҡайтыу яғын ҡараны.

Ләкин ошонан уң Көн ылыуҙы ла онота алманы. Ал ыу йөҙ, йылтыр ҡара күҙҙәр уның төштәренә инә башланы. Егет, түҙмәйсә, ылтауын табып, күрше йәйләүгә йыш-йыш ҡына барыр булып китте. Ҡыҙ ҙа уны көтөп ала, асылғандан-асыла бара, үҙен иркен тота. Осраш алар, өйләшеп үҙҙәре бөтмәне, бер-бере енән ят ыныу тиҙ юғалды. Далала ат сабыштырып та, тартыш уйнап та ҡыландылар, йүгән еҙ ике тай-тулаҡ, ис тартынмайса, бер туған, хатта бер енес ымаҡ, башҡалар алдында ла бер-бере енә аҡ ыҙ яҡыная бирҙеләр... Тик, күрә ең, был Көн ылыуҙың ағай-энеләре күҙенән дә ситтә ҡалмаған:

– Ут менән уйнауыңды аңламай ыңмы ни, егет? – тип Артырҙың юлына арҡыры төштөләр ҡыҙҙың ағалары бер килгәнендә.– Көн ылыуҙың иңә ырыуҙаш, ҡан-ҡәрҙәш икәнен оноттоңмо? Ниңә уның башын әйләндерә ең?

Ләкин йәшлек дыуамаллығынанмы, тәҡдирме, аҡыл ыҙлыҡтанмы, – осрашыуҙан улар туҡтаманы. үҙҙәре үтмәгәнен күргән тегеләре бер көн уны тағы тура килтереп, "йәйләүгә юлды онот!" тип ауыҙын ҡара ҡанға батырып туҡмап ҡайтарҙылар. Яр ыу ҡанлы, дыуамал йәш егеттең был, кире енсә, сәменә генә тейҙе,

шикелле. Хәҙер ул ылтау эҙләп тә тормай, айғырына атлана ла көпә-көндөҙ Көн - ылыуҙар йәйләүенә ыпырта.

Йәштәрҙе былай ғына тыңлатып булмағас, Көн ылыуҙың ағай-эне е, күрә ең, башҡа саралар күрмәк булған.

— Атайымдар йәйләүҙе алмаштырырға булғандар,— тине Артырҙың бер килеүендә Көн ылыу, үҙе бик моң оу ине.— Ҡайҙалыр йыраҡҡа, тауҙың теге яғына күсмәкселәр...

Артыр өсөн көтөлмәгән ауыр хәбәр ине был. Шулай ҙа ҡаушауын ҡыҙға иҙҙермәне, сигенмәне: "Ҡайғырма, мин ине барыбер тау аръяғынан да эҙләп табырмын",— тигән булды. Япа-яңғыҙ көйө илгә, халыҡтың йәшәйеш ҡанундарына ҡаршы барыу мөмкин түгеллеген аңламай ине әле ул саҡта. Иртәгә ен кем ҡайғырт ын, бөгөнгө ө улар ҡулында бит әле...

Дала киң, Артыр менән Көн ылыу, ыбай килеш, башҡаларҙың күҙҙәренә салынмаҫҡа тырышып, йәйләүҙәренән алыҫҡа сығып китте... Бөгөн уңғы көндәре, тағы ҡасан күрешәләр әле... Бәхетле мәл ине был улар өсөн, бергә булыу бәхете... Дала буйлап сабыйҙарса ахмаҡланып, ихахайлап, соҡор-саҡыр, түмгәктәрҙе лә абайламай сабышып йөрөнөләр... Тәүге осрашыуҙа уҡ яҡынайып, танышып алған айғыр менән йәш бейә лә, күрә ең, был уйындарҙан ныҡ ҡәнәғәт, бер-берherенән ҡалышмай, сәмләшеп, аҡ күбеккә батып йәнәшә еләләр. Улар шулай күпме ваҡыт, күпме ара үткәнен дә иҙмәне, шаярҙы, көлдө, тартыш уйнағандағы ымаҡ, эйәрҙәрендә килеш бер-бере енә ылығып, бер йән, бер тән булып сабышып бара бирҙеләр.

Ә тирә-яҡта ҡуйы йәшеллек. Быйыл ямғырҙар йыш яуа, аяҡ аҫтындағы үлән ҡалын келәмдәй, күпереп үҫә. Күк йөҙө саф аяҙ, күҙҙәрҙе ҡамаштырыр сағыу ҡояштан бар донъя нурға күмелгән. Ә зыңлап торған дала ауа ы? Тәбиғәт хозурлығына шатланғандай, әле бында, әле тегендә тырпайған ҡыуаҡтарҙа бихисап ҡоштар айрауы?!

Ләкин Артыр менән Көн ылыу быларҙың бере ен дә күрмәне лә, ишетмәне лә. Сөнки ғаләмдең барса хозурлығы, мәңгелек а әң, тәбиғәттең тыйып булмаҫ тәбиғи көсө уларҙың үҙҙәренә күскәйне. Арынылармы, әллә бере енең аты абынып киттеме — киң генә уй ыулыҡты сабышып үткәс, урман ауыҙындағы сәскәле аҡланға барып йығылдылар.

Мәйелең аҙғанда, бигерәк тә йәш саҡта, алдынды-артынды ҡарап, башҡаларҙан кәңәш орап тора ы юҡ, эйе, тыйылғы ыҙ дәрт кенә хужа иңә. Был икәү ҙә, әле генә күҙҙәре аларып, соҡор-саҡырҙарҙы, ерәйеп торған төп ә-түмгәктәрҙе лә айырмай сапҡан аттары ымаҡ, ихтыярҙарын юғалтып, йүгән еҙ тойғоға бирелде, тәбиғәттең бөйөк сихыры уларҙы бер-бере енә этәрҙе, быға ҡаршы торорҙай көс бөтә донъяла юҡ ине...

Ләкин хыялый бәхет оҙаҡҡа уҙылманы. Күрә ең, уларҙы эйәртеп-күҙәтеп килгәндәр. Бер мәл урман эсенән уҫлаптай биш-алты ир-ат шаптыр-шоптор килеп сыҡтылар ҙа был икәүҙе арҡандар менән айырым-айырым бәйләп тә ташланылар. Көн ылыуҙың ағалары икән. Икәү е ҡыҙҙы шунда уҡ ҡайҙалыр алып та китте. Ә ҡалғандары... Башта Артырҙы иҫенән яҙҙырғансы типкеләнеләр-типкеләнеләр ҙә, унан бөтөнләй шәрә ҡалдырып, үҙҙәре менән ҡуржыҡ тултырып алып килгән ҡара ер майында баштан-аяҡ ҡойондороп алдылар. Берәү е егеттең эйәрләгән атын етәкләп алып килде. Күмәкләп ер майына ҡойонған, арҡан менән сырмалған хәрәкәт еҙ Зинджалай* кәүҙәне эйәренә арҡылы алып бәйләп ҡуйҙылар. Йылғыр атҡа ҡамсы менән ыҙырыуға, аҡыллы хайуан мәсхәрләнгән егетте ауылына табан елдереп алып ҡайтып та китте...

Ауылына еткәс кенә иҫенә килде Артыр. Уны эйәренән сисеп алып, ергә ал-

ғандар, өҫтөнә япма япҡандар. Тирә-яғында ҡурҡышҡан, аптырашҡан ҡан-ҡәрҙәштәре. Бындай хәлде төшөндә лә күрмәгән, шүрәлегә оҡшаш, ҡара майға буялған "батыр"ҙы тамаша ҡылырға йыйылған асыҡ ауыҙҙар ҙа бар араларында. Артырҙың яҡындары унан нимә булыуын орашырға тырышалар, тик быны ының ғына бер ниндәй өнө юҡ. Ярай әле, аңлап алғандары уны япма ы-ние менән бергә күтәреп, башҡаларҙан айырып, йә этләп үҙҙәренең тирмә енә индереп ҡуйҙы.

Ләкин ошонан уң көн бөттө Артырҙың ҡан-ҡәрҙәштәренә. Берәүҙәр йәлләне, икенселәре үсәне, ҡан көҫәне, күптәре ағайып, бындай осраҡтарҙа тейеш булған язаны хәтерләне, йоланы үтәү өсөн ҡыҙ яғынан килер дәғүәсене көттө.

Кеше күҙенә күренергә баҙмай, ни эшләргә лә белмәй, Артыр бер нисә көн тирмә енән сыҡмай ятты. Шулай ҙа күңел төбөнән нимәгәлер өмөтләнде. Тик көтмәгәндә был өмөт саҡкылары ла селпәрәмә юҡҡа сыҡты. Бер нисә көндән улар йәйләүенә ҡот осҡос хәбәр килеп етте: ҡыҙҙың туған-тыумаса ы йәйләүҙәрен алыштырмаҡ була тау үркәсен артылғанда, Көн ылыу аты-ние менән ҡаянан упҡынға осҡан...

Быны башҡасараҡ аңлатыусылар ҙа табылды: барса халыҡ алдында ғәйепләләрҙе мәсхәрәләп язалап, үҙ ырыуҙарына мәңгелек ҡә әр алмаҫ өсөн, ҡаяны үткән саҡта еңелдәрен упҡынға ағалары үҙҙәре бәреп төшөргән...

Ҡай ы ы хаҡ булғандыр, Артырға уны ы мө им түгел. Бынан уң уға йәшәүҙең ҡыҙығы ҡалманы, ырыуҙаштары ла уға ят бауыр итеп ҡарай башланы. Үҙ-үҙенә ҡул алырға йөрөгәндә тағы көтөлмәгән хәл булып алды. Ағиҙел буйлап Оло Иҙелдән Сулман аша Хәрәзм сауҙагәрҙәре килгән, тигән хәбәр таралды. Ырыу бейҙәре булараҡ, Артырҙың яҡын ҡәрҙәштәре улар менән бәйләнешкә инде әм байғош егетте үҙҙәренә хеҙмәтсе итеп алып китергә күндерҙе.

Ана шулай иленән өрөлдө Артыр, уңыраҡ ата-баба иҫтәлегенә үҙенә "бей" дәрәжә ен дә өҫтәне, "Артыр бей" булып китте.

Аҙаҡ, Урта әм Үҙәк Азия илдәре буйлап йөрөгәндә, маздасыларҙың дини тәғлимәтен ҡабул иткән барса халыҡтарҙа ырыуҙаш ҡына түгел, яҡын ҡан-ҡәрҙәш никахтарҙың да рөхсәт ителеүен ишетте. Улай ғына түгел, бына маздасы иранлыларҙа хатта бер ҡарында ятҡан ағалы- еңлеләләр никахы ғына дөрөҫ тип табылыуы, сит-яттарға өйләнеү ҙур гона аналыуы уны бөтөнләй хайран ҡалдырҙы, үҙенең урын ыҙға рәнйетелгән аяныслы яҙмышы күңелен көйҙөрҙө. Сөнки маздасылыҡтың башҡорттарҙа ла таралыуы уға билдәле ине инде. Тик халыҡ тигәнең төрлө сығышлы ырыуҙарҙан тора, күрә ең, әр ырыу үҙенсә аҡылдан яҙа.

Шуға сит-ят ерҙәрҙә аслы-туҡлы ҡаңғырып йөрөгән саҡтарында ырыуҙаштарына баштараҡ асыу-нәфрәт тә йөрөттө: илдән ҡыуырлыҡ, йән ҡыйырлыҡ нимә эшләнеләр улар?! Мөхәббәтте язалап буламы?

Аҙаҡ аңланы: ис тә ваҡ-төйәк нәмә түгел икән ул кешелек еҙ тойолған ырыу йолалары, ә йәшәү терәге. Баҡти әң, ғәрәптәрҙең үҙҙәрендә лә, бигерәк тә күсмә тормош менән йәшәүсе бәҙеүән ырыуҙарында, үҙ-ара мөнәсәбәт ҡанундары нәҡ башҡорттарҙағы ымаҡ икән.

Ғәрәптәрҙә саҡта Артыр бей бер мәл, уларға эйәреп, боронғо юнан табиптары, фәйләсуфтары хеҙмәттәре менән мауығып алды. Шул ыңғай үҙе лә көтмәгәндә ғәрәптәрҙең исламғаса уҡ ижад иткән бәҙеүән шағирҙары әҫәрҙәренә лә юлыҡты. Хәйер, Имрулҡайс, Әл Әхтәл, Әл Фараздаҡ, Джарир кеүек мәш үр бәҙеүән шағирҙарын ғәрәптәр генә түгел, шәреҡ тарафтарындағы әр зыялы белә. Ислам донъяына хас булмағанса ҡыйыу, ирекле фекер йөрөтөүҙәре күтәрәлер, күрә ең, был шағирҙарҙы. Ошо шағирҙар ара ында Артыр бей “Мәжнүн” тахаллуслы шағирға ла юлыҡты. Уны бигерәк тә ижадсының исеме ҡыҙыҡ ындырҙы: ниңә Мәжнүн?—

*Негр.

"Аҡылдан яҙған", "тиле", "диуана"?

Артыр бей Мәжнүндең шиғырҙарын да эҙләп тапты. "Аҡылдан яҙмаҫ инең, телә әң, онота ла алыр инең шул Ләйләнде,– тиелгәйне уларҙың бере ендә.– Көнәштәрегеҙ хаҡ. Тик мин мөхәббәт менән сирле, мөхәббәткә дауа бармы икән?!"

Көн ылыуын онотмағайны әле Артыр, был шағирәнә юлдар уның күңел яраларын тағы ҡуҙғытып ебәрҙе. Шағир Мәжнүн дә шиғырҙарын нәҡ уның тура ында сығара ымаҡ тойолдо: "Илай- ыҡтай бар булмышым, Ләйлә, иңә бағыш, күңелемде көйҙөрөп өтә утлы ағыш..." "Уның ҡәрҙәштәре теләй миңә тик яуызлыҡ..." "Ҡырағайланып, донъя ынан биҙеп, бушлыҡ гиҙгән; хәсрәт эсеп, кешеләрҙән ҡасып, илен юғалтҡан йөргөнсө мин..."

А-ба, Артыр бейҙе Мәжнүн үрәтләгән яҙмыштың, ике тамсы ыу ымаҡ, үҙенекенә оҡшаш булыуы тетрәндерҙе. Ә уңыраҡ быларҙың бары ы Мәжнүндең үҙ яҙмышы икәнен дә белде.

... Артыр ымаҡ, Мәжнүн дә ырыу башлығы Муллава тың оҙаҡ көтөп алынған берҙән-бер улы булған. Хәйер, "Мәжнүн" ләҡәбен уға уңынан, ҡайғыларына сыҙамай тилегә абышҡас ҡына, тағып ҡуялар. Ә тыумыштан уға "Ҡайс" тигән исем ҡушалар. Йәғни Ҡайс Ибн Муллава – Муллава улы Ҡайс була инде.

Бына шул Ҡайс сибәр ҙә, тилбер ҙә бала була, ҡайғы белмәй, берҙән-бер булараҡ, ата-әсә иркә ендә үҫә. Үҫмер сағында уҡ Ләйлә исемле ҡыҙҙы осрата әм уға мөкиббән ғашиҡ була. Унан тотам да ҡалмай эйәреп йөрөй башлай. Ләйлә лә уға шундай уҡ көслө тойғо менән яуап бирә. Шулай шашыр сиккә етеп яратышалар. Улының ғазаптарын күреп йөрөгән ата кеше ҡыҙҙыҡылар яғына яусы ла ебәреп ҡарай. Ләкин кейәү була ы Ҡайстың диуаналыҡ сигендә торған шашыныулы хистәре тегеләрҙә шик тыуҙыра. Тиҙҙән айыралар ике ғашиҡты: Ләйләне ата-әсә е икенсе ырыу кеше енә кейәүгә биреп ебәрә.

Бына ошонан уң Ҡайс ысынлап та аҡылдан яҙа: көндәр буйы "Ләйлә!", "Ләйлә!" тип саҡырып, ҡала урамдарында, баҙарҙарҙа йөрөй башлай, ҡысҡырып уға арналған шиғырҙарын уҡый... Хәҙер уның артынан: "Мәжнүн – диуана!", "Мәжнүн – диуана!" тип ирештереп өйөр-өйөр малай-шалай ҙа сабып эйәрә. Уға таш та бәрәләр, үсекләйҙәр, йәберләйҙәр... Ҡайс үҙе лә кешеләрҙән биҙә, уларҙан ситләшеп сүллеккә китә, ҡырағай йәнлектәр, хайуандар менән бергә көн күрә башлай...

Тиҙҙән, Ҡайстан айырылыу ағышын күтәрә алмайса, Ләйлә яҡты донъя менән хушлаша. Быны ишеткән Ҡайс та өйгәне ҡәбере өҫтөндә йән бирә...

Ошоға яҡын түгел инеме ни Артырҙың да хәле ул саҡта? Ләйләне лә, Көн ылыуҙы ла үҙ ырыу егеттәренә бирмәүҙән килеп сыҡманымы ни төрлө тарафта булған был ике фажиғә?!

Артыр бей, Муллава улы Ҡайс ымаҡ, әлбиттә, аҡылынан яҙманы. Әммә баштараҡ халәте шуға бара ине. Фажиғә айырымлығында тыуып-үҫкән мөхит, хатта тәбиғәт шарттары ла сәбәптер, бәлки. Ғәрәп ярымутрауы тәбиғәте ҡырыҫлығын Урал тарафы менән сағыштырып буламы: көндөҙҙәрен сүллектән иҫкән ҡоро томра ел, төндәрен ҡаты ыуыҡ... Көтөүлектәр, эсәр ыу өсөн өҙлөк өҙ ҡанлы уғыштар... Күрше ырыу баҫҡынсыларының аҡтыҡ малынды, бала-саға, ҡатын-ҡыҙҙарынды ҡыуып алып китеүҙәре... Бындай саҡта барымтаға ҡарымта, ҡан үсе менән яуап биреү ҡотолғо оҙ... Ундай осраҡта ырыу – иң ышаныслы терәк. Тәбиғәт шарттары ымаҡ, уларҙағы ҡанундар тағы ла яманыраҡ. Артыр ымаҡ ырыуҙан ҡыуылған кешеләрен улар "хали" тиҙәр. Хәйер, ырыуҙан ҡыуылғас, ул кеше түгел, хатта ҡол булып та аналмай, уны телә ә кем бәреп үлтерә ала... Бына шуға ла көллө халыҡҡа, барса ырыуҙарға бер үк дин, уларҙың бары ын бергә

берләштереүсе уртаҡ Раббы кәрәк. Артыр бейҙең мөслим булып, ғәрәп илселеге сафында тыуған иленә килеүенең дә бер сәбәбелер әле был. Аңлатырға кәрәк бер Раббылыҡ өҫтөнлөктәрен. Ә йәшлегендәге ваҡиғалар... Нишләйһең, тора-бара Артыр бей ҙә яҙмышына буй ондо. Әммә Көн ылыуы ғына уның өсөн тәүге әм берҙән-бер өйгәне булып ҡалды. Күпме ерҙәр гиҙҙе, күпме илдәр күрҙе, тик күңелен яулаусы ҡатын-ҡыҙ ҡабат осраманы...

***

Фаҙлан улы Әхмәт хәҙрәттәренең ябай ғына ораауы хәт еҙ хәтирәләр аҡтарҙы ҡапыл Артыр бей күңелендә. Тик Әхмәт хәҙрәттәре унан шәхсән күңел төбө нескәлектәрендә соҡсоноуҙы түгел, ә үҙ ораауына яуап көтә.

— Туй тигәндәре нисек буламы? — тип ҡабатланы Фаҙлан улының баяғы ораауын Артыр бей, — төрлө ырыуҙа төрлөсәрәк бул а ла, нигеҙе берҙер инде уның.— Шунан артыҡ тәфсилләмәй генә аңлата башланы. — Туй ҡапыл, бер юлы ғына булмай. Башта егеттең ата ы, улына иҙҙермәй генә, тирә-яҡтан үҙҙәренә оҡшаған килен була ы ҡыҙ эҙләй, ата-баба ы кем, тоҡомо нисек булыуын тикшерә. Унан, был ҡыҙ үҙҙәренең талаптарына яуап бир ә, уның ата-әсә енең ҡәрҙәш булыу-булмау йә әтенән ҡылдарын тартып ҡарай. Әгәр риза булырҙайҙар икән, яусы ебәрелә. Ике яҡ та бер-бере ен оҡшат а, китә инде шунан төп мәшәҡәт: ҡалым, мә әр күләме, туй хаҡы, төрлө бүләктәр, туй ҡорбаны... Бары ы тура ында ла килешеү буйынса, ҡыҙҙың ата ы үҙ яғынан өс-дүрт йәш ҡоҙаны егеттең ата ына туйға салыу малын алырға ебәрә. Ләкин туйлыҡ тыу бейәне йәки башҡа берәй имеҙ йылҡыны уларға шунда уҡ тоттороп ҡайтармайҙар. Башта уларҙы өйҙән-өйгә йөрөтөп бер нисә көн, әҙерләнгән аҙыҡ- ыйҙы ҡоҙаларға ашатып бөткәнсе, ҡыҫтай-ҡыҫтай, хатта ҡай саҡ ирек еҙләп ҡунаҡ итәләр. Ундай саҡта ҡоҙалар: "Туйҙым, ашағым килмәй",— тип ултыра алмай, йола ҡушмай. Ашлау-ашлау боҫрап торған имеҙ ит, бәйләм-бәйләм ҡаҙылыҡ, киҫәк-киҫәк оса майы, ауыҙҙа ireп торған дөйә үркәсе йомарлаҡтарын оғондоралар, ҡалаҡ батмаҫ ҡуйы өҙлөктәрен туҫтаҡлап эсерәләр. Шул арҡала ҡай ы саҡ ҡунаҡтарҙың эстәре боҙолоп, йә уҡшытып, йә башҡаса оятҡа ла ҡалып ҡуялар...

Ибн Фаҙлан ытырғанып ҡуйҙы, йөҙө йәм еҙ сирышып алды:

— Нимәгә шулай ирек еҙләйҙәр уң уларҙы?

— Йола инде, үҙҙәренең бай, мул йәшәүҙәрен күр әтеү теләге лә барҙыр. Әгәр йоланы үтәмә әң, былары ҡайтып:"Ҡоҙаның ыйы самалы ғына булды",— тип яманлап йөрөүҙәре лә бар.

Артыр бей, ибн Фаҙланға күҙ ирпеп алғас, уны ының йөҙө тағы ытылып китеүен иҙеп алдымы, өҫтәй алды:

— Әммә былар бары ы ла уйын-көлкө, йыр, бейеү, дөңгәр,ҡурай моңо менән бергә байрам төҫөндә бик күңелле үтә. Ошонан уң ғына ҡыҙ яғынан килгән ҡунаҡтар туйлыҡ малды етәкләп, егет ата ын әм уның иң яҡындарын туй малын уйырға саҡырып, ҡайтып китәләр. Иртәгәге туйға нәҡ ана шул яҡындары менән егет ата ының килере көтөлә...

— Ә кейәү балаҡай үҙе булмаймы ни?

— Уны ы аҙағыраҡ, был мәшәҡәттәр тамамланғас ҡына, килә. Унда ла тура ҡайны йортона түгел, ә яҡын еҙнә енә бара. алымын түләп бөтөргәнсе шулай ҡасабоҫа килеп-китеп йөрөй инде ул...

Әлбиттә, ибн Фаҙлан саҡырыуҙы ҡабул итә алмай: хаҡ мосолманға мәжүсиҙәрҙең шайтан туйында нимә тип ултырмаҡ кәрәк?! Шулай ҙа Артыр бей илсене ҡыҙыҡ ындырмай ҡалманы, үҙе ҡатнашма а ла, ситтән генә күҙәтеп йөрөргә булды.

... Иртә таңдан уҡ йәйләүҙәге урта тирәләге бер нисә тирмә эргә ендә ғәҙәти бул-

маған йәнлелек башланды. ыбайлылар килә, китә, ниндәйҙер төйөнсөктәр тотоп өҙлөк өҙ ҡатын-ҡыҙ урала, шағыр-шоғор ҡырғыслап, ҙур-ҙур ҡаҙандар таҙартыла. Юҡҡа түгел был, бөгөн алыҫ ерҙән ҡыҙ йортона егет яғынан ҡоҙалар килә. "Туй уйырға килә" тиҙәр уны был яҡ башҡорттары. Сөнки нәҡ ошо осрашыуҙарында улар туй хөрмәтенә ҡорбан сала торғандар. уңғы хәбәр ибн Фаҙланды ағайта ҡуйҙы:

— Нимә салалар уң, кеше ҡорбаны түгелдер бит?

Артыр бей көлөм өрәп ҡуйҙы: "Нимә гел насарҙы уйлай икән хөрмәтле сәркәтип башҡорттар хаҡында?" Әммә яуабы тыныс әйтелде:

— Юҡ, Әхмәт хәҙрәттәре, кеше ҡорбаны түгел, ундай йоланы белмәйҙәр. Ғәҙәттә, йылҡы малы — тыу бейә тотонола.

Халыҡ туйға аман йыйыла тора, кейемдәре байрамса. Ҡатын-ҡыҙ күлдәктәре оҙон, аҡ, ҡыҙыл, йәшел, тағы әллә нисә төҫтәр ҡушып тегелгән, сәскәле болондо хәтерләтеп тора. Ир-ат, егет-елән дә муйын, иҙеү тирәләре төрлө төҫтәге сағыу ептәр менән сигелгән тура яғалы күлдәктәр кейеп алған. Салбарҙары ла байрамса, таҙа, киң балаҡлы. Күбе е ыбай. Кешеләр күбәйгәндән-күбәйә, ҡош баҙарылай мәж килә.

Ҡоҙаларҙы ҡаршы алмаға ҡыҙ яғынан ыбайлылар, йәйләүҙән ситкә үк сығып, юл буйындағы бер туғайҙа туҡтап көтөп тора.

Бына бер аҙҙан арғы юлда туҙан туҙҙырып саптырып килгән атлылар төркөмө күренде. Яҡыная төшкәс, тамаша ҡылып торған халыҡ алдан ике ыбайлы, уларҙан тотам да ҡалмайса ике ат егелгән ҡупшы көймә, ә улар артынан тағы ла ыбайлы килеүен күрҙе. Уртала килгән көймә төҫлө таҫмалар менән биҙәлгән. Туй уйырға килеүсе төп ҡоҙалар шул көймәлә, күрә ең.

Бер аҙ ситтәрәк тамаша ҡылып торған Фаҙлан улы Әхмәт шуға иғтибар итте: саң туҙҙырып сабып килгән төркөм килеп етер-етмәҫтән, уларҙы ҡаршыларға сыҡҡан ыбайлылар ара ынан йәшерәк берәү е ҡуйынынан ҡапыл күк төҫөләй зәп-зәңгәр яулыҡ урып сығарҙы ла, шуны болғай-болғай, ут сыҡҡандай кире йәйләүгә табан ыпыртты.

— Ҡайҙа сапты ул, бер-бер хәл булдымы әллә? — ти алды Фаҙлан улы, ғәжәпләнеп.— Ниңә улай итә?

— Зәңгәр яулыҡ — Күк Тәңре е төҫө, ҡот билдә е,— тип аңлатты Артыр бей. — Егет менән ҡыҙ яҡтары сослоҡ, мәргәнлек, ҡот-бәхет өсөн ярышҡа сыҡты. Егет яғы ыбайлылары ҡыуып етеп, яулыҡты тартып алырға өлгөр әләр, ҡот өҫтөнлөгө кейәү яғына күсә, бәҫ өҫтәлә.

Ысынында ла шунда уҡ алыҫтан килеүселәр ара ынан алдан килгән әлеге ике ыбайлы, аттарын ҡамсылай-ҡамсылай, яулыҡ болғап сабыусыны йән-фарман ҡыуа башланы.

Ибн Фаҙлан, үҙҙәре эргә ендә ыбайлыларҙан әҙ генә ҡалыша килгән көймәләгеләре туҡтап китер, тип уйлағайны. Әммә улары ла, туҡтай ы урында, аттарын ай- айтлап ҡыуып, алдағыларҙы баҫтырырға кереште. Ә юлдың ике яғына теҙелгән халыҡ уларҙы дәртләндереп, ҡулдарын болғап ниҙер ҡысҡыра, көлә, ыҙғыра:

— Ҡыуып ет, егет, тот, тартып ал ҡот-бәхетте шуның ҡулынан! — тип геүләй халыҡ. Артыр бей быларҙы Фаҙлан улына тәржемә итә тора. — Әйҙә, әйҙә! Тағы бер аҙ, тағы!...

— Э- э -эх! Әҙ генә ҡалды ла бит...

Ләкин ғаилә ҡотон — зәңгәр яулыҡты болғай-болғай сапҡан егеттең әллә менгән аты аҫыл ине, әллә үҙенең та ыллығы енде — арттан ҡыуып килеүселәрҙе ирештергәндәй, сәмле яр ып киткән атын теҙгененән тартып әкренләтә лә, ҡыуы-

усылар килеп тотто ғына тигәндә, яңынан йомолоп саба башлай...

Ул да булмай, көтөп тороусылар ара ынан тағы ике-өс ыбайлы аттарын яр ыып килеп сыҡты ла көймәләгеләргә ынтылды. Улар менән тигеҙләшкәс, былары, сабып барған ыңғай, эйәрҙәренән эйелеп, ҡунаҡ ҡоҙаларҙы ултырған урындарынан йолҡоп алырға теләгәндәй хәрәкәтләнә башланы. Ләкин көймәләгеләр ҙә ҡаушап ҡалманы, ана, берәү е ҡайҙандыр урып алған ҡыҫҡа ҡамсы ы менән уҙылған ҡулға ыҙырҙы... ыбайлы ҡапыл ситкә тайшанырға мәжбүр бул а ла, йыраҡ китмәне, әйләнеп килеп, баяғыса ныҡышты. Ибн Фаҙлан өсөн быларҙың бары ы ғәжәби сәйер ине.

— Нимә эшләй улар? — Ирек еҙҙән, баяғы ораууын ҡабатланы.— Ҡәрҙәшләшергә теләгән кешеләр ниңә уғышалар?

— уғышмайҙар, бер-берен мәргәнлектә ынау, сәмле бәйге дауам итә,— йылмайып ләпелдәне Артыр бей. — Был егеттәр килгән ҡоҙаларҙың кәләпүштәрен алып ҡасырға уйлай, шуның менән уларҙы ҡыҙ йортона яланғас, таҡыр баш итеп индерергә тырыша. Ә ил аға ы иргә был килешеп етмәй, ҙур мәсхәрә...

— Ә ниңә ундай олуғ кешене мәсхәрә итергә тырышалар?

— Мәсхәрә түгел, ынау был, уйынлы-ысынлы ярыш, кеше үҙ-үҙен яҡларлыҡмы, та ыллымы, көс-ҡеүәте бармы... — Артыр бей быларҙы юлдашына түҙем генә аңлата.— Ҡоҙаларҙы ғына түгел, егетте лә, килен буласаҡ ҡыҙҙы ла нимәгә яраҡлылыҡҡа ынайҙар. Күсмә тормош шарттары кешенән үҙаллы хәл итә торған күп нәмә: зирәклек, ырыуыңа, ғаиләңә тоғролоҡ, уларҙы ҡурсалау әләте талап итә. Башҡорт Уралы менән көслө, ҡары үҙҙәрҙән күренеүенсә, батырҙар тыуған ерҙәренән алыҫлашҡан айын, уларҙың ағыштары ла бермә-бер арта бара. Шундай бер батыр хаҡында хикәйәт тә бар...

Артыр бей күҙ ҡырыйы менән Фаҙлан улына ҡарап алды. Уны ының иғтибар менән тыңлауын күреп, үҙен дауам итте:

— Шулай, әлеге батыр сит-ят яҡтарҙа йөрөгәндә бер батша үҙенең ҡыҙын кейәүгә бирергә йыйыныуын, тик шундай ауыр шарт ҡуйыуын ишетә: кейәү була ы егет маңлайына тулы ыулы сеүәтә ҡуйып, ығылып торған бик тә бейек ырғауыл осона менеп, ыуын тамсы ла сайпылдыттырмай, кире төшөргә тейеш. Шундай батыр табыл а, батша ҡыҙын да, ә бер аҙҙан үҙенең тәхетен дә бирә... Күптәр та ыллыҡтарын ынап ҡарай, тик бере е лә ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән ошо ынауҙарҙы үтә алмай. Башҡорт егетендә лә сәм уяна. Әлбиттә, сит-ят ерҙә кәләшләп йә батша тәхете бушағанын көтөп ятыуға ҡарағанда, егеттең булдыҡлылығын күр әтке е килә. Көслө, та ыллы була ул, "ә" тигәнсе маңлайындағы мөлдөрәмә тулы сеүәтә ен тамсы ла сайпылдырмай, елгә бәүелгән ҡылғандай ығылып торған бейек ырғауылдың осона менеп тә етә. Тик шунда көтөлмәгән хәл килеп сыға. Күктәргә олғашҡан бейек ырғауыл осонан егет алыҫтарҙан-алыҫта күгәреп ятҡан мө абәт Урал армыттарын сырамыта ла, ағыныуҙан, сит яҡтарҙа йөрөп йыйылған сик еҙ ағыштан күҙҙәренән субырлап, сеүәтәнән аҡҡандай, йәш ҡойола... Ә аҫтағылар, быны күреп:

— Булманы, булманы, егет ынауҙы үтә алманы,— тип шатланыша.— Ана, сеүәтә е нисек түгелә...

Ә егет... Тыуған яҡтарына тағы бер ҡарап ала ла, маңлайындағы сеүәтә е төшөп ҡалыр тип тә уйламай, ырғауыл буйлап түбәнгә таштай шылып төшә. Тамсы ын да юғалтмаған, мөлдөрәмә тулы сеүәтә ен быға ныҡ ғәжәп иткән ынау ойошторо-усыларға тапшыра. Ләкин уларҙың ҡарарын көтөп тормай, ырғауылға менгәндә сисеп ташлаған аяҡ кейемдәрен дә онотоп, яҡында ғына утлап йөрөгән атына икерә лә ялан аяҡ көйө ғәзиз Уралына табан сығып саба... "Сит ерҙәрҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул",— ти шуға ла бындағы халыҡ...

– Ҡыҙыҡ икән,– тип ҡуйҙы Фаҙлан улы.– Тик әкиәт, әкиәт инде...

– Әкиәт кенә түгел,– быны ы менән Артыр бей килешмәне. – Та ыллыҡта, зирәклектә, бил ныҡлығында көс ынашыу – бындағы ғәҙәти тормош; ғөрөф-ғәҙәт, йола, төрлө уйындар ҙа, көрәш, бер-бере ен ат өҫтөнән ҡолатыр "Тартыш" уйындары ла ғәмәлдә ошоға ҡорола. Тартышта хатта ҡыҙ менән егет бер-бере енә ҡаршы сыҡҡан, йыш ҡына буласаҡ кәләштәр кейәү булырға ашҡынғандарҙы эйәрҙәренән урып алып ырғытып, хур итеп ҡайтарып ебәргән. Ә кейәү була ы кешегә талаптар тағы ла ҡатыраҡ. Сөнки ул – яҡлаусы, яугир, хужа. Төрлө ырыуҙа ынауҙар ғына төрлөсә. Уларҙың бере ендә кейәү булырға теләгән егетте урманға алып баралар ҙа, йыуан ағасты ауҙарып, шуны ҡыҙ йәшәгән ергә өҫтөрәп йә күтәреп алып барырға ҡушалар. Шуны булдыра алма аң – кәләш тә юҡ.

– Йә, кире енсә, бик хәйләлегә оҡшаған был шарт,– тип ҡуйҙы көтмәгәндә Әхмәт Фаҙлан улы. – Ҡыҙын тиҙерәк кейәүгә бирге е килгәне ағастың нәҙеген күтәртеп ебәрәләр әле, моғайын...

Быны ына күңелдәре булып, көлөшөп алдылар. "Асылып кит ә, матур кеше инде был мөхтәрәм Әл Әхмәт хәҙрәттәре,– тип уйлап алды Артыр бей.– Ҙур ҡара күҙҙәре ялтырап, йөҙө яҡтырып киткән. Шағир кеше шул, холҡо ла – күңеле сағылышы. Хәлиф арайында артығыраҡ ҡыйыр ытманылар микән уны тәжрибә еҙ йәп-йәш кеше алдына шундай ҡаты бурыс ҡуйып? Хәйер, ҡайҙа табырынды, ҡайҙа юғалтырынды белер хәл юҡ был буталыш заманда. Кешене яҙмышы йөрөтә, Фаҙлан улы Әхмәт тә иле алдында иңенә төшкән бурысын үтәй”.

Артыр бей менән ибн Фаҙлан торған ерҙән йәйләүгәсә ара әллә ни йыраҡ түгел, ана, туҙан туҙҙырып сабышыусылар баяғы ҙур, башҡаларҙан айырмалы, ярай ы ҡалҡыу тирмә янына барып та еттеләр. Ҡыҙ ата ының тирмә елер. Килгән ҡунаҡтар ҡыуып етеп, ҡасҡын егеттән яулыҡты тартып алырға өлгөрҙөләрме-юҡмы – быны ын Әхмәт менән Артыр бей күрмәй ҡалды. Улар йәйләүгә килеп еткәндә, ҡыҙ ата ының тирмә е алдында халыҡ мәж килә ине инде. Хужалар ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырға сыҡҡан, өйкәлешеп шау-шыу киләләр. Тиҙҙән, эйелә-бөгөлә хөрмәт үҙҙәре әйтеп, ишектәре ҡайтарылып ҡуйылған иркен тирмәләренә алып инеп киттеләр...

Фаҙлан улы Әхмәт, әлбиттә, мәжүсиҙәр йола ын үтәгәндәй, тирмәләренә инеп, улар эшләгәнде ҡабатлап ултыра алмай, быны дине лә ҡушмай. Хәйер, бындағы халыҡ тыныс ҡына бер урында тормай, әле бында, әле тегендә ҡарға тубылай ҡапыл ғына килеп сыға ла өйөлөшә, ваҡыт-ваҡыт сабып үткән ыбайлыларҙан ялтанып, бала-саға сыр-сыу ҡаса. Туйҙағылар бер тирмәгә генә ыймай, барса йәйләүгә тарала. Шуға килгән ҡоҙаларға ғына эйәреп йөрө ә, Фаҙлан улы тирәяҡтағы ығы-зығының бары ын күрергә өлгөрмәҫ тә ине. Әхмәт Фаҙлан улы бая уҡ, саҡырыуҙы ҡабул итеп, Артыр бейгә уның үҙенә туйҙа ҡатнашырға, тантананы баштан аҙағынаса нисек үтеүен күҙәтергә, аҙаҡ шуны түкмәй-сәсмәй өйләп, хатта тасуири яҙып бирергә ҡушты.

Шуға ла Артыр бей иркен тирмәгә башҡалар менән бергә тиерлек килеп инде. Тирмә хужалары ҡунаҡтарҙы икегә айырып, ирҙәрҙе – тирмәнең түр яғына, ҡатын-ҡыҙҙы шаршау менән бүленгән икенсе ҡанатына әйҙүкләне. "Быны ы нәҡ ғәрәптәрҙәгесә инде,– тип көлөм өрәп ҡуйҙы Артыр бей.– Әхмәт хәҙрәттәре күр ә, нишләр ине икән, шатланырмы, әллә ғәжәпләнерме?" Башҡорт йола ын белә инде Артыр бей, шуға уның өсөн әллә ни ҡыҙығы юҡ, ғәрәп илселеге сәркәтибе ихтыярын ғына үтәп ултыра. Килеп инеү менән, ҡунаҡ ыйлаусы ирҙәр, йәнә йәш килендәр туйға килгән ҡоҙаларҙың өҫтәренә услап-услап бауыр аҡ, сәтләүек, киптерелгән әсе ҡорот йоморсоҡтары, ваҡ-ваҡ башҡа тәм-том ашамлыҡтары ибә башланылар. Муллыҡ билдә е был, килгән ҡунаҡтарға ла шуны теләү.

Туйҙың беренсе, икенсе көнө лә үтеп китте, инде килтерелгән күстәнәстәр,

бүләктәр ҙә таратылды, ҡоҙағыйҙар үҙҙәрен ыйлаусыларға сирек йә яртышар аршин йыртыштарын таратты, күрше-тирә тирмәләргә ҡунаҡ сәйенә лә йөрөнөләр. Уйын-көлкө, шаярыу ҡатыш аҡса, бүләк даулау менән үтә былар бары ы ла... Быларҙы кис айын өйләп еткереп тора Артыр бей Фаҙлан улына. Артыр бейгә ғәҙәти был күренештәргә Әхмәт Фаҙлан улы ҡыҙыҡ ыныу белдерә, үҙенең ниндәйҙер орауҙарына яуап эҙләгәндәй була. Инде йоланың уңғы, өсөнсө көнө лә етте. Уны был яҡта "Туй салыу", хатта тағы ла ҡырыҫыраҡ "Туй уйыу" тип тә йөрөтәләр әм егет ата ы тарафынан бирелгән йылҡы малын ҡорбанға йығыуҙы көтәләр. Фаҙлан улы Әхмәт ошо йоланы, ниңәлер, үҙенең күрге е килеүен белдерҙе.

...Туй салыу урыны әлеге тирмәнән алыҫ түгел, асыҡ ерҙә. Урта тирәләрәк усаҡтар яғылып, ҙур-ҙур ҡаҙандар аҫылған. Улар эргә ендә өлкәнерәк бисә-сәсә сыуала. Бер аҙ ситтәрәк дүрт-биш ир-ат ниндәйҙер ҡоролма я ап маташа. Уртала йәнә бер усаҡ дөрләй. Ир-ат билдәрендә — оҙон йылтыр бысаҡ. Шунда уҡ көлдә бешкән көлсә төҫөндәге ҡыҙғылт- ары омғол ҡоба ат бағанаға бәйләп ҡуйылған, туй шәрәфенә ҡорбан килтерелер мал, күрә ең. Ситтәрәк ҡулдарына аштабаҡ, силәк, башҡа ауыт- аба тотоп алған йәш еңгәләр өйөлөшкән, эсәк-ҡарынын таҙартыусыларҙыр, моғайын. Бына теҙгененән етәкләп, омғол ҡоба тураны урталағы әлеге ҡоролма янына килтерҙеләр. Шунда уҡ ярым түңәрәк булып йыйылғандар ара ында йәшкә өлкәнерәк, әммә кәүҙәгә елле, тура ынлы берәү килеп сыҡты ла, нимәлер өйләнә- өйләнә, ҡорбан атын етәктә көнсығыштан көнбайышҡа табан әлеге усаҡ тирәләй уратып әйләндерә башланы. Уның хәрәкәттәре торған айын етеҙләнә, бармаҡтары менән үҙенең биленә, муйынына, ҡолаҡтарына ҡағылып-ҡағылып ала, ике ҡулын ара-тирә күккә оноп ебәрә. "Кем ул, шаманмы? Берәй мәжүси йола башҡарамы, әллә бейейме?" — тип уйланы Әхмәт Фаҙлан улы. Ләкин ул ишетеп белгән шамандарға ис тә оҡшамағын был: төҙ ынын билдәләп тороусы зиннәтле шәреҡ халатына оҡшаш оҙон еләнен иҫәпкә алмағанда, ғәҙәти кейемдә. Шаман ҡорамалдары ла, туҡмағы ла юҡ. орашыр ине, башҡорттарҙы яҡшы белгән Артыр бей уның эргә ендә түгел, тирмәләге кешеләр ара ында... Тылмас ҡына ярҙам итә әлегә Әхмәт хәҙрәттәренә.

Мәжүси бейеү нисек башлан а, шулай ҡапыл ғына тамамланып та ҡуйҙы. Ул да булмай, әлеге ат тотҡан ир, теҙгенен уҙып, ҡоба тураның алғы аяҡтарын ҡушарлап бәйләп тә ҡуйҙы. Ә ҡалған ике ир, арҡандары менән ат муйынын уратып алғас, уны артҡы аяҡтары ара ынан үткәреп, киренән муйын дүңгәләге аша уҙҙылар ҙа бауҙың остарынан тотоп алдылар.

Артабанғы ваҡиғалар Фаҙлан улы Әхмәт өсөн күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үтте. Әлеге ике ир арҡандың ҡулдарында йомарланған ике осон ҡапыл ғына тартып ебәреүҙәре булды, дүрт аяҡтары ла бер төйөнгә төйнәлгән омғол ҡоба тура гөр өлдәп ергә ауҙы. Шуны ғына көткән әлеге ир билендәге бысағын урып алды ла ергә йүнләп ятып та өлгөрмәгән аттың күкрәк тирә ен ярып ебәрҙе... Унан... ҡайҙалыр ҡулын тығып ебәреп, ҡорбанының йөрәген урып сығарҙы...

Доға уҡып, бисмилла әйтеп, Алла ына ыйынып ҡына, кешелекле ҡорбан салыуҙы хуп күргән Әхмәт Фаҙлан улы башта бер аҙ шаңҡып та торҙо. Ләкин ҡыҙыҡ ыныуы енде, артабан ни булырын күҙәтте. Ана, әлеге ир, йөрәген урып алғас, хәрәкәт еҙ ҡалған түшкәнең ҡарынын буйҙан-буйға ярып ебәрҙе лә:

— Туй имеҙ! Туй имеҙ! — тип бысағын күтәреп өрән алып, амаҡлап түңәрәк буйлап тағы тилеләй бейеп китте.— Нимә бирә егеҙ өйөнсөгә? Кем йомарт?

Ул, шулай йүгерә-бейей, түңәрәк буйлап йөрөй, кешеләргә бәйләнә, теләнселәгәндәй нимәлер таптыра, нимәлер өмөт итә. Ә иң ҡыҙығы, бындағылар уға асыуланмай, уйын-көлкө менән яуаплай, йырлай, бейеп тә ташлай... Аҡса тәңкәләре бирә, таҫтамал бүләк итә. Байрам майҙаны ла киңәйә бара, ана, бер яҡта бил быуып көрәшселәр сыға, икенсе урында йыр, бейеү, ҡурай... Әле бында,

әле тегендә төрлө уйындар тоҡанып китә. Битараф кешеләр юҡ бында, бары ы ла көләс, шат. Әйтер ең, бер ғаилә туйы ғына түгел был, ә барса ил байрамы.

Ул арала туй түшкә ен бер нисә өлөшкә бүлеп тә ҡуйҙылар. Йылҡының ике яғынан өсәр ҡабырға ебәләк ит тунап, шунда уҡ көрәшселәрҙе бүләкләнеләр. "Аптырамалы,– тип уйлап алды Фаҙлан улы.– Көрәштә еңгәненә лә, еңелгәненә лә бер үк кимәлдәге бүләк бирә былар. Еңеү түгел, уйыны ҡыҙыҡ, тимәкселәр микән?" Арыраҡ йәнә арыҡ етәкләп үтеүселәр күҙгә сағылып ҡалды. Улары ла туй шәрәфенә ҡорбан бүләге итеп салынамы?

Ат түшкә ен тағы үҙҙәре генә белгәнсә төрлө урындан ҡулын ҡулса, ботон ботса киҫәктәргә бүлеп, кемдәргәлер тарата торҙолар, бейеүсе, йырсы, ҡурайсыларға ла өлөш сыҡты, шикелле. Аҫтарында дөрләп усаҡ янған ҡаҙан эстәренә лә эре киҫәктәр инеп ятты. Ә силәк, ашлау тотҡан ҡатын-ҡыҙ йә этләп малдың эс-ҡарынын таҙартырға кереште.

Ибн Фаҙланды ағайтҡан тағы бер хәл булып алды. Эс-ҡарын таҙартыусыларҙан ике ҡатын ҡарындың шыйыҡ мал тиҙәге тулы "таҙ ҡарын" тип аталған өлөшөн киҫеп алдылар ҙа, уны аршин сама ы саталы ағасҡа элеп, таҙартып та тормайса, әлеге туй тирмә енә табан йүгерҙеләр. Фаҙлан улы быны ына ғәжәпләнеп бөткәнсе, ҡатындарҙың өсөнсө ө лә, ҡарын таҙартҡан ҡулдарын йыуа ы урында, кире енсә, уларҙы тағы мал бысрағына тығып алды ла йүгереүселәргә эйәрҙе... "Сәйер, бик тә сәйер,– тип шиккә ҡалды Әхмәт хәҙрәттәре, – нишләтмәксе була мәжүсиҙәр сей ҡарынды? Нимәгә кәрәк тирмәлә бешмәгән ит?!"

Фаҙлан улы Әхмәтте ул көн хайран ҡалдырғаны тағы шул: ҙур-ҙур ҡаҙандарҙағы ит бешеп сыҡҡас, майҙандағылар, кем ҡайҙа тор а шунда сүгәләп, кемуҙарҙан ике ҡуллап тотоп, йә тос өйәкле ит кимерә, йә услап-услап бер-бере енә йоҙроҡтай йылҡы майы оғондора. Сәғәт сама ы үттеме-юҡмы, тотош бер ат, йәнә арыраҡ бешерелгән нисәмә арыҡ түшкәләре бер тында юҡ булды. Аҙаҡ, әсе ҡорот болғап, ҡаҙан-ҡаҙан өҙлөклө имеҙ урпаны ла емереп ҡуйҙылар. Башлыса емешеләк, тәм-том менән генә туҡланырға ғәҙәтләнгән Фаҙлан улы ошоларҙы ҡарап тороуҙан да уҡшып ебәргәндәй булды...

Ә кисен ҡунаҡтар таралышып, шау-шыу баҫылғас, Әхмәт хәҙрәттәре Артыр бейҙе үҙенә саҡыртты. Быны ы, алдан өйләшкәнсә, туйҙың тирмәлә барған өлөшөн түкмәй-сәсмәй өйләп бирҙе. "Кәрәк бул а, яҙып та килтерермен",– тип өҫтәне.

Ләкин Фаҙлан улы Әхмәт риза ыҙ ымаҡ.

– Ашауға бик таҙа халыҡ күренә,– тине ул, ни айәт, аҡ ҡына.– Бер ултырыуҙа имеҙ йылҡы түшкә ен, әллә күпме арыҡ итен йыпырҙылар. Ашҡаҙандары эшлектән сығып йөрөмәҫ тимә, ҡырағай хайуандар ҙа шулай ҡыланмай...

"Ә ә, бына нимә борсой Әхмәт хәҙрәттәрен,– тип эстән генә ыхмылданы Артыр бей.– Ярай әле, йоланың башҡа яҡтарын белеп бөтөрмәй... Ят кешегә сәйер күренер ундай нәмәләр күп инде. Ана, мәжлес барышында бер мәл хужалар килгән ҡунаҡтарын берәм-берәм түрҙән өйрәп тигәндәй тартып төшөрҙөләр ҙә, унда үҙҙәре ултырып алып, мә әр хаҡын кәметегеҙ, кәметмә әгеҙ, урындарығыҙға ултыртмайбыҙ, урындарығыҙҙы кире атып алығыҙ, тип ҡоҙаларҙы яфалап бөтөрҙөләр. Әлбиттә, уйын-көлкө менән бара был. Ләкин... Ҡыҙып алған йәштәрҙең, өй беренсә йөрөп, бир әләр-бирмә әләр ҙә, көсләп тигәндәй ҡымыҙ йыйып йөрөү йола-ы ла яттар өсөн сәйер күренеүе ихтимал. Йәки бына туйҙан уң да үҙ бисә ен үҙе урлап ҡасырға мәжбүр булған ир ҡылығын был йолаларҙы белмәгән кешегә нисек аңлатмаҡ кәрәк?"

Шуғалырмы Артыр бей үҙен артыҡ оҙайтмаҫҡа булды, белмәгәндең беләге тыныс, ундай ваҡайлыҡтар кәрәк микән әле ул Фаҙлан улына?

— Бары ын да өйләп бөтмәй ең, шикелле,— тине ул, үткер ҡарашын бейгә тоҫҡап. — Ҡорбан малынан бысраҡ сей ҡарын тотоп йүгергәйнеләр, нишләттеләр уны? Әллә шул көйө ашайҙармы?

Артыр бей башта аңламай торҙо, аҙаҡ ирек еҙҙән көлөп ебәрҙе:

— Юҡ, ис тә улай түгел, Әхмәт хәҙрәттәре,— тине ул, урын ыҙға көлөп ебәреүенә ғәфү үтенгәндәй. — Уны ы ла туй йола ы, бер мәҙәк инде. Ҡоҙаларҙан бүләк алыу өсөн айырылы ағасҡа тарттырылған таҙ ҡарынды тотоп ингән әлеге йәш ҡатын шуны әле бер ҡунаҡтың, әле икенсе енең башына кейҙерәм тип ҡурҡытып, көлдөрә-көлдөрә, бүләк йыйып йөрөнө. Шул рәүешле бысраҡ ҡулдары менән өркөтөп, улар ҡоҙағыйҙарҙың да кеҫәләрен арыу уҡ таҙартты. Уйын инде, ғәжәп күңелле үтә ул...

Илселек сәркәтибе Әхмәт бер аҙҙан ғына:

— Ҡырағайҙың уйыны ла ҡырағай инде,— тип ҡуйҙы— Нәжес менән уйнау... йола бул ын, имеш!

Илсе тирмә енән сыҡҡас та Артыр бей оҙаҡ ҡына уйланып барҙы. Ни ти әң дә, бөхтәлек, күндәмлек талап иткән ислам, шәриғәт ҡанундарына ғына ыйып бөтмәй шул бындағы йәшәйеш. Даланың, шартына ҡарап, үҙ ҡылыҡтары, үҙ ҡалыптары. Артыр бейҙең сереп байыған шәреҡ аҡ өйәктәре, күп кенә пайтәхет хеҙмәткәрҙәре йорттарында ла булғаны бар. Уларҙың дастархандарында нимә? Киптерелгән йә тәбиғи емеш-еләк, хәлүә, ҡыҙҙырылған кескәй ит киҫәге, сыр... Ә бында? Ана, бер тыу бейә бер ултырыуҙа ашалып та бөттө... Ошондай уҡ алҡымдан ашырлыҡ шөкәт еҙ мул ый егет ата ы яғында ла ойошторола бит. Нисек күренергә тейеш аҙыҡ ҡулланыуҙа ла, әҙәп-әхлаҡ йә әтенән дә үҙҙәрен дини ҡоршауҙарға бикләгән, суфый түҙемлегенә өйрәткән, йылына бер ай ураҙа тотҡан, көнөнә биш намаҙ уҡыған ғәрәптәргә башҡорттарҙың монафиҡ ғәҙәт-ҡылыҡтары?!

Хәйер, эш көнкүрештә генә түгел, тәрәнерәктә ята, шикелле. Башҡорттар менән осрашыуҙарының иртәге енә үк Фаҙлан улы менән Артыр бей ара ында йәтеш кенә бер әңгәмә булып алғайны.

— Кисә миңә көлдә бешерелгән икмәк биргәйнеләр,— тигәйне Әхмәт хәҙрәттәре.— Бик аҡ күренде, бойҙай түгелдер бит?

— Әйтә алмайым, булыуы ла ихтимал,— тине, ораүҙың асылына төшөнмәүенә уңай ыҙланыбыраҡ, Артыр бей.— Беҙгә, юғи ә, арпа күмәсе килтерҙеләр. Был тарафта күберәк арпа, тары үҫтерәләр. Бойҙай ҙа бар, тик ул ирәк...

— Ниңә улай?

— Бойҙай үҫтереүҙең мәшәҡәте күп. Сәсергә, урырға, унан онға әйләндерергә. Бар ерҙә лә тирмән юҡ. Ә тарыны үҫтергәс, ағас килелә төйә ең дә ала ың. Бутҡаға ла тәмле, таралырға торған күмәсе лә тан ыҡ...

— Ә арпа? Уны онға әйләндерергә кәрәкмәйме ни?

— Кәрәк. Тик арпаны ҡоштарҙан аҡлау еңелерәк, энәләре ярҙам итә. Ә тары, ҡылған ымаҡ, ҡоролоҡта ла үҫә. Бойҙай тәрбиәне күберәк талап итә...

— Бойҙай күптәнме үҫә бында? — тип белеште Фаҙлан улы бер аҙҙан. — Ҡайҙан килтерелгән бында ундай затлы үҫемлек?

"Йәджудж, мәджудж тоҡомло был бысраҡ башҡорттарға кәрәкме икән әле ундай нәзәкәтле аҙыҡ?"— тимәкселер. Ләкин Артыр бей аңламағанға алышты:

— Әллә тағы, бик борондан булырға тейеш,— тине ул, бер ҡатлыланып. — Ана, маздасыларҙың Апастактарында ла, бөртөклө ашлыҡтарҙан иң затлы ы — бойҙай, тиелә бит...

Үҙе лә иҙмәҫтән мәжүси динде иҫкә алыуынан уңай ыҙланып, Артыр бей әңгәмәсе енә ҡарап алды ла, ҙур хәүеф күренмәгәс, төҙәтә алды:

— Хәйер, Ҡөрьәндә лә бар ул. Тик Апастак исламғаса мең йылдар сама ы әүәл барлыҡҡа килгән...

— Апастактың бындағы башҡорттарға ни ҡыҫылышы бар? — иҙҙермә ә лә, Әхмәт хәҙрәттәре ҡуҙғый бара ине, шикелле.— Маздасылар башлыса Иран, Урта Азия биләмәләрендә йәшәгән түгелме ни?

Артыр бей ут менән шаярыуын белә, әммә тыйыла алмай:

— еҙ, Әхмәт хәҙрәттәре, белә торған ығыҙҙыр, маздасылыҡ тыуған илде уларҙың юғары Раббы ы "Иранвеж" тип атай әм, унда ун ай ҡыш, тик икәү е генә йәй, тип өҫтәй. Урта Азияға ҡарағанда ошо тарафтарға күберәк тура килә түгелме бындай тәбиғәт? Ҡара тупраҡ бойҙай үҫтереү өсөн дә уңай...

Быны ына Әхмәт хәҙрәттәре лә түҙмәне:

— Ормазд тәғлимәтен, Апастакты бик яҡшы белә ең икән,— тип көтмәгәндә зәәр сағып алды.— Кем ин, Артыр бей, хаҡ мосолманмы, әллә аман мәжүсиме?

Артыр бейҙың күкрәгендә ниҙер ҡапыл ҡыҫылды, уға эҫе булып китте:

— Белеү — инаныу тигән үҙ түгел бит әле, сәйед Әхмәт,— тине ул, илтифатлы булырға тырышып. — Мөхәммәт ғәлиәссәләмебеҙ үҙенә тиклемге пәйғәмбәрҙәргә оло хөрмәт менән ҡараған, ислам изгеләре рәтенә индергән...

Сәйед Әхмәт өндәшмәне, килештеме-юҡмы — белмәҫ ең...

***

Артыр бей күҙәтә: Фаҙлан улы Әхмәт тә үҙгәрә, уйсаныраҡ йөрөй. Ниндәйҙер икеләнеүҙәр борсой кеүек уны. Үҙе асылып бармағас, уның нимә теләгәнен ҡайҙан белә ең? Кирле-мирле үҙҙәр ысҡындырыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар уға иғтибарлы, хөрмәт менән ҡарай, йәберләмәй. Тик Әхмәт хәҙрәттәре генә уларҙы, нишләптер, аман өнәп бөтөрмәй, бары ына өм өрөн ҡойоп ҡарай. Бәй, исламды ҡабул иткәнсе ғәрәптәрҙең хәле лә әлеге башҡорттарҙыҡы ымаҡ түгел инеме ни? Фаҙлан улы ымаҡ, шул саҡта уҡ бер Раббыға табынған килмешәк йә үд әм насаралар мәжүсилектә көнитмеш ерле ғәрәптәргә кешегә лә анамай, нығ түбән етеп, мыҫҡыллап ҡарағандар, юҡ ҡына ғәйептәре өсөн аяу ыҙ ҡан ҡойоштары ойошторор булғандар. Тарих ҡабатланманы әллә, юғи ә?

Хәйер... Туйҙың уңғы көнө ине. Барса ы йәйләү-тирмәләрҙән ситтә, сауҡалыҡ ҡаплаған сәскәле тау битләүендә, байрамға йыйылды. Фаҙлан улы Әхмәт йәйгесә еңел, ыҫпай кейенгән. Башында ҡыҙыл шаҡмаҡ түбәле аҡ ыл- ары сәллә, уның ҡойороғо сәркәтиптең елкә енә үк алынып төшкән. Өҫтөндә еңдәре, итәктәре алтын төҫөндә биҙәкләнгән иркен еңел халат, аяҡтарында сафъян ҡыҙыл ситек. Ҡара ҡашлы, тар ғына итеп ҡалдырған ҡыҫҡа ҡара аҡаллы әм мыйыҡлы... Сүллек елдәрендә сынығыу алған ҡуңырт йөҙөндә ышанысл урын алған ҡабарынҡы танаулы, ҡара күҙле кешегә кейемдәре бик килешә, яҙғы яҡтылыҡты, болон сафлығын да хәтерләтеп ҡуя. Быны Әхмәт хәҙрәттәре үҙе лә тоя, шикелле — йөҙө көләс, өйләшеүе лә мөләйем. Фаҙлан улы Әхмәт, илселек ағзалары Төрк Тәкин, Артыр бей, Фалис заде менән бергә, башҡорт тылмасы оҙатыуында байрам күреп йөрөй. Бөгөн уларға шундай ирек ҡуйылған, әйҙә, өҙәк бер ҡалҡыулыҡ итәген тоташ ҡаплап, мәж килеп торған байрамда нимә теләй ең шуны ҡара, уртала бул, түргә уҙ.

Бер төштә малайҙар, сиратҡа баҫып, апҡындан сәпкә таш ата. " апҡын" тигәне — ҡайыштан үреп эшләнгән, ташты атып бәрә торған, урта ы тоҡанлы оҙон бау. Сираты еткән уйнаусы малай сатҡа таш ала ла, бауҙы әйләндереп-болғап, уны көс менән сәпкә ебәрә. Фаҙлан улы күпмелер шуны ҡарап торҙо. Сәп йыраҡ бул а ла, тейҙерәләр бит малайҙар! Башҡорттарҙа ҡәлғәләр емерә, туптарын ҡыра, ғәскәрен тарата торған таш атыу ҡоралы барлығын белә ул. "Бына бит,— тип ҡуйҙы үҙ-үҙенә.— Бәләкәйҙән үк өйрәтәләр былар балаларын уғыш өнәренә". Малайҙарҙан уң улар тағы ат ярыштарын ҡараны, көрәшселәр янына уғылды. Фаҙлан

улының иғтибарын башҡорттарҙың "Тартыш" тигән уйындары ла йәлеп итте. Бына ҡайҙа кәрәк икән ул ҡеүәт, та ыл, мәргәнлек! Сабып килгән ыңғайға ике ыбайлы, бер-бере енә бөркөттәй ябырылып, ҡаршы яҡты эйәренән өйрәп алып ырғытырға йә бәреп төшөрөргә тырыша. Бә леүән бит былар, ысын бә леүән, алпамыша! Уларҙың айҡашыуына сыҙамай, аттары ла күкрәккә күкрәк терәп алыша. Бына ни өсөн еңелмәç яугир икән был башҡорт! Улар менән яу ҡырында осрашырға яҙма ын!

Фаҙлан улын ғәжәпләндергәне — был аяу ыҙ ирҙәр уйынында ҡатын-ҡыҙҙарҙың да ҡатнашыуы, ир-атҡа бирешмәйҙәр, ысын яугир ымаҡ та ыл алышалар...

Йыр, бейеү, ҡурай бәйге е башланғас, илселек сәркәтибе күҙгә күренеп үҙгәрҙе, кәүҙә е көсөргәнешле турайҙы, күҙҙәре яна башланы. Күрә ең, сәфәргә сыҡҡаны бирле йоҡом орап килгән шағир күңеле ҡабат уянды!

Фаҙлан улы Әхмәт башта әллә ни иçе китмәгәндәй, битараф ултырғайны. Шәреҡтең юғары мәҙәниәтендә тәрбиәләнгән, хәлиф арайындағы юғары сәнғәтте үҙләштергән, шағирлыҡ таланты асылған аҡ өйәк ҡатламы вәкиле Фаҙлан улына үҙҙәренең далаларынан башҡа бер нәмә белмәгән был башҡорт нимә күр әтә ала инде? Шуға ла тирә-яғы халыҡ тулы тере түңәрәк эсендә ҡулдары, аяҡтары, йөҙҙәре менән әллә ниндәй хәрәкәттәр я ап бейеп йөрөүселәрҙең ҡылыҡтары уға я алма, балаларса бер ҡатлы булып тойолдо. Тик шунда ибн Фаҙлан ҡапыл эргә ендә ултырған Артыр бей менән Төрк Тәкингә иғтибар итте. Улары, ғәжәп, ошо мәғәнә еҙ борғаланыуҙарҙы мауығып, ихлас ҡарап ултыра! Нимә тапҡандар улар? Ибн Фаҙлан үҙе лә бейеүселәргә иғтибар итте, нимәлер аңлағандай булды. Хайуандар, ҡоштар, тағы әллә ниндәй йәнлек хәрәкәттәрен ҡабатларға тырыша түгелме былар? Төрлө ҡош тауыштары ла сығаралар...

Ана, бере е түңәрәк я ап тирә-яҡты байҡағандай әйләнде-әйләнде лә, ҡулдарын ҡанат ымаҡ ике яҡҡа киң йәйеп, талғын ғына бер нөктәгә табан кәйелеп “йөҙөп” китте. Тағы бере е, йәйә тартҡандай хәрәкәттәр я ап, уны ағалай башланы. Күрә ең, был икәү сая бөркөттөң шыҡыйып барып ҡаяға ҡуныуын, унарсының уны көтөп тороуын тасуирларға маташа. Ошонан уң Фаҙлан улының бындағылар менән ҡыҙыҡ ыныуы арта төштө. Быға бигерәк тә бә леүәндәй киң күкрәкле олпат башҡорттоң йырлап ебәреүе сәбәп булды, шикелле. Ватан, Урал тура ындағы йыр ине ул. Ҡуйы, көслө тауыш менән башҡарылған был йырҙа үҙәктәргә үтер моң да, ағыш та, шул уҡ ваҡытта көс-ҡеүәт, оло тантана, мө абәтлек әм ғорурлыҡ та бергә аҡты. Тәрән, киң, бейек әм бөйөк ине был моң.

Иркен тын менән тәбиғәттең үҙе ымаҡ ила и яңғыраған йырҙы тәү ҡат ишетмәй микән Әхмәт хәҙрәттәре? Фаҙлан улының инд, Ҡытай, Иран ҡәүемдәренең йырҙарын тыңлағаны бар. ис шик еҙ, уларҙың әр бере ендә үҙенсә моң, үҙенсә нәзәкәт. Ә бында... “Әллә халыҡтарҙың рухи сәнғәте лә уларҙың йәшәгән ере, улаған ауа ы менән бәйлеме? — тип уйлап ҡуйҙы Фаҙлан улы үҙе лә көтмәгәндә.— Әйтәйек, ары ҡом сахра ында былар ымаҡ бөтә күкрәк менән йырлап буламы? Йөҙөңдө ҡаплап йөрөмә әң, тамағыңа ҡом төйөлөп, сәсәп, тонсоғоп ҡуйыуың да бар. Хәйер, мосолман кеше енә шулай ауыҙ күтәреп йырлап йөрөү килешәме әле? — Әхмәт хәҙрәттәре, уңай ыҙланғандай, фекерҙәрен икенсегә борҙо. — Тыңлап тороу ҙа ҙур гона . — Ләкин шунда уҡ үҙ-үҙен йыуата алды: — Үҙ ирке менән йөрөмәй ҙә инде, шул мосолман мәнфәғәте тип тырыша. әр нәмәнең үҙ урыны, үҙ шарты. Ошондай ила и моңдо нисек тыңламай ың?!"

Сүллектә, ысынлап та, бигерәк тә ҡырҡыу ҡоро елдәр иҫкәндә, ер өҫтөнән, бихисап сәнскеле энәләр ымаҡ, ҡом болоттары күтәрелә, өйөрөлөп осоп, кейем эстәренә тула, тәнгә ҡаҙала. Унда нисек кенә ҡысҡырып йырлама, тауышың ҡом бархандарында әллә ни алыç китә алмай, унда ҡайтауаз юҡ, тауыштары оро мо-

нар ҡуйылығында  аҫылынып юғалып ҡала.

Ә бында... Далала, еҫле хәтфә яланда яҙ  ауа ы күкрәктәрҙе киңәйтеп, елкендергес, иҫерткес хистәр уята. Йыр тирә-яҡҡа тарала, бигерәк тә тауҙарҙа булғанда юғарыға, күктәргә олғаша, ҡая түбәләрен иркәләй, көҙгөләй күл, йылға йөҙҙәрен  ыйпап үтә... Шулай йөрөй-йөрөй ҙә яңғырауыҡлы ҡайтауаз булып кире ҡайта. Шуға  иңә ҡушылып тирә-яҡ та йырлай  ымаҡ, үҙең дә кәүҙәң менән бергә ҡушылып, еңеләйеп юғарыға оса ың, йыр менән бергә ҡушыла ың,  ин – юҡ, йәнең, рухың бөркөттәр күгендә йөҙә...

Ул да булмай, йырсы янына үлән-көпшә тотоп (ибн Фаҙлан уның "ҡурай" тип аталыуын  хәҙер белә ине) ҡураныс ҡына йәнә берәү килеп баҫты. Көпшә ен ирендәренә терәне,  әм (эй, мөғжизә!) ошо үлән көпшәнән ила и моң урғыла башланы. Ҡураныс ҡына ҡурайсы уйнай ғына башлағайны, алыштырып ҡуйҙылармы ни: үҙе лә, йөҙө лә танымаҫлыҡ үҙгәрҙе, күҙҙәре яна, ҡулбаштары, күкрәктәре дәртле уйнап ҡына тора, әйтер ең, был донъя кеше е түгел, үҙенең ҡайҙа икәнен дә онотто. Көй ҙә көпшәнән үҙенән-үҙе урғыла, тирә-яҡҡа  ибелә кеүек... Донъяла бер ниндәй ҡаршылыҡ та, ыҙғыш та, көндәшлек тә юҡ, тик бәхет кенә... Моң – иркен ҡош, ул оса, йөҙә. Башҡалар ҙа онотолған, ниндәйҙер ләззәтле хистәргә сумған, рәхәттә ойоған... Бер ни үҙгәртмәй, сәбәләнмәй, нисек бар шулай моңға иҫереп йәшә лә йәшә инең.

Фаҙлан улы Әхмәт, ирек еҙҙән, ошо ила и ауазға елкенеп,  ҡаршылыҡлы уйҙар солғанышында ултыра бирҙе. "Башҡорттарҙа, башҡа төркиҙәрҙә булмағанса, батырҙары хаҡында йырҙары, өләндәре күп,– тигәйне бер мәл Төрк Тәкин.– Уларҙа донъя башынан уҡ килгән ҡа арманлыҡтар данлана. Ата-бабаларын ололайҙар. Шуға рухтары ныҡ." Ышанма аң да ышанып ың. Сөнки эс-бауырҙарҙы айҡапбайҡап сығырлыҡ, тәндәрҙе зымбырлатырлыҡ ошондай сихри моң, серле көйҙәрҙе кем ижад иткән, “йәджудж, мәджудж” тип кәм еткән ошо халыҡ түгелме?! Мәңгелек а әң был, мө абәт тәбиғәттең үҙ йыры, үҙ бөйөклөгө!

Шәреҡтә Фаҙлан улы Әхмәт – тамбурын, сазын, дойра  әм дутарын, моң донъя ының бихисап башҡа ҡоралдарын да күп тыңлаған кеше. Хәлифәт  арайында ла билдәле сәнғәт  ә елдәре йыш сығыш  я ай. Улар, исма ам, юғары мәҙәниәттә тәрбиәләнеп, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ныҡышмалылыҡ менән үрләгәндәр быңдай юғарылыҡтарға. Ә былар  уң? Әллә уларҙың сәнғәте – ҡырағай моң, тәбиғи моң, тәбиғәттең үҙ моңомо? Быҡа берәү ҡумыҙ тигән бәләкәй генә бер нәмәне ирендәренә ҡыҫты ла, бармаҡтары менән сиртеп, әллә ниндәй әүрәткес сәйер тауыштар сығара башланы: бер ҡара аң – ҡоштар тауышы, тағы бер аҙҙан – тимер менән ҡаҙан төбөн ҡырғылау ауаздары, унан тағы – тантаналы гөрөлдәү... Моңға сорналған мең тауыш, мең ауаз... Уға йәнә серкелдәгән, думбырҙаған,  ыҙғырған тауыш сығарған ҡорамал менән төркөмдән сығып, яңы оҫталар ҡушылды. Китте тантана: әле мәғрур ҡаяларға бәрелгән дауыл шашыныуы, ул да булмай, зи ендәрҙе телеп үткән күкрәп йәшен атҡан шаңдауҙар... Унан тағы тынлыҡ, хатта ваҡ таштарға бәрелеп аҡҡан селтер шишмә тауыштары ла ап-асыҡ сайпыла. Ҡош-ҡорт, төрлө йәнлек ауаздары ла ишетелеп ҡалғандай... Иң ғәжәбе: был ауаздар тәбиғәткә, тирә-йүн хозурлығына тап килә, тән яҙылып, тын юлдары киңәйеп киткәндәй була.

Каруан сәркәтибе  аптырай: әлеге оҫта бер үк мәлдә ҡумыҙын да сиртә аратирә, тамаҡ төбөнән, бик тәрәндән шомло өзләү ҙә сығара. Нисек шулай итә икән, әллә бының боғаҙы икәүме?!

Фаҙлан улы үҙ тирә ендәгеләргә  күҙ йүгертеп ала. Күр,  әммә е моңға арбалған. Ә Артыр бей, ана, бөтөнләй йы ан күктәренә күтәрелгән, элекке тормошон, бындағы йәш саҡтарын хәтерләгәндер, бәлки. Уның йөҙө лә тау армыттары буйлап

йүгергән күләгәләй, берсә етдиләнә, берсә ҡырыҫлана, йә, ҡояш иркәләгән аҡ болоттар эсенә барып юлыҡҡандай, яҡтырып китә...

Тулҡынлана ул, йәнтөйәгенән күптән кит ә лә, ата-бабалары аманатына тоғро, ихлас ғорурлана үҙ ҡәүеме менән. "Башҡорт иле! Ҡай ы ғына Раббы ярат а ла, ул ине мөмкин булғандың бары ын иҫәпкә алып, бөйөк тә, гүзәл дә итеп, яҡты күңел менән нурлы итеп я аған! – тип уйлай ул.– Мәғрур тауҙар, сая бөркөт ҡаялары, көҙгөләй йылтыр күлдәр, балыҡлы йүгерек йылғалар, сәхрә яландар, ут тулы сәскәле далалар... Йәнең ни теләй шул бар бында! алҡын оҙон ҡыштары менән бергә хуш еҫле, ундырышлы йәйҙәрен дә бүләк иткән Раббылар ошо илгә. Тәбиғәте кеүек, мәле менән ҡырыҫ, әммә киң күңелле, бер ҡатлы, ата-баба аманатына тоғро халыҡты хужа иткән улар ошо ергә. Ихласлыҡты, бер ҡатлылыҡты көс өҙлөк тип аңлаусылар әр заманда ҡалҡып тора. Баҫҡынсыларҙың майлы күҙҙәре Уралдан айырыла алмай, гүзәллекте емереүҙән ләззәт табыусы көстәрҙең күҙҙәренә ҡан ауа. Ләкин ил өйәрлек, яугирлыҡ, ҡа арманлыҡ рухтарын юғалтмай башҡорттар.

Башҡорт иле! Дәүерҙәр уҙымында донъяға ин бик күп оҡланғыс бөйөк эштәр күр әттең, илеңә, халҡыңа төбәп атылған уҡтарҙы үҙ күкрәктәренә еңдереп үндергән батыр улдар үҫтерҙең. Шуға инең менән дуҫтар ғына түгел, дошмандар ҙа иҫәпләшергә, хөрмәт итергә мәжбүр. Ошо юлыңа артабан да тоғро бул, байрағыңды юғары күтәр, башҡорт иле! Үҙ илеңдә сиктәр белмәй, кейектәй иркен йөрө, даръяларҙағы балыҡтай той үҙеңде, башҡорт бала ы! Ҡурҡма, шикләнмә, был – инең илең, йортоң әм ғәзиз бишегең! Сиктәр әм сикләүҙәрҙе дуҫтар түгел, ине тарих сүплегенә бырғытырға тырышыусы дошмандар, май күҙле көнсөлдәр уйлап сығара. Улар инең бөйөклөгөңдө түгел, ә меҫкенлегеңде көҫәй, хайуан хәленә төшөүеңде көтә. Ғорур бул, башҡорт, башҡаларға өлгө күр әтеп, үҙеңсә йәшә, тарих төпкөлөнән килгән затлы тамырҙан икәнеңде онотма!"

Кисерештәренә баш була алмай ултырған Артыр бейҙең бер мәл ошо башҡорттарға үҙенең кем икәнлеген таныҡкы ы, асылғы ы, донъя хәлдәре хаҡында рәхәтләнеп гәпләшке е, шуның менән йөрәгендәге күп йылдар йыйылып килгән ҡара таптарҙы, барса ауырлыҡтарҙы ла ыпырып ташлағы ы килде. Ләкин ярамай, мәле ҡулай түгел, илселек бит бөтөнләй икенсе маҡсат менән йөрөй. Артыр и ә унда рәсми хеҙмәттә...

***

Иртүк илселек тағы юлға сыҡты. Башҡорттар каруанды тотҡарламаны. Әйҙә, юл кеше енең юлда булыуы яҡшы. Тәңре енән баш тартып, ата-баба намыҫын тапат ынмы ни башҡорт?

Әлбиттә, инаныуҙарҙа әллә ни ҙур айырма юҡ ымаҡ. Әммә ошо арала ғына ғәрәп илселеге ярҙамында башҡорттар шуға ышанды: үҙәренең Тәңреләре ер кешеләре эштәренә әллә ни ҡыҫылып, аҙым айын нимәләрҙер талап итеп бармай икән дә! Күрә ең, Тәңре кешеләргә күберәк ышана, иректе күберәк бирә. Әйҙә, нисек оҡшай шулай эшлә: телә әң – йәнлектәй, телә әң – балыҡтай йәшә бынауындай хозур илеңдә!

Илселәр килтергән Раббыларҙың бары ын бик ныҡ сикләйәсәк. Биш ваҡыт намаҙҙа ултырыу, ай буйы ураҙа тотҡанда ҡатын-ҡыҙҙан айырым йәшәү... Тағы әллә ни саҡлы дала шарттарында үтәп булмаҫтай тойолған бурыстар, тыйыуҙар, ҡанундар...

Шуға, үҙең аңлап етмәгән нәмәне көсләп таҡмағандары өсөн ҡыуанғандай, Болғарға йүнәлгән Бағдад каруанын башҡорттар ихлас теләктәр теләп оҙатты, хатта уларҙы хәүеф-хәтәрҙән аҡлап та барҙы. Каруан кисеүе билдә еҙ берәй йылға

буйына килеп төртөл ә, ис уйламағанда "осраҡлы" берәй унарсы, балыҡсы килеп сыға, кисеүҙең хәүеф еҙ урындарын күр әтә: әйҙә, ғәрәптәр тиҙерәк үт ен дә үҙ йомоштарын хәҙер Болғарҙа хәл ит ен.

Фаҙлан улы Әхмәт башта оло шик-шөб әгә алған башҡорт иленән үҙҙәренең имен-аман үтеп барыуҙарына ҡәнәғәт, шуға тыныслана ла төшкәйне, әйтәгүр, серле, ғәжәп нәмәләрҙең бында аҙым айын осрауын, бер нәмәгә лә артыҡ ышанып бармаҫҡа кәрәклеген генә онотоп ташлаған...

Башҡорт зыялыларынан айырылып, Болғарға табан көн сама ы китеп өлгөргәйнеләр инде. Тыныс баралар, башҡорт хәҙер ҡурҡыныс түгел. Алда – теҙелеп киткән убаларға ыйынған тәрән йәшел үҙән. Шунан уҙа башлағайнылар, көтмәгәндә ян-яҡтағы уба артында көслө гөрөлдәү ишетелде. Башта ирәк ишетелгән был тауыш бер аҙҙан күп ыбайлы сапҡанда ғына була торған ғәрәсәтле тояҡ таҡылдауҙарына әүерелде.

Ғәрәп илселеген оҙата барған сиреү йә әтләп, хәрби тәртип ҡушҡанса, айырым төркөмдәргә бүленә алып, илселекте тығыҙ ҡулсаға алды. Каруан, аптырағандай, бер мәлгә туҡтап ҡалды. Бары ы, ағайып, ни булырын көттө. Фаҙлан улы Әхмәт үҙе лә был хәлгә ҡаушай төштө: "Болғарға саҡлы еҙгә берәү ҙә тотҡарлыҡ я амаҫ, тыныс барығыҙ,– тип ҡалғайнылар ҙа ба а башҡорттар уңғы осрашыуҙа – шулай хафаланды илселек сәркәтибе. – Үҙ үҙҙәрендә тормай, ҡыуа сыҡтылармы? Ғәм - еҙ генә килгән каруансыларҙы сапҡылап китеү әллә ни тормаҫ тотанаҡ ыҙ башкиҫәрҙәргә..."

Ул да булмай, ҡалҡыулыҡ артынан тәүге шәүләләр күренде, ырт аръяғында, даръяла йөҙөп барғандай, күмәк ат баштары үтә башланы. Унан илселек туҡтап ҡалған тип әнгә, көслө күкрәктәре менән ауа телеп, яр ыулы бихисап аттар ташҡыны эркелде... ырттарында ыбайлылары юҡ, аттар үҙҙәре генә. Тояҡтары менән ер елкетеп, ҡойон уйнатып, баштарын юғары сөйөп каруанға табан сабалар... Инде йөҙләгән хайуан, бер йоҙроҡҡа төйнәлеп, сабып килеп сыҡты ырт артынан, ә ут бөркөүсе ажда алай шашҡан был ташҡындың осо күренмәй, тулҡын артынан тулҡын...

– Тарпан! Тарпандар бит былар! – Артыр бей үҙе лә иҙмәҫтән ҡысҡырып ебәрҙе. – Ҡырағай аттар! Ана күпме улар!

Артыр бей өрәненең асылы Фаҙлан улы Әхмәткә лә барып етте, шикелле. Эйе, ысынлап та, ҡырағай аттар былар. Ҡырағай тәбиғәттең буй онмаҫ, ғорур мәхлүктәре. Хәтәр мәлдәрҙә араларына ел дә үткәрмәй, хатта үлемесле ҡан дошмандары – бүре өйөрҙәренә ҡаршы тотош стена булып ябырылып, уларҙы тапап, иҙеп, ботарлап китер ҡыйыу йәндәр! Тик уларҙың бында ошо көнгә саҡлы шулай күпләп аҡланыуына ғына ышана ы килмәне Фаҙлан улының. Борон ғәрәптә лә булған тарпандар. Эҫе ҡом сүллектәрен гиҙеп йөрөр сыҙам хайуан. Исламғаса дәүерҙәрҙә лә бәҙеүән ыбайлылары ошондай аттарҙа йыраҡ араларға ат сабыштары ойошторған. Ираҡ сахра ы аша Сүриәгә, Дамаскыға... Ер менән күкте тоташтырған ҡот осҡос ҡом бурандары, дауыл менән бергә күсеп йөрөүсе бархандар аша ыу ыҙ сүллектәр буйлап ал ыҙ-ял ыҙ күп тәүлектәр сәйәхәт ҡылғандар. Үҙҙәре ымаҡ, аттары ла түҙем булма а, үтеп булыр инеме ни шундай аралыҡтарҙы?!

Ә ҡалҡыулыҡ артынан атылып килеп сыҡҡан ҡырағай көтөү, күҙҙәре тонғандай, ҡурҡыу белмәй, туп-тура каруанға табан йомолоп килә бирҙе. Әллә ҡоторғандармы? Ә юҡ, ана, иң алдан елдереүсе аҫау айғыр көтмәгәндә арт аяҡтарына үрә баҫып, әсе итеп кешнәп ебәрҙе. Сабып килгән ыңғай ҡапыл уңға янтайҙы ла, туҡтап ҡалған каруан юлын киҫеп, унығ алдынан ғына аҫҡа табан уҡталды... Ар-

тынан килгән ташҡын да, сафтарын аҡлаған ғәскәр ымаҡ, ҡырҡа боролоп, башлыҡтары артынан эйәрҙе. Каруансыларға тарпандар күтәргән ҡуйы туҙан менән әсе тир еҫе генә килеп етте. Ғәрәптәр күпмелер ваҡыт ошо туҡтатып булмаҫ дәшәтле ҡырағай ағымдан шаңҡып, өндәшмәй торҙо. Тарпан өйөрө ҡалҡыулыҡтан төшөп китеп, тәрән үҙәндәге ҡурғы эсенә инеп юғалғас та әле күмәк тояҡтар гөр өлдәүе, яр ыған ат бышҡырыуы, өҙлөк өҙ геү бик оҙаҡ ҡолаҡтарҙа яңғырап торҙо.

Фаҙлан улы Әхмәт был мәлдә икеле-микеле тойғолар кисерҙе: "Тәбиғәте лә, кешеләре лә бер ҡамырҙан я алғанмы әллә быларҙың? Башҡорттар үҙҙәре лә — ошо ҡырағай тарпандар ымаҡ ғорур, үҙ үҙле, нуҡта яратмаған, баш бирмәҫ халыҡ. Ҡаты ҡуллы хакимдарҙан ситтә тороуҙары, иреклe йәшәү, киң далалар аҙҙырған, моғайын, башҡорттарҙы, буй онмаҫ итеп яратҡан. ...Саған, Ырғыҙ, Мәсә, амар, Кинел, Суаҡ, Ҡондорса ... Тағы әллә ниндәй ҙур әм бәләкәй даръяларҙы кистеләр, күпме ер үттеләр. өйләүҙәренә ҡарағанда, улар әле башҡорт еренең бәләкәй генә бер төйәген уйып үтеп бара. Әйтәгүр, ҙур ил, бай ил башҡорт төйәге.

Бигерәк тә Яйыҡ тигән йылғалары ныҡ иҫтә ҡалды. Күргән йылғаларҙың иң ҙуры булды шикелле ул. ыуы ла ыуыҡ, ағымы ла көслө. Илселектең дөйә тире енә ауа өрөп тултырылған караптары ажғырып ятҡан даръяла юнысҡы киҫәгеләй өйөрөлә. Өҫтәренә алты-ете кеше сат йәбешеп ултырған бер нисә ошондай йоморсоҡтар күҙ асып күҙ йомғансы, ағымға күмелеп, ыу төбөнә китте. Алҡын йылға уларҙан башҡа ла тағы күптәрҙең башына етте, бихисап ат, дөйә тулҡындар ара ында юғалды, илселектең ярты мөлкәте юҡҡа сыҡты.

Башҡорттар, күрә ең, йәшеренеп, уларҙың фажиғә ен күҙәтеп торған. Илселек ҙур юғалтыуҙар менән икенсе ярға сығыуға, ҡаршы яҡтан ҡайҙандыр егермеләп ҡораллы ыбай пәйҙә булды ла, туҡтап та тормайса, әлеге ажғыр йылғаға ташланды. Әммә батмайҙар, Фаҙлан улы Әхмәт уларҙың эйәрҙәренә ике яҡлап тын тултырылған тур ыҡтар бәйләнеүен шәйләп алды. Бына нимә тота уларҙы ыу өҫтөндә! Күп тә үтмәне, бер ниндәй юғалтыу ыҙ киң даръяны аттары-ние менән йөҙөп сыҡтылар ҙа, ғәрәптәргә иғтибар ҙа итмәҫтән, яҡындағы урман юлына инеп юғалдылар.

Фаҙлан улы Әхмәт, әлбиттә, үҙе йүнәлгән Болғар дәүләтендәге халыҡтарҙың да байтағы шул уҡ башҡорттар ымаҡ уҡ бейҙәр әм биәрҙәрҙән, табын әм ҡатайҙарҙан тороуын белмәй ине. Шулай ҙа уларҙың: "Болғар йорто — Иҙел йорт" тигәндәре хәтерендә ҡалған. Ә "Иҙел йорт", "Иҙел ер" уларса — тыуған йорт. Байрамдарында, ана, ҡурайсылары "Иҙел йорт" тигән ҡары үҙҙәрен өләңләп, Урал илен, сәхрә киңлектәрен данлап ултырғайны бит...

***

Фаҙлан улы Әхмәт башҡорт илендәге осрашыуҙар тәьҫиренән байтаҡ ваҡыт арына алмай йонсоно. Бағдадтан илселек менән сыҡҡанда ҡорған уй-ниәттәрен дә ошо осрашыуҙар юҡҡа сығара бара. Ни көтә илселекте Болғарҙа?

— Болғарҙа башҡорттар күпме? — тип өндәште Фаҙлан улы ҡапыл ғына үҙе менән йәнәш барған Артыр бейгә.

— Нисек әйтергә? — Көтөлмәгән ораýға Артыр бей әҙер түгел инеме, уйлана биреп торҙо. — Болғарҙа төрлө ҡәүемдәр йәшәй: астар, бартастар, уғырҙар, суарҙар, мажгарҙар, веда халыҡтары әм, әлбиттә, күп кенә башҡорт ырыу-ҡәбиләләре... Әммә улар ара ында, ил башындағы болғарҙан ҡала, көслөләре — башҡорттарҙың ата-бабалары тамырынан килгән биәрҙәр. Болғар пайтәхетенең "Биләр" (бей-ар) тип аталыуы ла юҡтан түгел...

– Ә ниңә Биләр ул, ә Биәр түгел?

– Ғәмәлдә улар бер үк мәғәнә аңлата: "биәр", "биләр", "бигер". әр ҡай ы ы "бей", "бай", "бәк"– биләүсе, эйә, кеше, төп хужа төшөнсә ен бирә. Төпкәрәк төш әк, Киблаз миләди* буйынса бишенсе йөҙ йыллыҡта уҡ юнандарҙың Геродот тигән бөйөк тарихсы ы, еҙ, тәксир, уны уҡып белә торған ығыҙҙыр, Уралда йәшәүсе аргиппей әм иирка (эйә, хужа) тигән ҡәүемдәрҙең берлеге хаҡында яҙа. Бик тә теремек, булдыҡлы, уғышсан булыуҙарын әйтә, ялтас таҡыр башлы "етеҙ атлылар" тип тә атай. уңынан башҡорттарҙы бар иткән әлеге биәр, биләр тип йөрөтөлгән ҡәбиләләр хаҡында бармаймы икән бында үҙ? Башҡалар ара ында борон-борондан бик көслө халыҡ булған улар. Скандинавтар Биармланд йәки Биарм, Биар иле тип атаған Болғарға тиклемге шанлы, ҙур дәүләтте лә улар төҙөгән.

– Нишләптер был турала ғәрәп яҙмаларында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт осрамаíны,– тип шик белдерҙе Фаҙлан улы Әхмәт.– Нимә е менән шанлы булғандыр...

– Ул саҡта ғәрәп сәйәхәтселәре Оло Иҙел менән Сулманиҙелдең төньяҡ тарафтарына барып етә алмағандарҙыр, бәлки. Унының урынына Биар иле –Биармландты Скандинав халыҡтары бик маҡтаған, уңынан Биармланд тигән мәш үр ил уларҙың ҡары үҙҙәренә лә инеп киткән. Сөнки Биарм уларға иң яҡын, иң бай, юғары мәҙәниәтле ил булған. Скандинавтар менән Биарм аралашып, киң сауҙа алып барғандар. Быларын бына беҙҙең хөрмәтле Төрк Тәкин яҡшыраҡ беләлер, моғайын. Беҙҙең көндәрҙә ата-баба өнәрен ошо тарафтарҙа ул дауам иткән, тиҙәр бит...

– Артыр бей, мут йылмайып, баянан бирле үҙгә ҡушылмай үҙҙәренә эйәрә килеүсегә ишараланы.

Төрк Тәкин әңгәмәне ентекләп тыңлап килгән икән – ҡапыл ҡуйылған орау уны ҡаушатманы.

– Эйе, былар билдәле,– тине ул еңел генә. – Биар иле тимер-суйын, баҡыр иретеү, ҡорос ҡойоу, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, ҡорал я ау сәнәғәте, тире иләү, йәнлек тиреләренән, күндән кейем тегеү өнәре, мамонт өйәгенән биҙәнеү әйберҙәре эшләү әм атыу менән шөғөлләнгән. Хәйер, был яҡтарҙа, бигерәк тә Урал тарафтарында, тимер, баҡыр иретеү, ҡорос ҡойоу, ҡорал я ау өнәре лә бик боронға барып тоташа.– Төрк Тәкин, ниңәлер, көлөп ҡуйҙы.– Ана, Ғәрәп, Иран яҙмаларында ла Искәндәр-Зөлҡәрнәйен йәджудж әм мәджудж тигән я ил халыҡтарҙы тау араларына томалап, бикләп ҡуйыу өсөн тимер диуарҙы ла ошондағы ҡорос иретеү мейестәре ярҙамында ҡойҙортҡан, ти бит...

Әңгәмәнең был йүнәлешкә күсеүенә Фаҙлан улы Әхмәт бик үк ҡәнәғәт түгел ине, шикелле, бер аҙ үҙ еҙ барҙы.

– Ә ул еҙ маҡтаған мәш үр Биарм иле ҡайҙа булған? – тине илсе аҙаҡ.– Көслө дәүләттәр улай ҡапыл ғына юҡҡа сыҡмай торған.

– Юҡҡа сыҡмаған ул,– Төрк Тәкин сәмлерәк кереште. – Болғар иле шул Биармдың вариҫы бит инде, унының нигеҙендә әм биләмәләрендә ҡалҡып сыҡҡан, ил башындағы хаким ҡәбиләләр генә “биар”ҙан “болғар”ға алышынған.

Төрк Тәкиндең ҡыҙыулыҡ менән әйткән үҙҙәренең бик үк теүәл түгеллеген белә Артыр бей. Әммә был юлы бәхәсләшеп торманы. Кире енсә, йөпләп, юлдашының фекерен көсәйтә бирҙе хатта.

– Иң ҡыҙығы шунда,– тине ул, Әхмәт хәҙрәттәренә ҡарап.– Болғарҙың ил башына үрләүҙәрендә нәҡ башҡорттарға ҡараған табын тигән ырыу-ҡәбилә ярҙам итә. Хәйер, бындай миҫалдар донъяның әр тарафында тулып ята. Ана, миләди өсөнсө йөҙйыллыҡта фарсыларҙың Истахр тигән бер ҡәбилә е башлығы Арташир Папаҡ Сәсән тигән берәү тырым-тырағай ибелеп йөрөгән төрлө телле күсмә халыҡтарҙан бөйөк Иран империя ының нигеҙе булып киткән Парса-Персия дәү-

**Киблаз миләди – беҙҙең эраға тиклем.*

ләтен төҙөмәйме ни? уңынан да Иран ҡәүемдәре менән кемдәр генә хакимлыҡ итмәй: төркиҙәр, ғәрәптәр, румлылар...

Әҙ генә шымып килә биргәс, Артыр бей фекеренең осона сыҡты:

– Хакимдарҙың әр бере е урындағы халыҡҡа үҙҙәренең телен, мәҙәниәтен, йәшәйеш рәүештәрен көсләп тағырға тырыша, күп осраҡта был ғәмәлгә лә аша. Хәйер, бына ислам дәүерендә генә лә хәлифәт күпме ҡәүемдәрҙе үҙ эсендә "ғәрәпсә иретеп" өлгөрҙө? – Артыр бей аҡ ҡына ибн Фаҙланға ҡарап алды.

– Хәлифәт мәжүси халыҡтарға ислам нуры тарата, үҙҙәренең юғары мәғрифәтен, мәҙәниәтен алып килә,– тине быны ы тыныс ҡына.– Бынан томаналыҡта, бысраҡлыҡта ыҙа сиккән ҡәүемдәргә ни зарар?

– еҙ ҙә хаҡлы... – Артыр бей ҙә яуап ыҙ ҡалманы. – Белә егеҙме, ни өсөн ярты донъяны баҫып алған, сәскә атып ятҡан ҡалаларҙы харабалар хәленә килтергән, үҙенә дошман халыҡтарҙың матди байлыҡтарын ғына түгел, меңәр йыллыҡ рухи хазиналарын, китапханаларын яндырған, бихисап илдәрҙе, ҡәүемдәрҙе юҡ иткән боронғо юнан батша ы, Александр Македонскийҙы, йәки ҡөрьәнсә әйт әк, сардар Зөлҡәрнәйен-Искәндәрҙе Шәреҡтең барса ҡары үҙҙәре, тарихнамәләре күккә күтәреп маҡтай? Йәнә е, ғәҙел, бөйөк, ул тегеләй, ул былай... Ер йөҙөндә унан да камилыраҡ, унан да аҡыллыраҡ кеше лә, етәксе лә юҡ. Шуға, имеш, халыҡтар уның менән уғышып та тормағандар, ололап ҡаршы алғандар, ҡунаҡ иткәндәр, ҡиммәтле әм тылсымлы бүләктәр тапшырғандар, алып булмаҫ ҡала-ҡәлғәләренең асҡыстарын үҙҙәре үк ҡулына тотторор булғандар... Ә шул уҡ ваҡытта, уйлап ҡара аң, юнан сардары ул саҡта үҙе хәҙергесә бер Раббыға табыныусы насара ла түгел, ә бына был тарафтарҙағы ҡәүемдәр ымаҡ, күп раббылы мәжүси булған да ба а!

Ибн Фаҙлан быларҙы ҡыҙыҡ тапманымы, ә, бәлки, көфөр үҙ анағандыр – өндәшмәне. Төрк Тәкин сыҙаманы, фекер ебенең аҙағын белге е килгәндәй:

– Йә, йә, әйтеп бөтөр,– ти алды. – Ни өсөн маҡтайҙар уң ул Искәндәрҙе?

Артыр бей яуабын көттөрмәне:

– Ул саҡта ла халыҡтар, илбаҫар бул а ла, Искәндәр сардарҙың зарарына ҡарағанда файҙа ы күп, тип фараз иткән. Сөнки нәҡ юнандарҙа заманы өсөн юғары мәҙәниәт, көслө ғәскәр, шәхесте хөрмәт итер дәүләт ҡоролоштары булған, ғилемғөләмәләре ныҡ алға киткән. Яулап алынған халыҡтар, илдәр быларға шул осор юнандарҙан өйрәнгән...

Күренеп тора: был әңгәмә Әхмәт хәҙрәттәренә оҡшап етмәй, бигерәк тә уғыш суҡмары юнан сардарын хәлифәт сәйәсәте менән сағыштырырға маташыу.

Ябай хеҙмәтсенең үҙен шулай иркен тотоуы мәле менән уны яр ытып та ҡуя. Ләкин түҙә Фаҙлан улы, юлдаштарын тупаҫ ҡына бүлдерергә баҙнат итмәй. Сөнки, ни әйт әң дә, Бағдад хәҙер йыраҡ, ә уның яҙмышы, юҡ, улай ғына түгел, барса илселектең артабанғы мәнфәғәте ошолар ҡулында түгелме ни?

– Мин дә шуны өйләйем түгелме ни? – тине ул асыулы ғына. – Беҙ уларҙан бөгөн дә өйрәнәбеҙ, ғалим-ғөләмәләребеҙ, табиптарыбыҙ, хатта шағирҙарыбыҙ иҫке Юнан, Рум хеҙмәттәрен байҡай, абаҡ ала, үҙе өсөн файҙалана. Ундай тәрән мәғлүмәттәрең булғас, белә ендер... – Фаҙлан улы ҡапыл уҫал ғына сәнсеп алды.– Хәлифәт хакимдарының бәғзе берәүҙәре әүәлге юнан аҡыл эйәләренең китаптарын йыйыу, атып алыу, уны ғәрәп йә фарсыға ауҙарыу буйынса ла күп эш башҡарған... Әле лә бара был эш. Тик хәҙер ғәрәптәргә шундай заман килде: уларға, үткәндән йә башҡаларҙан өйрәнеү менән бергә, үҙҙәренән түбәнерәктәрҙе өйрәтеү мөмкинлеге, ислам, мәғрифәт яҡтылығын тартыу әләте лә асылды...

Әхмәт Фаҙлан улы хәҙрәттәре оҙаҡ ҡына өндәшмәгәс, Артыр бей, әңгәмә шуның менән тамамланғандыр тип, атын тыя биреп, арттараҡ ҡалырға уйлағайны,

ибн Фаҙландың яңы  орауы туҡтатты:

– Бая телгә алған "табын" тигән ҡәүемдәрегеҙ ҡай ы тарафта хәҙер: башҡорттарҙамы, әллә болғарҙарҙамы?

Артыр бей Фаҙлан улының тел төбөн аңлағандай йылмайып ҡуйҙы. Әммә  иҙҙермәне:

– Әлбиттә, башҡорт илендә,– тине битараф ҡына.– Тик бер дәүләткә ойош алар ҙа, ырыу-ҡәбиләләр бында ярай ы үҙаллы, ирекле көн күрә, ырыу эсендәге барса эштәрҙе үҙҙәре хәл итә. Табындарҙың да билдәле кимәлдә үҙ дәүләтселеге бар. Хәйер, биләмәләргә килгәндә, унда ла әллә ни ҡәтғи сик юҡ. Болғарҙар  ыулаған Оло Иҙелде лә башҡорттар үҙҙәренеке  анай,  әр хәлдә – биләмәләренең сиге итеп. Йәйрәп ятҡан башҡорт иленең барса тарафтарында ағып ятҡан даръя- ыуҙар "Иҙел" тип атала: Ағиҙел, Сулманиҙел, Ҡариҙел, Күгиҙел, Үлиҙел... Башҡорт иленең үҙәген тәшкил иткән ҡан тамырҙары  ымаҡ был "иҙелдәр". Ә бына Болғарҙа үҙҙәре урынлашҡан бөйөк йылғаны "Болға" тип йөрөткәндә, башҡорттар уны "Оло Иҙел" йә "Иҙел" тип атай, иҙелдәрҙең Баш Иҙеле икәненә баҫым я ай. Әйткәндәй, Оло Иҙелдең Болғар дәүләте урынлашҡан ярында башҡа  "иҙелдәр" юҡ...

***

...Башҡорттар, ысынлап та, Болғарҙа ла күп булып сыҡты. Уларҙың үҙҙәрендәге осрашыуҙарҙа ла, юлда килгәндә лә "Болғар иле – Иҙел йорт, Иҙел йорт – ул  тыуған йорт" тип  амаҡлайҙар ине... Хаҡ әйткәндәр икән.

Ошондай күңел еҙ уйҙар тәьсир иттеме, Фаҙлан улы Әхмәт Болғарҙа ла әллә ни уңышҡа ирешә алманы. Күп нәмә вәғәҙә иткәндәй, бик тә тантаналы башланғайны ла ба а Болғар батшалығы менән осрашыу!

Барып етергә тәүлек сама ы юл ҡалды тигәндә, илселекте көтмәгәндә Болғар батша ының улдары, яҡындары, ырыу башлыҡтарынан торған мәртәбәле төркөм оло хөрмәт күр әтеп, икмәк, тары ярма ы, ит тотоп ҡаршы сығып алды. Шилкә улы Алмыш Илтабар – батша үҙе лә, осрашыу өсөн, пайтәхетенән ике фарсах сама ы алға сығып торған. Илселекте күреү менән, ул йә әтләп атынан төштө лә ергә тубыҡланды. Унан Алла ыны ололоҡлап, йөҙө менән ергә ҡапланып торҙо. Артабан да Алмыш батша илселеккә ҡарата ифрат итәғәтле булды, үҙен кеселекле тотто. Пайтәхеткә ҡайтҡанда уларҙы махсус ҡоролған бик тә күркәм тирмәләр көтә ине...

Ә  Бағдадтан килгән хаттарҙы уҡыу тантана ы  уң?! Байрамға Алмыш батша илендәге барса ырыу башлыҡтарын, бейҙәрен  әм башҡа бик күп зыялыларын саҡырғайны. Әхмәт хәҙрәттәренең ғәжәпләнеүенә ҡаршы, бында Бохара, Хәрәзм, Хөрәсән тарафтарынан килгән сауҙагәрҙәр, руханиҙар, сәйәхәтселәр, төрлө башҡа  өнәр эйәләре лә   ан ыҙ булып сыҡты. Уның өсөн  ис көтөлмәгәне  әм ҡыуаныслы ы – бында үҙенең яҡташын,  Бағдадтың үҙенән үк килеп, Болғарҙа тегенселек  өнәре менән шөғөлләнгән Кәрим атлы яҡташын осратыуы булды. Әхмәт хәҙрәттәренә уның менән оҙаҡ ҡына хәтирәләргә сумып, тулҡынланып гәпләшеп ултырыу бәхете тейҙе. Бигерәк тә Кәрим шатланды был уйламаған-көтөлмәгән мөғжизәгә. "Эштәр былайға киткәс, иншалла, Болғар менән хәлифәт ара ында каруандар ҙа йөрөп торор, ҡайтып-килеп  йөрөргә лә форсат табылыр..."

Болғарҙа көндәр тиҙ үтте, хәлифәттән Алмыш батшаға тип алып килгән хаттарҙы тантаналы уҡыу мәле етте. Иң башта тантана була ы майҙанға илселектең ике ҙур байрағын ҡаҙап ҡуйҙылар. Алмыш батшаға хәлифәттә иң юғары хакимдар ғына кейгән алтынлатып, еләнгә оҡшатып тегелгән ҡара савад менән зиннәтле баш кейеме – торбан кейҙерҙеләр, бүләккә ебәргән әйәрле ғәрәп юртағы  тоттор-

ҙолар.

Ошонан уң Әхмәт хәҙрәттәре Бағдад хәлифе Джафар Әл Мөктәдирҙең әм уның вәзире Нәзир Әл Хәрәмиҙең Болғар батша ы Шилкә улы Алмыш исеменә яҙылған хаттарын тантана менән ҡысҡырып уҡып сыҡты. Тылмас уны болғарсаға ауҙара барҙы. Хаттарҙа исламға ылыҡҡан халыҡтарға именлек теләү, Алла ыны ололау, бөйөк хәлифәттең уларға әр саҡ терәк булып торасағы әйтелгәйне. Йәнә шуларҙы раҫлап, Болғарҙа хәлифәт мәсете әм хәрби ныҒытма төҙөйәсәге, бының өсөн дүрт мең муссайаб динары ебәрелеүе яҙылғайны. Хөрмәт йөҙөнән хаттарҙы йыйылған халыҡ, Алмыш Илтабар үҙе лә аяғүрә баҫып тыңланы. Хат-фәлән уҡылып бөткәс, Фаҙлан улы Әхмәт Илтабар әм уның ҡатынына затлы бүләктәр таратты. Яуап рәүешендә Илтабар үҙенең иркен, бай тирмә ендә ҡунаҡтарҙы данлап, оло арай мәжлесе үткәрҙе... Болғарҙағы миссия көткәндәгенән дә уңышлыраҡ, тотҡарлыҡ-ыҙ бара ымаҡ ине лә ба а! Ниңә шулай ҡапыл ғына ҡырҡа үҙгәрҙе уң эштәр?!

Әлеге тантананан уң ике-өс көн үттеме-юҡмы, Болғар батша ы илселек сәркәтибен саҡырып алды ла, бер үҙ әйтеп тормаҫтан, уның алдына асыу менән хәлифәттән килтерелгән хәлиф хатын ырғытты.

— Был хаттарҙы кем килтерҙе? — тине ул дорфа ғына.

— Мин,— тиергә мәжбүр булды Фаҙлан улы Әхмәт.

— Ә быны ын?!

— Уны ын да мин алып килдем,— Әхмәт хәҙрәттәре үҙен нисек тоторға ла белмәй аптырап ҡалды.— Ниңә орай ығыҙ?

Болғар Илтабары яуап бирмәне, йыуан кәүҙә е, кәпәйеп торған ҡор ағы менән ҡорбанын мөйөшкә ҡыҫырға теләгәндәй, уға табан атлауын белде:

— Ә ул хаттарҙа әйтелгән дүрт мең динар аҡса ҡайҙа? — Илтабар ҡыҫыҡ үткер күҙҙәре менән илселек сәркәтибен аяу ыҙ бырауланы.— Ниңә уны беҙгә аман тапшырмай ығыҙ?!

Фаҙлан улы Әхмәт, тотлоға-тотлоға, каруандың Хәрәзмдә оҙаҡ тотҡарланыуы, шул арҡала хәлиф Әл Мөктәдир әйткән динарҙарҙы йыйып өлгөрмәүҙәре, Джайхун йылға ын боҙ ҡаплағансы аша сығып ҡалыу өсөн ашығыуҙары хаҡында аңлата башланы.

— Беҙ ҡулдан килгәндең бары ын да эшләргә тырыштыҡ,— тине ул аҙаҡ.— Тейешле аҡсаларҙы йыйыу өсөн махсус кеше ҡалдырҙыҡ. Ул беҙҙең арттан ҡыуып етергә тейеш ине...

Болғар Илтабары был үҙҙәргә ышанманы:

— Барығыҙ ҙа килеп бөттө бит инде,— тине ул, Әхмәт хәҙрәттәрен аман ҡыҫмаҡлап, — тик мөслимдәр әмиренең бойороғон ғына үтәмәй егеҙ. Ул бит аҡсаны Хазар йә үдтәренән аҡланыу өсөн хәрби ныҒытма, халыҡты иманға килтерер мәсет төҙөргә ебәргән. Ә еҙ килтергән кейем- алымды илселек менән бергә ҡайтҡан Башту улы Абдаллах та таратып биргән булыр ине. Бағдад ынлы Бағдадтан бүләк тапшырыу өсөн генә шундай хәүеф менән, бихисап аҡса түгеп, әллә ҡайҙағы ер сигенә илселек оҙаталармы? ине лә хәлиф Джафар Әл Мөктәдир, Алла уның ғүмерен оҙайт ын, хат уҡыр өсөн генә ебәрмәгәндер, ә?!

— үҙҙәрең раҫ, Шилкә улы Алмыш ғәли йәнәптәре.— Фаҙлан улы Әхмәт түбәнселек менән Илтабарҙы тынысландырырға ынтылды.— Тырышманыҡ түгел бит, ныҡ тырыштыҡ...

Болғар хужа ы ыҡҡа килмәне. Илселектең башҡа ағзаларын саҡыртып алды ла сәғәт сама ы уларҙың әр бере енән ныҡыша-ныҡыша хәлифәт ебәргән аҡсаның ҡайҙа булыуын асыҡларға тырышты. Бер ни ҙә килеп сыҡмағас, үтә нәфрәтләнеп, тылмасына:

— Мин был кешеләргә ышанмайым, ялғансы улар,— тип белдерҙе, яңы кил-

гәндәр яғына ишаралап.– еҙ беҙҙе генә түгел, мосолмандар хакимы изге Джафар Әл Мөктәдирҙе лә алдай ығыҙ,– тип гөрөлдәне йәнә Алмыш батша мискә төбөн ҡаҡҡандай ҡалын тауышы менән. Унының имеҙ йөҙө йәм еҙ сирылды. – еҙ – хәлифтең ышаныслы ҡолдары, намыҫығыҙ ҡайҙа? Хәлифәт икмәген ашап, хәлиф кейемдәрен кейеп, уға хыянат итә егеҙме? Ҡайҙа ул Алла изге е биреп ебәргән аҡса? – тип ҡабатланы ул йәнә.– Дөрөҫөн әйтегеҙ, юҡ а, барса мосолмандарҙың ышанысын юғалтасаҡ ығыҙ!

Шилкә улы Алмыш, әшеүәт еҙ дәү кәүҙә ен нисектер еңел йөрөтөп, йәнә ҡаршы ында ҡоттары осоп, ҡалтырап торған ғәрәп илселегә кешеләренә берәм-берәм текәлеп ҡарап сыҡты. Былары өндәшмәгәс, ниңәлер, ҡулын елтәп ҡуйҙы.

Эйе, Алмыш Илтабар асыуынан ҡоторор хәлгә етте: нимә ҡылана был ғәрәп илселәре, ниңә хакимдарының үҙен үтәмәй? Шулай юҡҡа сығамы унының йылдар буйы бөртөкләп уҡмашҡан хыялы? Яҡшы тормоштан мөрәжәғәт итмәне бит ул хәлиф хәҙрәттәренә, ниәте лә изге ине: Болғарҙы күтәреү, көсәйтеү, сама ыҙ нәфселе Хазарҙы тышаулау...

“Ә иң мө име – Болғарҙың үҙендә тәртип урынлаштырыу. Әлегә Болғарға ойошҡан ҡәүемдәр бик тә сыбар, телдәре лә төрлө, хатта инанған Раббылары ла әр ҡай ы ының – үҙенеке. Был ныҡ тарҡата дәүләтте, халыҡтар тырым-тырағай йәшәй бирә. Уларҙы көс менән берләштерергә тырышыу ҙа файҙа ыҙ. Болғар дәүләте урынлашҡан Иҙелдең ике яғында иркен далалар етерлек, ҡыҫа башланыңмы, ырыуы-ние менән ҡубарылып күсте китте. Бына уларҙың бары ына ла уртаҡ дин бул а икән,– тип уйлай Алмыш Илтабар. – Рухтар уртаҡ бул а, дәүләтте лә бергәләп нығытырҙар ине. Ә ундай үрнәктәр күршеләрҙә генә тиерлек бар бит хәҙер: хазарҙар йә үд диненә табына, Рум, Византия – насаралар... Бер динде, бер Раббыны үҙ итеү күтәрә был илдәрҙе, рухиәт, көс бирә”.

Ләкин уларҙың диндәре Болғарға файҙа килтерерлек түгел, Рум, Византия менән бәйләнештәр бик йомшаҡ, ә хазарҙарға Болғар былай ҙа вассал рәүешендә. Алмыш Илтабарҙың улы – Хазар батша ында аманат, хатта оят ыҙлыҡтың сигенә етеп, унының ҡыҙын да көсләп ҡатынлыҡҡа алды. Хазарҙан башҡа бер аҙым ситкә атлама. Шуға Хазарға бәйләүсе түгел, кире енсә, ошо хурлыҡлы буй оноуҙан ҡотолдороусы дин кәрәк Алмыш Илтабарға. Ундай дин, ысынлап та, бар. Бына Болғарға яҡын, унының менән тығыҙ бәйләнештәге Урта Азия төркиҙәре хәҙер бары ы ла тиерлек ислам диненә күсте. Хәлифәт көндән-көн көсәйә, яңы биләмәләр яулай, хатта Айрупа тарафтарында ла хакимлыҡ итә. Хәлифәт илселәре, йөрөмтәк сәйәхәтселәре, ислам тәғлимәтен таратыусылары Иҙел, Урал тарафтарында ла хәҙер әр еҙ ҡунаҡҡа әүерелеп бара. Болғарҙың үҙендә лә, тирә-йүн ҡәүемдәрендә лә Мөхәммәт өммәтенә ылығыусылар көндән-көн күбәйә. Алмыш батша инаныуынса, болғарҙар өсөн бөгөн берҙән-бер хаҡ юл – көсәйә барған ошо ислам донъя ына берегеү, улар яҡлауына инеү. Хәлифәт – бай ил, бәлки, матди ярҙам да күр әтерҙәр, дошмандарҙан аҡланыу өсөн хәрби ҡәлғә-нығытма төҙөп тә бирерҙәр... Юҡ а, Болғар иле Иҙел ярындағы ышыҡланыр урыны ла булмаған ҡола яланда, әр тарафҡа асыҡ ете ел урта ында ултыра. Хәлифәттең көслө күкрәгенә ыйынғанда, Хазар ҡағанаты менән дә аяҡ тибеп, ин дә мин өйләшеп буласаҡ... Тик ниңә килгән, нимә йәшерәләр унан ҡарасман ғәрәп илселәре? Алмыштың Бағдад хәлифенә яҙған мәктүбендә Болғарға нимә кәрәклеге ап-асыҡ әйтелгәйне лә ба а. Күп меңлек каруан, Бағдад ынлы Бағдадтан, шулай ҡул ҡаушырып, бупбуш, бүләккә тәғәйен кейем- алым тапшырыу өсөн генә килгәнме?!

Шулай ҙа Алмыш үҙе ҙур өмөттәр бағлап көткән хәлифәт аҡсаларын ҡулға төшөрөүгә өмөтөн өҙмәгәйне, йә эт атлап тағы илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт алдына килеп баҫты:

– Минең ышанысым хәҙер индә генә,– тине ул ниндәйҙер зә әр тантана менән.

— Джафар хәҙрәттәре, Алла уға ышаныслы, тоғро ҡолдар насип ит ен, дошмандарҙан аҡланыу хәрби нығытма ы, йәнә мәсет төҙөүгә аҡса ебәреүе хаҡындағы хатты уҡырға ышанып иңә тапшырған. Тимәк, аҡсаның ҡайҙа икәнен дә иң тәүҙә ин белергә тейеш ең. — Алмыштың май бөргән күҙҙәре тағы ла ҡыҫыла төштө. — уң булмаҫ борон ул аҡсаларҙы биреп ҡотол! инең өсөн был иң яҡшы ы булыр!

Фаҙлан улы Әхмәт Болғар батша ы сатырынан бик тә бошоноп, ҡото ботона төшөп, ҡаушап килеп сыҡты: бында ла уғыҙҙарҙа булған хәл ҡабатланамы? Ул саҡта ла аҙна буйы илселек яҙмышы ҡоторонған ҡырағайҙар ҡулында, ғүмерҙәре ҡыл өҫтөндә торҙо; берәүҙәре уларҙы боғаҙҙарынан уйып үлтерергә лә мөлкәттәрен бүлешеп алырға тәҡдим ит ә, икенселәре, ғәрәптәрҙе шәп-шәрә ҡалдырып, мәсхәрәләп илдән ҡыуырға йә хазарҙарҙағы үҙ әсирҙәренә алыштырып алырға кәрәк, тип зыҡ ҡупҡайны. Уғыҙҙарҙың баш сардары Әтрәк килеп ҡыҫылма а, тәҡдим ителгән бүләкте алма а, ни менән бөтөр ине был сәфәр? Уғыҙҙарҙан Әтрәк ярҙамы менән ҡотола алды. Бөгөн кем ярҙам итер илселеккә?

Ләкин Алмыш батша аҡсаны алырына өмөтөн өҙҙөмө, әллә башҡа сәбәптән — хәл-әхүәлдәр артабан улай уҡ ҡырҡыулашманы. Тик илселеккә иғтибар ғына кәмей төштө, батша түгел, хатта унын хеҙмәткәрҙәре лә көндәр буйы ғәрәптәргә яҡын йөрөмәҫкә, тирмәләренә инмәҫкә тырышты.

Ошонан уң Фаҙлан улы Әхмәт ни эшләргә белмәй, ваҡыт үткәрә алмай яфаланды. Аптырағас, ыбай ҙа, йәйәүләп тә берәй енең оҙатыуында тирә-йүнде ҡыҙырып йөрөнө. Ишеткән, белгән, күргәндәрен, тикшереп тә тормайса, төрлө уйҙырмаларға сорнап, юл яҙмаларына теркәй барҙы. Әлеге йәджудж менән мәджудж кешеләре хаҡындағы имеш-мимештәрҙе лә онотмағайны әле ул. Бындағы кешеләрҙән дә ошо хаҡта орашып ҡараны. Ләкин Искәндәр диуары хаҡында ла, ҡырағай, башкиҫәр йәджудж менән мәджудж халыҡтары тура ында ла ишеткән-белгән кеше осраманы. Шулай ҙа бер саҡ, Әхмәт Фаҙлан улын тетрәтеп, Бағдадтан уҡ йөрөткән сер-хыялы тормошҡа ашыуына ишаралаған, ым ындырғыс ваҡиға булып алғайны. Бағдадта саҡта уҡ Төрк Тәкин уға Болғар илендә ҙур кәүҙәле алпамыша йәшәүе хаҡында хәбәр ала биреп ҡуйғайны. Болғарҙа и ә, иҫенә төшөп, Әхмәт хәҙрәттәре ошо хаҡта Алмыш илтабарҙың үҙенән үк ораны.

— Эйе, бар ул, йәшәне ул беҙҙә... — тине Алмыш батша, Әхмәт хәҙрәттәрен утҡа алып. — Ҡайҙандыр ситтән килгәйне, ирәк осрай торған ғәжәп зат...

— Ҡайҙан килде икән уң ул? Бығаса ундайҙар осрамай инеме ни? — тип теҙҙе ҡапыл тулҡынланып киткән Фаҙлан улы.— Ә "Искәндәр диуары" тигәнде ишеткәнегеҙ юҡмы, тәксир?

Батша түбәндәге тарихты бәйән итте.

Сауҙа эштәре менән йөҙгән Болғар кешеләре Иҙел ыуының ҡапыл бермә-бер күтәрелеп, ярҙарынан артыла башлауына иғтибар итә. Ул да булмай, ғәйәт ҙур кәүҙәле, кеше ынлы бер ғифриттең бирегә йөҙөп килгәне күренә. Ҡоттары осҡан сауҙагәрҙәр ярға сығып, Алмыш батшаға йүгерә. "Шулай ҙа шулай,— тиҙәр улар.— Әгәр был ғифрит бер үҙе генә булма а, беҙгә барса халҡыбыҙ менән ис кисекмәҫтән был тарафтарҙан ҡасып китергә тура киләсәк..."

Уларҙы тыңлағас, батша, ҡурҡыуын еңеп, башҡалар менән бергә әлеге сәйер затты күрмәгә йылға ярына ашыға. Ысынлап та, ғәжәп йәнлек булып сыға ул: башы ҙур ҡаҙан саҡлы, сеүәтәләй ҙур күҙҙәр, танауы, бармаҡтары ике-өс ҡарыш.

— Быны күреп, барыбыҙ ҙа ныҡ ҡурҡтыҡ,— тип өҫтәне Алмыш Илтабар. — Шулай ҙа, ҡурҡыуҙы еңеп, унын менән өйләшеп ҡарарға тырыштыҡ. Ләкин ул бер үҙ ҙә өндәшмәне. Ни эшләргә белмәй, мин уны ым менән үҙебеҙгә саҡырҙым. Ул шулай күпмелер ваҡыт Болғарҙа йәшәп алды. Ә мин Болғарҙан өс ай барыр юлда йәшәгән Вису иле кешеләренә хат яҙҙым: "Шулай ҙа былай, беҙгә еҙҙең яҡтан ғифрит кәүҙәле әҙәм килеп юлыҡты, еҙ унын кем, ҡайҙан икәнен белмәй егеҙме?"

Көн артынан көн үтеп тора. Көтә торғас, Вису кешеләренән минең ораууға яуап килде. Улар яҙыуынса, ыу менән Болғарға килеп сыҡҡан әлеге ғифрит, –ысынлап та, йәджудж менән мәджудж халыҡтарына ҡараған кеше. "Был халыҡтар беҙҙән тағы өс айлыҡ юл аралығында йәшәй,– тигәндәр Вису кешеләре.– Беҙҙе йәджудж, мәджуджарҙан диңгеҙ айырып тора. Улар үҙҙәре ҡырағай хайуан ымаҡ яланғас, ялан аяҡ йөрөй. Енси мөнәсәбәттә лә бер-бере е менән хайуандарса өйөгөшә..."

Илтабар быларҙы шаярыпмы, әллә етдиме өйләүенә иғтибар итмәй, Әхмәт ибн Фаҙланды йәджудж, мәджуджар хаҡындағы сер йомғағының ҡапыл ғына сиселә башлауы тулҡынландырғайны. Шуға ашығып төпсөндө:

– Әле ҡайҙа уң ул? Иҫәнме? өйләшергә өйрәнмәнеме?

Шилкә улы Алмыш уға, ниңәләр, көлөм өрәгәндәй ҡарап алды ла, тауышына етдилек өҫтәп:

– Тора-бара уның мәшәҡәттәре ишәйә башланы шул,– тине, нимәгәлер үкенгәндәй.– Бигерәк ҡот алырлыҡ зат ине: яҡынлаша башла а, бала-сағаның ҡобара ы осоп, шунда уҡ йөрәге ярылып үлә, йөклө ҡатындар баҫҡан ерҙәрендә ауырҙарынан бушана... Аң кимәле самалы инеме, шулай үҙенсә асыуын сығарҙымы – тик торғанда берәй кешене тотоп ала ла, усына ултыртып, ҡыҫа башлай. Теге бахырҙың аҡырыуына, илап ялбарыуына ла ҡарамай, уны ытмайынса, көсөргәнештән күҙҙәре атылып сыҡмайынса туҡтамай...

Алмыш Илтабар тыңлаусы ына хәйләле генә ҡарап алды ла:

– Бындай хәлдәр йыш ҡабатланып торғас, халыҡ бик зарлана башланы. "Дер ҡалтырап, үҙ йортонда аҙым айын ғазаплы үлем көтөп күпме йәшәргә була?! – тип асыулы вәкилдәр миңә лә күп килде.– ин бит беҙҙең батша, әйҙә, берәй сараын күр!"

Күп уйландыҡ, уҡ атып йә өңгө сөйөп кенә уны үлтереп булмаясаҡ. Ә йыртҡысты яралап ҡына ҡуй аң, асыулы ғифрит бар донъяндың аҫтын өҫкә килтерәсәк. Аптырағас, мин уны, хәйлә ен табып, берәй йыуан ағасҡа ныҡлы тимер сылбырҙар менән бәйләп ҡуйырға ҡуштым. Еңел булманы кешеләргә был фарманды үтәү – күпме уҫлаптай ирҙәрҙе уйнап ҡына әләк итте ул... Кешеләрҙең үҙенә ҡарата ниәттәренә төшөнгәс, йыш ҡына урманға ҡасып китер, шунда ял итер, көн үткәрер ине... Ана шунда яза ын алды ла инде: минең кешеләрем йыуан арҡандар менән башта йоҡлап ятҡан ғифриттың ҡул-аяҡтарын сырмап урай, шунан тимер сылбырҙар менән үҙен мең йәшәр ағасҡа ҡуша бәйләп ҡуя. Аҙаҡ уға эсергә лә, ашарға ла бирелмәне, шунда үлемен тапты...

Әхмәт хәҙрәттәре әйтелгәндәргә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй, шаңҡыбыраҡ ҡалғайны. Алмыш эске тойғо менән шуны иҙеп ҡалдымы, тағы көтөлмәгән тәҡдим я аны:

– Телә әң, әйҙә, күр әтәм шул ерҙе,– ти алды.– Уның өйәктәре аман ята әле шунда...

Фаҙлан улы Әхмәт быға, әлбиттә, ашҡынып риза булды. Илтабар менән икәүләп улар ҡуйы урманға килеп инде. Алмыш юлдашын кескәй генә аҡлан урта ындағы әйләнә е утыҙ ҡолас мө абәт ағас эргә енә алып килде. Ҡаушабыраҡ ҡалған Әхмәт хәҙрәттәренең ҡарашы ағас төбөндә таралып ятҡан ғәҙәттән тыш дәү, оҙонсараҡ баш өйәге, йыуан-йыуан ботаҡтарҙы хәтерләткән ҡабырға әм башҡа иләм еҙ ҙур өйәктәргә төртөлдө.

Күргән-ишеткәндәре Әхмәткә ныҡ тәьҫир итте: әллә уның Бағдадтан уҡ йөрөткән хыялдары дөрөҫкә сығамы? Күптәр баш ватҡан, ләкин хәл итә алмаған йәджудж менән мәджудж тигән сер йомғағына, бәлки ул, Фаҙлан улы Әхмәт, асыҡлыҡ индерер?

Әлбиттә, ул фараз иткәнсә, каруан юлында ҡалыр халыҡ булып сыҡманы йәджудж менән мәджуджар. Ләкин бар улар, бар, Искәндәр диуары ла бар. Ана бит, Алмыш батша үҙҙәренә ҡарағанда, Вису халыҡтары, йәджудж менән мәджуджлар диңгеҙ менән тауҙар ара ында йәшәйҙәр, тигән. Башҡа халыҡтарҙан уларҙы ниндәйҙер бейек диуар-ҡойма айырып тороуын да әйткәндәр, яҙа-йоҙа хәбәрҙәр Әхмәт ибн Фаҙландың йәджудж, мәджудж серҙәрен асыуға өмөтөн ҡалдыра ине әле. Тик Илтабарҙың артабанғы хикәйәте өмөттө үндерә яҙҙы.

— Белә еңме, нисек туҡлана кешелек донъя ынан таш ҡойма менән айырып ҡуйылған ошо ҡырағай халыҡтар? — тип гөрөлдәне Алмыш Илтабар, әлеге аҡса юғалғандан уң йөҙөндә барлыҡҡа килгән әсе йылмайыуын йәшермәйсә.— Бөйөк әм изгелекле Алла ы уларға әр көн диңгеҙҙән ғәжәп ҙур бер балыҡ сығарып бирә икән. Йәджудж, мәджуджлар бысаҡ тотоп килә лә ошо балыҡтан үҙенә әм ғаиләенә етерлек өлөш киҫеп ала. Тик нәфсене тыя белергә, балыҡ итен кәрәк саҡлы ғына киҫеү фарыз. Шулай ит әң, балыҡ үлмәй, кире диңгеҙгә сума, киҫелгән еренә яңы ит үҫеп ҡуна, әм ул икенсе көнөнә тағы килә. Ә нәфсеңде тыя белмәй ҡом оҙлоғондо күр әт әң, балыҡ әләк була, тимәк, әлеге ҡырағай халыҡтар ҙа юҡҡа сыға...

Йәджудж менән мәджуджларҙың ҡайҙалыр ер сигендә бул а ла йәшәүҙәрен, донъяла уларҙың ысынлап та барлығын ишетеп йәнләнә төшкән Фаҙлан улы Әхмәт батша үҙҙәренән уң бөтөнләй төшөнкөлөккә бирелде. Көләме, аҡса алып килмәгәнгә үс итеп мыҫҡыллаймы уны эйәренә саҡ ыйып ултырған был итләс кәүҙәле хаким, эргә ендәге ҡаҡса йәш ғәрәпте бер ҡатлы ахмаҡҡа анаймы?

Күп кенә саҡалиб ҡәүемдәренә батшалыҡ ҡылған, Рум, Византия, Иран, Урта Азия менән генә түгел, Вису кешеләре күр әткән диңгеҙ аръяғы Скандинав илдәре менән туҡтау ыҙ сауҙа алыш-бирештә йәшәгән Болғар хакимы үҙе өйләгәндәргә үҙе ышанамы? Йәджудж менән мәджуджлар йәшәгән ерҙәрҙе, был ерҙәрҙе айырып торған таш ҡойма-диуар бармы-юҡмы икәнен ул нисек белмәҫкә тейеш? Әлеге диңгеҙҙән ҡайта-китә йөрөгән, күпме аша аң да бөтмәҫ балыҡ хаҡында эйәрендә ҡымшанмай ҙа, ысын ымаҡ өйләп ултырыуын нисек аңламаҡ кәрәк? Быға ғәрәптәр әллә үҙҙәре ғәйепleme? Ят ерҙә урындағы ғәҙәти күренештәр ҙә ҡай саҡ серле күренә шул. Ошо арҡала Болғарға килеүҙәренең тәүге көндәрендә үк уңай ыҙ хәлгә ҡалғайны улар...

... Аҡшам намаҙы етер алдынан ғына офоҡ ҡапыл ҡара-ҡыҙыл төҫкә ингәйне. Ул саҡта үлән баштарын яр ытып, аяу ыҙ үткенсе ел иҫте. Күҙгә күренеп ер йөҙөн ҡараңғылыҡ баҫа башланы. Ул да булмай, баш өҫтөндә генә нимәлер сатыр-сотор килеп, ҡолаҡтарҙы ярырҙай булып шартланы. Ирек еҙҙән Фаҙлан улы Әхмәт, бөршәйә биреп, күккә күтәрелеп ҡараны. Бая ғына сат зәңгәргә төрөнгән асыҡ күктә ҡайҙандыр килеп сыҡҡан ҙур утрау дәүмәле ҡып-ҡыҙыл болот күрҙе. Көслө гөрөлдәү менән бергә ялт-йолт иткән ут ҡамсылары шунан килә икән. Ентекләберәк ҡарай торғас, Фаҙлан улы ошо утлы утрауҙа өңгө, уҡ- аҙаҡ, ҡылыс менән ҡоралланып, хәрби сафтарға теҙелгән ыбайлылар ынын төҫмөрләгәндәй булды. Ҡайҙа төбәлгән уң улар? Ә ә, ана, уларға ҡаршы тағы шундай уҡ ҡыҙғылт-ҡара утрау уҡталған да ба а! Унда ла ҡоралды кешеләр, ыбайлылар мәж килә. Ҡабат ҡаты ел иҫте, ике утрау бергә ҡушылыуға, ауа телеп тағы нимәлер ҡурҡыныс сытырҙап, тирә-яҡ яҡтыға солғанды, баяғынан да көслөрәк шартлау ишетелде. Ҡыҙыл-ҡараға әүерелгән күк йөҙөндә оҙон ҡылыстар ялтланы, гөр өлдәп төркөм-төркөм атлылар, йәйәүле ғәскәрҙәр уҡмашып айҡаша башланы, уғыш ҡыҙҙы. Шулай күпмелер дауам иткәс, гөр өлдәүҙәр йыраҡлашты, күк йөҙө тағы сат аяҙ, асыҡ зәңгәргә әүерелде...

Ғүмерҙәрендә күрмәгән был ғәрәсәттән ҡурҡышып, ғәрәптәр доға уҡырға ке-

реште. Ә болғарҙар, бер ни булмағандай, уларҙың ҡылыҡтарынан хахылдап торҙо. Илселекте хөрмәтләп ҡаршы алыуҙарынан күңеле булып, бары ына ышанып, Фаҙлан улы был хаҡта Алмыш Илтабарҙан да орағайны. Уны ы ла: "Дөрөҫ күргән - ең, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа быны кешеләргә тоғро әм тоғро булмаған ыбайлы ендәр уғышы рәүешендә аңлата ине",– тип йөпләп кенә ҡуйғайны, ә тәбиғәт күренеше хаҡында – ләм-мим. Унда ла ғәрәптәрҙең бер ҡатлылығынан көләп кенә йөрөгәйнеме икән ни Алмыш батша?

Уйнай ул хәҙер төлкө холоҡло, ҡалын кәүҙәле Алмыш, асыулы уйнай. Хәлиф мәктүбендә әйтелгән дүрт мең динар аҡсаны күрәләтә юғалттылар, бирергә теләмәйҙәр, алдашалар, тип уйлай. Шуға илселекте хәҙер бер тингә лә ҡуймай, өҫтән ҡарай, етдилек талап ителгән мәлдә лә, ҡуҡырайып, бары ын бесәй-сысҡан уйынына әүерелдерә, ышанып барыусы ғәрәптәргә лә юҡ-бар уйҙырма өйләп аптырата. Хөтбә, икам кеүек ислам йолаларын да, күрә ең, ғәрәптәргә үс итеп, иҫкәртеүҙәргә лә иғтибар итмәйсә, юрамал боҙоп атҡара башланылар. Хәлифәт ебәргән аҡсаларҙы үҙҙәренә йомған уғрылар тарафынан емәйтелгән кеше ҡиәфәтендә, илселәргә нәфрәт менән янап ҡарай, ниндәйҙер этлек тә әҙерләй кеүек.

Артабан Болғарҙа ҡалыу хәүефкә әүерелеп барғандай тойолдо. Ышаныс бөттө уларға, килеүҙәренең тәүге көндәрендәге ымаҡ иғтибарҙың әҫәре лә ҡалманы. Илтабар ҡаршы ына саҡырмау ғына түгел, бары ы ла улар йәшәгән тирмәләрҙе әллә ҡайҙан урап үтергә әҙер. Ғәрәп илселәре үҙҙәрен Болғарҙа кәрәкмәгән, артыҡ кеше итеп тоя башланы. Фаҙлан улы Әхмәт тә, үҙҙәрен үҙ енмәгән ят илдә ни ҡылырға ла белмәйсә, ирек еҙҙән, үҙ тирмә ендә тәүлектәр буйы бикләнеп ятты. Ауыр ине уға. Иң аяныслы ы – ҙур өмөттәренең аҡланмауында, Шәреҡте йөҙйыллыҡтар дауамында аҡылынан яҙҙырған йәджудж менән мәджудж тигән сая халыҡтарҙың ул үткән юлдағы мәжүсиҙәр ара ында табылмауында. Бағдадтан сыҡҡаны бирле боронғо яҙмалар буйынса юллап килеп, инде таптым тигәндә генә, хыялдары ымаҡ уҡ, был ҡәүемдәр тороп ер ҙә тағы ла арыраҡ китә барҙы. Болғарға килгәс, серҙең осо йәнә күренеп ҡалғандай булғайны, тик Алмыш батша үҙҙәре был ҡәүемдәрҙе тағы әллә ҡайҙағы Вису атамалы илдән дә ары, диңгеҙ аръяғына, ташланы. Үҙен ныҡ емәйгән итеп тоя Фаҙлан улы, ниндәй ҡиәфәттә ҡайтыр инде ул хәҙер изге Бағдадҡа? Аптырағас, ул көндәлектәрен Ассирия, Зинджа илдәре, Мысыр хаҡындағы электән хәтерендә ҡалған төрлө юҡ-бар уйҙырмалар менән тултырҙы. Болғарға сәйәхәт барышында күргән-ишеткәндәрен, уларҙың күбе енә хәҙер ышанып етмә ә лә, юлъяҙмаларына түкмәй-сәсмәй теркәй торҙо...

## Тарих юлдары ла борма-борма...

Бағдадтан Болғарға килгән Ғәрәп илселеге сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәттең яҙмалары ошо ваҡиғалар тәңгәлендә өҙөлә. Сәйәхәттең өҙөмтәләре, илселек алдына ҡуйылған бурыстарҙың ҡай ы ы хаҡ, ҡай ы ы нахаҡ икәне, уларҙың ни кимәлдә үтәлеүе әм тормошҡа ашыуы ошоғаса ентекле тикшерелмәгән. Шуға ла, аҙаҡ килеп, ибн Фаҙландың Бағдадтан Болғарғаса хыялында йөрөткән, сәйәхәт буйы юллап килгән тағы бер мәсьәләгә туҡталмау мөмкин түгел. Булғанмы ул, әлеге шәреҡ ҡары үҙҙәрендә генә түгел, хатта тарихи яҙмаларҙа, әҙәби әҫәрҙәрҙә лә Ер шарының “етенсе климаты”нда йәшәгән, эҙләп ҡарап та күптәр таба алмаған йәджудж менән мәджудж тигән серле халыҡтар? Башта уҡ шуны нығытып ҡуяйыҡ: ҡай ы ғына сығанаҡты алып ҡарама, ҡырағай йәджудж, мәджудж ҡәүемдәре хаҡындағы риүәйәт әр саҡ тик Александр Македонский әм уның походтары менән бәйле. Шәреҡ әм мәғриб илдәрен яулағандан уң бөйөк сардар ғәскәрҙәрен донъяның етенсе климаты тип аталған төньяҡ тарафтарына бора әм, ҡыпсаҡ далаларын үткәс, бик төпкөлдә Кирван иле кешеләрен яфалаған йәджудж, мәджудж

тигән ҡот осҡос, еңелмәҫ, тимергә төрөнгән ыбайлы яугирҙарҙы осрата. Был ваҡиғалар Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙып ҡалдырған “Аҡташ хан” риүәйәтендәге осорға ла тап килә. Күпселек сығанаҡтар буйынса, Искәндәр ғәскәре йәджудж, мәджудждар менән яу яланында ла осраша, әммә еңеүгә өлгәшә алмай. Аптырағас, Искәндәр үҙе яулап алған барса илдәрҙән оҫталар — тимер ҡойоусылар саҡыртып, йәджудж, мәджудждарҙы үҙҙәре инеп киткән ҡая тарлауыҡтарында, тау тишектәренә тимер диуар ҡойоп, бикләп китә. Тимәк, был ҡырағай халыҡтар хаҡындағы мәғлүмәт Искәндәрҙең төньяҡ илдәренә яуынан уң ғына барлыҡҡа килгән, тип фараз итергә була. М.Өмөтбаевтың “Аҡташ хан” риүәйәтендә йәджудж, мәджудждар тура ында бер үҙ ҙә юҡ. Әммә уның икенсе бер “Башҡорттар әм торғауыт ҡалмыҡтары хаҡында бер нисә үҙ” тигән мәҡәлә ендә йәджудж, мәждудждар Искәндәргә саҡлы уҡ етмешләгән башҡорт ҡала-нығытмаларын емереүсе ҡәүемдәр булараҡ телгә алына. “Хас башҡорт — ул төркиҙәрҙең бер ҡәүемелер, 6-сы иклимдең 7-се ҡыҫымындалыр, йәғни бүлемендәлер, — тип яҙа ул. — Нә ри Иҙел диарында боронғо замандарҙа 70 хисын әм хасыйнәләре, йәғни ҡала вә ҡәлғәләре бар. Улар төҙөк әм күсмә түгел, ә ултыраҡ, даими йәшәү өсөн төҙөлгән”. Артабан М.Өмөтбаев бына нимә ти: “Искәндәр нығытма ы-диуары төҙөлөүҙән элек йәджудж әм мәджудж тигән ҡәүемдәр ул тарафты (ҡала-нығытмаларҙы) емерҙеләр, юҡ иттеләр. Унан уң басжарт исемлеге халыҡ булды, тиҙәр”.

***

М. Өмөтбаев мәҡәлә ендә йәджудж, мәджудждар хаҡындағы фекерҙең ниндәй сығанаҡҡа таяныуын күр әтмәгән, әммә башҡа хеҙмәттәрендә, мәҫәлән, шул уҡ “Аҡташ хан”да ваҡиғалар барған осорҙоң тарихи ерлеге, Аҡташ хандың Искәндәр менән алышыуы, уның пайтәхете хаҡында ла мәғлүмәттәр юҡ түгел. “Ағиҙел” ярында Аҡташ тигән бейек тау өҫтөндә әм төрлө урында ҡала әҫәрҙәре бар, — тип яҙа ул. — Тәуарихта әйтә: “Иңе әм оҙонлоғо етешәр фәрсәх тиеү. ушы, аҡылы бар әҙәмгә был ер шөйлә дәүләт ғибрәттер ки. Нисә мең йыл был урындан тороп, мәшриҡ тарафына — Ҡытайға, индостанға, Кавказға тиклем хөкөм ҡылған...” М. Өмөтбаев был мәғлүмәттәрҙең сығанаҡтарын да күр әткән: “Быларҙы тәфтиш ҡылырға теләгән әҙәм “Ҡа арман” вә “Искәндәрнамә”нең бөтә тәуарихтарын ҡара ын. Беҙ күргән тәуарих Зөлҡәрнәйендең ун бишенсе жилдендә, йәғни китабында”*.

Күренеүенсә, тарихи сығанаҡтар буйынса эҙләнеүҙәргә сәбәптәр күп. Бер үк ваҡытта был раҫлауҙар, ис шик еҙ, башҡорттарҙың әле Искәндәргә тиклем дә ныҡ үҫешкән мәҙәниәте, бик күп ҡалалары булыуын, уларҙың йәджудж, мәджудждар әм Искәндәр-Александр хаҡында хәбәрҙар икәнен өйләй. Әлбиттә, М.Өмөтбаев үҙҙәре уңғы быуаттарға ҡарай. Әммә йәджудж, мәджудждар риүәйәтенең тамырҙары ифрат тәрәндә. Беҙҙең эраның VII быуатында барлыҡҡа килгән изге Ҡөрьәнгә лә улар Зөлҡәрнәйен-Искәндәр исеменә бәйле ингән. Айырма шунда: ҡай ы бер сығанаҡтарҙа йәджудж, мәджудж кешеләре — дейеү пәрейеләй ҙур, көслө, йөнтәҫ йән эйә е, тотош ғәскәргә ҡаршы уғыша, ә ҡай ыларында улар — ғәҙәти яугир. Тик тимергә төрөнгән, йыртҡыс хайуандарға оҡшаш битлектәр артына йәшеренгән, ҡараңғыла өжүм итеүсе утлы ағым ...

Ибн Фаҙландың үҙ яҙмаларында и ә йәджудж, мәджудждар тура ында шундай мәғлүмәт бирелә. “Ҡасандыр Төрк Тәкин минә Болғар илендә ғәҙәттән тыш ҙур кәүҙәле кеше йәшәүе хаҡында өйләгәйне, — ти ул. — Был илгә килгәс, мин батшанан (Алмыштан) ошо кеше тура ында ораным. Ул шулай яуапланы: “Эйе, ул беҙҙә булды, әммә үлеп ҡалды. Ҡайҙандыр килеп сыҡҡайны. Хәйер, ғәҙәти кеше

*Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. Йәдкәр. Өфө, 1984. 247-се б.*

лә түгел ине ул.”

Шунан Алмыш был заттың үҙе ша ит булған тарихын әм уның артабанғы яҙмышын да өйләп бирә. Фаҙлан улын урманға алып барып, башҡа ыймаҫ ҙурлыҡтағы өлдә ен дә күр әтә. Алмыш батша үҙҙәренә ҡарағанда, ул был ғифрит тура - ында орашып үҙҙәренән өс айлыҡ юлда ятҡан Вису кешеләренә хат та яҙған. Ә улары: “Эйе, еҙ әйткән зат – йәджудж, мәджудждар кеше е, улар менән беҙҙе диңгеҙ айырып тора”, – тип яуаплаған.

Ибн Фаҙлан осоронан уң да, хатта бөгөнгө көнгә саҡлы йәджүдж, мәджудж (йәки Гога әм Мога) тигән серле заттар онотолмаған, Шәреҡ әм мәғриб тарихына, әр төрлө дини әм ғилми хеҙмәттәргә, бигерәк тә әҙәби әҫәрҙәргә инә килгән. Был темаға 1999 йылда Голливуд та мөрәжәғәт иткән әм ибн Фаҙлан исеменә бәйләп “Ун өсөнсө яугир” тигән видеофильм төшөргән. Әлбиттә, унда ибн Фаҙлан шәхесенә әм уның миссия ына ҡағылышлы ниндәйҙер тарихи дөрөҫлөк табырмын тимә. Сәғәт ярым сама ы барған боевикта ибн Фаҙлан ун өсөнсө яугир сифатында (ҡалған ун ике яугир – нормандар) ниңәлер “төнгө әфәт” тип аталған әлеге серле, мәйет менән туҡланыусы ҡот осҡос йәджудж, мәджудждар менән уғышып йөрөй.

Әммә ошондай ижади сүп-сар ара ында тарихи ерлекле, объектив ҡанундарға нигеҙләнгәндәре лә юҡ түгел. Улары башлыса боронғораҡ осорҙарға ҡарай әм Искәндәр-Александр Македонский исеменә килеп тоташа. Фарсының XII быуатта йәшәгән бөйөк фекер эйә е, шағир Низами Ғәнджәүи үҙенең хәмсә ендәге* уңғы әҫәрен юнандың бөйөк сардарына арнап туранан-тура “Искәндәрнамә” – “Искәндәр китабы” тип тә атай. Искәндәр-Александрҙың донъяны яулап алыу тарихын үрәтләгәндә Низами, әлбиттә, әлеге йәджудж, мәджудждарҙы ла урап үтмәгән.

***

... Ҡыпсаҡ дала ында Искәндәрҙе бик күп дошман ҡәбиләләре ҡаршылай: төркиҙәр, хазарҙар, саҡлаптар*, аландар, буртастар, фин-уғыр ҡәбиләләре ... Улар алыш майҙанына берәм-берәм үҙҙәренең ҡеүәтле батырҙарын сығарып ҡарай, ләкин румлыларҙы еңә алмай. Ни айәт, алыш майҙанына өҫтөнә иҫке арыҡ туны ғына кейгән, бер аяғынан йыуан тимер сылбыр менән бәйләнгән, кеше ҡиәфәтле, әммә йөнтәҫ, ҡот осҡос йән эйә е ажғырып килеп сыға. Ҡоралы юҡ, ҡулына тик ырғаҡлы тимер таяҡ ҡына тотоп алған. Шуның менән дә ул бер елтәнеүҙә йөҙләгән ғәййәр ыбайлыларҙың башына етә. Үҙенә дәррәү ташланған яугирҙарҙы бармаҡ араларына ғына ҡыҫып ыта... Румлылар уға ҡаршы уғыш өнәренә өйрәтелгән филде лә сығарып ҡарайҙар. Ә быны ы асыуынан ырылдай, үҙенә ябырылып килгән филдең томшоғон урып ала... Әммә бары ына ла улай уҡ мәрхәмәт еҙ түгел икән был ғифрит ҡиәфәтле йән эйә е. Үҙенә ҡаршы сая уғышҡан берәүҙең битлеге аҫтында гүзәл ҡатын-ҡыҙ йөҙөн күргәс, ғифрит уны әләк итмәй, аҙаҡ Искәндәрҙең үҙенә ҡайтарып бирә. Шул саҡта Искәндәр уның сығышын, кем булыуын да ораша. Баҡти әң, ғифрит йәджудждар иленән, йоҡлаған саҡта сылбырланып, әсиргә алынған. Хәҙер уны ана шулай, сылбырҙағы көйө уғыш өсөн файҙаланалар...

Шуны ын да өҫтәйек: Низамиҙың “Искәндәрнамә” ендә үрәтләнгән ошо йөнтәҫ бә леүәнде беҙҙең замандарҙа американдар ярай ы уҡ теүәл “Кинг-Конг” исеме менән үҙҙәренең кинофильмдарында ынландырғандар. Унда хатта был тауҙай йөнтәҫ ғифрит бик ҙур аҡлыҡ әм наҙлылыҡ менән усында йөрөткән әлеге

---

* *Биш шиғри әҫәрҙән торған жанр форма ы.*

**Славяндар.*

гүзәл зат образы ла бар. Айырма тик шунда: Низами әҫәрендә был йөнтәҫ алпамыш ҡан ҡойошҡа ирек еҙләп мәжбүр ител ә, аҙаҡ ул, үҙенә ҡаршы уғышыуына ҡарамаҫтан, ҡа арманлыҡтары өсөн бүләкләнеп, Искәндәр тарафынан ирекке ебәрелә. Ә хәҙерге "Кинг-Конг" заманы кешеләре (тик үҙҙәренә оҡшамаған өсөн генә лә) ғәмәлдә зарар ыҙ, мәш үр көс йөрөткән, үҙ илен тоғро аҡлаған бала холоҡло был йән эйә ен бөгөнгө аяу ыҙ хәрби ҡорал ҡеүәте ярҙамында юҡ итәләр. Әҙәмиәт* ҡанундары, хатта урта быуаттар аяу ыҙлығы менән сағыштырғанда ла, рәхим еҙләнә генә бара, күрә ең ... Әйткәндәй, Низами әҫәрендә лә Искәндәр йәджудж, мәджудждарҙы ер өҫтөнән юҡ итеү маҡсатын ҡуймай. Тик был уҫал, уғыш өнәрен камил үҙләштергән, рәхим еҙ ҡәүемдәр башҡаларҙы яфалама ын өсөн, уларҙы тау тарлауығына тимер ҡойма ҡойоп бикләп кенә китә. уңыраҡ, XV быуатта, Низамиҙың үҙаллы биш әҫәрҙән торған хәмсә жанрын төрки телендә Алишер Науаи ҙа дауам иткән. Уны ы хәмсә ендәге бишенсе әҫәрҙе тағы ла анығыраҡ – "Искәндәр диуары" тип атаған әм автор төп фекерен дә нәҡ ошо тимер ҡойма ҡоролоуға туплаған. Ләкин уғаса әҫәрҙә Искәндәрҙең, Чинды алғас, мәғрибкә йүнәлеүе үрәтләнә. Бөйөк сардар илдәр, ҡалалар, даръялар аша үтә. Аҙаҡ ҡараш етмәҫ буш далалар буйлап барып, бейек тауҙарға яҡынлаша. Унда тауҙарға үткәрмәйсә, әр тере йәнде ябырылып ашап бөтөрөр арыҫландай эре ҡырмыҫҡалар мыжғып йөрөүен күрә. Улары, үҙ сиратында, был илдәге алтын-көмөш тауҙарын аҡлаусы "кешегә оҡшаш, әммә әр бере е ҡая дәүмәле" йөнтәҫ, ҡот осҡос йән эйәләренә хеҙмәт итәләр, имеш. Искәндәр улар менән осрашмай, әммә Румға кире ҡайтыр алдынан ғына әлеге йәджудж, мәджудждар хаҡында ишетә. Күрә ең, был ҡәүемдәр тағы ла арыраҡ йәшәгән, сөнки улар илендә "Ҡыштары сатлама ыуыҡ, шыҡ ыҙ". Науаи әҫәрендә лә йәджудж, мәджудждар серле әм ҡот осҡос ҡиәфәтле. Был хаҡта Искәндәр урындағы Кирван халҡынан ишетә. Ләкин, бәкти әң, йәджудж, мәджудж тигәндәрен ғәмәлдә йыртҡыс йөҙлө битлек әм тимер кейем генә ҡурҡыныс я ай икән. Ә үҙҙәре – бейек нығытмаларҙы еңел алыусы ғәҙәти кешеләр, етеҙ, оҫта ыбайлылар, кире сигенмәҫ яугирҙар. Ҡараңғы төшкәс, тау тарлауыҡтарынан ҡулдарына утлы таяҡ тотоп арҡып килеп сыҡҡан был ағым барса халыҡты ҡурҡыуға ала, ҡотон ала, ихтыярҙарын юҡ итә... Урындағы халыҡтың ярҙам ораүына яуап итеп, Искәндәр йәджудж, мәджудждар менән уғышып та ҡарай. Ләкин еңә алмай. Сөнки былары – бик етеҙ, оҫта, хәйләкәр яугирҙар, әсир төшмәйҙәр, үлектәрен ҡалдырмайҙар, тимергә төрөнөп, утлы ағым булып бөтөнләй көтмәгәндә ҡайҙандыр тау ҡыҫымдарынан атылып килеп сығалар ҙа, үҙ юлдарында осраған барса нәмәне ҡырып алып, яндырып, бай улъя-ғәнимәт алып, йәнә үҙҙәренең тау ярыҡтарына инәләр ҙә китәләр... Уларҙы тотоу ҙа, еңеү ҙә мөмкин түгеллеген аңлаған Искәндәр сардар ошонан уң ғына тимер иретеп, ҡорос ҡойма ҡойоп йәджудж, мәджудждарҙы тау эсенә бикләп китергә мәжбүр була. Ҡай ы бер ваҡ- төйәк айырымлыҡтарын иҫәпкә алмағанда, иҫкә алынған барса ҡары үҙ әм тарихи сығанаҡтар өсөн ҡорос ҡойма ҡойоу – уртаҡ мәл. Тағы бер мө им уртаҡ мәл – ул Кирван иле. Нәҡ ошо ил кешеләре зарлана Александр-Искәндәргә йәджудж, мәджудждар тура ында. Ҡайҙа урынлашҡан был ил, ниндәй халыҡтар йәшәй унда? Ибн Фаҙландың Болғарға сәфәренән уң ике быуат сама ы ваҡыт үткәс тә донъя тарихында иҫкә алына әлеге халыҡтар. Сүбәдәйҙе ун бер төньяҡ илдәрен – ҡанлы, ҡыпсаҡ, башҡорт, орос, асу, сосу, мажар, кәшимир, чиргис, булар, кэләш (кәрт) – баҫып алырға ебәргәндә, Сыңғыҙ хан Ижил (Волга), Яйыҡ йылғалары артындағы Мекетмен, Боларман, Хермен, Кива-Кейбе ҡалаларын да атай. Алишер Науаиҙың "Искәндәр диуары" әҫәрендә лә йәджудж,

*Гуманизм.

мәджудждар йылына ике тапҡыр Кирван иле аша киләләр. Ғалимдар “Кирван”ды “Киев” менән бәйләйҙәр. Ләкин “Киев” тың “Кирван” булыуы шикле, сөнки уларҙа күккә олғашҡан бейек ҡаялар ҙа, тау мәғдәне сәнәғәте лә булмаған. Рәсәй тарихын ентекле өйрәнеүсе атаҡлы ғалим С.М.Соловьев билдәләүенсә, Византия сәйәхәтселәре әле 551 йылда ла славяндар (рустар) тура ында: “Улар ер өйҙәрҙә йәшәйҙәр, ҡорал йөрөтмәйҙәр. Сөнки улар илендә тимер мәғдәнен белмәйҙәр”, – тип яҙып ҡалдырғандар. Тик IX быуатта ғына улар варягтарға килгән дә: “Ерҙәребеҙ киң әм уңдырышлы, әммә тәртип юҡ, – тип зарланғандар. – Беҙгә килегеҙ, кенәзлек итегеҙ!”

Ана шунан уң Днепр ярында Киев ҡала ы ҡалҡып сыға. Тик уның да тимере булмай.

Ғалимдар раҫлауынса, Киев кенәзе Игорь хазарҙарға я аҡты, үҙ дружина ын ҡорал ыҙ ҡалдырыу бәрәбәренә, ҡылыс әм башҡа металл ҡорал менән түләгән. Ҡоралды древлян кешеләренән йыйып ҡара а ла, ниәте барып сыҡмаған, үҙе үлтерелгән. 947 йылда княгиня Ольга, дружина менән мәжүси ырыуҙаштарына килеп, етешмәгән ҡоралды я аҡ рәүешендә ҡәберлектәрҙән йыйҙыртҡан. Был йола – мәжүси халыҡтарға хас, ҡоралдары, зиннәтле байлыҡтары менән бергә яугирҙар ерләнгән ҡәберлектәрҙе, убаларҙы аҡтарыу (талау), бәлки, ошо мәлдән башланғандыр. Ә унан ик еҙ-сик еҙ ҡыпсаҡ далаларына ла күскән. Рус тарихы шунан башлана, “Русь “тигәндә ул саҡта варягтар күҙ уңында тотолған...

Кирван иле,– күп сығанаҡтар раҫлауынса, йәджудж менән мәджудждар йәшәгән бейек тау, ҡаялар итәгендә. Был яҡтан Низами Ғәнджәүиҙең “Искәндәр китабы”ндағы ваҡиғалар ә әмиәтле. Юнан сардары төньяҡ илдәренә көнсығыштан килә. Чиндан уң инд, Мысыр, Урта Азияны үтә. Оҙаҡ ҡына буш дала (Ҡыпсаҡ дала ы?) буйлап бара. Унан ҡалын урмандар, йәшелгә күмелгән туғайҙар пәйҙә була. Бара торғас, ер өҫтөндә алтын, көмөш, алмаз бөртөктәре ибелеп ятҡан бейек тауҙарға килеп төртөлә. Ләкин кешеләре лә, торлаҡтар ҙа юҡ. Шулай аптырабыраҡ торғанда, күтәрелеп ҡара алар, бик бейек ҡая баштарында, упҡын өҫтөндә тиерлек, зәңгәр күк ҡабағы менән ҡушылып, күк тирмәләр теҙелеп киткән икән дә ба а! Аҙаҡ асыҡланыуынса, күк тирмәләр унда әлеге йәджудж, мәджудждарҙан аҡланыу өсөн шулай бейеккә үрмәләгәндәр, имеш.

Әммә бында беҙҙе ҡыҙыҡ ындырғаны – күк тирмәләр! Тимәк, төркиҙәр донъяы!

Төркиҙәрҙең күк тирмәләрен кемдәр генә данлап йырламаған! Ул боронғо төркиҙәрҙең “Күрәҙәлек китабы”на ла ингән, башҡа рухи ҡомартҡыларҙа ла тыуған ил, тыуған йорт рәүешендә данланған. Ҡытайҙың әсе теле арҡа ында үҙ иленән “варвар” төркиҙәр биләмәләренә өрөлгән, 772–846 йылдарҙа йәшәгән бөйөк шағиры Бо Цзаюйи ҙа “Күк көймә” шиғырында “Йәшел хәтфә ерҙә, аяҙ зәңгәр күк ҡосағында ултырған” төркиҙәрҙең күк тирмәләренә мәҙхиә йырлаған, уны батша арайҙарына ла алыштырмаясағын әйткән. Тимәк, Искәндәр әм уның яугирҙары ла төньяҡ тарафындағы ошо бейек ҡаяларҙа күк тирмәле төркиҙәргә килеп юлыҡҡан. Был тәңгәлдә башҡорттарҙың Тымыҡ океандан алып Көнсығыш Европаға саҡлы араны биләгән беренсе мәш үр төрки ҡағанатының көнбайыш ҡанатын биләп тороуҙарын да иҫтән сығарырға ярамайҙыр. Бына ошо күк тирмә хужалары Искәндәр-Александрға ваҡыт-ваҡыт үҙҙәренә яу менән килеүсе әлеге серле, уҫал йәджудж әм мәджудж халыҡтары хаҡында өйләй ҙә инде. Бынан шул асыҡ: әгәр күк тирмә хужалары төрки бул а, ҡайҙандыр килгән серле халыҡ ис тә төрки була алмай. Сөнки ҡай ы халыҡ үҙ ҡәрҙәштәрен йә ырыуҙаштарын танымаҫ икән? Йәджудж, мәджудждар, әлбиттә, славян – “Орос” та түгелдер. Сөнки ҡай ы бер яҙмаларҙа, шулай уҡ Болғар батша ы Алмыш хикәйәтендә лә,

йәджудж менән мәджуджларҙың Вису халҡы менән йәнәш йәшәүҙәре, Вису иленән уларҙы диңгеҙ айырып тороу дәлиле лә әйтелә. Баҡти әң, княгиня Ольга үҙе лә сығышы менән, тикшеренеүселәр раҫлағанса, хәҙерге Псков тирә ендәге мәжүси Вису халыҡтарынан икән. Тимәк, Вису иленән өс айлыҡ юлда, диңгеҙҙең икенсе яғында йәшәгән йәджудж, мәджуджлар кем булып сыға уң? Ирек еҙҙән, IX быуатта урындағы халыҡ орауы буйынса Киев-град төҙөп биреүсе, уғаса ла Скандинав илдәренән Византияғаса ҡоро ер әм ыу юлдары буйлап өҙлөк өҙ сауҙа әм яу менән йөрөп торған варягтар иҫкә төшә.

Әйткәндәй, Голливуд төшөргән “Ун өсөнсө яугир” атамалы видеофильмда “төнгө афәт”кә, йәғни йәджудж, мәджуджларға ҡаршы ибн Фаҙлан менән бергә нәҡ бына ошо викингтар – нормандар уғыша. Скандинавтарҙың Урал тарафы, Биарм иле менән дә мөнәсәбәттәре тығыҙ, шул иҫәптән, тау сәнәғәте тауарҙары менән сауҙа эштәре лә йылдам барған. Улар, ис шик еҙ, юғары мәҙәниәтле, берҙәм әм физик яҡтан да бик ҡеүәтле булған, тауҙар аша ла үткән, даръяларын да кискән. Диңгеҙ аръяғынан килеүсе тимергә төрөнгән, аҙ үҙле, көслө, баштанаяҡ ҡоралланған был кешеләр мәжүси томаналығында йәшәүсе ҡай ы бер халыҡтарға шулай серле, еңелеү белмәҫ мифик бә леүән булып күренмәне микән? Ләкин тағы бына нимә уйландыра. Алишер Науаи әҫәрендә үрәтләнгәнсә, йәджудж, мәджуджлар инеп-сығып йөрөгән ҡыҫынҡы тау тарлауығын таш, ҡурғаш, баҡыр, ҡорос иретмәләре менән ҡушып, мәңгегә ҡаплап ҡуйыр өсөн бик маир оҫталар ҡулы аҫтында ундарса мең ташсылар тәүлектәр буйы ял ыҙ эшләйҙәр. Шунда уҡ меңдәрсә ҡорос иретеү мейестәре ҡайнай, алдан әҙерләнгән тейешле урындарға ҡорос йылға булып аға, уға өҫтән ҡая таштар ишелеп төшөрөлә. Ярты йыл бара был эш. Унық өҙөмтә е булараҡ, киңлеге әм бейеклеге 250 аҙым, оҙонлоғо 5 саҡрым булған мөғжизәүи тимер диуар ҡалҡып сыға. Шул айҡанлы тағы орау тыуа: мөмкинме шундай эштәрҙе башҡарыу ҡай ылыр, хатта тимер мәғдәнен белмәгән, ҡорал йөрөтмәгән берәй илдә? Дөйәләргә тейәп кенә ташып буламы ундай ауырлыҡтарҙы? Тимәк, теләй еңме-юҡмы, ваҡиғалар йәнә алтын, көмөш, алмас әм башҡа хазиналар тулы, бигерәк тә бөтмәҫ-төкәнмәҫ тимере, борон-борондан килгән тау сәнәғәте булған бөйөк тауҙарға, әлеге күк тирмә хужаларына ҡайтып ҡала. Искәндәр-Александр ошо мө абәт ҡаялар ара ында тик алтындан ғына әм тик көмөштән генә торған тауҙар булыуын ишетә. Ләкин уларға үтә, эйә була алмай, “Аҡташ хан”да әйтелгәнсә, күп юғалтыуҙар кисереп, кире Румға боролорға мәжбүр була. Шуға ла Искәндәр ғәрлегенән, ә, бәлки, үҙен аҡлар өсөн, улар шулай мөғжизәүи йән эйә е, ғәҙәттән тыш көс, йыртҡыслыҡ, бә леүәнлек ыҙаттарына эйә, тип хәбәр тараҡандыр. Хәйер, “йәджудж”, “мәджудж” йәки “гог”, “магог” үҙҙәре лә ни бары “уҫал яугир”, “ уғыш суҡмары” тигәнде генә аңлата түгелме уң әле?

Нисек кенә булма ын, йәджудж, мәджуджларға мөнәсәбәтле донъяла таралған риүәйәттәр, әлбиттә,– билдәле кимәлдә тарихи ерлеге булған халыҡ ижады. Шуға ла ибн Фаҙланға тиклем үк, IX йөҙйыллыҡта хәлифәттең ул саҡтағы хәлифе әл Вәсих тарафынан төньяҡ илдәренә Искәндәр диуарын эҙләргә ебәрелгән сардар Саллам төркөмө лә, уны яңылыш Ҡытай стена ына табан бороп ебәрмә әләр ҙә, эҙләгәнен таба алмаҫ ине. Тағы быуатҡа яҡын ваҡыттан уң хәлифәттән ошо тарафтарға йүнәлгән ибн Фаҙлан да юллай алмай йәджудж, мәджуджларҙы. Сөнки эҙләгәндәре – ер йөҙөндә түгел, хәлбүки, аҡыл әм мәкерлеккә таянған кеше күңелендә, рухи көрәш даирә ендә.

Шуға ла әҫәрҙә яҙғандар – башҡорттарҙың бынан мең йылдар элек көнкүреше, юғары мәҙәниәте, донъя халыҡтары ара ындағы урыны, бигерәк тә Әхмәт хәҙрәттәренең ба алары менән сағыштырғанда, бер аҙ яҡшыртыбыраҡ, ҡабартыбыраҡ, уйҙырмаларға төрөбөрәк үрәтләнгән ымаҡ тойолор. Ләкин тарихи хәҡиҡәттән ситләшеү юҡ әлеге яҙмаларҙа.

“Боронғо башҡорттар хаҡында тейешле төшөнсә булдырыу өсөн уларҙы хәҙергеләре менән бутарға ярамай, – тигән XIX буатта уҡ мәш үр тарихсы, шағир, ижтимағи эшмәкәр Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев.– Бының өсөн боронғо башҡорттарҙы ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, кейемдәре әм өйләштәре яғынан тарихтарының тәүге осорона, йәғни уларҙың эпостары йәшәгән дәүергә ҡайтарып ҡарарға кәрәк”. Уның фекеренсә, ошо ҡары үҙ-хикәйәттәрҙән (эпостарҙан) халыҡ башҡорттарҙың йәшәйеш рәүештәрен генә түгел, ә ер- ыу урындарҙың иң боронғо атамаларын да беләсәк.

М.Өмөтбаевтың йәнә Бөйөк Петрҙың “Башҡа халыҡтар Рәсәй тура ында нимә лә бул а дөрөҫтө яҙа алалармы?” тигән үҙҙәрен килтереүе фә емле. “ әр халыҡтың тарихы өйрәнел ен өсөн, уның үҙ Карамзины булыуы шарт”,– тип өҫтәй ул ораУға яуап рәүешендә. Әгәр тарихыңды сит милләт кеше е яҙа икән, уға, Өмөтбаев фекеренсә, “тәржемәсе ымағыраҡ итеп, Азия әм Европа тарихынан төрлө яҡлап мәғлүмәтле, риүәйәттәр әм хикәйәттәрҙе йыйыуға әләтле, тарих яратҡан ысын башҡортто беркетергә кәрәк”.* Милләт тура ында тейешле төшөнсәне башҡаса алып булмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ әлегәсә үҙ тарихыбыҙҙы, уның төпкөлдәрен үҙ рухи мираҫыбыҙҙан, үҙебеҙҙең боронғо эпик ҡомартҡыларыбыҙҙан юлларға, уларҙы тарихи сығанаҡ итеп ҡарарға өйрәнмәгәнбеҙ. Уны башҡалар файҙалана. Ысынлап та, төрлө дәүерҙәрҙә тыуған мәш үр “Урал”, “Аҡбуҙат”, “Бабсаҡ менән Күҫәк”, “Ҡиссаи Йософ”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” кеүек үлем еҙ әҫәрҙәребеҙ бер үк ваҡытта халҡыбыҙ үткән ҡа арман тарихи юлды, уның үҙенсәлекле баҫҡыстарын сағылтып тормаймы ни? Был йә әттән башҡорт эпик ҡомартҡыларындағы Алпамыша әм алыптар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе лә кире ҡағырға ярамай. Әленән-әле донъяның төрлө тарафтарында ҡалҡып сыға торған “ҙур кешеләр” тура ындағы хәбәрҙәр, матбуғатта әм әҙәбиәттә сағыла килгән серле йөнтәҫ әзмәүерҙәр – “ҡар кешеләре” лә быға дәлил. Зәки Вәлидиҙең хәҙер инде киң билдәле “Хәтирәләр” китабында ла Аллабирҙе зыяратында сама ыҙ ҙур кәүҙәле кемдеңдер ерләнеүе хаҡында яҙылған.

Әйткәндәй, әлеге американдарҙың ( әм башҡа халыҡтарҙың да) сәнғәт әҫәрҙәрендә йәджудж, мәджудж, Кинг-Конг образдары ғына түгел, Алишер Науаи әҫәрендәге арыҫландай эре ҡырмыҫҡалар ҙа, тимер ҡоштар, сиңерткәләр, боронборондан уҡ шәреҡ мифология ында, шул иҫәптән ибн Фаҙлан яҙмаларында ла, ҙур урын алған тағы ла әллә күпме мөғжизәүи йәнлектәр, Артыр бей эҙләгән мөғжизәүи көскә эйә, кеше ҡиәфәтле мандрагора тамырҙары йә сит планета вәкилдәре, йә ахырзаман хәбәрселәре, хатта заманының ғилми фараз емештәре, “Властелин колец”, “Гарри Поттер” кеүек хәҙерге осор рухын биләп алған образдар ҙа ошоға ҡеүәт. Был халыҡтар, күрә ең, беҙ уйҙырма тип ҡарап өйрәнгән эпостарҙа, мифологияла ҡасандыр булған реаль ваҡиғалар йә и ә алдағы дәүерҙәрҙә тормошҡа ашасаҡ хыялдарҙың сағылыуын бик ваҡытлы төшөнгән.

Башҡорттарҙың ул саҡтағы рухи донъя ы, ил өйәр ҡа арманлыҡтары донъя тарихының башҡа бик күп яҙмаларында ла сағылыш тапҡан. Сөнки Иҙел, Урал, Аҡташ хан иле тарафтарына сал боронғо замандарҙа Искәндәр-Александр алған яу юлы, әлбиттә, уңынан да ыуынып тормаған. Болғарға килгән ғәрәп илселеге лә, ғәмәлдә, өлөшләтә ошо юлды ҡабатлаған. уңыраҡ та хазиналарға бай булыуы менән тартып торған мө абәт Урал төрлө тарафтағы илбаҫарҙарҙы. Шуларҙың иң фажиғәле е, донъя тарихында төҙәлмәҫлек яра эҙе ҡалдырғаны – ғәрәп илселәренән уң тағы бер-ике йөҙ йыл үткәс ябырылған татар-монгол яуы. Был мәхшәр хаҡында “Ек Мәргән”, “ уңғы артай” кеүек тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙан да белә инек. Баҡти әң, бөйөк сардар әм илбаҫар Сыңғыҙ хан тормошон, мон-

---

**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. Йәдкәр. 1984 й. 194-се б.*

голдарҙың донъяны яулау тарихын улар үҙҙәре лә әҙмә-әҙ теркәп барғандар, хатта “төньяҡ илдәренең бере е” башҡорттар тура ында ла онотмағандар! “Монголдарҙың мөҡәддәс бәйәне” (“Сокровенное сказание монголов” йәки “Тайная история монголов”) тип атала был күләмле, хәҙер донъя әҙәбиәте ҡомартҡы ына әүерелгән әҫәр. 1240 йылда уҡ ижад ителгән. Башта Ҡытайҙа баҫылған. Бүрәт-монгол әм урыҫ телдәрендә ул Улан-Удэла 1990 йылда донъя күргән.

Был ҡомартҡының беҙҙең өсөн бөйөклөгө әм ҡиммәте шунда: әгәр халыҡтар, шул иҫәптән, башҡорттар ҙа, монгол илбаҫарҙары килтергән афәт, ундағы үҙҙәренең урыны хаҡында бығаса үҙ тарихи сығанаҡтары аша ғына таныш бул а, хәҙер и ә ошо ваҡиғаларҙы дошман күҙе менән дә ба алай ала. Ә нисек ба алағандар бит әле!

Тыумыштан Тимучин атлы монгол, Сыңғыҙ хан булып тәхеткә күтәрелгәс, иң башта буй ондормаҡ, бер йоҙроҡҡа төйнәмәк булып, тырым-тырағай көн иткән ҡәрҙәш ырыуҙарға ҡанлы яу аса. Башта меркеттәрҙе, наймандарҙы, унан заманында ата ы Есеүгей батырҙы ағыулап үлтергән татарҙарҙы ҡыйрата. Бигерәк тә татарҙарға рәхим еҙ була Сыңғыҙ хан. “Татарҙар – беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы әләк итеүсе ҡәүем”, – тип иғлан итә әм уларҙың арба күсәренән бейегерәк булған барса ир-атын ҡылыстан үткәрергә, ә ҡатын-ҡыҙҙы, сәкүшкәнән түбән бала-сағаны ҡол я арға ҡушып фарман сығара.

Артабан Сыңғыҙ хан еңелгән халыҡтарҙан көслө ғәскәр төҙөй, унан ҡот осҡос ҡан ыҙлыҡтар менән Төньяҡ Ҡытайҙы, уйғырҙарҙы, ғәрәптәрҙе, Иранды, Урта Азия халыҡтарын теҙ сүктерә. Тимер ташҡын булып аҡҡан был ажар яу аҫтында имгәнеп ҡалған халыҡтар яҙмышын, бигерәк тә татарҙар хәлен күргән бәғзе илҡәүемдәр ҡаршылыҡ күр әтеп тә тормай – бар байлығын, ғәскәрҙәрен монголдар ҡулына тапшыра.

Ләкин был да ҡәнәғәтләндермәй Сыңғыҙ ханды – бар донъяны яулап алыуҙы ул нисек тә йә әтләргә тырыша. Шуға ла үҙе индостан менән Бағдад ара ында ҡаты уғыштар алып барған бер мәлдә, ыналған сардар, ыңар күҙле Сүбәдәй батырҙы көслө ғәскәр башында “Төньяҡтағы ун бер илде” баҫып алырға ебәрә. Сыңғыҙ хан ул халыҡтарҙың ниндәй, кемдәр икәнен әм ҡайҙан барып табырға кәрәклеген дә аныҡ күр әтә. Бына улар: ханлин, хинчак, бачжигирт, орос, асу, сасу, мажар, кешимир, чиргис, булар, келэт (кэрт). Был халыҡтарҙы табыу өсөн “Ижил, Яик” кеүек мул ыулы йылғаларҙы кисергә тура киләсәген дә иҫкәртә Тимучин-Сыңғыҙ хан.

Урта быуат монгол телендә аналған был исем-атамаларҙан үҙҙең шул саҡта уҡ Иҙел, Урал, Йайыҡ тарафтарында йәшәгән ҡыпсаҡ, башҡорт, рус, мадъяр, биләр, бүләр, болғар кеүек ҡәүемдәрҙең күҙҙә тотолоуын әм уларҙың күбе енең башҡорт халҡын ойоштороуҙа ла әүҙем ҡатнашыуҙарын иҫкә төшөрөү артыҡ булмаҫ.

Ләкин эш унда ғына түгел. Иң мө име – был халыҡтарға ҡарата шул замандағы монгол ба а ы. Бығаса юлдарында осраған барса ил әм халыҡтарҙы талап-ҡыйратып тимер ташҡын булып аҡҡан монгол яуы, әле аналған халыҡтарға килеп төртөлөү менән, өрләккәндәй, ҡапыл туҡтап ҡала, ҡаты ҡаршылыҡҡа осрап, ярты донъяны яулаған Сүбәдәй батыр барса ғәскәрен юғалта яҙа. “Бында беҙҙе яратмаған аяу ыҙ халыҡтар йәшәй, – тип зарланып яҙа ҡаушап ҡалған Сүбәдәй баш сардарҙары Үгәдәйгә. – Ҡурҡыу тигән нәмәне белмәйҙәр, ажарланып, аҙ анлы яугирҙары менән, яралы йыртҡыстай, тотош ғәскәргә ташланалар. Еңелә башла алар, баш эйә е урында, ғәрлектәренән үҙ ҡылыстарына үҙҙәре ҡаҙалып үлеүҙе артыҡ күрәләр. Ә ҡылыстары бик үткер уларҙың...”

Ҡара яу булып ябырылған афәттең ысын асылын тәрән аңлаған ҡәүемдәр ҡаршылай монголдарҙы. “Үҙ-ара ыҙғыш сығарып, беҙгә ярҙам итмә әгеҙ, бөгөн – беҙҙе, ә иртәгә еҙҙе ҡылыс аша үткәрәсәктәр”. Ҡыпсаҡ ханы Ҡотйәндең монгол яуы-

на бергәләп күтәрелергә саҡырған өндәмә ендәге ошо оранын донъя тарихы бөгөн дә хәтерләй. Өндәмә ҙур ойошҡанлыҡ килтерә, ил өйәр яугирҙарҙың рухтарын күтәрә. Шуға бер нисек тә еңә алмай был халыҡтарҙы шө рәтле Сүбәдәй сардар. Ә ғәскәр кәмегәндән-кәмей, рухтары төшә. Яңы көслө ғәскәрҙе ҡайҙан алмаҡ кәрәк? Өйрәнелгәнсә, урындағы халыҡ иҫәбенә ғәскәр бөтәйтеү хаҡында уйларға ла ярамай, сөнки бындағылар әсир төшмәй.

Монгол империя ы таянысы булған Сүбәдәй, Үгәдәй әм Сағадай шундай ҡарарға килә: империяға ҡараған әр кем – бөйөк нойон, кенәзме, хан улдарымы, ғәскәр башлығымы, әллә ябай кешеме – быға са уғыштарҙан азат ителеп киленгән өлкән улдарын кисекмәҫтән яуға оҙатырға тейеш. Был мәлдә Монгол империя ы инде ҙур була, тиҙ арала бихисап ғәскәрҙәр йыйыла, әм улары тәхет вариҫтары Бату (Батый), Бури, Мунке, Гуюк кеүектәр етәкселегендә Сүбәдәйгә ярҙамға оҙатыла.

Әммә “күп анлы ғәскәр башҡаларға рух бирер” тип туғандарын ышандырырға тырыш а ла, урындағы халыҡты ахырынаса тубыҡландыра алмай Субәдәй. Инде барса ын ҡырып, ҡала-ауылдарын көл-күмергә әйләндереп киткән ерҙә лә әле тегенән, әле бынан иҫкәрмәҫтән ҡалҡып сыҡҡан сая төркөмдәр ис тә тынғылыҡ бирмәй монголдарға. Бигерәк тә ҡыпсаҡ батыры Бошман бей ҙур ҡазалар килтерә. Аҙ анлы, әммә үҙенә йәне-тәне менән тоғро арыҫландай ыбайлылары менән көтмәгәндә дауылдай атылып сығалар ҙа, тотош ғәскәрҙе йәшен тубылай арҡыс-торҡос ҡырып-яндырып, ҡоралдарын, халыҡтарҙан талап йыйған байлыҡтарын эләктереп, шул арала, ергә еңгәндәй, тағы юҡ булалар. Бик йонсота улар монгол ғәскәрен, башҡаларға яман үрнәк күр әтә. Оҙаҡ кәңәшләшәләр был хаҡта Сүбәдәй менән Батый сардар икәүләп. Унан: “Бошман бей өжүмен көтөп ятырға түгел, уның үҙен эҙләп табырға кәрәк”, – тигән ҡарарға киләләр әм Мәнгү хан етәкселегендә ҙур ғәскәр ебәрәләр.

– Уны мотлаҡ тере килеш алырға тейеш ең, – тип тә иҫкәртәләр Мәнгү ханды. – Ундай сая батырҙар монгол ғәскәренә лә бик кәрәк ...

Шулай ҙа байтаҡ ваҡыт монголдар Бошман бей әм уның бөркөттәре эҙенә төшә алмай. Тик әр нәмәнең аҙағы була: бер килеп Бошман бей ҙә тотола, ҡулдары бәйле килеш Мәнгү ханға килтерелә.

– Бихисап монгол ҡанын ағыҙҙың, бүре тоҡомо, йөрәгенде урып алып, эткә ташла аң да аҙ булыр, – ти быны ы. – Ләкин эт туйҙырыуҙан файҙа юҡ, ин монголға хеҙмәт итергә тейеш ең. Урмандарҙа йәшеренгән бүреләренде йый, ғәскәренде миңә теҙ сүктер!

Бошман бей белә: монгол ғәскәрҙәре ана шулай баш алған быуын ыҙ халыҡтар иҫәбенә генә арта – татарҙар, меркеттәр, наймандар, уйғырҙар, ҡараҡатайҙар, буртастар, йәнә Урта Азия ҡәүемдәре. Ҡай ылары, монгол көсөн күреп, хатта ҡаршылыҡ күр әтеп тә тормай килеп ҡушыла. Мәнгү хан әле лә, әлбиттә, шуға иҫәп тота.

– Минең халҡым ундай түгел, тау бәлләүере кеүек саф, иленә тоғро, – ти ул, ҡапыл нәфрәтләнеп. – Бөркөт ҡоҙғонға әйләнмәҫ, ҡоҙғон алдында дөйә теҙ сүкмәҫ!

Мәнгү хан тетрәнеп ҡуя: үлем алдында ла шундай үҙ әйтерлек көс-ҡеүәт ҡулдары бәйле был әҙәмдә ҡайҙан?!

Ләкин монголға баш бирмәгән баш йәшәргә хаҡлы түгел. Ҡапыл күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә ҡылыс ялтлай. Башы урталай ярылған Бошман бей гөр өлдәп ергә ауа. Был ауыр йәрәхәттән Урал армыттары ла ыңғырашып ҡуйғандай була ...

Ҡыпсаҡ батыры Бошман бей ҡа арманлыҡтары хаҡында шул заманда уҡ Джувайни, Рәшидатдин, Тизенгаузен кеүек ғәрәп, ҡытай, башҡа ил тарихсылары ярай ы уҡ ентекле яҙып ҡалдырған. Тарихи хәтер булараҡ, улар бөгөн дә йәшәй.

Ләкин Бошман бей әләк булғандан уң да был тирәләге ҡаршылыҡ ынмаған, бигерәк тә Аҡ ыу (Ағиҙел) буйы башҡорттары ҡаты торған. Бошман бей менән эшен бөтөргән Мәнгү хан ғәскәре хәҙер инде бына ошо Аҡ ыу тарафтарына йүнәлә. Был турала беҙ Бурнаҡ улы Ялыҡ бей үҙҙәренән, тарихта " уңғы артай" исеме менән ҡаласаҡ тетрәндергес эпик ҡомартҡы аша ла хәбәрҙарбыҙ. Ялыҡ бей үҙе лә,– Бошман ҡыпсаҡ ымаҡ уҡ, сая халыҡ батыры. "Исемем – Ялыҡ. Ташҡай улы Бурнаҡтың улымын. артай ырыуынан. Тамғам – төлкө ҡойроғо, – тип таныштыра ул үҙен. –... Мине аҡ аҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине. Элек мин дә шәп йәшәнем... Көслө лә инем... Уйнаҡлап торған тайҙы күтәреп алыу миңә бер ни ҙә түгел ине". Ләкин ошондай йәшәү хозурлығы монгол яуы арҡа ында халыҡ фажиғә енә әйләнә.

"Бары ын да уйлай башла ам, башым яна! – тиелә был хаҡта әҫәрҙә. – Шулай ҙа мин бөтә булғанды өйләп бирергә телемде мәжбүр итермен.

– Бөтәгеҙ ҙә тыңлағыҙ!"

Мәнгү хан артай ырыуы биләмәләренә килеп еткәс, баҫҡынсылар йола ы буйынса, еңел еңеүгә иҫәп тотоп, башта Ялыҡ бейгә илсе ебәрә. Быны ы монгол баҫҡағын, ынған уҡ менән үле сысҡан тотторop, кире ҡайтара. Беҙгә ҡаршы ҡорал күтәр əң, үҙең дә ошо хәлгә ҡалыр ың, тигәнгә ишаралай, дошманынан көлә, кәм етә. Сөнки ҡол түгел ул, иректe ҡош: "Мин үҙаллы инем, үҙ ҡошом, үҙ тамғам бар ине. Үҙ хөкөмөм үҙ ҡулымда ине."

Тик аңлаймы уң халыҡтарҙың ирек көҫәүен донъяны ҡанға батырып, талап көн итмәк ҡырағай монгол! Үс алмаҡ булып, сарбаздарын йыйҙы ла яу асты. "Йомран! – тип нәфрәтләнә Ялыҡ бей. – Ул Аҡ ыуҙың уң яҡ башында туҡтап, аңра сарбаздарына: "Үр!", "Үр!" тип өрәнләргә ҡушты. Минең кешеләр уларҙы мыҫҡыллап көлдө, бармаҡтарын ҡабып ыҙғыртып яуап бирҙе".

Тарихи хәҡиҡәтте асыр ғәжәп теремек күренеш! Күп анлы аяу ыҙ дошман алдында ҡаушау, ҡурҡыу тигән нәмәнең башҡорттарҙа әҫәре лә юҡ. Үҙ-үҙенә ышанған эскер еҙ хужаның әр еҙ килмешәктәргә малайҙарса бер ҡатлыраҡ мыҫҡыллы ҡарашы, дошманынан өҫтөн булыу тойғо о ғына бар. Илбаҫарҙар ҡыҫымы артҡан айын, был тойғолар ҙа көсәйә генә бара. Ялыҡ бей ырыуының уңыраҡ монгол тамырлы Аҡ аҡ тимер яуы менән осрашыуында ла был асыҡ күренәсәк. "Эйе, Тимер хан, кұҙе сыҡҡыры, төшлөк яҡтан килә. Сарбаздары, барластары бик күп. Эйе, йәйге эҫелә себен ни тиклем бул а, былар ҙа шул тиклем, – тип аптырай Ялыҡ бей. – Эргә ендә уның мырҙалары, атабәктәре. Улар тауҙар аша артылып килә. Йәшел байраҡтары Яйыҡтың был яғында күренә башлаған ..."

Аҡ аҡ Тимер ҙә башта, Мәнгү хан ымаҡ, Ялыҡ бейгә баш алырға бойороп баҫҡағын ебәрә. Әммә был юлы башҡорт батыры Мәнгү менән булған хатаны ҡабатламай, дошмандың сигенмәйәсәген белеп, баҫҡаҡты кире ҡайтармай. "Тимерҙең баҫҡағы килеп беҙҙең ер- ыуҙы тапап киткәс, мин уны кире ебәрмәнем, – ти ул. – Юҡ, уны балға буяп, ҡырмыҫҡа иләүенә ултыртырға ҡуштым. ай! Әй сыйылданы ла инде! – Таяҡ менән уҡҡан көсөк кеүек! Беҙҙең (Тимер хан ғәскәре менән) нисек уғышҡанды күр әң!"

Мәңгү хан ғәскәренә ҡаршы ла шулай айбарлы уғыша Ялыҡ бейҙең аҙ анлы яугирҙары. Уларҙың хатта" аттары ла, үрәпсеп, дошман биттәрен тешләй". Оя ҡорған ғәзиз ҡаяларын, балаларын ҡурсалар яралы бөркөт ажарлығы был. "Мин беләм: әр беребеҙҙең йөрәгендә ғәйрәт менән нәфрәт урғый ине, – тиер Ялыҡ бей. – Беҙ үҙ урмандарыбыҙҙы, үҙ далаларыбыҙҙы аҡлар өсөн яуға сыҡтыҡ. Беҙ ҡол булырға теләмәй инек". Был үҙҙәр менән Сүбәдәйҙең: "Бында беҙҙе яратмаған аяу ыҙ халыҡтар йәшәй, еңелеүгә ҡарағанда үҙ ҡылыстарына үҙҙәре ташланып үлеүҙе артыҡ күрәләр ..." – тигән зары ара ында ниндәй ауаздашлыҡ!

"Беҙ башҡорт биләмәләренән бик ҙур аҡлыҡ менән үттек, – ти ғәрәп илселеге сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт тә үҙенең әлеге яҙмаларында. – Сөнки улар төр-

киҙәрҙең кеше үлтереүгә әүәҫ иң ямандары. Әгәр далала берәй ен осрат алар, уның башын ғына киҫеп алалар ҙа китәләр".

Асылы шағир булған Әхмәт хәҙрәттәренә сама ыҙ шаштырыуҙар ҙа ят түгелдер. Әммә, уйла аң, Ялыҡ бейҙең Тимер хан илсе ен балға буяп, ҡырмыҫҡа оя ына ултыртып ҡуйыуын да, бәлки, кешелеклек тип атап булмайҙыр. Тик кемдә уң бында ғәйеп? Башҡорттарҙың үҙ биләмәләре аҫабалығына ым ынмаған, уларға ҡаршы ҡорал күтәрмәгән Ғәрәп илселегенә, әйтәйек, берәү ҙә теймәгән бит!

Ә бына донъяны ҡанға батырып, бихисап ғәййәр ҡа армандарҙың, шул иҫәптән Бошман бейҙең дә башына еткән Сыңғыҙ хан сардары Мәнгү ҡылған яуызлыҡтары өсөн язаны ла нәҡ бына башҡорттар ҡулынан ала, шикелле. Шулай булма а, Ялыҡ бейҙең: "Минең уғым Мәнгү түрәнең боғаҙына барып ҡунды, ул йылғаға батты ..." – тигән үҙҙәрен нисек аңларға? әр хәлдә былар ҙың бары ы бер нәмә хаҡында өйләй: башҡорттар Сыңғыҙ хан заманында ла, унынсы быуатта ла, йәнә бер ғәрәп сәйәхәтсе е ибн Руст яҙғанса, Урал тауының ике яғында, Волга, Кама менән Тубыл әм Йайыҡ йылғаларының үрге ағымын биләгән бөйөк тә, ҡеүәтле лә, юғары мәҙәниәтле лә мөстәҡил ил булып йәшәгән. Шуға ла улар Сүбәдәй, Мәнгү кеүек үҙҙәренән түбәнерәк мәҙәниәтле монгол сардарҙарына, хатта Сыңғыҙ хандың үҙенә лә, Ялыҡ, Бошман бейҙәр ымаҡ, кәм етеберәк, текәрәк ҡараған, үҙҙәрен бойондороҡ оҙ тотҡан. Был юҫыҡтан ҡарағанда, башҡорт ҡары үҙҙәрендә әйтелгәнсә, Майҡы бейҙең Сыңғыҙ хан менән өйләшеүҙәр алып барыуы, бер арбала йөрөүҙәре, үҙ ырыуына үҙаллылыҡты алып ҡайтыуы ис тә уйҙырма булып күренмәй. Кире енсә, башҡорт ырыуҙарының Сыңғыҙ хан тарафынан үҙ ҡошо, үҙ ағасы, уғыш ораны билдәләнеүе – уларҙың ғәййәр ҡыйыулығын, аҫабалыҡ хоҡуҡтарын таныу, тигән фекерҙе генә көсәйтә.

Ләкин бер үк ваҡытта башҡа төр орауҙар ҙа тыуа: ҡайҙа булған уңғы дәүерҙәрҙә башҡорттарҙағы был көс-ҡеүәт? Ни өсөн башҡорттар XX йөҙйыллыҡты бөлгөнлөккә төшөп ҡаршылай? Ни сәбәпле Мамин-Сибиряк, Глеб Успенский ымаҡ Рәсәйҙең алдынғы ҡарашлы ҡай ы бер фекер эйәләре: " әләк була, әләк була башҡорт! ис үҙ еҙ әләк булып бөтә был башҡорт тигәнең!" – тип әсенеп оран алған, ә бәғзе ҡәрҙәштәр йыназа рәүешендә уңғы башҡорт ҡәберендә уңғы ҡурайсыны тыңларға әҙерләнгән?

Яуаптар, әлбиттә, бер генә юҫыҡта түгелдер. Башҡорттар миҫалында донъяның өҙлөк өҙ үҙгәреп, алмашынып, яңырып торор мәңгелек ҡануны ла сағылмай булмаҫ. Иранлыларҙың бөйөк аҡыл эйә е Рудаки әйткәнсә, бөгөн ҡупшы баҡса үҫкән ерҙә иртәгә – бушлыҡ, даны донъяға билдәле ҡала урынында – хараба, сүплек йәки, кире енсә, сүллектә гүзәл йәшеллек, сәскә түтәлдәре ҡалҡып сығыуы ла бик ихтимал.

Халыҡтар яҙмышында ла осрай бындай аянысл хәлдәр. Аҙмы булған улар кешелек тарихында: Рум, Византия, Бөйөк Төрки ҡағанаттары, Иран... Карфаген, Троя, Константинополь... Барлыҡҡа килгәндәр, көсәйгәндәр, унан харабалар хәлендә юҡҡа сыҡҡандар. Әле күптәнме ни шовинист рухлы ҡай ы бер ҡупырыҡ ғалимдар төркиҙәрҙе лә яҙма ы, хатта ғәҙәти мәҙәниәте булмаған халыҡ рәүешендә күр әтеүҙе ғәҙәткә индереп ебәргәйне.

Әммә көтмәгәндә Орхон-Йәнәси яҙмаларының асылыуы бындай хәсрәт "аҡыл эйәләре"нең ауыҙын тиҙ япты. Баҡти әң, төркиҙәрҙең VI–VIII быуаттарҙа уҡ камил алфавиты булып, улар ҡағыҙ, туҙ, тирегә генә түгел, ә үҙҙәренең ижади емештәрен, хатта бөйөк сардарҙары Ҡолтәғин әм башҡа ҡа армандары хаҡындағы ҙур-ҙур белек-ҡобайырҙарын, үҙҙәре әйткәнсә, "Мәңге таш"ҡа – таш әйкәлдәргә яҙып ҡалдыра алғандар! Шуға ла хәҙер, Бөйөк Төрки ҡағанатының көнбайыш ҡанатын биләп тороусы уғышсан, теремек башҡорттарҙың да бер ҡасан да яҙма ы булмаған, тип раҫлап буламы? Яҙма мәҙәниәтле бөйөк империяға берләшкән халыҡтарҙың ҡай ыларының ситкә ҡағылып, мөртәт хәлендә, томана наҙанлыҡта йәшәүҙәре

мөмкин? Башҡорттарҙың да боронғо “Илиада”, “Одиссея”, индтарҙың “Махабхарата”, “Рамаяна” кеүек ғәрәптәр әм башҡа ил ғалим-ғөләмәләре, сәйәхәтселәре күргән юғары мәҙәниәте, "Урал", “Аҡбуҙат” ымаҡ бөйөк рухи ҡомартҡылары, шулай уҡ Ҡараҡая, Ҡәзирә әм Нәзирә, Башҡорт тигән ҡалалары булыуы ошо хаҡта өйләмәйме ни? Был тәбиғи, сөнки, ул заманда әр кескәй дәүләт тә үҙенең ил сиктәрен тимер ҡоршауҙар менән уратып, ҡораллы аҡсылар ҙа ҡуйған, тип уйларға ярамай. Халыҡтар ярай ы иркен, төрлө тараф: Иран, инд, Ҡытай, Мысыр менән аралашып, аҡыл әм мәҙәниәт уртаҡлашып йәшәгән, бер-бере енән өйрәнгән. Былар хаҡындағы мәғлүмәттәр донъя халыҡтарының тарихи яҙмаларында, төрлө ғилми китаптарҙа ғына түгел, бөйөк дини тәғлимәттәр әм уларҙың изге китаптары: Апастак, Тәүрат, Инжил, Ҡөрьәндә лә бар. Тик ҡарғаға атып, быҙауға тейҙергән осраҡтар әҙме ни беҙҙең зарлы тарихта? Төрки дала ында Фаҙлан улы Әхмәт, Төрк Тәкин, Артыр бей күреп киткән таш ын – балбалдар яҙмышы ла шуны раçлай. Урыçтың күренекле ғалимә е С.А.Плетнева яҙыуынса, борон ҡыпсаҡтыҡы тип йөрөтөлгән даланың барса ҡалҡыулыҡтарында берәрләп тә, төркөм-төркөм булып та ун меңдәрсә ошондай ын-статуялар ерәйеп, йыраҡтан күренеп торор булған. Тик XVII-XVIII быуаттарҙа был ерҙәргә урыç крәçтиәндәренең күпләп күсеп ултырыуы, сиҙәм аҡтарыу менән бергә төҙөлөш эштәре алып барыуҙары арҡа ында әлеге ҡабатланмаç, иçәп еҙ- ан ыҙ сәнғәт әçәрҙәре ер йөҙөнән еперелеп түгелә, юғалыуға дусар ителә. XX быуат баштарына далалағы был ындар бөтөнләй ҡалмай тиерлек...

Башҡорт тарихы менән дә шулайыраҡ булманы микән? Фажиғә, күрә ең, уңыраҡ башланған, монгол яуы башҡорттар өсөн дә эҙ еҙ үтмәгән. Көслөләр йыш ҡына көнсөллөк тыуҙыра. Сыңғыҙ хан вариçтары хакимлыҡ иткән Алтын Урҙа заманында башҡорт илен ханлыҡтарға – Ҡазан, Себер, Нуғай – йолоҡҡолап биреү башлана. Шулай бул а ла, башҡорттар үҙ асылдарын юғалтмай.

XVI быуатта улар Мәскәү дәүләтенә үҙ ерҙәренә быуындан-быуынға күсә килгән аçаба хоҡуҡтары менән берләшә. Үҙ идара ын әм ғәскәрҙәрен, аçаба ерҙәрен, дини инаныуҙарын аҡлап ҡала. Иван IV, ошоно раçлап, башҡорт илселәренә батша Грамоталары ла тотторған.

Башҡорттар килешеүгә әр саҡ тоғро ҡалған: Аҡ батшаға ҡиммәтле йәнлек тиреләре, бал менән я аҡ түләгән, үҙ иçәбенә ғәскәр тотоп, ил сиктәрен аҡлаған, Рәсәй алып барған барса уғыштарҙа ҡатнашҡан, уртаҡ ил өсөн ҡабатланмаç ҡа - арманлыҡтар күр әткән.

Тик батшалар алынышып торған, әр ҡай ы ының холоҡтарына ҡарап, башҡорттарға мөнәсәбәт тә үҙгәрә барған. Батшаларҙы бигерәк тә Уралдың борон-борондан, йәджудж, мәджуджларҙы бикләп ҡуйыу өсөн тимер иретеп, диуар ҡойған Искәндәр заманынан уҡ билдәле тау мәғдән сәнәғәте ныҡ ым ындырған. Сөнки үҙҙәренең тимер мәғдәне булмаған.

Әлбиттә, башҡорт биләмәләре башҡа тарафта ла әр йә әттән бай була. Ғәрәп илселеге сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт яҙмаларында ошондай үҙҙәр бар: “Уғыҙҙар ара ында мин ун меңләгән баш ат, йөҙ меңләгән арыҡ аçыраусы хужаларҙы күрҙем”. Күршеләре уғыҙҙарҙан башҡорттар ҙа ҡалышмаған. Хатта уңғы йөҙйыллыҡтарҙа ла билдәләле ғалим П.Рычков үҙенең “Ырымбур губерна ы топография ы” тигән китабында айырым башҡорттарҙың меңләгән бейә ауыуҙары, күп меңләгән башҡа мал тотоуҙары хаҡында яҙа. Аçаба башҡорттоң иң ярлы тигәненең дә 30–50 баш ат, 10–15 баш ыйыр, бик күп ваҡ мал әм ҙур ер биләмәләренә хужа булыуы билдәле. Башҡорттарҙың урта быуаттар рухи ҡомартҡы ы “ уңғы артай” әçәрендә Ялыҡ бейҙең улына кәләш алғанда бирнәгә “өс көтөү арыҡ, ярты өйөр бейә” биреүе хаҡында әйтелә. Әгәр Ялыҡ бейҙең килендәре берәү генә булмауы әм бирнәгә лә барса мөлкәт бүленмәүен иçәпкә ал аҡ, Ялыҡтың малы нисәмә көтөү әм өйөр булды икән?! Ил байлығы шуларҙан йыйылған. Көтөү-

көтөү мал ҡаплаған дала-туғайҙар, унар йәнлектәре мыжғып торған ҡалын урмандар, аҙым айын ялтырап ятҡан саф ыулы, балыҡлы йылға-күлдәр, хазина тулы мө абәт ҡая-тауҙар ... Быларҙы ят күҙҙәрҙән ҡурсалау еңелме?

Батшалар ҙа үҙ үҙҙәрендә тормай – әкренләп башҡорт ерҙәрендә заводтар, сиркәүҙәр төҙөү, ирек еҙләп урыҫ крепостной крәҫтиәндәрен килтереп ултыртыу, тау сәнәғәте әм сауҙа өсөн әҙәм аяғы баҫмаған ҡалын-ҡалын урмандарҙы аяу ыҙ ҡырыу башлана... Шуға барып итә: 1678 йылғы батша указы менән башҡорттарға тимерҙән ҡорал я ау тыйыла. Башҡорттар яуға күтәрелә, үҙ хоҡуҡтарын даулап батша ғәскәрҙәре менән алыша. 1707 йылда Алдар – Күсем ихтилалы башлана.Ул бар халыҡ хәрәкәтенә әүерелеп, 4-5 йыл уҙымында ҡанға батырылып баҫтырыла. уңыраҡ башҡорттар Бөйөк Петрға, Рәсәйгә ҡушылыу айҡанлы төҙөлгән килешеү ҡарарҙары буйынса аңлашыу өсөн, илселәр ҙә ебәреп ҡарай. Тик батша уларҙы ҡабул итмәй, илселәр ҡулға алынып, ябып ҡуйыла, ә башлыҡтары аҫып үлтерелә. Улай ғына түгел, тынғы ыҙ башҡорттарҙы ауыҙлыҡлау маҡсатында, Петр уларҙы бөтөнләй христианлаштырырға ниәтләй, күпләп сиркәүҙәр төҙөтә, мосолман үҙәктәрен, мәсеттәрҙе ҡырҙырта. Был сәйәсәт унан уң да дауам итә. Сенаттың 1742 йылғы указы менән биш йөҙ утыҙ алты мәсеттең дүрт йөҙ ун игеҙе емертелә, көсләп суҡындырыу саралары күрелә, ҡаршылашҡандарға үлем яза ы бирелә йә уларҙы ситкә сығарып атыу рөхсәт ителә ...

1735 – 1740 йылдарҙы башҡорттар, килешеүгә ярашлы үҙ хоҡуҡтарын даулап, йәнә ҙур юғалтыуҙар килтергән ҡанлы яу-болала үткәрәләр...

Петр батшанан уң тәхеткә ултырған батшабикә Анна Иоановна башҡорттар башҡаса баш күтәрмә ен өсөн тағы ла я илыраҡ саралар күрә: 1736 йылдың указы менән аҫаба башҡорт ерҙәрен атыуға әм атып алыуға рөхсәт бирә. Шул уҡ указға ярашлы, ҡорал ҡойоп уғышып йөрөмә ендәр өсөн, башҡорттарға хатта тимерлек тотоу тыйыла. Указды боҙоусылар ҡаты яуапҡа тарттырыла. Шулай бер елтәнеүҙә ерле халыҡтарҙың борон-борондан Уралда тимер эшкәртеү сәнәғәте тамырҙарына, уларҙың тирә-яҡ, шул иҫәптән, Төрк Тәкин ымаҡтар шөғөлөнсә, Урта Азия, Хәрәзм әм башҡа илдәр менән сауҙа бәйләнештәренә балта сабыла. Хатта хужалыҡ, көнкүреш мәнфәғәттәре өсөн эш ҡоралдары, ауыт- аба я ау мөмкинлектәре лә бөтөрөлә.

Тик фажиғә бының менән генә сикләнәме уң?

Ауылдарҙы ер менән тигеҙләп яндырып, кешеләрен ҡырыу йә ҡоллоҡа атыу, меңәрләгән аҫыл ирҙәрҙе аҫып, атып йә осло тимер ҡаҙыҡҡа ултыртып язалау, телдәрен, ҡолаҡтарын киҫеп, маңлайҙарына “бунтовщик... злодей... вор” келәймә е баҫып каторгаға ебәреү ... Уйла аң, милләттең иң ҡыйыу, ғорур, көслө шәхестәре бит былар: айҙар, йылдар буйы эйәрҙән төшмәйсә йәшәргә әләтле, ауыр ҡорал менән эш итеүсе Ялыҡ бей, Бошман бей, Алдар, Күсем ... кеүек тән әм рух йә әтенән дә көслө, арыҫландай аҫыл ирҙәр, халыҡтың алтын үҙәге.

Күрә ең, ошо сәбәптәр арҡа ында, ҡасандыр оло яуҙарға ҡаршы сығыр, Советтарҙың атаҡлы дипломаты Г.В. Чичерин әйткәнсә, өҙлөк өҙ ихтилалдары менән батшалар империя ын тетрәтеп торор ирек өйөүсе ҡеүәтле әм бай башҡорттар ҙа, көс өҙләнеп, башҡа күп кенә халыҡтар ымаҡ, XX быуатты ярым хәйерселектә, хоҡуҡ ыҙ ҡаршылай. Ләкин батшалар ниәте аҡланмай, башҡорттар баш бирмәй. Тик XVII-XVIII йөҙйыллыҡтарҙа ғына – ни бары ике быуат эсендә! – башҡорттар 14 тапҡыр дә шәтле яуҙарға күтәрелә: Алдар – Күсем, Килмәк, Аҡай, Йосоп, Төлкөсура, Бәпәнәй, Ҡара аҡал, Юлдаш Мулла, Батырша, Бәҙәрғол, Юлай, Кинйә, Салауат . б. халыҡ ихтилалдары уңынан да дауам иткән. 1918 йылда Темәстә үткән беренсе Бөтә башҡорт хәрби съезында сығыш я ап, Зәки Вәлиди етәкселегендәге милли хәрәкәт ә елдәренең бере е Гәрәй Ҡарамышев, мәҫәлән, былай ти:

– Урыҫ тарихсылары башҡорттарҙың милли азатлыҡ даулаған әр күтәрелешен

“бунт” тип атай. Әгәр шулай икән, башҡорт халҡының үҙаллылыҡҡа йүнәлтелгән ошо хәрәкәте иҫәп буйынса ик ән игеҙенсе әм хәл иткес уңғы “бунт” булыр!

XX быуат башы халыҡтар зил-зилә ендә лә, башҡалар “милли-мәҙәни мөхтәриәт” талап итеп зыҡ ҡупҡан бер мәлдә, башҡорттар, беренсе булып, “тупраҡлы (ерле) автономия” мәсьәлә ен ҡаты ҡуйҙы. Инҡилап шағиры әйтмешләй: “Тупраҡ – башҡорт бәхетелер .... Тупраҡ ал аҡ ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ”,– икәненә төшөнгәйнеләр. Милли хәрәкәт етәкселәренең: “Беҙ большевик та, меньшевик та түгел, беҙ – башҡорт”, – тип белдереүҙәре лә ис тә осраҡлы түгел. Советтар яғына сығыуҙың төп шарты ла биләмәләрендәге үҙидара әм милли ғәскәрҙәрҙең аҡланыуы булды. Дәүеренең мәш үр шағиры Шәйехзада Бабич халыҡҡа уны былай аңлатты:

*Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына,*
*Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға,*
*Азат Башҡортостан йөм үриәтен*
*Таныйым, тип хуплап торғанға.*

Ата-баба аманатына, уларҙың йәшәү асылына тоғро булған халыҡтар ғына артабанғы йәшәүгә хоҡуҡлы, тигән боронғолар. Быға башҡорт тарихы ла миҫал. Әйтәйек, Ғәрәп илселеге сәркәтибе сифатында Бағдадтан Болғарға саҡлы юлда Алла ҡоло Фаҙлан улы Әхмәт күргән, ҡай ыларын ҡурҡышынан урап үткән Хазар ҡағанаты, Хөрәсән әм Хәрәзмдәге Иран саманыйҙары, Джурджания ҡәүемдәре, шулай уҡ күршеләрен тетрәтеп торған уғыҙ менән бәшнәктәр, йә булма а тиң күреп, хәлифәт ынлы хәлифәткә туранан-тура мөрәжәғәт итеүҙән дә тартынмаған шул уҡ болғарҙар быуаттар уҙымында, замана дауылдарына ҡаршы тора алмайса, көслө дәүләттәрен, улай ғына түгел, тора-бара хатта үҙ милли атамаларын да юғалтып ҡуйғандар. Ҡеүәтлерәк башҡа ил әм халыҡтар эсендә иреп, артабанғы тарих сылбырынан төшөп ҡалғандар...

Тик Фаҙлан улы Әхмәттең "ҡырағай", "төркиҙәрҙең иң уҫалы", "дошманының башын ҡырҡып алып китергә әүәҫ" тип нарыҡлаған башҡорттар ғына, дәүерҙәр ынауын ата-баба аманатына тоғро үтеп, Аҡбуҙатлы Урал батыр эҙенән "ғәййәр башҡорт", "ҡа арман башҡорт" тигән ғорур исемен, ҡылған эштәре бәрәбәренә, күҙ ҡара ылай аҡлай килгән, мең йыллыҡтар аша бысратмай алып сыҡҡан.

Әлбиттә, Фаҙлан улы Әхмәт башҡорт илен тотошлайы менән күрмәгән, уның бәләкәй бер ярсығын ғына киҫеп үткән, юлдарында тап булған айырым төбәк ырыу-ҡәбиләләре йәки уларҙың вәкилдәре менән генә аралашҡан.

Әгәр ул барса башҡорт илен: Урал тауҙарын, уның мәғрур ҡаяларын, әҙәм аяғы баҫмаған, йәнлек тулы, ҡалын, йәшел урман төпкөлдәрен, йөрәккә тоташҡан ҡан тамырҙары ымаҡ тартылған Ағиҙел, Сулманиҙел, Ҡариҙел, Күгиҙел кеүек гүзәл йылғаларын, диңгеҙгә тиң Асылыкүл, Ҡандракүл, Талҡаҫ ымаҡ ыу дарьяларын, күккә үрләп ибелгән дәү кәбәндәрҙәй сусаҡлы киңлектәрен, ик еҙ-сик еҙ ҡылғанлы тигеҙлектәрен, ҡош моңона ҡойонған сәскәле туғай-болондарын күр ә, ни әйтер ине икән? Моғайын, оҡланыр, ғәжәпләнер, ожмахтай ошо ергә хужа булған, уны аҡлаған әм яҡлаған халыҡты нығыраҡ хөрмәт итер, дин әм көнкүреш шарттары айырма ына ғына ҡарап уларҙы кәм етмәҫ, ябай бетеү ҡурсаҡтарынан Раббы я ап түбән етмәҫ ине, тип уйларға ғына ҡала. Сөнки әр халыҡ үҙенең хакимдарына, дәүләтенә генә түгел, үҙе йәшәгән тәбиғәткә лә бәйле әм лайыҡ булыуын белмәй булмаҫ изге эш менән йөрөүсе Алла ҡоло сәйед Әхмәт. Тәңре лә, Алла ы ла үҙенә яҡын, үҙе яратҡан халыҡтарҙы ғына гүзәл тәбиғәтле ерҙәргә урынлаштырған, тигән фекерҙәр ҙә бар бит әле изге китаптарҙа...

Шулай ҙа башҡорттар оло ихтирам аҡлай Әхмәт хәҙрәттәренә, үҙҙәрен уға бурыслы анай. Сөнки Фаҙлан улы Әхмәт, бәлки, үҙе лә иҙмәҫтән, бынан мең йылдар элек йәшәгән башҡорттарҙы хыял ителмәгән тарихи юғарылыҡҡа күтәрә, "төркиҙәрҙең иң уҫалы", “үҙ илен аҡлауҙа ҡурҡыу белмәҫ, ғәййәр яугир” ымағы-

раҡ ба алап, уларҙы төрки әм шәреҡ тарихының үҙәгенә ҡуя.

Ә Фаҙлан улының башҡа төр ба аларына килгәндә... Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәүеф еҙлек талаптарынан сығып, илселек халыҡ күп йәшәгән урындарҙы, ҡалаларҙы урап үтергә тырышҡан, тинек. Шуға ибн Фаҙлан яҙмаларында башҡорттарҙың ҡыш айҙарын нисек үткәреүҙәре, малсылыҡтан тыш нимә менән шөғөлләнеүҙәре, ниндәй өнәрҙәре, шулай уҡ ҡала, тау мәғдәне, сәнәғәте, рухи кимәле хаҡында мәғлүмәттәр юҡҡа ан. Ләкин был хәл ул осорҙа башҡорттарҙың "Урал" әм унан уң килгән бөйөк эпик ҡомартҡылары ымаҡ юғары рухи сәнғәте генә түгел, ә тимер иретеү, хужалыҡ ҡорамалдары етештереү кеүек өнәрселек сәнәғәттәре, тирә-яҡ менән теремек сауҙа алып барған, гөрләп торған ҡалалары, шуға бәйле үҙ дәүләтселектәре булмаған тигән үҙ түгел. Сөнки ҡалалар, дәүләттәр бер көндә генә төҙөлмәй. Фаҙлан улы Әхмәт сәфәренән уң башҡорт иле буйлап йөрөгән сәйәхәтселәрҙән Мөхәммәт Әл Иҙриси тигән тағы бер ғәрәп Яйыҡ йылға-ы баштарында башҡорттарҙың Немжан тигән ҡаласығы барлығын яҙа. Унан и-геҙ көнлөк юл алыҫлығында Иҙел ярында төҙөк әм ҙур Гүрхан ҡала ы булыуы, йылға буйлап төрлө тарафта сауҙа караптары йөрөүе хаҡында бәйән итә. Гүрхан ҡала ының юғары мәҙәниәт, сәнғәт үҙәге булыуы, унда башҡа төркиҙәрҙә осрамаған үҙенсәлекле ҡары үҙ әҫәрҙәре ижад ителеүе, хужалыҡ тармаҡтары мохтаж булған сәнәғәт ҡорамалдары етештерелеүе тура ында әйтелә. Бында “Аскунъя тигән хан хакимлыҡ итә” тип тә өҫтәй ғәрәп сәйәхәтсе е. "Аскунъя"ның Аҡташ хан вариҫтары булыу ихтималлығын да ыҙып ташларға ярамай. Хәйер, "Асҡын" исеме башҡорттарға ис тә ят түгел.

Мөхәммәт Әл Иҙриси үҙенең карта ында Яйыҡ менән Ур йылғалары ҡушылған ерҙә башҡорттарҙың йәнә Ҡараҡая тигән ҡала ын да теркәп ҡуйған. Был халыҡтың төп йылға ы Ағиҙел буйында тағы Ҡәзирә менән Нәзирә ҡалалары тасуирланған. Ә уңыраҡ Рум сауҙагәрҙәре я аған картала Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған урында "Пашарти", йәғни урындағы халыҡтың үҙ исеме менән аталған "Башҡорт" тигән ҡала айырым күр әтелгән. Кем белә, был ҡалалар рәүешендә хөрмәтле Мөхәммәт Әл Иҙриси ҙә, бәлки, данлы ғалимдарыбыҙ тарафынан “Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған урында” беҙҙең көндәрҙә генә асылған, “Өфө-2” тип тамғаланған ҡала-нығытма йөҙөндә румлылар күргән ошо “Пашарти”ҙы ла күҙҙә тотҡандыр. Был ҡалаларҙың ҙур йылға буйҙарында урынлашыуҙарына ҡарап, уларҙың дүрт тарафта ла сәйәси әм сауҙа эштәрен йылдам алып барыуҙарына ис тә шикләнерлек түгел. Боронғо Рум сауҙагәрҙәренең был тарафтарға килеп йөрөүе күп нәмә тура ында өйләй. индтарҙың “донъяның ете мөғжизә е”нең бере е тип йөрөтөлгән гүзәл Тадж-Махал мавзолейы ла (XVII быуат) Урал аҫылташтары менән биҙәлгән, ти бит.

Бағдад илселегенең башҡорт иле аша үтеүе лә, әлбиттә, эҙ еҙ ҡалмаған. Башҡа күп халыҡтар ымаҡ уҡ, башҡорттар ҙа, ахыр килеп, мосолманлыҡты ҡабул иткән. Ләкин был уларҙы Әхмәт ибн Фаҙлан өгөтләгән өсөн генә түгел. Башҡорт ашығып эшләмәй, эшлә ә – сигенмәй. Исламдың таралыуы ла башҡорттарҙа бер нисә быуатҡа уҙыла. Унда ла мосолманлыҡтың үҙҙәренең инаныуҙарына ҡаршы килмәүе, булмыштарына, тарихи бурыстарына күп йә әттән яуап биреүе ылыҡтыра ҡуйғандыр. Сөнки, ысынында ла, ислам тәғлимәте дала тормошондағы ҡай ы бер холоҡ-хоҡуҡтарҙы сикләй бир ә лә, башҡорттар ымаҡ уҡ, ғәҙеллек, тәртип көҫәй, сабырлыҡ сифаттарын тәрбиәләй, сәләмәт тормошҡа, сафлыҡҡа саҡыра булып сыҡты. Искәндәр йәки Сыңғыҙ хан ымаҡ талау, баҫып алыу, кеше байлығына, иленә хужа булырға тырышыу, урындағы ҡәүемдәрҙе ҡол итеү маҡсатында ҡорал күтәреп ҡан ҡойош юлына баҫмауҙары, халыҡтарға уйланырға ирек биреүҙәре лә был осраҡта ғәрәптәр файҙа ына булғандыр, бәлки. Шуға башҡорттар уны үҙҙәре теләп, үҙ ихтыяры менән ҡабул итә. Башҡаларға йәнтәслим ҡаршы торған, үҙ биләмәләре аша берәүҙе лә үткәрмәгән башкиҫәр, ажар башҡорттар

ғәрәптәргә, уларҙың илселәренә ҡорал күтәрмәй, мәле килеп еткәс, улар килтергән тәғлимәтте хатта үҙ рухына әйләндерә. Юҡҡамы ни бөтөнләй ситтә ятҡан, сағыштырмаса ҙур булмаған Ғәрәп ярымутрауы бөгөнгө күп кенә донъя халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар өсөн дә изге ергә, ҡиблаларына, хаж ҡылыу урынына әүерелде. Тимәк, халыҡтар иркенә йоғонма, юғары мәҙәниәт тәҡдим ит. Үҙ иманыңды, йолаларыңды башҡаларға көсләп таҡма. Әгәр кәрәк тап алар, быға үҙҙәре килер... Нимә тип күтәрә шәреҡ халыҡтары баҫҡынсы Искәндәр-Александр Македонскийҙы? Аҡыл менән эш иткәне, юғарыраҡ мәҙәниәт, камилыраҡ дәүләт ҡоролошо, кешелеклерәк мөнәсәбәттәр алып килгәне өсөн түгелме ни? Был хәҡиҡәт Фаҙлан улы сәйәхәте менән дә раҫлана. Ләкин башҡорт, үҙ инаныуҙарына ла хыянат итмәй, тәбиғәт бала ы булып ҡалды, ата-бабаның ҡәҙимге Тәңре ен дә, Хоҙайын да онотманы. Ғәрәптәргә изге Ҡөрьәнде бүләк иткән Аллаы йөҙөндә уларҙың да рухын, ила и ынын күрә белде.

Әлбиттә, тарихи тетрәнеүҙәр, ябырылып килгән өҙлөк өҙ яуҙарҙы ҡайтарыу бурысы башҡорттарҙы ла битараф булмаҫҡа, дуҫ айлауҙа аҡыл менән эш итеүгә өйрәтте. Шуға ла, болғарҙар ымаҡ, улар ярҙамды әллә ҡайҙа ятҡан Бағдад хәлифәтенән эҙләмәне. Яуҙаш та, табындаш та итеп үҙҙәренең күршеләрен — Бағдад илселеге килер алдынан ғына башҡорттарға барымтаға сапҡан әлеге урыҫ ҡәүемдәрен айланы. Уларҙың үҙ-ара уғышып торған күп анлы кескәй кенәзлектәренән Рәсәй тигән күп милләтле бөйөк ил тупланма ын ойоштороуҙа ла теремек ҡатнашты. Башҡалар менән иңгә-иң терәшеп, ошо уртаҡ илдең хәүеф еҙлеге өсөн илбаҫарҙарға ҡаршы быуаттар уҙымында йәне-тәне менән фиҙакәр көрәште, ҡа арман улдар үҫтерҙе, үҙен тутыҡмаҫ дан менән ҡапланы.

Ошо арҡала башҡорттар, тәрән тарихи тамырлы башҡа халыҡтар кеүек үк, уңға- улға ялтанмайса, үҙ исемдәре әм асылдары менән быуаттан-быуатҡа ғорур атлай бирҙе.

Ғәрәп илселеге булып киткәндән уң тағы 995 йыл үткәс, ул күргән ҡа арман башҡорт вариҫтары үҙҙәренең ғәзиз Илдәрен (инде нисәнсе ҡат?!) үҙаллы дәүләт итеп иғлан итер, донъяның ҡара көстәре менән тағы тиң еҙ алышҡа сығыр. "Башҡорт", "Башҡорт иле", "Башҡортостан" исемдәрен, ерҙәренә аҫаба хоҡуҡтарын дәүерҙәр дауамында ҡурсалап килеп, тарихи тәжрибә туплап, дәүләтселеген көсәйтә, яңырта барып, өсөнсө мең йыллыҡҡа ла ышанысды инеп китер...



**Гөлсирә**
**ҒИЗЗӘТУЛЛИНА-ҒАЙСАРОВА**

# ТӨШЛӨКТӘГЕ ТӨШ

## ХИКӘЙӘ

Тәбиғи булығыҙ — сәскә атыр ығыҙ.

**Чжуан-цзы.**

Яланғас табаны шалланмаған шыма таҡтаның рәхәт йылы ын тойоу менән, бала саҡ, уй ыҙ, ирәүән студент осор, әсәй йорто келт итеп иҫенә төштө. Еләҫ елдәй генә булып моң оулыҡ ипкене ҡағылып китте.

Кисә ҡыҙыу мунсала кинәнгәнсе сабынып, аҙағына итәле бал менән буйтым шифаланғас, сабыйҙай иҙрәп йоҡланылған. уң торғанына уңай ыҙланынҡырап сыға ине, йәшел сирәм баҫҡан киң ихатала өмәгә әҙерлектең ҡыҙып ҡына барғанын күреп тынысланды. Техникаға алышҡан ауыл кеше е эш тип өтөлөп-ҡырылып бармай хәҙер. Ана, ҡоҙа ы бар та ылын алып бесәнгә имертелгән тәкәне тунай. Өмәгә әйтелгән күрше ҡатындарылыр, ахыры, эсәк йыуырға китергә тора. Бере е ҡаласа аҡ салбарҙан килеш күтәрмәгә сығып баҫҡан Сафуанға ирпелеп баҡты ла, өлкәнерәгенең бөйөрөнә төртөп, тоттоҡ тигәндәй, ерҙәге эсәк-ҡарын тултырылған тасҡа ымланы. Эйелгән ыңғайға асыҡ иҙеүенән йомро ғына түштәре күренеп ҡалды. Уйынсаҡ ҡыҙыҡ ыныу сағылған ҡарашын ҡапҡанан сығып барышлай йәнә бер ташлап алырға өлгөрҙө йәш ҡатын. Ауыл халҡы өсөн Сафуандың тормошо әкиәт кеүек күренә инде. Кисә лә:

– Шоферы йәкшәмбе килеп ала, ти. Эй рәхәт йәшәйҙәр ҙә инде, килтереп ҡуй, килеп ал, – тип өйләнәләр ине. – Машина ының матурлығы – ҡурсаҡ кеүек. Ултырыу түгел, ҡарап тороуы бер ғүмер.

Ә ҡоҙағыйы йылмайып, өндәшмәй генә тыңлай. Уның ултырып йөрөгәне бар, өлкән улы Себерҙән үк машина ы менән ҡайтып төшкән.

Нисәмә йылдар инде донъя йөгөн үҙе артмаҡлап, ағай, атай, хәҙер инде хатта олатай булып киткән Сафуанға бер көнгә генә бул а ла үҙен ис хәстәре булмаған ҡәҙерле ҡунаҡ итеп тойоу рәхәт. Ана, ҡоҙағыйының, аласыҡтан йүгерә алып сығып, ҡәҙерләп сәйгә саҡырыуы хас та әсә енең өлтөрәп тороуын хәтерләтте.

Өҫтәлдә яңы ғына сепараттан үткәрелгән йылы ҡаймаҡ, әле генә уйылған тәкәнең оҫталап ҡурылған бауыры хуш еҫ аңҡыта.

Сафуан үҙенең кисә ҡапыл ғына уйлап бында боролғанына йәнә бер тапҡыр өйөндө. Ул был татыу ғаиләне яҡшы белә. Ҡатыны, балалары менән дә, үҙе генә лә булғаны, уларҙың да күмәген дә, яңғыҙ-ярымлап та болло йортонда ыйлағаны бар. Әле лә хужаларҙың, бесән мәшәҡәтенә ҡарамайынса, ул тип өҙөлөп тороуҙарына тамсы ла уңай ыҙлыҡ кисермәй. Сөнки уларҙан күргән яҡшылыҡты унлата арттырып изгелек күр әтергә ҡулынан килә, күр әтә лә. Әммә белә: ҡоҙа ы менән ҡоҙағыйының хөрмәтендә унын биләгән вазифа ына ярам аҡланыу, ҡылған әм ҡыласаҡ ярҙамына рәхмәт кенә түгел. Улар Сафуанды кеше булараҡ та ихлас яҡын күрә. Әле уға бына ошоно о ә әмиәтлерәк.

Эйе, кисә генә ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп Башҡортостан юлдары буйлап кәйелә-кәйелә елдергән затлы машиналар тубынан Сафуандың "Тойота" ы өйөндөк ауылына илткән сутырмаҡ юлға ҡайырылды ла ҡалды. Уйламағанда ғына айырылды, сөнки тағы ярты көн сыҙарлыҡ та тәҡәте ҡалмағайны. Шул тиклем туйғайны. Боғаҙына килеп тығылғайны ғарыҡ булыуы. Хәйер, был Сафуандың уңғы осорҙағы ғәҙәти халәте – кешеләрҙән туйыу. Кешеләрҙән генә бул а икән әле. Ғөмүмән, тормоштоң үҙенән булып ҡуймағайы...

Күпселектең ҡарашынан сығып фекер йөрөткәндә, бары ы ла ал да гөл, ашағаны бал да май – ә ул толҡа тапмай. Йоғошло сир кеүек ҡаҙалды бер кәйеф – йәшәүҙең ҡыҙығы бөттө. Был донъяла уны мауыҡтырыр бер генә сер ҙә ҡалмаған кеүек. Бөтә ен дә белә, аңлай. Ниндәйҙер ваҡиға башланып ҡына тора, ә Сафуан унын ахырын күрә. Кеше ауыҙын асып та өлгөрмәй, ә ул ни әйтерен генә түгел, ниндәй йәшерен ниәт менән әйтелгәненә тиклем төшөнә. Башына "Йәшәүҙән ни мәғәнә?" кеүегерәк уйҙар инә-сыға йөрөргә әүәҫләнеп бара. Ә "ни өсөн?" "ниңә?"ләр борсой башлаған икән, тигенгә түгел. Тере мәйеттең ораuҙары бит был. Тормош улҡылдап тиртеп, мөлкөлдәп ҡайнап торғанда юҡ-бар башҡа килмәй. Ҡартлыҡ шулай үҙен иҙҙерәлер, тигәйне башта. Күҙгә тексәйгән ҡартлыҡтан өйөү артына боҫмаҡсы булып, ғишыҡ яңыртырға ла уйлап ҡуйғайны. Тик бынан да файҙа сыҡмаҫын самалай. Ғашиҡ булғаны юҡмы ни унын? Башта ҡыҙыҡ, эйе. Ә бер аҙҙан, балға батҡан ағыҙаҡ шикелле, ҡанатың әлберәп, нисек ҡотолорға белеп булмай. Унан ҡатын-ҡыҙҙың уға талпан кеүек йәбешә торған холҡо бар. Юҡ, был мәшәҡәттең дә кәрәге юҡ.

Тағы ниндәй ҡыҙыҡ бар уң был донъяла? Элек юғарыраҡ үрләү теләге сәмләндерә ине. Инде юғарыла ла йөрөлдө, депутат та булып ултырҙы.

Дөрөҫөн әйткәндә, яйға алынған тормошон үҙгәртке е лә килеп тормай. Зарланмай ул. Зарланырлыҡ та түгел. Ҡыҙыҡ түгел, тип кешегә өйләп булмай бит инде. Ғүмер баҡыйына үңәсе өҙөлөрҙәй булып эшләп тә осон-осҡа ялғай алмаған күпме ҡарт-ҡоро: "Нимә, ҡустым, осаңа май бөрҙөмө әллә?" – тип күҙенде сәсрәтер.

Әүеҫлек аҫтындағы еләҫтә өмәгә уңғы әҙерлекте күҙәтеп ултырған Сафуан шул хаҡта ялҡау ғына уйланы. Хәйер, бынау йәмле йәй көнөндә баш ҡатыра торған нәмә лә түгел инде был. Хатта уй ҙа түгел, йонсоҡос бер тойғо.

Ҡатындар, ана, йүгереклəп йөрөп машинаға ашанты тейәй. Әйтер ең, бесән сабырға түгел, олоғара туй я арға барыуҙары. Хәйер, эштән бигерәк, бер мәрәкә инде. Ҡоҙаның ҡырҙан ике улы, бер ҡыҙы ғаиләләре менән ҡайтҡан. Улар өсөн ялан күреү, саф ауа улау мө им.

– Бынау ҡымыҙҙы ҡайҙа ҡуяйым, улым? Берәүегеҙ тотоп ултырма а, түгелеп әрәм булыр.

– Ҡымыҙ быуынды ала бит ул, әсәй, ыу ынға айран яҡшыраҡ. Әсе ҡатығың юҡмы?

– Ҡатыҡ та алдым. Бар ын ҡымыҙы ла, машина өйрәй ҙә ба а.

Ул арала урам яҡҡа оҙон арбаға егелгән бер ат килеп туҡтаны. Ишек алдындағылар ҡапҡанан килеп ингән был ир менән ҡатынды шулай ҡыуанып ҡаршы алма а, Сафуан, моғайын, уларға иғтибар ҙа бирмәгән булыр ине.

Ике е лә йонсоу. Кейемдәре ярлы. Ире арзанлы спорт салбары, ҡәҙимге иҙрәгән футболка кейгән. Яшыҡ ҡына ҡатыны шул тиклем ҡояшҡа янған. "Ҡара сутыр". Сафуандың иҫенә күптән онотолған ошо үҙ килеп төштө. Күлдәген дә, матур бул ын тип түгел, кер күтәр ен өсөн айлаған, ниндәйҙер бысраҡ төҫ. Бары башына ҡайырып ябынған яулығы ғына аҡ тап булып күренеп тора. Дөйөм иғтибарҙан ике енең дә йөҙө яҡтырып, ауыҙҙары йырылып китеүгә, алғы тештәренең дә теүәл булмауы күҙгә ташланды.

– Ҡотла, ҡәрендәш, – тип шарылданы ир ҡаршыларына йүгереп килгән Мәстүрәгә, ҡоҙаның Мәскәүҙән ҡайтҡан фән кандидаты ҡыҙына. – Зәбихулла абзыйың да ҡартатай булды! Малай, өс кило ете йөҙ.

Эргә ендә шулай уҡ балҡып торған ҡатыны Сафуандың ҡарашын тойоп тартынды, яулыҡ осо менән ауыҙын ҡаплай алды.

"Хәйерсе үрсеткәнгә лә шул тиклем ҡыуана икән кеше". Көтмәгәндә башына килгән уҫал уйына Сафуан үҙе лә ғәжәпләнде. Тик, ниңәлер, әллә хөртөмшә ҡиәфәттәре менән ғәҙәттән тыш шәп кәйефтәре тап килмәгәнгә, ҡаныҡты ла ҡуйҙы был икәүгә. Бигерәк тә ямаҡай бисә енә.

– Етеш еҙерәк йәшәйҙәр шул, – тип ҡуйҙы әнәк-тырма тотоп эргә енән үтеп барған ҡоҙа ы, Сафуандың уйын төшөнгән кеүек. – Алты малай. Өлкәнен былтыр өйләндереп башҡа сығарғайнылар. Ана, бөгөн ейәнле булып тороуҙары. Икенсеенә быйыл туй я анылар. Өсөнсөләре армияла. Игеҙәктәре военкомат юлында. Кинйәләре мәктәптә уҡый. Балаларының бере е лә ныҡлап аяҡҡа баҫып китә алмаған шул әле.

"Ошолар ҙа, донъяла йәшәйбеҙ, тигән була инде, – тип уйланы Сафуан, үҙенән саҡ ҡына йәшерәк был икәүҙе йәлләүҙән аңлайыш ыҙ ләззәт кисереп. – Ниндәй генә рәхәт күрҙеләр икән, бахырҙар?"

Үҙе лә ауылдан сыҡҡан малай – аҙыраҡ күҙ алдына килтерә Сафуан уларҙың тормошон. Йәйен-ҡышын резина итектә мал ара ында. Ауырырға ла ярамай хатта. Малдың тамағы туҡ бул ын, ыйырың ваҡытында ауыл ын. Ғүмерең буйы малға ҡол. Ҡыш көрт баҫып китә, яҙлы-көҙлө тубыҡтан бысраҡ. Өс ай йәйҙе күҙҙәре сығырҙай булып көтөп алалар ҙа, йәнә бесән, утын. Йәйге йәннәтен дә инде ташҡа үлсәйем: себен дә серәкәй, күгәүен дә ыйыр ҡойроғо.

Ауыл кеше енең тормошон эт көнөләй күрге е килеүе үҙен бер нәмә лә ҡыуандырмаған, күңеле үҙәктән ҡороған ағас кеүек булып барған өсөн үс алыу инеме? Аңламаны.

Урынлы-урын ыҙға бер көләмәс иҫенә төштө.

...Теге донъя, имеш. Дәүләт етәкселәренең төрлө ө төрлөсә шыйыҡ батҡаҡҡа батҡан. Ленин – билдән, Сталин – муйындан, Андропов – тубыҡтан, ә Брежнев табанынан ғына тора, ти. Бөтә е лә: "Бәй, ин шул тиклем гона ыҙ түгел дә ба а", – тип аптырағанға: "Шауламағыҙ, мин Хрущевтың башына баҫҡанмын", – ти икән.

Шуның кеүек, Сафуан да үҙе батып барған күңел аҙлығынан бынау ауыл бисә енең башына баҫып ҡалҡырға маташа ине, ахыры.

Ни айәт, әҙерлек тамамланды. Ризыҡ-әүҡәтте, ҡаҙанды – машина багажнигына, салғыларҙы ат арбаларына тейәнеләр.

– Сафуан ағай, ҡай ы машинаға ултыра ың? – тип көтәүелләгән йәштәрҙе:

– Машинала йөрөгән бар ул... – тип шаяртты ла Сафуан, ҡоҙа ының арба ын  айланы. Атай ыҙ үҫкәс, ғүмере буйы утын-бесәнгә ат менән йөрөгән тиҫтер малайҙарына ҡыҙығыуын иҫенә төшөрҙө.

– Сәмиғә еңгә, әйҙә елдертеп кенә алып барам, – тип ямаҡ бисәне саҡырҙылар. Ул башта ым ына биреп ҡуйғайны ла, арба төбөнә тырма-фәләнде йәтешләп булашҡан иренә ҡарап:

– Ҡуй, ярар, – тине, баш тартты.

“Әллә ире ҡыҙғаныр тип шөб әлънә, байғош”, – Сафуан көлөм өрәне.

Ҡатын, уның уйын аңлағандай:

– Рәхмәт, ҡәйнеш, мин еҙ ағайыңа күңел еҙ була, – тип өҫтәне.

Арбаларға урынлашҡан арала Сафуандың күҙе “ҡара сутыр”ҙың балтырҙарына төштө. Ҡан тамырҙары ҡарағусҡыл күк булып ҡалҡып сыҡҡан, ҡай ы бер урында хатта ҡан ырап тора. Ҡарарға имәнес. Ҡоҙа ы, Сафуандың ҡарашын абайлап:

– Эйе, – тип баш сайҡаны. – Ә бит кемдер уны ла матурым тип ярата...

Келтер-келтер генә юлландылар. Ҡоҙа ы – алдан, Зәбихулланың аты арттан төшөп алды. Сафуан үҙенең лерт-лерт юртҡан ат арба ында сәскәле болондар аша  уңғы тапҡыр ҡасан үткәнен дә оноҡҡан икән. Ә машина тәҙрә енән донъя бөтөнләй икенсе төрлө күренә, хуш еҫе юғала.

Ҡоҙа ы урындағы тәртип еҙлектәр тура ында  өйләп бара: “Ил ҡайғы ы, халыҡ мәфәғәте тигән нәмә аслан бөттө”.

Сафуан ялт иттереп ҡарап ҡуйҙы. “Был  үҙҙәр күптән үҙ кеҫә ен ҡайғыртҡан хәйләкәрҙәр өсөн байраҡҡа әйләнде, ба алары юҡҡа сыҡты бит инде?” Унан кем арба ында ултырғанын, был төшөнсәләр изге  аналған урындар ҙа барлығын самаланы.

“Эш буйынса бара ың – бәләкәс кенә дәрәжә эйә е булғаны ла ришүәт көтөп өмөтөн  әлберәтә. Килеп ултыралар ҙа урлаша башлайҙар”.

“Әгәр ил буйынса миңә мәғлүм булғандың бары ын бел ә, нимә тиер ине икән? – тигән уй елдереп үтте Сафуандың башынан. – Әммә икенсе яғы ла бар бит, – тип эстән генә бәхәсләшеп китте. – Берҙән, юғарыла ла бик ан ат түгел”.

Был даирәлә уңыш ҡулындан эш килеү-килмәүгә генә бәйләнмәгәнен аңлаған әсә е улының, фән юлынан китмәй, етәкселеккә ынтылыуына Брежнев заманында уҡ:

– Әллә инде, балам. Түрә булыр өсөн  арыҡтар ара ында бүре, бүреләр ара ында  арыҡ була белергә кәрәк, – тип шикләнгәйне. Әсә е шуны күҙ уңынан ысҡындырған: бүреләр ара ында бүре – ҡойроҡто бот ара ына ҡыҫтырғаны түгел, тешен ыржайтырға әҙер торғаны – була белеү ҙә мө им. Йыш ҡына, урыҫса әйтмешләй, “Йә, был юлы кемгә ҡаршы дуҫлашабыҙ?” тигән хәлгә ҡала ың. Ҡорбанлыҡҡа тәғәйенләнгән ул берәүҙе йолҡҡослап ырғытҡас,  әр кем үҙ юлынан китә. Икенсе тапҡыр инде ҡорбан –  ин үҙең булыуу ихтималлығы аңында  әр саҡ ҡалтырап тора. Гелән шул хәүеф менән йәшәй ең.

Ә власть, байлыҡ, дәрәжә – үлемесле сир. Уны йоҡторҙоңмо – бөттө. Власть менән дәрәжәңде ҡасан ысҡындырыуың билдәле булмағас, исма ам, аҫтыңа бол яҫтап алып ҡалғы килә – үҙеңә, балаларыңа, ейәндәреңә етерлек итеп.

Ярай, Сафуандың был йә әттән башы ауыртмай хәҙер. Ваҡытында ҡыбырлап ҡалған. Үҙенең ыҡсым ғына бизнесын яйға  алғайны. Законлы юл менән, әлбиттә. Хәҙер шул яҡшы сәғәт кеүек текелдәп кенә эшләп тора.

“Нисек күрмәйҙәр, нисек белмәйҙәр урлашҡандарын?” – тип аптыраған була

ҡоҙа. Ниңә күрмә ендәр? Кеçәндәге тинеңә ҡәҙәр беләләр. Артыҡ хаттин ашма аң, итәк-сабыуынды йыйып йөрө әң, тейешле кешегә ярай, иң мө име, бүлешә бел әң, әлбиттә, аҙмы-күпме үҙ бурысынды атҡар аң, түрәлегеңде оҙонайта ың.

Ҡом оҙ ҡарашы менән гөлгә күмелгән болондо өҙөп барған Сафуан:

– А а, ҡоҙа, анау арына түгелме уң? – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

– Шул, – тип йөпләне ҡоҙа ы ҡәнәғәт тауыш менән. – уғыш йылдарында беҙҙе ас үлемдән ҡотҡарып алып ҡалған арына. Бик ирәк, бөтөү сигендә ине, уңғы йылдарҙа күренә башланы.

Ҡоҙа әсенеп ошо тәбиғәт ҡомартҡы ы булырлыҡ ерҙәрҙе ситтән килгән байҙарға атырға ҡырсынған түрәләр хаҡында өйләргә кереште. Битарафлығының сәбәбен зирәк ҡоҙа ы аңлап ҡуйма ын тип хафаланған Сафуан, ни айәт:

– Тормош арба ы артыҡ шәп китеп түңкәрелмә ен өсөн тәгәрмәскә таяҡ тығыусылар ҙа кәрәк, тигән фарман күктән үк ебәрелмәнеме икән, ҡоҙа? уңғы осорҙа, аптырағас, шулай тип тә уйлап ҡуйыла, – тигән булды.

Ҡоҙа ы сәгер күҙҙәрен ирпеп:

– Ул таяҡ тығыусылар үтә күбәйеп китте бит әле, – тиеү менән сикләнде. – Арбаны бөтөнләй емереп ҡуйма ындар, тип ҡурҡыла.

– Ҡурҡытыр ың ине!

Әкәмәт кеше инде ул ҡоҙа. Исеме лә бит унын есеменә тап килгән – Ғәҙелгәрәй.

Ғүмере буйы түрәләр менән борсағы бешмәне. Күҙҙәрен сығарғансы әйтә лә үҙе дөрөç анағанды эшләп тик йөрөй. Түҙәләр-түҙәләр ҙә ҡыуып сығаралар. Ул етәкселек иткәндә гөрләтеп эшләгән коллектив башта көйләнгән юл менән бара бирә лә, оҙаҡ та тормай, аҡ ай. Быны йәнә саҡырып алалар. Үҙе килә тағы. “Беткә үс итеп тунды утҡа яғып булмай инде”. Бына унын ятраҡан әйтеме. Йәнә эште яйға ала. уңғы бер нисә йыл – ауыл мәктәбендә директор. Инде нисәмә тапҡыр сығаралар ҙа, инәлеп кире саҡыралар.

– уңғы саҡырғандарында туп-тура ораным: “Йә, был юлы ниндәй мохтажлығығыҙ бар?” “Мәктәптең башын яптырырға кәрәк тә, бүленгән аҡса етерлек түгел”, – тип асығын әйтеп ултыралар. Спонсор табып, яптырҙыҡ. Инде котельныйға ремонт кәрәк. Шуға күрә әлегә тоталар. Шул арала мәктәпкә бәләкәй генә икмәк бешергес алып ҡайтып ҡорҙоҡ. Ярай ы ҙур ғына урындарҙа элекке уҡыусыларым байтаҡ бит. Шулар ярҙам итә. Умарталығыбыҙ бар, сусҡа аçрайбыҙ ҙа итен атып тотонабыҙ. Шул арҡала быйыл балаларҙы түләү еҙ ашаттыҡ, ауыр йәшәгәндәргә китап-дәфтәр, кейем- алым алырға ла етә, – тип өйләп ултырҙы ана кисә генә. Шулай булғас, илдә выжданлылар ҡалмаған, тип ис тә әйтеп булмай. Булдырам, эшләйем, тигәндәр ҙә күп. Ана, Ғәҙелгәрәйҙең үҙе кеүек.

Ихлас оҡлана Сафуан уға. Ихтирамын ҡәҙер иткән, анлаған бик ирәктәр арала ында ошо ҡоҙа ы иң беренсе тормай микән. Депутатлыҡҡа тырышып йөрөгәнендә бик көслө, бай, хая ыҙ конкуренттарын ҡоҙа ы арҡа ында йырлап тигәндәй үтте лә китте бит ул.

Ҡай ы ғына ауылға барма ындар: “Ғәҙелгәрәй димләгәс, айлайбыҙ уны”, – ти ҙә ҡуя ине халыҡ. Тик аҡлай алдымы уң Сафуан ышанысты? Ғөмүмән, уны аҡлау мөмкин түгел икәнен аңлай микән ҡоҙа ы?

Сафуан, елегенә төшкән уйҙарынан ялҡып, йәнә артҡы арбала килгән икәүгә боролдо. Зәбихулла ы бик мәрәкә икән. Балалар шикелле шарҡылдап көлөп ебәр ә, ҡушылмайынса сараң юҡ. Әле лә ямаҡ бисә енең көңгөр-ҡаңғыр ниҙер өйләүенә башын артҡа ташлап тороп көлә лә ебәрә, көлә лә ебәрә. Ә теге е нимә өйләй икән? Сафуандың да тыңлағы ы, рәхәтләнеп көлгө ө килеп китте.

Бына ир, атын туҡтата алып, эргәләге тау итәгенә атлыҡты. “Нимә тапты икән унда?” – тип ҡыҙыҡ ынған Сафуан уның шул арала бер услам ҡуҙаҡлы еләк өҙә алып, кире йүгергәнен күрҙе. Сәйер булып китте: “Әллә үҙҙәренсә яратыша инде былар ысынлап та”, – тип көлөм өрәне. Уның был ҡарашын күҙәткән Ғәҙелгәрәйҙең иреннә иҙелер- иҙелмәҫ йылмайыу ҡунды. “Яратышыу әллә ҡыҫҡа итәкле, ҡыҙыл тырнаҡлы дорфа секретаршалар менән “мин дә мин – Мөхәммәтәмин” тип кәперәйгән йыуан ҡор аҡлы түрәләр ара ында ғына була тиеңме?” – тигәнде аңлатманымы икән был мут йылмайыу...

Бесәнлеге ифрат матур урында икән ҡоҙаның. Ашантыны, кәрәк-яраҡты бушатҡан арала уҡ Сафуан ни өсөн ҡоҙаның балалары был икәүгә: “ еҙ юҡта яландың йәме буламы ни ул?” – тип сурыҡтандарының сәбәбенә төшөндө. Зәбихулла-ы балыҡҡа әүәҫ. Тәбиғәткә ыу аған ҡала халҡы уның тирә енә өймәкләшкән. Арба төбөнән йәтеш кенә мурҙа кеүек нәмә ен килтереп сығарҙы. Эргәләге тап-таҙа йылғаға күр әтеп нимәлер өйрәтә. Үҙе килеп тороп мәрәкәсел, йор үҙле, шарылдаҡ.

Сәмиғә е шым, бөтмөр. Килеп төшөү менән бөтөн ризыҡты йәтеш итеп урынлаштырҙы. өтөн-майын – яҡындағы шишмәгә, итте сая алып – ҡаҙанға, икмәкмаҙарҙы – сысҡан тейә алмаҫтай үргә. Тауыш та күтәрмәй, тыңлата ла беләә.

– Еңгә, иңә армияға баш командующий булырға кәрәк, – тип шаярталар.

“Эйе, ниндәй әләтле менеджер әрәм булып йөрөй тиҙәк ара ында”, – тип уйларға мәжбүр булды Сафуан да.

Үҙе кешенең тын алышынан уҡ хәл-әхүәлен, уй-елеген абайлай, ахыры. Ғәҙелгәрәйгә дегәнәк япрағы өҙә алып ондо:

– Ағай, фуражкаңдың эсенә алып кей, башыңдың ауыртҡаны баҫылыр.

Үҙе эшкә анамайыраҡ ҡараған был “байғош”тарҙың ҡапылғара дилбегәне ҡулға алыуҙары әр ваҡыт иғтибар үҙәгендә булыуға өйрәнгән Сафуандың зитына тейә яҙып ҡалды-ҡалыуын да: “Ярар, был уларҙың донъя ы”, – тип риза ыҙлығын тыйҙы.

Ул арала Сәмиғә ҡыйын ынғандай торған Сафуанға:

– Анау түмәләстә еләк тумарлап ята, ағай. Аҡтауҙың ыйынан ауыҙ итегеҙ, – тип ҡуйҙы. – Ейәнсәрегеҙгә күстәнәс ти әгеҙ, бына йәтеш кенә тырыз да бар.

Ни айәт, сабынға төшөргә йыйындылар. Сафуан үҙенә оҙон аплы, елле бер салғы эләктермәксе ине, әлеге лә баяғы күрмәгәне юҡ Сәмиғә икенсе бер еңел генә ен тотторҙо:

– Ошоно он алығыҙ, ағай, уны ының тотҡа ы уңай ыҙ.

Саба торған урын – өҙәк кенә тау итәге. Теҙелешеп төшөп киттеләр. Сафуан да ҡалышманы.

Алдындағы сәскә келәменә хайран булып, бындайын да матурлыҡҡа ҡул күтәрергә ҡыймай ҡарап торҙо бер аҙ. Унан тәүәккәлләне. Өйөрөлтөп елтәп ебәреүгә, хуш еҫле сәскә көлтә е, ҡаршылдап, аяҡ аҫтына түшәлде.

Салғының да сәс бәке е кеүек үткере эләккән, көс-ҡеүәт тә бар икән үҙендә. Инде артыҡ уйланып торманы, еңел генә өйрөлтә сабып алды ла китте. Тән бер белгән өнәрҙе ис онотмай икән. Тол ҡалған әсәйгә быуыны ҡатмаҫ борон уҡ таяныс булып салғы тотҡан малай бит ул. Тәүге бер-ике бакуй ҡыҫҡа булған икән. Тора-бара эштең уйын түгеллеген иҙҙертә башланы йыл әйләнә енә ҡәләмдән ауыр нәмә күтәрергә тура килмәгән Сафуанға.

Йәштәр йылғыр:

– Ағай, үксәңде абайла, – тип уҙалар ҙа китәләр.

Был бакуйы сама ыҙ оҙон, ахыры юҡ кеүек тойолдо Сафуанға. Маңлайынан шауҙырлап аҡкан ҡара тир күҙен әсеттерә, шуны ыпырып алыу ҡайғы ы ла юҡ. Ҡолағы шаулап, күҙе тона башла а ла, бирешкәнен күр әтмәҫкә тырышып ятыуы. Ә башында бер уй үрмәксе ауына эләккән себен кеүек тыпырсына: нисек тә осҡа барып сығырға, ошонда өрләгөп ҡапланмаҫҡа.

Ярай әле, иң артта өйрәлмәй. Унан бер нисә аҙымда Сәмиғә, әлмәк кенә елтәнеп, ҡыршылдығын сыға. Ҡабаланмай, тора-бара ла туҡтап салғы ын яный. Эйелеп еләк тә ҡабыштыра, буғай. Арттан беренсе булмағаны Сафуанға саҡ ҡына бул а ла көс өҫтәне. Ул да йәнтәслим ашыҡмай башланы. Дөрөп алып барған йәштәр ҙә, ана, күләгәгә ултырып тәмәке көйрәтә, рәхмәт яуғырҙары.

Салғы үткерләү ылтауы менән аҙыраҡ хәл алырға ла була икән. Ә шулай ҙа, арығас, сабыуының рәте китеңкерәне. Тәүҙә алдын таҡыр итеп ҡыра тарт а, әле ере малайҙарҙың үтмәҫ ҡайсы менән мөнтәлгән башы кеүек: унда ла, бында ла тырпайып ҡала.

Үпкә е үңәсенә тығыл а тығылды, Сафуан бакуйы осона барып сыҡты. Хатта ергә ҡапланмаҫҡа ла ихтыяр тапты. ыр бирмәгәненә өйөндө. Ә Сәмиғә байтаҡ артта ҡалған. “Арыйҙыр ҙа инде”.

Айранлы сәйгүндән тамаҡ сылатып, аңды-тоңдо абайлабыраҡ хәл алғас, үткән юлына тағы бер ҡарағайны, ҡапыл бөтә ен дә аңланы ир аҫылы.

Сәмиғә та ылы юҡлыҡтан түгел, Сафуандың хәлен аңлап, сәмен аяғанға артта килә. Етмә ә, башта үҙ рәтен самаламай үтә киң елтәнгән Сафуан, арығас ҡоласын тарайта барған. Әле Сәмиғә бер үҙе ике кешелек араны өйөрөлдөрөп ҡырырға мәжбүр. Хатта, ана, Сафуан артынан, унын булдыҡ ыҙлығынан көлгәндәй, үрә ҡатып ҡалған үләндәр ҙә ауған.

Бына ҡатын, бакуйҙың осона сығып еткәс, туҡтап маңлай тирен өрттө лә, күҙҙәре Сафуандың ҡарашы менән осрашты. Унын, ғәфү үтенгәндәй, тыйнаҡ ҡына йылмайыуынан түрәнең йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Көтмәгәндә күргән ярҙам өсөн рәхмәт инеме был?

Ә тотанаҡлы йылмайыуы, аҡыллы ҡарашы, ни ғәжәп, уғата өйкөмлө күренде. Сафуандың күптән инде бер кемдең дә күҙенә шул рәүешле ҡарағаны юҡ ине, ҡара ында емелдәгән ипкел кеүек таптарына тиклем абайланы.

Ул арала ҡаҙан эргә енә саҡырып тимер зыңҡылдаттылар.

Төшкө аштан уң – ә ҡымыҙ ысынлап та быуынды ала икән – Сафуанды рәхәт кенә итеп йоҡо баҫты. Бармаҡ ҡыбырлатырлыҡ та хәле ҡалмауынан ләззәтләнеп – “нирвана” ти торғайны бындай нәмәнең рәтен белгән бер өйәркә е – ҡайын күләгә ендә ойоп китте. Йоҡо аралаш эргә ендә тырма теше рәтләгән ҡоҙа ының рәхәт ҡыштырлауын тойҙо.

Ҡатынының бөгөн нишләптер кешенән артта ҡалыуын салғы ы үтмәүенә юрап, үҙен ғәйепле анаған Зәбихулла бөтә салғыларҙы ла тапарға булып киткән, зыңғылдауы әллә ниндәй ҡәҙерле хәтирәләргә өйрәй. Йәштәр йылға буйында сырҡылдаша. Ҡолағына ҡатындарҙың мөңгөр-мөңгөр генә өйләшкәне салынды:

– Айсыуаҡтың ҡайтҡанын көтәбеҙ инде, – тип өйләй Сәмиғә балалары хаҡында орашҡан Мәстүрәгә. – Бер көн телефондан өйләшеп алдыҡ. Ҡалырға өгөтләйҙәр икән.“Эргәмдә командирым баҫып тора. Нимә эшләйем икән, әсәй?” – ти.

Ағайың Чечнянан урап ҡайтҡансы тешләнеп йөрөп ауыҙымда тешем ҡалманы. инән хат көтөп күҙем сыға яҙҙы, тинем. Диңгеҙ төбөнә төшөп китәләр ҙә, ярышар йыллап хаты килмәй. Үҙәккә генә үтте бит. Берәй эш табылыр, ҡайт, балам, тинем. Тыңланы, рәхмәт яуғыры.

— Улдарығыҙ үҙегеҙгә оҡшап унған, аҡыллы, еңгә. Әрәм булмаҫтар, — тип йыуатты Мәстүрә.

— Хәҙер бына Айнур менән Илнур китергә тора инде. Үҙем барҙым хәрби комиссариатҡа. Айыр ағыҙ, риза түгелмен, тигәйнем. Юҡ, игеҙәктәрҙе айырмаҫҡа тигән закон бар, тип торалар. Икәү булғас, бик ҡыйынға төшмәҫ әле, тип йыуанған булабыҙ.

“Күпме ғәм, хәстәрлек бер башына”. Сафуан табын артында ла Сәмиғәнең бары ын да ҡарап, йә теге, йә был ризыҡты ҡул уҙымына шылдырып ултырғанын күҙ алдына килтерҙе.

“Ниңә бөтөн ил хәстәрен бер Сәмиғә йөкмәргә тейеш? Бына еҙ эшкә ашмай, алдаттан ҡасып ятҡан улдарығыҙға ҙур-ҙур коттедждар ала ығыҙ. Нишләп Сәмиғә еҙҙекеләр өсөн дә хеҙмәт итеп, Ватан алдындағы бурысын намыҫ менән үтәп ҡайтҡан улдарына үңәсе өҙөлөрҙәй булып үҙе өй алырға мәжбүр? Ҡайҙа ғәҙеллек? Сәмиғәнең дә был донъяла аҙыраҡ рәхәт күрергә хаҡы юҡмы ни?” Сафуан трибунаға йоҙроғо менән асырғанып уҡкайны, тирә-яҡ гөр өлдәп китте. Ә залда ултырған ҡалын-ҡалын ирҙәр, бер-бере енә ҡарашып:

— Кем ул Сәмиғә? Ҡайҙа ул Сәмиғә? — тип аптыраша.

Бейек мөнбәр артына баҫып Сәмиғәнең мәнфәғәтен яҡларға йөрьәт итеүенән бигерәк, был хәстәрҙең йәнә күңел талабына әүрелеүенә йөрәк енгән Сафуандың сикә ен еүешләтеп күҙ йәштәре туҡтау ыҙ аға, имеш.

Уянып кит ә, баш осондағы киҫәк кенә болоттан ямғыр яуа. Хатта күк күкрәп маташа. Ҡояш балҡып торғанда йәшен дө өрләгәнгә ғәжәпләнеп, был донъяға яңы тыуғандай, ҡымшанмай ята бирҙе Сафуан. Эре тамсыларҙың йәйғорҙоң бөтөн төҫтәрендә йылҡылдап өйөрөлә-өйөрөлә төшөүе әллә ҡайҙан, бейектән үк күренә.

Сафуанға элек тә бында булғаны бар кеүек тойолдо. Бынау аҡ ҡайындың анау ботағындағы суҡ тәлгәштә тирбәлгән семәрле япраҡ уға таныш бит. Ул ошоларҙың бары ын да күргәйне, бына был ҡоштоң андуғасҡа оҡшатып сутылдатып айрағанын, күгәүенең жыуылдап осоп йөрөгәнен — элек тә ишеткәйне. Ҡолағына салынған, күҙҙәренә ташланған — зи ене теркәп тә ҡуйған. Әммә элек ул был матурлыҡтан тышта ҡалған. Әле Сафуан, ни ғиллә менәндер, уларҙың бер өлөшөнә әйләнгән: анау үләндең йөнтәҫ япрағында дерелдәгән ынйыла, мө абәт ағастарҙа, зәңгәр күктә мәғрур талпынып яй ғына осоп йөрөгән ыласында ул да бар. Ул — йы анда, йы ан — унда...

Уҙаман, төшөм дауам итәме әллә тигәндәй, аҡ ҡына ҡалҡынды, тирә-яғына күҙ алды. Шул саҡ тормоштоң ҡабат үҙенә килеп ҡунғанын айырым асыҡ тойҙо. Тотош йәшәйеш, ғаләм ҡабат килеп тулған да улҡылдап ҡан тамырҙары буйлап тарала.

Бына инде бер ыу ын сабып өлгөргән бесәнселәр, салғыларын яурындарына алып, еүеш үләнде яра-яра, күтәренке кәйеф менән был яҡҡа ыңғайлай. Төш түгел, өн бары ы ла. Ул уяу, ә был еҫ аңҡытҡан тылсым юғалмаған. Ҡапыл Сафуан шуны аңланы: матур донъяла Зәбихулла менән Сәмиғәләрҙең ихлас көлөүе яңғырап тор а, был мөғжизә бер ҡасан да юғалмаясаҡ.



**Зөбәржәт**
**ЙӘНБИРҘИНА**

# ХИРУРГ

**ХИКӘЙӘ**

Ейәнсәренең йыназа ында Ғәйникамал илай алманы. Күҙҙәре йәштән түгел, ут көлтә енән янған кеүек әсенде. А ! Аунап ятып түгелеп иларға ине лә ошо минутта, юҡ шул! Йыназа уҡырға тип, ғәм халыҡ теҙелгән. Тәкбир әйттеләр. Мулла уҡынып бөтөү менән тә лил өләшелде. Ғәйникамал аман нигеҙ буйында өн өҙүҙ еҙ баҫып тик тора.

...Иҫенә “полуторка” башында аяҡ өҫтө баҫҡан килеш ауылына ҡайтып ингән сағы килеп төштө. Эйе, эйе, көн бөгөнгөләй эҫе ине. Елеп барған әрйәле машинала, кабина башына тотоноп, ул алға уҡталғайны. Ике күҙен көслө эҫе ел ҡырҡа. Анда- анда уң ҡулы менән күҙҙәренә эркелгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ күҙ йәштәрен ыпыра. Шунда уҡ тағы яңынан йәш эркелеүҙән күҙҙәре әрней. Йөрәгенә әлеге хәлендәге кеүек үк оло төйөр — хәсрәт төйөрө уҡмашҡан...

Ул саҡта ла уның йөрәге бала тип өҙөлөп ҡайтып килә ине. Бөгөнгө кеүек йәйҙең иң матур мәле булғанға, донъя күпереп йәшеллеккә төрөнгән. Сәскәләрҙән хушбуй, бал еҫтәре генә аңҡый. Ғәйникамалдың срок алыуына алты ай үткәйне. Ул төрмәлә лә уңғанлығы, оҫоллолоғо, илгәҙәклелеге менән тиҙ арала абруй яулай алды. Шуғалыр ҙа инде бер уны ял көнө менән бүләкләнеләр. Командир хужаларынан бик үтенгәс, игеҙ йәшлек ҡыҙын күрергә тип, сираттағы ял көнөнә “бүләк” ялын ҡушып, ике көнгә ҡайтып барыуы. Үҙенең паегынан бүлештереп йыйған арлы-бирле тәм-томдарын, икмәк киҫәктәрен төрмә биргән косынка ына төйнәп тотҡан. Кис менән өйләшеп ҡуйған машина Әптек төрмә енән Стәрлетамаҡка ғына килде. Улай ҙа әле шофер кеше Ғәйникамалды, йә кире ҡайтып өлгөрә алмаҫ ың, тип йәлләп, үҙҙәренә китә торған юлға сығарып уҡ ҡуйҙы. Уны-ы өсөн дә уға ҙур рәхмәт. Ғәйникамал ауыл яғына ҡарай атланы ла атланы — 40 саҡрым...

Күберәген атламаны, йүгерҙе. Ауылға килеп кергәндә көтөү килгәйне, ҡыҙын, Зәйтүнгөлөн, урамда күреп ҡалды ла тәндәре эҫеле- ыуыҡлы булып китте, быуындары йомшарҙы:

— Ана минең бөртөгөм, берҙән-берем, ғәзизем! — тип амаҡлап илап ебәргәйне.

Әсә ен күргән Зәйтүнгөл дә, бер аҙ уҡталып ҡарап торғас, йүгереп барып әсә ен

ҡосаҡланы. Шул тиклем йәненә рәхәтлек йүгереүҙән тубыҡ быуындары өҙөлгән кеүек булды ла, икәүләп күпереп үҫкән бесәй үләненә ҡоланылар. Хәт еҙ генә, бик оҙаҡ йылы ергә ятып торҙолар. Күстәнәсен ҡыҙына тотторҙо ла тәмле итеп ашағанына ихлас итеп ҡарап ултырып кинәнде. Өйҙәренә кергәс әсә е, ата ы менән күреште, хәл-әхүәл орашып бер самауыр сәй эскәс, тағы сәй яңыртып, таң беленгәнсе өйләштеләр. Икенсе көндө, оло юл үткән аяҡтары шешмәкләнеп тор а ла, кире юлға сыҡты.

Оҙон юл. Стәрле йылға ын аша сыҡҡанда геүләгән аяҡтарын сайҡағайны. Эх, йәшлек! Ул саҡта нисәмә-нисә саҡрымды йәйәү үтте ҡыҙын-бөртөгөн күрер өсөн!!! Ауылдаштары “ах” итеп ҡалдылар кире юлға сығып киткән Ғәйникамал артынан. Улар, Ғәйникамалдың төрмәгә эләгеүендә үҙҙәренең дә ғәйебе булғанлыҡтан, судта яҡлап ҡала алмағандарына үкенешеп, бик оҙаҡ ҡапҡа төптәрендә, өйҙәрҙә гәпләштеләр.

— Кем суд туп а ын күргән? Йүнләп өйләй ҙә белмәнек бит, — тип үкенештеләр.

— Шулай ҙа дөрөҫләмәй, ныҡ тор аҡ, бәлки, ете йылға уҡ япмаҫтар ине.

Ғәйнекәйҙе әр бере е яратып, яҡын итеп, унын яҡшы кеше булыуына оҡланып бәйән ҡорҙолар.

— Үҙе, бахыр, ере бит әле, зарланманы ла. Шул ғорур килеш ауыл осона тиклем етәкләп барған ҡыҙын ығып-ҡосаҡлап, биттәренән алмаш-тилмәш үпте лә, ҡаҡҡан бағана кеүек ҡатып тороп ҡалған бала ына бер ҙә әйләнеп ҡарамай, шәпшәп атлап китеп барҙы, — тине Әминә.

— Ҡуй инде, ҡуй! — тиеште Хәтирә менән Мәхмүҙә.

—Әйләнеп ҡарарға ярамай, тигән йола буйынса боролоп баҡмағандыр инде.

—Боролоп ҡара а, кире ҡайтмай, имеш, Зәйтүнгөлө, бала бул а ла, шуны аңлап сабыр ғына тороп ҡалды әллә?

—Я ил, Гөлбоҫтандың ғына эше булды. Мир әтәсе — Ғәбделхәйҙе үҙенеке итер өсөн генә яҙған, ти бит, жалыуҙы судҡа.

—Эйе, буғым, Ғәбделхәй шул Гөлбоҫтанды ала буламы!? — Әминә лә яр ып-яр -ып Гөлбоҫтанды үкте.

— Үҙе генә бит өс тапҡыр Ғәйникамал әхирәткә барып ауырынан ҡотолған кеше. Бәдбәхет! Кит, нисә өйлә аң дә бер хәбәр.

уғыштан унғы заманда Ғәбделхәйҙәр бик күп “вдауалар”ҙың ҡанын эскәндәре тура ында ла ҡыҙыу-ҡыҙыу үҙ барҙы.

— Ғәбделхәй бөтә кешегә лә яратам-алам тигәндер. Хи-хи-хи! Шулай тимә ә, беҙ, бисәләр, ирҙәргә ҡарайбыҙмы ни! Беребеҙ — ҡыуып сығара, икенсебеҙ ихлас күңелдән ҡабул итә. Аҙғын ир шунан ҡотора ул! — Был — Ғәбделхәйҙең айырған бисә е Бәҙерниса ине.

— Әйтерең бармы! Гөлбоҫтандың ауырын алғанын бер кемгә лә өйләмәне лә Ғәйнекәй. Был эштең абруй бәкәленә ныҡ уҡҡанын яҡшы аңлайҙыр.

— Ғәйнекәй сер андығы ине шул ул. Гөлбоҫтан, теле ауыҙына ыймай, үҙен-үҙе өйләп сығарҙы.

— Ҡуй инде...

Был ваҡытта Ғәйникамал Стәрлетамаҡ төрмә ен үтеп китеп бара ине. Берсә ул Стәрле төрмә ендәге тотҡондарҙан көнләшеп тә ҡуйҙы. Эх, ошонда ғына бул а икән дә бит Әптек төрмә е. Ә бит Ғәйникамалға тағы егерме биш саҡрым атлай ы бар. Йылы ил төндә ике ҡулын елтәп бара ы ла бара ы ине әле уға. Әптек төрмә ен оҙаҡ итеп уйлап барҙы ул. Ҡайҙа, ҡара урман төпкөлөнә алғандар. Шулай булмай, урыны ла бик шәп, тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан. Бөтә ҡатын-

ҡыҙ ыйыр ауа. Бындағы фермалар беҙҙең колхоз ферма ы ише генәме, ул ҙурлығы менән, малдар аны менән дә күләмле ине. Бер нисә рәт булып урынлашҡан арайҙар теҙмә е, ә урман аша полигон бар, тиҙәр. Ирҙәр ятағы ла ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡынан бер-ике саҡрым арыраҡ төҙөлгән. Улар полигонда эшләйҙәр. Ер аҫты ҡыуышына кереп киткән дәү машиналарҙы ғына күреп ҡала ың, ә эс яғында ни булғанлығын бер кем белмәй, белгән ир-аттар был турала ләм-мим өйләмәйҙәр ҙә. Шулай ҙа Ғәйникамал ун биш минутҡа уңлап килеп ауҙы ятағына. Надзиратель шунда уҡ хәбәр алды:

– Юғалған заключенная Хабированы таптыҡ!

– Ә?.. Яҡшы, яҡшы, – тип тамаҡ төбөн ҡырҙылар сымдың теге осонда. Барыбер надзиратель Ғәйникамалды айырым бүлмәгә япты. Шулай итеп, Ғәйникамал бөртөгөн, ҡыҙын күрәм тип ҡайтып, ун биш минутҡа уңлаған өсөн үҙенә тағы ла йыл ярым срок өҫтәткәйне.

– Хоҙайым, мин сыҡҡансы ҡыҙыма ун биш йәш була ла а! – тигәнен хәтерләп, ейәнсәре Нурзиләне инде башҡа бер ҡасан да күрә алмаясағын аңлап, тейәп ятҡан табутҡа барып йәбешкәс кенә, әсе итеп ҡысҡырып илап ебәрә алды.

– Балам! Балаҡайғынам! Ниңә генә я аттың икән ул абортты!? Бынау тиклем уҡымышлы заманда ошо көндө күрергә яҙған икән, ила ым! Ҡай ы белем еҙе әләк итте балаҡайымды? Мин наҙан көйө бөтә тирә-йүнгә аборт я аным, әммә минең ҡулдан бер бисә лә үлмәне. Ул ваҡытта... кешеләрем үлмәгән өсөн ултырттылар микән ни мине төрмәгә?! Баламдың бала ын үлтереү етмәгән, әсә ен дә үлтергәндәр!!! Балаҡайым, балам! – Ғәйникамалды ҡыҙы Зәйтүнгөл, тағы әллә кемдәр тота алып алды. Табутты йә әтләп машинаға тейәгәс, машина ҡуҙғалып китте, артынан дәррәү булып кешеләр ҡуҙғалышты. Шулай итеп, Ғәйникамал иҫенә килгәндә уға укол алып, нашатыр еңдерелгән мамыҡ еҫкәтеп маташа ине бере е. Бөтә ен дә ул ҡулы менән этәреп, аяғүрә баҫты Ғәйникамал. Бар көсөнә ауыр итеп уфтанғандан уң, өн өҙ- үҙ еҙ, яйлап ҡына зыяратҡа ҡарай атланы. Ашыҡманы. Үҙ яйына ғына барҙы. Атлағанда тағы төрмә юлынан китеп барған кеүек хис итте үҙен. “Ах, ул ваҡытта ҡайтты бит ул, ҡайтты. Яҙ көнө ине. Сталиндың указы менән амнистияға эләкте бәхетенән, йылдан артыҡ ҡына ултырҙы ул. Ултырҙы тип, әллә ни эшләтмәнеләр уларҙы. Иртәнге ҡара таңдан ыйыр ауҙылар ғына, шул уҡ үҙ ауылында колхозға ауған кеүек. Ашау-эсеү мул, кейем- алым матур, аҡ халаттар, аҡ косынка-яулыҡтар, бөтөн силғау менән аяҡтарын урап, яҡшы итек кейеп эшләнеләр. Тик ирек кенә, кеше затына иң ҡәҙерле нәмә – ирек кенә юҡ ине! Иркендән мәхрүм ителгәс, ин хет алтын-көмөштә йөҙ, хет ожмах емеше ашап йәшә – күңел китек, рух ыныҡ! Ул саҡта бөртөгөн ҡайтып ҡоса алды, ә ейәнсәрен ун йылдан уң да күрә алмаясаҡ. А !!! Я, Алла ! А , дариға!”

Зыяратҡа барып кергәндә, халыҡ мәрхүмәне ерләп, ҡайтыу юлына сыҡҡайны. Ғәйникамал бер кемгә лә ҡарамай килеп, өйөлгән ҡәбер тупрағын ҡосаҡлап ауҙы. Гүр алҡыны янған йөрәгенең ипкенен баҫыр кеүек ине уға. Аҙаҡ бик оҙаҡ ейәнсәре менән өйләште. Нәҡ теге төрмәнән ҡайтып кергәндәге кеүек. Ул саҡта Зәйтүнгөлө тере, әле Нурзилә ейәнсәре үле килеш тере кеүек күреп өйләнде лә өйләнде.

– Бәпкәм, ник ул баланың йәнен өҙөргә булдың? Үҙ ризығы менән тыуа бит әр бала донъяға. Үҫер, кеше булыр ине әле. Ниҙән ҡурҡтың, балам? Был тормоштан ҡурҡтыңмы? Әллә хурландыңмы? Тормош ул, балам, шул тиклем ауыр, ҡурҡыныс ымаҡ бул а ла, ис улай түгел бит ул, тормош шул тиклем матур. Хоҙай үҙе бер еңеллеген бирер ине әле. Ниңә өләсәйеңә – миңә килмәнең икән? Мин

ғүмер буйы үкендем... утыҙ ете баланың ғүмерен өҙгәнемә. Ул заманда уғыш йылдары, ауыр заман ине. Ир еҙ бала табыу оят аналды. Кешеләрҙе хурлыҡтан ҡотҡарам икән, тип уйланым бит мин, иҫәр өләсәйең. инең заманың бит улай ҡот оҙ түгел. инең заманында бала табыу мәртәбә генә! Ана, хөкүмәт үҙе нисек яҡлай е-ҙҙе. Ниҙән ҡурҡтың, бәпкәм? Егетең алмаҫ, тип ҡурҡтыңмы? Ғәрләнденме икән?! А , шул ҡоро намыҫ! Ерле бушҡа ниңә намыҫландың икән, бәпкәм?! Беҙҙе терелəй ҡәбергә күмдең бит, балаҡайым!

Ғәйникамалдың күҙ йәштәре ала ыу ғына итеп аҡты ла аҡты. Бер аҙҙан ниндәйҙер фекергә килеп:

–Мин үлергә тейеш инем бит инән алда. Ниңә ашыҡтың? Мин оҙағыраҡ йәшәп ташланым, ахыры, – тип үҙен ғәйепләне Ғәйнекәй. – Ни эшләй ең, Хоҙайҙың ҡушҡаны шулдыр. Уның эшенә тығылып булмай. Я, Алла! Шул тиклем ғүмерҙе миңә биргәнсе, балама биргән бул аңсы?!! – Ғәйникамал бер аҙ өйләнеп ултырғандан уң доға уҡырға күсеп китте. Байтаҡ ҡына доға уҡығандан уң амин тотто ла ятҡан, ултырған урындарының тупрағын ҡулдары менән тигеҙләп, ҡайтыр юлға боролдо. Юлда тағы уйҙары, ни эшләптер, суд барған мәлгә килеп юлыҡты. Судья, бик етди итеп, Ғәйникамалға:

– Нисә аборт эшләнең? – тип орау бирҙе.

– Утыҙ ете, ваша светлость, – тине ғәйепләнеүсе яуап итеп.

– Үәт, хирург! – тип ҡыҫҡырып ебәргәне иҫенә төштө хөкөмдарҙың.

Ысынлап та хирург булған икән шул!

Бер ҡатын-ҡыҙы, үлеү түгел, сирләмәне лә Ғәйникамалдан ул саҡта. Ә ниндәй заман ине: дарыу юҡ, больница юҡ! Ғәйникамал үҙенең “сирлеләр”ен өйөндә үҙе йыйған төрлө үләндәр менән дауалай ине. Тик бына утыҙ ете сабыйҙың өҙөлгән ғүмерен уйла аң... Ул ваҡытта Ғәйникамал төрмә срогын ысын яза тип ҡабул иткәйне. Ә ысын яза ы ул булмаған икән, тип уйланы әле. Әптек төрмә е уның өсөн башҡа балаларҙың ғүмерен өҙөүҙән туҡтатып торор өсөн генә Алла тарафынан ебәрелгән урын булған. Ысын яза ын ул бөгөн алды түгелме?! А , шулай, шулай! Ысын яза ын Хоҙай үҙе бирә икән дә бәндә енә. Срок алыу, төрмәгә бикләнеү – ул әллә ни яза ла булмаған кеүек хәҙер. “Ысынтылап уйла аң, гона шомлоғо эшләгәнмен бит!” – тип үткән ғүмерен уйлап, күктәргә бағып, ҡә ет итеп атланы Ғәйникамал. Өйөнә етәрәк, башы әйләнеүҙән туҡтап ҡалды. Өй мөйөшөндәге ике-өс ҡолас етмәгән өйәңке енең ҡороғанын әле яңы абайланы ул. Яҙын шуның япраҡ ярмағанын да күрмәгән! Теге утыҙ ете баланың ҡан- үлен, үҙҙәрен ошо өйәңке төбө аҡлай ине бит. “Ҡара әле...” – тип ҡат-ҡат ҡабатлап өйләнде. Гона шомлоғомо был! Ғәйникамал ҡапыл сайҡалып китте. Йөрәге туланы. Ул уйы менән ашығыуҙан өрлөгөп, абына-атлай килеп, ғүмер буйы серҙәре ыйған, хатта үҙ әсәләре лә белмәгән утыҙ ете баланың зыяраты булған өйәңке енең төбөнә килеп теҙләнде. Тәрән яра кеүек ҡытыршыланған ҡайыры-ҡабыҡтарынан ыйпаны. Бер кемде лә күрмәҫ халәттә Ғәйникамал:

–Хоҙай теүәлләй икән дә! Хоҙай теүәлләй икән... Кисер мине... Кисер... А , дариғам! – тип амаҡланы.

Ғәжәп күренеш! Өйәңке Ғәйникамалға яуап бирерлек, ә Ғәйникамал унан яуап алырлыҡ хәлдә түгел ине...

# “ДУҪЫМ, ИҢӘ ҠАЛДЫРЫП МИН КИТӘМ...”

*Дағстан – көрәшселәр әм шағирҙар иле. Төньяҡ Кавказдағы был республиканың мыҡты көрәшселәре элекке СССР, бөгөнгө Рәсәй йыйылма команда ы составында Европа, донъя беренселектәрендә, Олимпия уйындарында еҥ ә, шағирҙары әүәл-әүәлдән Кавказда ғына түгел, шулай уҡ элекке СССР, бөгөнгө Рәсәй, хатта донъя кимәлендә билдәлелек яулаған. Дағстандың халыҡ шағирҙары Сөләймән Стальский, Эффенди Капиев, Ғамзат Цадаса, Фазу Алиева әм, әлбиттә, бөйөк замандашыбыҙ Рәсүл Ғамзатов исемдәре әҙәбиәт өйөүселәргә яҡшы таныш. Үҙ ижадтары менән улар бары ы ла тауҙар илен, үҙ халҡын данланы, Дағстан бәҫен, исемен арттырҙы.*

*Магомед Ахмедов – бөгөн ошо данлы исемлекте лайыҡлы дауам итеүсе сағыштырмаса йәшерәк быуын шағиры. Беҙ уның менән Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында бергә уҡыныҡ. Студент сағында уҡ етди булды, тырышып шөғөлләнде, күп яҙҙы, Кавказ тарихын, яҡташ шәхестәрҙе, үҙ милләтенең ғөрөф-ғәҙәттәрен, традицияларын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен яҡшы белеүе менән айырылып торҙо. Кавказса ғорур ҙа, үҙ үҙле лә, үҙ фекерен аҙаҡҡаса яҡлай алыусы ла ине ул. Шуны ын да яҡшы беләм: Рәсүл Ғамзатов ижадын яратты, уларҙы юғары шиғриәт өлгө ө тип иҫәпләне, әҙиптең үҙҙәрендә, Мәскәүҙә нәшер ителгән барса китаптарын йыя барҙы. әм Әҙәбиәт институтына нәҡ уның ярҙамында килеп инеүен дә йәшермәй торғайны. Хәйер, ул осорҙа Дағстандан байтаҡ егеттәр уҡыны, уларҙың бары ына ла бөйөк шағирҙың ярҙамы теймәй ҡалмағандыр...*

*Илле ике йыл Дағстандың Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе вазифа ында эшләгән Рәсүл Ғамзатов 2003 йылда етәкселек дилбегә ен тап Магомед Ахмедов ҡулына тапшырҙы. Тимәк, йәш ҡәләмдәшенең шағир булыуына ла, етәкселек итә алыу ма ирлығына ла ышанған. Ә Рәсүл Ғамзатов ише бөйөк шәхестең өмөтышанысын аҡлау, ай- ай, үҙе үк күп нәмә хаҡында өйләй! Шунан бирле Магомед Ахмедов республиканың иң күп анлы ижади ойошма ына етәкселек итә. Хәҙер ул үҙе билдәле әҙип, Дағстандың халыҡ шағиры, абруйлы уҙаман. Күп йөрөй, киң яурынына бай-*

*таҡ яуаплы йөк алған, үҙ республикаында ғына түгел, үҙәк матбуғатта ла шиғырҙары баҫыла, китаптары сыға, тауҙар төйәгенең тулы хоҡуҡлы вәкиле булараҡ юғары кимәлдәге осрашыуҙарҙа, съездарҙа, конференцияларҙа ҡатнаша әм сығыш яай, шул рәүешле бөйөк остазының эшен дауам итә, Дағстандың данын ишәйтә. Уның замандаштары, замандаштарының уй-кисерештәре, өмөт-хыялдары, ир-егет батырлығы, ҡатын-ҡыҙ матурлығы, саф мөхәббәт, бәләкәй әм ҙур иленең тәбиғәте тураында яҙған шиғырҙары әр дағстанлы, республикала йәшәгән төрлө милләт кешеләре күңелендә күптән инде үҙ урынын тапҡан. Ул тау битләүендә мал көтөүсе, ауыр шарттарҙа иген игеүсе крәҫтиән ҡулына, халыҡтар дуҫлығына дан йырлай, милләт-ара дошманлашыуҙы ҡә әрләй. Уның шиғриәте нигеҙендә — тарих әм бөгөнгө, бөгөнгөбөҙ әм киләсәк.*

*Эйе, әҙиптең талантлы шиғырҙарын “Ағиҙел” уҡыусыларына ла тәҡдим иткем килә — бергә уҡыған иптәшемдең ижады быға лайыҡ. Рәсүл Ғамзатовтың уға арналған шиғырын да килтереү хәйерле булыр. Уны башҡортсаға Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Хәсән Назар ауҙарҙы. Был факт үҙе генә лә быуындар бәйләнеше, башҡорт әм дағстандар шиғриәте бөйөклөгө, республикалар дуҫлығы хаҡында асыҡ өйләй түгелме? Кем нисектер, ә минең был фактты тап шуға юрағым килә.*

**Әмир ӘМИНЕВ.**

---

**Рәсүл ҒАМЗАТОВ,**
**Дағстандың халыҡ шағиры**

## *Магомед Ахмедовка — йәш дуҫыма*

*Дуҫым, иңә ҡалдырып мин китәм*
*Бар биттәре таҙа йыр китабын.*
*Өмөттәрем унда, ышаныстар*
*Бойомға, тим, аш ын, ҡороп табын.*

*Бурыстарым тулы андыҡ иңә,*
*Хирес булды уға кредитсылар.*
*Түләгәндә, беләм, баҡыр түгел,*
*Йырҙарыңдың алтындары сыңлар.*

*Ҡалыр уңғы мөхәббәтем, ул бит —*
*Затлыларҙан-затлы ынйы-гәү әр.*
*Йәшерҙем мин уны ҡайҙарҙа уң?*
*Ҡабат тыуыр инем, бел әм әгәр.*
*иңә мин, Магомед, ҡалдырамын*

*Йы андарҙың йондоҙ әлифба ын.*
*Ысын шағир уҡып белә булыр*
*Килер көндөң тантана ын, а ын.*

*Төшөп ҡалған ҡай бер үҙҙе эҙләп,*
*Сабырҙарың юйып, асырғанма.*
*Ҡанбабалар ҡәбер ташына баҡ,*
*Баҡ ин заттың төпкөл осорона.*

*Тоғро вариҫ булып бар уларға,*
*Быуаттарҙың тыңла тын ҡалғанын.*
*Аңғар унда күпме үлем еҙ йән*
*Үләндәргә оҡшап тын алғанын.*

*А , нисек тә шыпырт килде был ҡыш!*
*Иремәҫ ҡар булып ятты башҡа.*
*Үҙе лә ул, шаңҡып, салт аяҙҙа*
*Йәшен булып атылғандай ташҡа.*

*Йәшлектәге хыял ҡай арала*
*Әйләнде уң ҡыҙҙан ҡарсыҡҡа, тим.*
*Матурлыҡ бит кисә хаким ине,*
*Ҡала бөгөн донъя ярсыҡҡа, тим.*

*Алдатҡыс яҙ, сағылт йырың инең*
*Намаҙға бит әйләнде көтмәҫтән.*
*Ҡояш уға, йәшлектәге төштәр*
*Мәхрүм йәйғорҙағы ете төҫтән.*

*Аҡ ырынтыларҙан ҡотолоу юҡ,*
*Ел үтәләй бәрә, юҡтыр ышыҡ.*
*Йырлап бөтөлмәгән йырым — васыят,*
*Мираҫ итеп алырға ин ашыҡ.*

*ин, Магомед, ҡыҫып күкрәгеңә,*
*Сабыйҙай күр уны, ҡурсаласы.*
*өйөнөр йән — бары ы алда, тиеп,*
*Төйәгемдә бар әле, тип, йырсы.*

*Дуҫым, йәнә Гуниб урманында*
*Ҡул теймәгән ҡаялар бар әле.*
*Дарым теймәй ҡалған төлкө унда,*
*Мәргәнлегең күптәр маҡтар әле.*

*иңә бүләк — мин менмәгән сағыл,*
*Йөрьәт етмәй ҡалған тарлауыҡ бар.*
*уңғы уйҙарымды уңғы биттә*
*Хоҙай ғына уҡыр арауыҡ бар.*

**Магомед АХМЕДОВ,**

---



**Дағстандың халыҡ шағиры**

## *Бөркөтлө тауҙар илендә*

*Тормош ҡай саҡ хәс тә ҡара яу ул,*
*Күпме батҡаҡ, аңдый мең ыҙа.*
*Ә күңелдә – иман, телдә – доға,*
*Тауҙа ятҡан ҡарҙай тап-таҙа.*

*Рухым минең сағыл тауға оҡшаш,*
*Бер ни шайы түгел төн шомо.*
*Иманлы ир үҙе – көн сыуағы,*
*Онотма аҡ ине ошоно.*

*Сал башын ул эйеп, бар йөрәктән*
*Хаҡ Тәғәлә менән өйләшә.*
*Ә доға ы, аҡҡош булып осоп,*
*Күктән ергә иман өләшә.*

## *Йыр тауышы*

*Йыр тауышын йәндә ишеттем мин,*
*өйөнөс тә миңә, көйөнөс тә.*
*Йыр ауазын аман юллап барам,*
*Юҡтыр быны туҡтатырҙай көс тә.*

*Баш осомда – ҡояш бурандары,*
*Йы андарға оса ул зыңғырап.*
*Ата-баба сазын кем ул сиртә?–*
*Йөрәктә моң тора гел яңғырап.*

*Кем уң миңә көйҙәш, а әңдәш ул?*
*Аңғартҡандай миңә тыуған тупраҡ:*
*Йөрәктәге тынмаҫ йыр тауышы –*
*Ватаным бит минең илай ыҡрап.*

## *Усаҡ нуры*

*Әсе әремде мин, кесерткәнде*
*Үҙ итәмен бөтә күңелдән.*
*Көнгә тоғро улар, әр еҙ улар,*
*Ә бүтәнсә түгел еңелдән.*

*Ә күктәрҙә өмөт бағлай Тәңре*
*Ошо ҡырыҫ, шыҡ ыҙ ятаҡҡа.*
*Ҡонсоллоҡта кисә ҡойолған ҡан*
*Иртәгә бит сабыр яңаҡҡа.*

*Әремле әм кесерткәнле ерҙә*
*Яҙмышҡа мин асам ҡосағым.*
*Тамырҙары берүк туңма ын тип,*
*Дөрләтәмен ырыу усағын.*

## Ҡотолоу саралары

*Башҡаларҙың ҡә әрлеме, әллә*
*Мә әрлеме үҙе – Алла белер.*
*өйөү хаҡына ин ниҙәр әйттең,*
*Яуап тотор көн иңә лә килер.*

*Дүшәмбенән йәкшәмбегә саҡлы*
*әр көн – үҙ нәҙерең, үҙ өлөшөң.*
*Ҡотолоу сараларын бирә Тәңре,*
*Аң бул, юлың яҙлыҡтырған кешем.*

*Шик-шөб әләр, гәм-ғазаптар өсөн*
*Бары Тәңре хөкөмөндәмен мин.*
*Ҡотолоу сараларын көтәм күктән,*
*Тәңре иркендәге бәндәмен мин.*

## Күктәр ғәме

*Мөмкинме уң алды-ялды белмәç*
*Яҙмышыңдан үтеп, юлын ҡыйыу?*
*Да ырлатып йәшен йәшнәүҙәрен*
*Мөмкинме уң тыйып ҡына ҡуйыу?*

*Дөмбөрҙәрҙән аҙаҡ тынлыҡ килә,*
*айрай ҡоштар уштарыңды алып.*
*Иң нык ҡәлгә лә бит емерелә,*
*Күктәр түҙеменә хайран ҡалып.*

*Төңөл ә бит күктән, сәсрәп, кеше*
*Юкҡа айҡаша бит ыҙғыштарҙа.*
*Күктәр ғәме булып яуа ҡарҙар*
*Яҙмыштарҙан беҙҙең уҙмыштарҙа.*

## Тау үрендә

*Йы андағы исем еҙ бер йондоҙ кеүек,*
*Зил-зиләләр ара ында яҙмыш – туҙан.*
*Үтә ғүмер, бер эҙе юҡ, зым-зыялыр,*
*Бер осмот та ҡалмай хыял, өмөт, уйҙан.*

*Юкҡа ғына, алҡышлап ул азатлығын,*
*Түгелеп илай, өҙөлөп йырлай – яҙмыш ҡоло.*
*Ҡыçыр сәскә – ул да яҙын тажын аса,*
*Тик уның бит юҡтыр түле, юҡтыр боло.*

*Ишәк, ана, еңмешлектә бөркөт менән,*
*Үҙе, бахыр, муйынынан батҡан лайға.*
*... Тау үрендә тик бер тапҡыр бул а ла бит,*
*Ул зат инде түбәндә лә ҡарай айға.*

## *Көмөш*

*Көмөштәй тау түбәләре,*
*Көмөштәй ҡылыс йөҙө.*
*Көмөштәй сыңлы кувшинда*
*Көмөштәй шишмә үҙе.*

*Көмөштәй йондоҙло күктәр,*
*Көмөштәй сыңрау ауа.*
*Көмөштәй донъяны биләп,*
*Көмөштәй ҡарҙар яуа.*

*уҡмаҡтар – көмөш йомғаҡтар...*
*Йәндәй күрәм бары ын.*
*Ошо көмөш – минең өлөш,*
*Алтының ары тор он.*

## *Урланған күктәр*

*Ҡайҙа баҡма – ыҙғыш, талаш-тартыш,*
*Ишетелмәй фәрештәләр өнө.*
*Күктәр исеменән – бурҙар әмере,*
*Улар ҡулында бит күктәр көнө.*

*Әй кешеләр, был ни ҡылығығыҙ?*
*Алланан да ҡурҡа белмәй егеҙ.*
*Аллабыҙ бер ҙә ә, әй, имамдар,*
*Мәсеттәрҙе ниңә бүлә егеҙ?*

*Нәфсе ҡотҡо она батҡан хәйәт*
*Хәжәт түгел күктәр Тәңре енә.*
*Бары Шағир – Алла ына тоғро,*
*Ҡалғандарҙан донъя йәбер енә.*

## *Кисәге*

*Кисәге ҡояштан ер йылынмай,*
*Кисәге ҡуҙ дөрләтмәй усаҡты.*
*Кисәге ел таратмай болотто,*
*Кисәге көн – тормош унан ялҡты.*

*Кисәге дан менән кәпрәйәбеҙ,*
*Кисәге бит йондоҙ нурҙар сәсә.*
*Кисәге держава маҡтаныстыр,*
*Бөгөнгөнән күңелгә ни күсә?*

*Ҡаршылайым таңды мәҙхиәләп,*
*Оҙатамын айҙы үткәндәргә.*
*Бөгөнгө йыр, бөгөнгө ил әммә*
*Ҡалмаҫ минән кисәге күктәргә.*

## Ҡәбер өйөмө

*Әҙәм өҫтәрендә ҡәбер өйөмө*
*Ҡалҡҡан саҡта ҡара шом  ыҙып,*
*Йы андарҙа  иреп юҡҡа сыға*
*Уның моңло яҙмыш йондоҙо.*

*Моң– иректә, баҡыйлыҡтар бары*
 *аҡлай төҫлө әҙәм   өлдә ен.*
*Ҡәбер өйөмөмө, Гунибтаумы*
*Бейегерәк уға – билдә еҙ.*

*Ғәжәп тә  уң: үтеп киткәс бары*
*Күтәрәләр беҙҙә әҙәмде.*
*Атты – сәсрәп ауғас йәлләйбеҙ шул,*
*Йәл – тик өҙөлгәстен өҙәңге.*

## Аҡ баҡса

*Күктәр  көмбәҙенән  гәлсәр ҡарҙар*
*Аҡ осҡондар сәсеп яуғанда,*
*Аҡ бәҫтәргә сумып, ҡарағайҙар*
*Әллә ниндәй     моңға талғандай.*

 *ауаларҙан килгән салт ауаздар*
*Ҡайтарыр яҙ йәмен тормошҡа.*
*Ҡыштан былай, шиғриәт бит шулай*
*Аҡ баҡсалай гөрләй  әр тошта.*

*Шағир ҡулдарында – ила и     сер,*
*Фанилыҡтан өҫтөн был тылсым:*
*Күңелеңдә  инең  ҡарағайҙар*
*Ҡыш та    сәскә ата, уҡыусым.*

## Күктәр мөнбәре

*Донъяла мин осраҡлы зат түгел,*
*Юҡҡа серәшмә ен көнсөл йәндәр,*
*Шө рәт алыр, үҙе бер дан булыр*
*Шиғыр менән мин күтәргән мөнбәр.*

*Зи енемдә минең  ярала ул,*
*Күтәрелә үләндәрҙән бейек.*
*Үрҙәрҙе ул яулай, был донъяла*
*Әсирлектән үт әң, килә бейлек.*

*Ямғыр булып ярала ул йәндә,*
*Уҡтала ул күккә, таба терәк.*
*Күктәр мөнбәрендә – рух ауазы,*
*Әйҙәй унда  еҙҙе минең йөрәк.*

# Әсәм ҡулы

*Әсәм ҡулына мин йәбешкәнмен,*
*Донъя – оло, ыймай аҡылға.*
*Ҡунаҡ ымаҡ, керәм донъяға мин,*
*Ҡарап ҡала әсәм ҡул болғап.*

*Был донъя бит миңә – тыуған йортом,*
*Ҡунаҡ түгел инде мин күптән.*
*Әсәм инде гүрҙә. Таяҡҡа бит*
*Таянып та юлды мин үтәм.*

*Ҡунаҡ ымаҡ ҡайтам үҙ йортома,*
*Туп анан уҡ уға баш эйәм.*
*Гүйә, әсәм ҡулына йәбешәм мин,*
*Үткәндәрҙән күҙгә йәш төйәм.*

***

*Ҡорамдарҙа уттар ҡабыҙалар,*
*Йөрәктәрҙә йылы ҡал ын тип,*
*Сал быуаттар нуры килеп етә,*
*Ғәмле йәндәр фә ем ал ын тип.*

*Усаҡта ут аҡлау – ул борондан*
*Таулыларҙың изге йола ы.*
*Илдә уны тик дөрләткән генә*
*Тарихтарҙың яу әм бола ы.*

*Үткәндәрҙе онотҡандар ғына*
*Көткәндәрҙең утын үндерер.*
*Ут ыҙ ҡал а усаҡ, ҡорамдарға*
*Ҡәбер генә сәләм күндерер.*

***

*Затлы заттар бикләнепме йәшәй,*
*Ниңә кәрәк ҡапҡа диңгеҙгә?*
*Тауға менеп яр алыу уң ниңә,*
*Бөткәнме ни бүтән ғәм беҙгә?*

*Өҫтәл тулы тәғәм, ыу әм икмәк,*
*үҙ менән эш йәшәй ярышып.*
*Кем сымыры, кем та ыллы – уға*
*Ниндәй ғәмәл торор ҡарышып?*

*Ҡаршы ала, оҙатып ҡала улар,*
*Бергә-бергә донъя ырыҫлы.*
*Бауыр баҫҡан кешеләрем, еҙгә*
*Мәңге рәхмәтле мин, бурыслы.*

***

*Яу өрөмө, дары еҫе төштә*
*Бүҫерелеп килә артымдан.*
*Гүйә, шайтан бары ын сағылдырыр*
*Көҙгө ҡуйған минең йортомда.*

*Үткәндәрҙә төҫмөрләнә берсә*
*Киләсәгем, ниҙәр күререм.*
*Унда ла бит хаҡлыҡ өсөн алыш,*
*Көн-төн дөрләр утта ғүмерем.*

*Ниндәй яҙмыш насип бул а ла бит,*
*Барлығыңа, дәүер, мин риза.*
*Йөрәгем бит — мәңгелек яу ҡыры,*
*Ул орамай минән ғариза.*

## *Ҡарт тура ында баллада*

*Күҙ алдымда минең пәйҙә булды*
*Күпте кисергән ҡарт — аҡ аҡал.*
*Тәңренән ул килгән мосафирмы,*
*Үҙе бит бер донъя — байҡап ҡал.*

*Яртылаш ул, гүйә, күккә ашҡан,*
*Яртылаш ул, гүйә, туң ерҙә.*
*Уға ҡарап йондоҙ ҡабыныр ҙа,*
*Уға ҡарап йондоҙ үнер ҙә.*

*“ ин тереме, әллә үле йәнме?”*
*Ниңә был орау, был аң ыҙлыҡ,*
*Аҡ аҡал ул — тере хәтер беҙҙең,*
*Хәтер еҙҙе баҫа моң оҙлоҡ.*

*Әйтер ең дә, Тәңре ораны ул,*
*Шаңдау була, гүйә, ҡәберҙә:*
*“Оноттоғоҙ ата-бабаларҙы,*
*Бәхет күрмәҫ егеҙ ғүмерҙә!”*

*Сара ыҙҙан теҙ сүктем мин ҡапыл,*
*Ҡәбер шомо йәндә туланы:*
*“Мине юҡҡа ҡаҙып сығарҙың ин...”—*
*Тине лә ул, ыҡрап иланы.*

*“Упҡындарға улдар — иман ыҙҙар*
*Быраҡтырҙы ғәзиз Ватанды.*
*Ҡайҙа вариҫтарым? Сал тауҙарҙан*
*Бөркөттәр бит, гүйә, ялтанды...”*

*Был тиклем дә бойоҡ күҙҙәр илде*
*Байҡар икән мәңге яңғыҙмы?*
*Тәңренең ул әллә күҙ йәшеме,*
*Байып барған әллә йондоҙмо?*

***

*Сәстәрҙә — сал. Ыжламайым*
*Яҙмыш тулауына.*
*Аҡ ташты әм ҡара ташты*
*Баҫам маңлайыма.*

*Ҡаплай алмаҫ ҡара өрөм*
*Тауҙың аҡ асманын.*
*Ҡара таш ул — сит-ят тараф,*
*Ағы — Дағстаным.*

***

*Аҡ ҡағыҙ ул — ҡарҙай бер мөғжизә.*
*Аҡ донъяға оса пуля зырлап.*
*Пушкин аша, Мәхмүт аша оса,*
*Миңә лә ул етер. Тыныр орнай.*

*Хаҡлыҡҡа ул төбәп ҡойолған бит,*
*Ҡаныған бит үҙгә ул уҡтала.*
*әләкәтле орбита ы уның*
*Үҙгәреш еҙ ниндәй быуатта ла.*

*Асмандар бер асылып китеп, уның*
*Юлын өҙөр бер саҡ Хаҡ Тәғәләм.*
*Йондоҙ итеп уны күккә сөйөр,*
*Күктәргә мин шуға йыш төбәләм.*

***

*Алыҫ-алыҫ сәфәрҙәрҙе үтеп,*
*Алып ҡайтты юлым йәнтөйәккә.*
*Ишетә еңме, Магомед Ахмедов?*
*Дуҫтар сәләмләйҙәр, сөйөп күккә!*

*Аманатҡа, рухыбыҙға, антҡа*
*Тоғролоҡтар йәндә торҙо сыңлап.*
*Ишетә еңме, Магомед Ахмедов?*
*Дошмандарың ябырыла сыйнап.*

***

*Тыуған ерҙәремдә иң ғәзизе,*
*Иң-иң ҡәҙерле е — бейек тауҙар.*
*Атай эйәренә менгән саҡтан*
*Сыңғыраны йәндә сая тайҙар.*

*Бөркөттәй Ватаным киңлектәре,*
*Булманым ис еҙҙә бер яңғыҙым.*
*Күкрәр был рух — Гуниб үрҙәрендә*
*Яна, яна зат-зәүер йондоҙо!*

***

*Мине лә өйрәттеләр әкиәттәр*
*Тын алырға, уйларға аварса.*
*Бар асылым — әсәм теләгәнсә,*
*Бар асылым — теҙ сүкмәҫ тауҙарса.*

*омайғоштоң алтын ҡауыр ыны*
*Шиғырыма алды яҡты моңдар.*
*Алтын шәмдәлдәрҙең нуры, гүйә,*
*Өтөрөнә саҡлы яҡтыртҡандар.*

**Хәсән НАЗАР тәржемәләре.**

# САЯЛЫК

*(Аҫылғужаның «Йөрәгем – кирелгән йәйә» (Өфө, 2005), «Салауаттың йәше» (Өфө, 2004) китаптарына бәйле уй-тәьҫораттар)*

1979 йыл башланып, Урал университетында диплом тема ын раҫлатыу менән, «Совет Башҡортостаны» гәзите редакция ына эшкә урынлашҡайным. Йәй йөрөмдә, яртышар йылға тиерлек уҙылыусы практика мәлдәрен бары бында ғына үткәргәнгә, баҫманың хеҙмәткәрҙәре яҡшы таныш: йәш булыуға ҡарамаҫтан, ихтирам күр әтәләр, махсус юғары белемле өнәрмән күреп, яҡын ҡабул итәләр. Фуат Биишев, Ғәтиәт Үзбәков, Ислам Мырҙабаевтар үҙ ағайҙарым кеүек. Араларынан Аҫылғужа Ба уманов менән йышыраҡ, тығыҙыраҡ аралашҡанға, уғата яҡынайҙыҡ. Быға бер бүлектә эшләү ҙә сәбәп булғандыр. үҙгә йор, тура ын (уйлағанын) ярып алыр, тик тороуҙы белмәҫ тынғы ыҙ был ағайҙы мин шунда уҡ, күптән белгәндәй, үҙ иттем. Унын ағайҙарса ҡаты талапсанлығын да әлдән-әле татырға тура килде. Әммә минең өсөн, журналистикала, әҙәбиәттә тәүге аҙымдар я аусы өсөн, иң кәрәкле е – ижади эшкә дәртләндерә белеүе булғандыр, моғайын. Шиғырҙар яҙғанды белгәс, яйы сыҡҡан айын эскер еҙ бер ихласлыҡ менән «Яҙыш-яҙыш» тип тәкрарлауы әле бул а ҡолаҡта яңғырап торғандай. Мин дә унын мәҡәлә-очерктар менән генә хуш ынмауын аңғара йөрөйөм. Әммә гәзит эше бар булмышыңды урып алыр шөғөл шул ул... Шиғриәткә, әҙәбиәткә матбуғат аша юлдың ғәйәт урау, оҙайлы-бормалы булыуы күптәргә мәғлүм...

***

Әҙиптең үҙгә ма ирлығы, телгә байлығы, образлы фекерләү ҡеүә е барыбер ҙә шиғриәттә нығыраҡ асыла, теҙмә формала асығыраҡ күренә, буғай.

Аҫылғужа шиғриәтенең ҡарар күҙгә бәреләнкерәп торған ыҙаттарының бере е – тәбиғәтте йәнләндереп, уға кешелек сифаттарын күсереп ҡарауҙа, ти әм, моғайын, хаталанмам. Бына бер нисә өҙөк:

*... Йәй урта ы. Еремдең дә*
*Еткән ҡыҙҙай сая сағы...*

(«Йәй урта ы...»)

*Ҡамыштар шыбырлай*
*Хушлашыу үҙҙәрен,*
*Мөлдөрәй ҡырҙарҙың*
*Күлдәре – күҙҙәре.*

(«Китәләр торналар...»)

*Ана, олпат ялбыр имән*
*Йәшел сапанын алған,*
*Ҡышҡы ыуыҡтарҙан ҡурҡып,*
*орғолт тун кейеп алған.*
*Бынауы уҫаҡ-апайҙың*
*Ишет әле үҙҙәрен...*

(«Кил урманға...»)

*Тал балауыҙ ыға – йәше тама*
*Ярға морон төрткән кәмәгә...*

(«Ағастар илағанда»)

Шағир эргә-тирә ендәген йәнләндереп кенә ҡалмай, ҡош-ҡортҡа ғына түгел, хатта үлән-сәскәләргә, бар үҫентеләргә туғанылай күреп өндәшә. Тәбиғәт менән үҙен бер бөтөн итеп тойғанға, ул:

*... Бер ҡошҡайы булып урмандың*
*Тауыш биргем килде минең дә... –*

(«Сырҡылдашып, ҡантүш турғайҙар»)

тип ҡуя. Шуға ла уны тыуған яғында йәнлектәренә, ағастарына тиклем күтәреп алыуына ғәжәпләнә е түгел:

*... Таныған да мине абантурғай,*
*Киңлектәрҙә ҡанат ҡағына.*

*Бытбылдыҡтар ҡабатлай бер үҙҙе:*
*«Ят кешеме ти әк, ин бит был!»*
*Күңелдәрем тулып, йырлап алам –*
*ағынғандың дәрте киң бит ул!*

*Таныш сауҡалыҡтар яулыҡ болғай,*
*Онотмаған икән улар ҙа.*
*онолошоп сәләм биреп ҡала*
*Өйкөм-өйкөм үҫкән талдар ҙа.*

(«Ҡайтыу»)

Ҡайҙан шундай бөтөнлөк, тәбиғәт менән тығыҙ бергәлек, тығыҙ үрелгәнлек, тигән орауға ла яуабы бар лирик геройҙың:

*Ауылым эргә ендә – ҡара урман...*
*Шул урманда үҫкән ағастан*
*Атай миңә бишек я аған.*
*Бына шуға күңел ағастарҙың*
*әр япрағын иҫтә аҡлаған,*
*Наҙлы өйөү менән ҡаплаған.*

(«Ауылым эргә ендә...»)

уғыш мәлендә, уғыштан уң тыуыпүҫкәндәр вәкиле булараҡ, Аҫылғужа Бөйөк Ватан уғышы тема ын урап үтә алманы. «Йондоҙло ҡапҡалар» шәлкеменә берләшкән шиғырҙарында ул сая яугирлыҡҡа, тәүәккәл батырлыҡҡа дан йырлай:

*...Тарих ша ит: ғүмерҙәрен*
*Арзанға бирмәгәндәр...*

(«Хәбәр еҙ юғалғандар»)

«Боҙ киткәндә» поэма ында был тема уғата ҡатмарлы хәл-ваҡиға сылбыры аша асыла. Үлемесле яраланған лейтенант яугир ата ынан ғазаптарына тиҙерәк сик ҡуйыуын, атып китеүен ялбара...

Тыуған яҡҡа бәйле кисерештәр, уғыш – тыныслыҡ, өйөү – өйөлөү ише мәңгелек темаларға ҡағылып ҡына тынысланмай Аҫылғужа, ә мәңгелектең үҙе хаҡында ла уйлана- ағышлана. Әйтергә кәрәк: тап ошонда әҙиптең ни дәрәжәлә ижадсы икәнен дә, шәхес йәәтенән ни кимәлгә етешеүен дә асыҡлап булалыр. Шағирҙың бер йыйынтығы «Мәңгелек туп а ында» тип нарыҡланыуы ла әлеге е фекерҙе ҡеүәтләй кеүек. Әйткәндәй, ошондай баш аҫтындағы шиғырында шағир «Сик» тигән фәлсәфәүи төшөнсә тура ында фекер йөрөтә:

***Сиктән** сыға ал аҡмы – беҙ*
*Үлем еҙҙәр, йәнә е;*
*Тәнебеҙ менән йәнебеҙ*
*Бүлем еҙҙәр, йәнә е.*
*Ләкин заң бер көйө: әҙәм*
*Яратыла – ҡырыла,*
*Тәнебеҙ ҙә юҡҡа сыға,*
*Йәнебеҙ ҙә ҡурыла.*
*Күпме генә шаҡы аҡ та*
*Мәңгелек ишектәрен,*
*Тыңҡыслап тыҡҡандар хатта*
*Ел үтер тишектәрен.*

(«Мәңгелек туп а ында»)

Был төшөнсәгә автор әлдән-әле мөрәжәғәт итә, уға бәйле ҡайта-ҡайта уйлана:

*... Хәрәкәттең заңы үҙгәреш еҙ:*
*Сәсеп бара – урып бара,*
*Шулай мәңге итә Мәңгелекте*
*Тыуған менән үлгән ара –*
*Ғүмер!*
***Сик еҙ** ғаләм киңлегендә*
*Ни бар унан ба алыраҡ?!.*

(«Боҙ киткәндә»)

Әммә «сик» тигәндән, шағирҙы, ғаләмдәге Альберт Эйнштейн күҙаллаған физик ысынбарлыҡтағы ынан тыш, Кешелеккә бәйле сиктәр нығыраҡ ҡыҙыҡ ындыра:

*Ғаләм **сик еҙ**, тиҙлек **сик еҙ**,*
*Ғүмер ҙә **сик еҙ...***

(«Тиҙлек»)

Бындай раҫлауҙар ҙа уны ҡәнәғәтләндереп бөтмәй әле. Бына ул, андуғас айрауына хозурланып, нимә ти:

*... ыҡтар ың да, ағыштарҙың*
*Күгендә торғас,*
*Үткән менән тыуыр көндөң*
***Сигендә** торғас...*

(«Төн етте...»)

Йәки ике йәрҙең ҡатмарлы кисерешмөнәсәбәттәренә бәйле:

*... Ләкин бер-беребеҙ ҡосағына*
*Ташланырға баҙнат итмәнек –*
*Үткән менән киләсәктең* ***сиген***
*Ашатларға көсмө етмәне?..*

(«Ҡайнап торған ҡала урамының...»)

Улай ғына ла түгел, шағирҙы кешелекте, рухиәтте тотоп торор сиктәрҙең ҡаҡшауы-емерелеүе ауыр хафаларға ала:

*... Беҙ – юғалтыр* ***сиктә*** *рухыбыҙҙы,*
*Беҙ – юғалтыр* ***сиктә*** *телдәрҙе,*
*Беҙ – юғалтыр* ***сиктә*** *илебеҙҙе...*
*Ҡотҡарығыҙ беҙҙең йәндәрҙе!*

(«SOS»)

Нисек кенә булма ын, лирик герой мәлдең ҡабатланғы ыҙ булыуын яҡшы белә:

*... Күҙҙәре ғүмерҙең*
*Етешер кемгә лә –*
*Дуҫҡайым, уңғы ҡат*
*Юл төшөр беҙгә лә*
*Китергә...*

(«Китәләр торналар...»)

Ләкин киткәндә лә ҡайтыу тура ында уйлай шағир:

*Беҙ ҡоштар булмайыҡ*
*Киткәндә ҡайтмаҫҡа...*

Халыҡ хәтерендә изгелеге менән оҙайлы ҡалыуҙы ҡайғырта ул. Тап ошондай үлсәмдәрҙә – мәңгелек бизмәнендә самалай шағир ил азаматтары башҡарған эштәрҙе. Ана ниндәй бит Салауаттың башҡорт өсөн ҡалдырған мәңгелек билдә е – дингеҙгә васыятнамә е:

*...Әсәләре ҡан-йәш түккән саҡта*
*Ҡатын-ҡыҙ өймәк хаҡына*
*Көн итмәйме икән башҡорттарым?*
*Ил иркендә сәмдәре бар микән?*
*Башҡорт тигән йәндәре бар микән?..*

(«Салауаттың дингеҙгә әйтеп ҡалдырғаны»)

Салауатын Аҫылғужа әр саҡ халҡы менән бергә күрергә теләй. Халыҡ йырында ҡуйылған орауға ла әҙип ышаныслы яуап бирә:

*– Салауат нисә йәшендә?*
*– Мәңгелектең ваҡыт сайында*
*(үҙәнендә)...*
*Халҡы йәшенә тиң...*

(«Салауаттың йәше»)

Йәғни, Лев Гумилев теория ына ярашлы, халҡы ҡартая икән, Салауат та бәлтерәр, башҡорт йәш ҡалғанда, Салауат та 22-лә булыр... Эйе, беҙ, башҡорттар, бәхетлебеҙ: беҙҙең ҡалҡандай Уралыбыҙ бар, беҙҙең рух терәгебеҙ – Салауатыбыҙ бар. Уларҙы данлап үлем еҙ йырҙарыбыҙ яңғырай.

***

Аҫылғужаның повестары, романы тематик йә эттән дә, тел-стиль саралары яғынан да халыҡсанлыҡ рухы менән үтәнән-үтәләйгә уғарылған. әммә еенең үҙәгендә башҡорт яҙмышын сағылдырған уғыш-ҡырылышҡа бәйле ваҡиғалар...

«Бирешмә, Бәҙри!» менән «Ҡайҙа генерал?» бер-бере ен тулыландырып, тултырып килгәндәй. Тәүге е, «Башҡорт атлы дивизия ына реквием» тигән аңлатма менән асылып, ыбайлыларҙың ауа өжүменән, танкыларҙан фажиғәле эҙемтәләргә тарыуын асырғанып тасуирла а, икенсе е уларҙың 1943 йылдың февралендә дошман тылына ойошторолған ҡа армандарса рейдын үрәтләй. Реквием тип ҡуйыл а ла, аянысл ваҡиғалар үҙәктә тор а ла, әҫәрҙең төп геройҙары ҡаты ынауҙарҙа ла ығылып төшмәй, заманының алдынғы техника ы менән ҡоралланған мәкерле дошманға сая батырлыҡ, ҡаты ихтыяр, әхлаҡи юғарылыҡты ҡаршы ҡуя, ауыр юғалтыуҙарға дусар ителеп бул а ла еңеп сыға. Ике әҫәрҙең төп лейтмотивында ла, риторик орауҙар менән сыбарланыуына ҡарамаҫтан (бында, бәлки, прозаик Аҫылғужаны публицист Ба уманов еңеп киткеләйҙер), тулайым алғанда оптимистик рух өҫтөнлөк итә. Сөнки ғәҙеллек үҙебеҙҙең яҡта икәнен аңлау бар, нисек кенә булма ын, Еңеү тантана ын күрәсәгебеҙгә тәрән ышаныс бар. Эскадрон командиры Бәҙри Мәмбәтҡолов – уғышта ҡурҡыу белмәҫ яугир, әммә кешегә аяулы. Ул кәрәкле мәлендә тиңдәш еҙ ҡыйыулыҡ күр әтергә лә, талап ителгәс, көн оҙоно тораташтай ҡатып ҡалырға ла, үлемесле яраны ирҙәрсә сыҙамлыҡ менән еңеп сығыуға ла әләтле. Быға, моғайын, рухи ныҡлыҡ аша ғына ирешеп булалыр.

Бәҙриҙең рухи туғаны Әҙе әм Әлибаев («Ниндәй көн был...») тыныс тормошта ла яугир ыҙатлы булып ҡала. Былай тиеүем — алъюҫыктан үҙ уйнатыу түгел. уғыштан унғы осор, уйлай китәң, аман да яу яланын хәтерләтеп торған шул. Еңеүселәрҙән был дәүер ҙә ҡарманлыҡ талап иткән бит. Улай ғына ла түгел. Фронтта ғәййәрлек өлгө ө булғандарҙың әммә е лә тыныс тормошта уға торошло эш күр әтә алмаған әле. Ана Әҙе әмдең ауылдашы, мәктәп директоры Мирхәт Даярович та насар уғышмаған, наградалары бар, әммә бармағы үҙенә кәкре булыуы арҡа ында төрлө әшәкелеккә лә бара, әхлаҡи түбәнселеккә лә төшә.

Әйтергә кәрәк, «Ниндәй көн был...» повесы тегеләренән үҙенең сюжет йыйнаҡлығы менән дә, ваҡиғаларҙы, персонаждарҙы ныҡлы белеп ҡылыҡ ырлау йә этенән дә, тел-стиль байлығы яғынан да ыңғай яҡка ярай ы айырылып тора. Быға аптырай ы ла түгелдер: автор энә енән-ебенәсә белгән ауыл тормошон, төп геройҙы үҙе күп тапҡырҙар ҡатнашҡан бесән өмә ендә үрәтләй бит. Өмә... Үҙенә күрә та ыллыҡ, унғанлыҡ, матурлыҡ (тикмәгә яҙыусы уны «Сәнғәт бит был, ысын сәнғәт!» тип нарыҡламай) бәйге е. Батырлыҡ бәйге е лә ул өмә! уғыш ваҡиғаларының өмә менән алмаш-тилмәш хикәйәләнеүе лә бик тәбиғи. Тап ошонда әҙип Әҙе әмдең батырлыҡҡа илтеүсе юлдарын асыҡлай алған да инде. Эштә үҙенүҙе аямаған, ғәҙеллек өсөн сая көрәшкән кешенең уғышта ла ҡойолоп төшмәҫкә тейешлеген ул художестволы саралар ярҙамында ышандырырлыҡ итеп үрәтләй. Ваҡиғаларҙың мауыҡтырғыс бирелеше генә түгел, әҫәрҙең халыҡсан теле лә, урындағы өйләштең иң утлылары ла повесты ғәйәт уҡымлы итешә. Миҫал итеп тотош өҙөктәрҙе килтереп булыр ине. Бер нисә генә өлгө менән сикләнәйек:

«— Э-рәхмәт, ҡыҙым. Аяҡ-ҡулың ыҙлау ыҙ бул ын... ыйырҙы зайымға тотолғайны былтыр. Бөтөрөнөп кителде шул... — Әбей, бөксәңләп, ишеккә ыңғайланы»;

«... Уға ҡаршы директор аҫтан шәре ебәрҙе (йәғни аҫтан эш итте)»;

«... Эҫе ныҡлап төштө, аяу ыҙ ҡыҙҙыра. Тәүҙ сабылған урындарҙа бакуйҙар тауыш бирә»;

«...Ҡороғор! Сапҡанды күбәләйем тип торғанда ғына яума а... Мәл еҙ төбө тишелеп ни йәлсемәгәрҙең. Әйттем мынау Әҙе әмгә, әйттем. Төнәгөн сапҡанды күбәләп ҡуяйыҡ, тинем. Йә, ни ынны сабылғайны...»

Авторҙың оҡланғыс тәбиғәт күренештәрен тулы балҡышында тасуирлай алыу ма ирлығына эйә булыуы ла, күҙәтеүсәнлеге лә (күңел күҙенең үткерлеге!) әлдән-әле үҙен иҙҙереп тора:

«Ҡарағусҡыл-күк Ирәндек әкренләп күгелйем-зәңгәр төҫкә буяла. Ҡояш тап шул яҡта моронлаясаҡ... Ҡояш әле ҡалҡмаған, шулай ҙа көндөң салт аяҙ буласағы иҙелә. Күк шундай бейек, апасыҡ. Ошо шыйыҡ зәңгәрлеккә сирт кенә — зыңлап китер хәҙер»;

«Ҡояш шыйыҡ зәңгәр бушлыҡтың нәҡ урта ында хәт еҙ генә торҙо — гүйә, ҡаҙаҡлап ҡуйғандар. Семтем болот та юҡ. Әр еҙ күгәүен дә, себен-маҙар ҙа әллә ни маҙа ыҙламай. Тәҡәт еҙ эҫелектән уларҙың да теңкә е ҡороно, ахыры ы... Шулай ҙа ауала ниндәйҙер сыңлы шау тора ымаҡ»;

«Сәй эскәнсе, төшлөктәге ҡояш көнбайыш яҡҡа күп тигәндә лә сыбыртҡы абы буйы шыуып өлгөргәндер...»

Өс повеста ла, тәүге ике ендә тулы ынса тиерлек, баталь күренештәрҙе үрәтләү ҙур урынды биләй. Был үҙенә күрә Аҫылғужа өсөн төп әҫәренә, роман-эпопеяға әҙерлек булғандыр, ахыры.

Романда эпик хикәйәләү талаптарына ярашлы эш итә автор. Оҙайлы ваҡыт арауығын күҙалларға ынтылыш та, эрә-эре ваҡиғаларҙың бирелеше лә, уларҙы осар ҡоштар бейеклегенән, быуаттар аша ынан барлау-ба алау ҙа быға асыҡ дәлил. Үҙәктәге хәл-күренештәрҙе (1770 йылдар башы) бәйән итер алдынан әҙип унан бер быуат элгәрге Башҡортостанды тасуирлай. Шул маҡсаттан ул Инеш бүлеккә Тарихсы образын индерә. Был уҙаман — 12 йәшендә 1735—1740 йылдарҙағы ихтилал баҫтырылғас ойошторолған баш күтәргән

башҡорттарҙы язалауҙың тере ша иты. Үҙе белгән-күргәндәрҙән тыш, ул ололарҙан ишеткәнен, яҙмаларҙан асыҡлағанын 1680 йылдарҙан алып 1770 йылдарғаса теркәп ҡуя.

Урал армыттары күген бер итеп иңләүсе сал бөркөттө үрәтләүсе символик күренештән башланып китә роман. Ҡоштар батша ы иғтибарын үҙ-ара өҙгөләшеүсе ике айғыр биләп ала. Өйөрҙө артабан кеме е өйөрөр? Кир төҫтәге е йәш икән, бик айбарлы, ҡыҙыу күренә. Оло о, саптары, көндәшенән көслөрәк, ныҡыраҡ тойолғандай... Башҡорт иленең Рәсәй менән тиңдәш еҙ алышына ишара был.

Яҙыусы Башҡортостанда ҡуйырасаҡ хәлдәрҙе күҙҙән кисереү менән генә сикләнмәй, башҡорт илен башҡа мәмләкәттәрҙән айырылған утрау рәүешендә генә күҙалламай, ә алыҫ-яҡын халайыҡтар, тотош донъяла барған үҙгәреш-болғаныштар яҡтылығында бирә: йүгерек ҡәләме менән Рәсәй батшалығына, Питербург тарафтарына, Дон-Дунай буйҙарына, Аҙау диңгеҙенә, Төркиә биләмәләренә барып сыға. Бер генә ерҙә лә тыныс түгел. Хәлəл көсө менән көн күреүселәрҙең ҡыйыр ытылыуҙары, өлөш өҙ ҡалдырылыуы хәттин ашҡан: завод эшселәре, урыҫ крәҫтиәндәре ҡол хәлендә, казактың ирке ҡыҫылғандан-ҡыҫыла, башҡорт ере талана, тарайғандан-тарая... Үҙ алдыңа ғына, әүетемсә йәшәп ятырға бер генә лә мөмкинлек юҡ тиерлек. Күрә-аңғара йөрөй бит Юлай: Өфөлә лә, Ырымбурҙа ла ғәҙеллек табырмын тимә. Бар ышаныс үҙ көсөңә, үҙ айбарлығыңа ғына ҡайтып ҡала түгелме?!. Был урыҫ туя белерме лә шашыныуын ҡуя белерме? Тик ана ни ти бит әле депутат Баҙарғол:

«– Ата-бабаларыбыҙ моң заман әүәле шул урыҫ менән бергә йәшәүҙе айлаған икән, бөгөн улар ыҙ булмаҫ...

Дөрөҫ үҙгә ни әйт ен Юлай – урыҫтан ҡалып та, ҡасып та булмаясаҡ».

Күренеүенсә, башҡорттоң иң ҡеүәтле ихтилалы нисек, нилектән тоҡанып китеүен әр яҡлап төпсөрлө асыҡлайдәлилләй, иҫбатлап ҡуя автор. Салауаттың аң-белемгә ынтылышын, шиғри күңеллелеген, тәбиғәтте нескә аңлауын, халыҡ юлбашсы ы булараҡ формалаша барыуын ул ҡәҙимге күренештәр, башҡортто шул осор ваҡиғалары солғанышында эҙмә-эҙлекле сағылдыра.

Яҙыусы, мө абәт картиналар тыуҙырыу менән бер рәттән, ваҡ деталдәрҙе лә урап үтмәй. Халыҡтың тормош-көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йола-ыҙандарын мауыҡтырғыс итеп күҙ алдына баҫтыра. Теге йәки был ҡоралдың мөмкинселектәренә, үҙенсәлектәренә иғтибар итә, яйы сыҡҡанда тейешле аңлатма биреп китеүҙе кәрәкле таба (бының бөгөнгө уҡыусы өсөн ә әмиәте ғәләмәт ҙур). Мәҫәлән, башҡорттоң айырылмаҫ ҡоралына бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр: ян – яҡын араға, күберәген ҡошҡорт, тейен-маҙар атырға йөрөргә, йәйәләр – ҡуян, төлкө, бүре унарына. Әҙернә ярҙамында и ә биш йөҙ аҙымдан да мышы атырға мөмкин...

Йәки, әйтәйек, оҫтаның думбыра серҙәрен аса төшөүе:

«– Мына мыны ы, – тип күр әтте ул нәҙегәйгән ҡылдарға, – кәзәнең ас эсәге. арыҡтыҡы ярамай – мурт. Кәзәнең туҡ эсәге лә ярамай. Дым тартма ын өсөн, эсәкте ҡоро өйҙә киптереү мотлаҡ... Думбыра я арға йәш өйәңке май айында ҡырҡып алына ла йоҡа ярып бысыла, ҡор ағы өсөн тигәне ҡалыпҡа тартып киптерелә. Үңәсен ҡайындан йә йүкәнән юна ың...»

Аҫылғужаның өс романды берләштерер эпопея итеп уйланылған әҫәренең тәүге өлөшөн генә яҙып өлгөрөүе үкенесле. Әммә, нисек кенә булма ын, «Салауаттың йәше» тамамланған үҙаллы әҫәр кеүек ҡабул ителә.

Салауатыбыҙ образына яңы бер бит өҫтәүе менән Аҫылғужа, ижади саялыҡ күр әтеп, үҙенә лә ис ҡасан юйылмаҫ бер йәдкәр ырып ҡалдырҙы.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# ЯЛҠЫНЛЫ ИЖАДИ МИРАҪ

*(Рәшит Ниғмәтиҙең тыуыуына 100 йыл)*



Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең ижады әҙәбиәтебеҙ тарихында ҙур урын биләй. Уның үткер публицистик рухлы шиғриәте, поэмалары, драма әҫәрҙәре илебеҙҙең, халҡыбыҙ тормошоноң, күңел донъя ының үткән быуаттағы 30–50-се йылдарын поэтик әм драматик үткерлеге менән сағылдырыуы йә әтенән айырылып тора.

Рәшит Ниғмәти (Рәшит Ниғмәтулла улы Ниғмәтуллин) бынан йөҙ йыл элек, 1909 йылдың февралендә, ул дәүерҙәге амар губерна ындағы Пугачев өйәҙенең Диңгеҙбай ауылында крәҫтиән ғаилә ендә тыуған. Ете йәшенән ауылдарындағы мәҙрәсәлә күпмелер абаҡ ала. Ләкин уға бары туғыҙ, ун бер йәштәр ара ында башта әсә е, унан ата ы үлеп китеп, үк еҙ етем ҡалған бала амар ҡала ы, унан уң Украинала балалар йортона бирелеп тере ҡала. Аслыҡ йылдары үткәс, алыҫ Украинанан тыуған ауылына ҡайта. Унда нисек етте шулай бер йыл үк еҙ йәшәгәс, ололар юллауы менән Өфөгә килеп, етем балалар өсөн асылған Ленин исемендәге мәктәпкә урынлаша.

Рәшит Ниғмәтиҙең оло тормош юлына сығыуы, төплө белем алыуы Башҡортостандың баш ҡала ы Өфө менән тығыҙ бәйле. Буласаҡ шағир үҙе лә: “Минең ысын тормошом ошонан башланып китте”, – ти.

Өфө мәктәбендә урта белем алып сыҡҡас, рабфакта уҡыу ниәте менән Мәскәүгә йүнәлә. Ләкин, ауырып китеү сәбәпле, кире Өфөгә ҡайтып, 1931 йылда Өфө рабфагын тамамлай.

Тормош юлын Туймазы районы гәзите редакция ында эшләү, 1933 –1936 йылдарҙа Алыҫ Көнсығышта Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итеү, унан кире Туймазы районына әйләнеп ҡайтыу, аҙаҡтан Өфөгә күсеп, республика гәзиттәре редакцияларында, Яҙыусылар союзы сафына ингәс, уның аппаратында хеҙмәт итә. Әҙәби ижадының күтәрелеп китеүе лә ошо Өфө осорона ҡарай.

Бала сағынан ауыр тормош башы, иртә етем ҡалыу, бары үҙ көсө менән тормошҡа юл ярыу, заманының үҙ ҡыйынлыҡтары Рәшит Ниғмәтиҙә үпкә ауырыуын көсәйтә әм 50 йәше тулғанда ғына уны был донъянан алып китә.

Әҙәбиәткә ул “Кереш” (1933) исемендәге шиғырҙар китабы менән шаулап килеп инде. “Дауылдар тыуҙырған ғүмер” (1938), “Йәмле Ағиҙел буйҙары” (1940), “Минең баҡсамда” (1941), “Мөхәббәт әм нәфрәт йыры” (1942), “Үлтер, улым, фашисты!” (1942), “ инең кәләшеңдең хаттары” (1943), “Башҡортостан үҙе” (1945), “Шиғырҙар, поэмалар” (1946), “Киләсәккә сәйәхәт” (1947), “ айланма

әҫәрҙәр” (1951), “ аҡмар ҡыҙы” (1952) .б. китаптары менән милли шиғриәтебеҙ күгенән яҡты йондоҙҙай балҡып уҙҙы.

Шағирҙың утыҙынсы йылдарҙа яҙған китаптарында әле ауыл тормошо, далалар улышы, бала саҡ, йәшлек уй-тойғолары өҫтөнлөк итә. “Дала иртәләре” тигән шиғырҙар циклында үҙе был хаҡта шулай ти:

*Үҙем ҡала гражданины бул ам да,*
*Ашап үҫкәнгәме арым аҡ,*
*Белмәйемсе, дуҫтар, ни өсөндөр,*
*Уйҙар әле минең ауылса.*

*Уйҙарымдың бөҙрә ботаҡтары*
*Ҡалаларҙа сәскә ат а ла,*
*Тамырҙары ятҡас ауылдарҙа,*
*Далаларға кире ҡайталар.*

Тракторҙар шауы гөрөлдәп торған дала, баҫыу тәбиғәтен үрәтләгәндә лә, ылыу ҡыҙҙарын ынландырғанда ла Ниғмәти шиғырҙарынан пейзаж лирика ы бөркөлөп тора. Баҫыу күрке, арыштар шауы – йәш шағир өсөн үҙе бер ил ам сығанағы. Ырҙын табағында арыш көлтәләре, иген уғыу менән мас булған егет үҙ шиғырҙарына ла тынҡыслый-тынҡыслай “арыш тултыра”, хатта уның агрономы ла “арыш инженеры” булып йөрөй.

Ниғмәти поэзия ына, уның тиҫтерҙәренән Ғ.Сәләм, Б.Бикбай, М.Марат шиғырҙарындағы шикелле, шиғыр формаларын, ритм-интонацияны төрләндерергә тырышыу, поэтика өлкә ендә тынғы ыҙ эҙләнеү тәүҙән үк хас. Йәш шағир үҙен йәштәр тормошон, уларҙың уй-тойғоларын, хыялдарын сағылдырған замандаш тип танытмаҡсы. Әгәр тәүге осор ижадында декларатив шиғырҙар өҫтөнлөк ал а, утыҙынсы йылдар урта ында инде лиризм, публицистик пафос көсәйә әм нескәрәк тон – моң ала бара.

Утыҙынсы йылдарҙың икенсе ярты ында Рәшит Ниғмәти поэзия ының идея-тематик йөкмәтке е киңәйә әм поэтик сифаты тәрәнәйә килә. Шағир үҙен тыуған иленең патриоты итеп таныта. Уның “Мин постамын”, “Хат”, “Кавказ”, “Мәскәү”, “Тимер юл” кеүек әҫәрҙәре аша был осорҙоң улышын, илдәге үҫеш, ярыш атмосфера ын яҡшы тойорға мөмкин.

“Мин постамын” шиғырында шағир былай ти:

*Мин постамын. Ватан,*
*Фронттарыңдың*
*Ҡай ы флангы ына ҡуй аң да, –*
*Йөрәгеңә атҡан дошман уғын*
*Тәнем ҡаплар минең, үткәрмәҫ.*

Шағир йыш ҡына илебеҙҙең героик көрәш йылдарына ҡараш ташлай. Шулай уның “Дауылдар тыуҙырған ғүмер” поэма ы ижад ителә. Ватан әм батырлыҡ проблемалары үҙәкләштерелә.

*Беҙ йырлайбыҙ Ватан тура ында,*
*Тимәк, йырланалар батырҙар.*
*Йыр батырҙар тура ында бул а,*
*Тимәк,*
*ул йыр Ватан хаҡында, –*

ти шағир.

Рәшит Ниғмәти поэзия ының бер индивидуаль сифаты уның поэтик стилендә аныҡ ыҙатлана. Ул лирик геройҙың тибынан, образдарының масштаблылығынан, лирик әм эпик элементтарҙың тығыҙ үрелеүенән, тасуири саралар үҙенсәлегенән килеп сыға.

Рәшит Ниғмәти – Владимир Маяковский поэтик традициялары ерлегендә, уның поэзия ының ыңғай йоғонто о тәьҫирендә үҫкән шағирҙарыбыҙҙың бере е. Публицистик пафос, афористик төшөнсәләр, үткер деталдәр, эмоциональ баҫымдарға ҡарап шиғыр юлдарын ҡыҫҡа ритмик өлөштәргә бүлгеләп, баҫҡыслап яҙыу алымдары – ул стилдең иң характерлы ыҙаттары.

*Маяковский миңә маяҡ булды,*
*Ә мин барам*
*ана шул юлдан, –*

тигән шиғри юлдары быны раҫлап, беркетеп үк ҡуя.

Яңы заман шағирыбыҙ рус классик поэзия ының, айырыуса А.Пушкин менән Н.Некрасовтың поэтик традицияларына ла иғтибарлы булды. Ул үҙенең “Тимер юл” тигән поэма ында, “Пушкин ҡалыр”, “Кавказ” тигән шиғырҙарында әлеге классиктар тәжрибә енә мөрәжәғәт итте. Ул поэзияның гражданлыҡ пафосында ла, реалистик ябайлығында ла, поэтик деталдәр үткерлегендә лә, ритмик-интонацион сараларҙа ла, шиғри образдарҙың тәбиғәтендә лә асыҡ тойола.

Милли рухлы шағирыбыҙ йәш сағынан уҡ башҡорт фольклорын, йырҙары, бәйеттәре, эпос-ҡобайырҙары рухын әм поэтика ын бөтә зи ене, йөрәге менән үҙенә еңдергәйне. Бының бер матур өлгө өн айырыуса “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэма ында күрәбеҙ. Был поэманың сюжет ыҙығы Ағиҙел образы тирә енә тупланып, ул йылға хаҡындағы йырҙарҙың, шулар нигеҙендә тыуған оҡшашлыҡтарҙың, ваҡиғаларҙың тарихи пландараҡ эҙмә-эҙлекле үҫеше ерлегендә ойоша. Эпик ыҙаттар аша сифатландырылған Урал, Ағиҙел образдарын лирик тасуирҙар, йырҙар менән ҡушарлап үрәтләү поэманы лиризм менән уғара. Быға ҡобайыр, легенда жанрҙарының үрелеп китеүе яңынан эпос элементтарын көсәйтә. Халыҡтың үткән яҙмышын характерлаған хәл-ваҡиғалар ағышы ағышлы әм моңло йырҙар менән оҙатыла барыуы поэманың бөтә рухын хис әм моң менән күмгән шикелле, әҫәрҙең бөтә стиле лә, йырҙар ритмика ына ҡоролоп, бик талғын аға. Ә героик тарих өйләгән Салауат батыр, Чапай исемдәре менән бәйләнешле ваҡиғаларҙа, ел-дауылдарҙа тулҡынып, шаулап ятҡан Ағиҙел кеүек, ритмика ла үҙгәрә – ул етеҙләнә әм төрләнә. Ағиҙел буйындағы яңы заман тормошон тасуирлаған күренештәрҙә и ә ритмика ваҡиғаларҙың характерына бәйләнешле рәүештә маршҡа тартыла, ә тыуған илгә оло дан бер кантанта, гимн форма ын ала.

*Ағиҙел ыуы алҡын,*
*Ярҙары таш булғанға.*
*Ағиҙел кеүек саф йылға*
*Юҡтыр инде донъяла.*

*Алҡынып аға Ағиҙел,*
*Талпынып аға Ағиҙел*
*Тауҙар артынан.*
*Мәскәүгә барып етер ул*
*әм ҡайнар сәләм әйтер ул*
*Башҡорт халҡынан.*

Ваҡиғаларҙың киң ҡолас алыуына әм Ағиҙелдең эпик ыҙаттарын асыу йүнәле-

шендә шағирҙың башҡорт халыҡ ижадының иң боронғо жанры әм иң камил эпик форма ы – ҡобайырға мөрәжәғәт итеүе шулай уҡ законлы.

Ғөмүмән, “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэма ының образдары, ритмик ҡоролошо ғына түгел, бәлки, әр бер халыҡсан эпитеты (“көмөш ыу”, “саф йылға”, “зифа тал”, “ташлы яр” .б.), сағыштырыуҙар (“ алҡын терегөмөш шикелле”, “үҙең кеүек тәрән, үҙеңдәй киң”, “әйтер ең дә, барлыҡ йондоҙ шунда байыған” .б.) Ағиҙел ыуы төҫлө тоноҡ әм саф, ҡояшҡа сағылған тулҡын бөртөктәре шикелле ябай әм күҙ ҡамаштырырлыҡ. Рәшит Ниғмәти был поэма ында халыҡ күңелендәге моңдарҙы айлап ала ла, уларҙы үҙ йөрәге аша үткәреп, зиннәтле шиғри юлдарға ҡоя. Ул Ағиҙелгә мәңгелек әйкәл булып торған йырҙар рухынан сығып, үҙе лә, шул халыҡ поэзия ындағыса, йәмле Ағиҙелгә, гүйә, бер поэтик әйкәл ҡора. Ул поэтик әйкәл үткән тарихтың моңо әм даны, беҙҙең замандың йәме, ә үҙ ижадының гүзәл бер күрке булып ынлана.

Бөйөк Ватан уғышы йылдары Ниғмәти ижадының яңы бер этабын – ҡәләменең штыкҡа тиңәлер ҡеүәтле яҡтарын – асып ебәрҙе.

Әле уғышҡа тиклем үк, Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт иткән сағында әм халыҡ-ара хәлдәр ҡырҡыулаша барған йылдарҙа, Ниғмәти фашизмға ҡаршы көрәш, илде обороналау темаларын күтәреп сыҡҡайны. Уның “Тарих тауышы” (1935) тигән поэма ында, “Ҡыҙыма хаттар” (1938), “Хәрби эпизодтар” (1940), “Ул көн айын подвиг я ай” (1940) .б. шиғырҙарында совет халҡының дошман менән батыр көрәшенең айырым эпизодтары, героизм мотивтары сағылып үткәйне. Хәҙер Ниғмәтиҙең ҡәләме совет кешеләренең уғыш осоронда бар ҡеүәтенә ҡабынып киткән патриотик тойғоларына нығыраҡ уғарылып, мөхәббәт әм нәфрәт утында ҡайрала ла, йөрәк үҙҙәре Тыуған илгә ҡайнар өйөү, дошманға утлы үс булып ташып сыға.

Ниғмәти тарафынан уғыштың тәүге көндәрендә үк яҙылған иң беренсе шиғыр – “Тыуған илем өсөн!” Автор башта “мандариндар бешкән, дөгө үҫкән көньяғы”, “тауҙай боҙҙар йөҙөп йөрөгән төньяғы” булған ҙур иле киңлектәренең дөйөм панорама ын бирә. Шунан Тыуған илдең данлы тарихына мөрәжәғәт итә. Шағир тарихты байҡау планында Тыуған ил образын артабан аса килгәндә, уның көсөн экономик ҡеүәткә генә ҡайтарып ҡалдырмай, бәлки, был ҡеүәттең совет халҡының үҙ иленә булған ҡайнар мөхәббәтендә ятҡанлығына баҫым я ай:

*Самолеттар менән*
*Танкылар ғына түгел көсөбөҙ...*
*Үҙебеҙ төҙөгән илгә үҙебеҙҙең*
*Ҡайнар мөхәббәттә көслөлөк!*

“Киң Ватанды ынмаҫ ҡалҡан булып ҡаплаған” шул мөхәббәт илебеҙгә өжүм иткән яуыз дошманға ҡарата утлы нәфрәт менән ҡушыла. Былар и ә яу йылдарында кешеләрҙе “подвигка илтә торған иң көслө” тойғоларҙан ул:

*Беҙҙең өйөү көслө!*
*әр өйөүсе*
*Подвиг я ар, еңеү килтерер.*
*Беҙҙең нәфрәт утлы!*
*әр нәфрәтле*
*Дошмандарын ҡырыр, көйҙөрөр.*

Шағир ижадында тыуған ер образы совет кешеләре күңелендә илгә оло өйөү хисе, ә дошманға утлы нәфрәт ҡабыҙыу өсөн иң үткер образ функция ында ҡул-

ланыла. Был образда ул иң нескә әм иң киҫкен патетик тойғоларҙы бергә ойоштора. Шуға күрә әле генә күңел түрендә улҡылдап талпынған хис йә, "Тыуған илем өсөн!", "Үс ал, патриот" шиғырҙарындағыса, лозунгылы фразалар аша, көслө ынтылыш булып, тышҡа бәреп сыға, йәи ә, "Әсә үҙе" балладаындағыса, Ватан ораны төҫөн ала.

Бөйөк Ватан уғышының патриотик тойғоларын шулай уҡ бөтә күркәмлегендә поэтиклаштырған көслө әҫәрҙәрҙең бере е – "Украина" шиғыры. Үҙенең йәшлеге менән бәйләнешле Украина еренең бөтә матурлығын, халҡының киң күңеллелеген лирик планда тасуирлауы аша автор совет халыҡтары ара ындағы ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡ, идея-политик берҙәмлектең дошманға ҡаршы көрәштә мө им көс икәнлеген, еңеү беҙҙең яҡта буласағын өйләй.

Ғөмүмән, Р. Ниғмәтиҙең Бөйөк Ватан уғышы йылдарындағы поэзия ын ысын-ысындан Тыуған илгә оло өйөү, дошманға ҡарата утлы нәфрәт тәрбиәләүсе үткер поэтик ижад тип әйтергә мөмкин. Поэзия ының ошо сифатын шағир үҙе 1942 йылда сыҡҡан китабының исеме менән "Мөхәббәт әм нәфрәт йыры" тип атаны. Ул йырҙар фронтта алдаттарға уғышсан рух өҫтәне, тылдағыларға хеҙмәт дәрте бирҙе. Шағирҙың колхозсы крәҫтиәндәргә әм эшселәргә төбәп яҙған "Баҫыуға, туғандар!", "Күберәк нефть, иптәштәр!" кеүек шиғырҙары баҫыу стандарында, цехтарҙа, радиоларҙа, газета рубрикаларында поэтик лозунг характерын алдылар.

*Яҡшы бел: илдең әм*<br>*Тормоштоң ныҡлығы –*<br>*Колхозда, совхозда*<br>*Башаҡтар туҡлығы!*<br>*әр бөртөк – ул пуля,*<br>*Граната әм ҡылыс.*<br>*әр бөртөк Гитлерға*<br>*Бомбалай ҡурҡыныс!*

Бындай юлдар Маяковскийҙың поэтик традицияларына ҡушылған агитшиғырҙарҙың матур өлгөләре ине.

Мөхәббәт әм нәфрәт хистәре тәрбиәләү юлында халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәт итеп яҙылған публицистик шиғыр йәки йылы үҙ әйтелгән лирик парсалар менән бергә, Ниғмәти өсөн ошо халыҡтың бөйөклөгөн, батыр улдарының гүзәл сифаттарын күр әтеү аша уларҙы рухландырырҙай үрнәк образдар тыуҙырыу ҙа мө им бер бурыс ине. уғышҡа тиклемге шиғыр әм поэмаларында уҡ ябай хеҙмәт кеше енең көндәлек эштәрен, батырлыҡтарын поэтиклаштыра белгән Рәшит Ниғмәти үҙ поэзия ының был мө им ыҙатын яңы тарихи шарттарҙа артабан үҫтереп ебәрҙе.

Бөйөк Ватан уғышының иң көсөргәнешле ваҡытында Ниғмәти аҫыл әҫәрҙәренән бере е – "Үлтер, улым, фашисты!" (1942) поэма ын яҙа. Совет халҡының мораль-политик берҙәмлеген, фронт менән тыл бәйләнешен, совет алдаттарының батырлығын был поэма милли колоритлы итеп, героик эпостарҙағыса эпик планда асыуы менән үҙенсәлекле. Илебеҙ тарихындағы иң хәтәр дәүерҙәрҙең бере ендә шағирҙың башҡорт халҡы поэзия ының гүзәл традицияларына, уғышсан рухына мөрәжәғәт итеүенең тәрән идея-эстетик маҡсаты бар. Ғәҙәттә, героик эпостарҙа халыҡ батырҙарының көс сығанағы, изге көрәше сағыла, фиҙакәрлек, илде аҡлау идеялары поэтиклаштырыла. Башҡорт фольклорының эпик репертуарындағы ҡобайыр кеүек жанрҙарында ғәйрәтлелек, Тыуған ил азатлығы өсөн көсөндө аямау, дошманға нәфрәт

хистәре халыҡты өндәүсе Ватан ораны төҫөн ала.

Халыҡ ижадының бына ошондай поэтик традицияларына мөрәжәғәт итеп, Рәшит Ниғмәти үҙ поэма ын Ватан ораны, халыҡтың йөрәк үҙе форма ында еткереү өсөн эпос рухын, ҡобайыр алымдарын бик оҫта файҙалана.

Башҡорт халыҡ ижадында тыуған ерҙең традицион Уралтау образында ынландырылышынан сығып, шағир тәүҙә “Уралтауҙың башына болот сорнаған, алтын билбау ураған, илгә дошман килгәндә ыҡтап ҡарап тормаған” мө абәт портретын бирә, унын уғышсан традицияларын күҙ алдына баҫтыра. Автор ошо традицион образға “йәйрәп ятҡан ете ер”, “ташып ятҡан ете күл”, “шаулап торған ете урман” арттарындағы ҙур илебеҙ киңлектәрен бергә ҡушып, Тыуған илдең оло образын тыуҙырыуға, бер ғаиләләй йәшәгән ҡәрҙәш халыҡтар дуҫлығын, совет патриотизмы идеяларын данлауға килә.

Уралтау образына бәйләнешле күренештәрҙең ҡобайыр алымдарында бирелеп, бөйөк рус еренә маҡтау яуҙырған өлөштәрҙең, “Игорь полкы тура ында үҙ” эпосындағыса, рефрен менән башланып, В. Маяковскийҙың мәш үр шиғри юлдары менән ҡеүәтләнеше үҙе үк милли әм интернациональ тойғолар диалектика ының үҙенсәлекле художество алымдарында йәтеш сағылышын өйләп тора.

Совет кешеләрендә дошманға ҡарата нәфрәт уты тәрбиәләү мәсьәлә енә лә Ниғмәти был поэмала бик үҙенсәлекле килә. Шул уҡ алмаҡ стилле ҡобайыр алымдары ярҙамында ул ил өҫтөнә ябырылған дә шәттең ҙурлығын, дошмандың мәкерлелеген йөрәкте тетрәтерҙәй көс менән асып ала, ҡырағай януарҙан вәхшиерәк фашизм менән көрәштең йә үлем, йә йәшәү өсөн барғанын күр әтә. Шул алышта совет кешеләренең ҡеүәтен данлай.

Композицион яҡтан поэма Башҡорт атлы дивизия ын ойоштороу күренешен, унын уғыш хәрәкәттәрен өйләгән өлөштәрҙән әм Уралтауҙың телмәре, приказы, хаты рәүешендә бирелгән монолог форма ындағы өлөштәрҙән ойоша. Әгәр монологик бүлектәр әм поэманың инеш өлөшө, йөкмәтке әм художество маҡсатына ярашлы рәүештә, ҡобайыр стиленә нигеҙләнгән бул а, хәл-хәрәкәттәр менән бәйләнешле өлөштәр ғәҙәттәге әҙәби стилгә алыныр. Хәл-хәрәкәттәрҙең эҙмә-эҙлекле ағышына бәйләнешле рәүештә тығыҙ береккән бул алар ҙа, бүлектәр шул уҡ ваҡытта билдәле бер композицион үҙаллылыҡ сифаттарына ла эйә. Был композицион-сюжет үҙгәлеге ҡобайырҙарға тартым поэманың циклизация юлы менән берләшеү ише милли поэтик традиция ына тамырлана. Башҡорт халыҡ ижады традицияларына барып тоташҡан әм шунан үҫеп сыҡҡан бындай үҙгәлектәр поэманы жанр йә этенән поэма-эпосҡа яҡынайта. Былар, үҙ сиратында, поэманың фольклор әм әҙәби формалар менән аралашҡан оригиналь бер стилен хасил итә.

Республикабыҙҙың улдарының яу ҡырында күр әткән батырлыҡтарына, Ватан алдындағы патриотик бурысты тоғро әм намыҫлы аҡлауҙарына оло дан йырлаған “Башҡортостан үҙе” (1944) исемле шиғыр-хат “Үлтер, улым, фашисты!” поэма ының идея-тематика ын артабан үҫтергән әҫәр булып майҙанға килде. Башҡортостан уғышсыларына шиғри хат рәүешендә төҙөлгән был әҫәр үҙенең йөкмәтке е әм форма ы менән Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең 1943 йылдың 22 августында яҙылған “Фронттағы башҡорт егеттәренә башҡорт халҡынан хат”ты хәтерләтә. Республика хеҙмәтсәндәренең фронттағы батырҙарына ебәргән ҡайнар сәләмдәре, бөтә йөрәктән әйтелгән рәхмәттәре, Күсимов, Әхмәтов, Дәүләтов, Миңнеғолов, Ҡужаҡов кеүек йөҙләгән халыҡ батырҙары менән ғорурланыуҙары әм уларға хөрмәт, дан яуҙырыуҙары шағирҙың был

шиғри хатында ысын мәғәнә ендә бер поэтик төҫ ала.

Бөйөк Ватан уғышы совет кешеләренең батырлыҡ әм ныҡышмалылыҡ сифаттарына ғына түгел, бәлки, уларҙың мораль юғарылығы, рухи сафлығы әм күркәмлегенә лә ҙур ынау йылдары булды.

Совет патриоттары күңелендәге оло тойғоларҙы шағир " инең кәләшеңдең хаттары" (1943) поэма ында фронтовик егет әм тылдағы унең кәләше образында оҫта тасуирлай алды. Шағир, үҙенең идея-тематик маҡсаттарына ярашлы рәүештә, был әҫәрендә күңел кисерештәрен тулыраҡ асырға ҡулайлы булған хат форма ын айлай. Фронтовик егеттең тылдағы кәләшенә, кәләштең егетенә яҙған хаттарындағы ике йәштең бер-бере енә булған мөхәббәте Тыуған илгә мөхәббәт, дошманға ҡарата нәфрәт хистәре менән ҡушылыуын автор бик оҫта тасуирлай. Егеттең " әм үс алам, иркәм, дошмандарҙан улар тапап йөрөгән ер өсөн, айырылышыу өсөн, йөрәктәге ыҙлау өсөн, Тыуған ил өсөн" тигән үҙҙәрендә ошо берҙәм тойғолар айырым-асыҡ әйтеп бирелә.

Ғөмүмән, Рәшит Ниғмәтиҙең уғыш йылдарында ижад иткән поэзия ы халыҡ йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан патриотик хистәрҙе публицистик алымдар, лирик биҙәктәр аша төрлөсә нәфисләп, үткер шиғри юлдарға ала белеүе менән айырыуса үтемле әм тәьҫирле булды.

Бөйөк тарихи еңеүҙән уң тыныс шарттарҙа дауам иткән данлы йылдарҙа Рәшит Ниғмәти ижады тағы ла яңы бер баҫҡысҡа күтәрелде, халҡына арналған йөрәк хистәре ысын мәғәнә ендә дан булып ташты. Унең ижадының төп идея-тематик йөкмәтке ен хәҙер совет халҡының тарихи еңеүе әм коммунизмды төҙөү юлындағы ижади хеҙмәте, бөйөк көрәше мәсьәләләре билдәләй, әҫәрҙәренең төп ыңғай геройҙары булып шул замандың алдынғы кешеләре – коммунистар, хеҙмәт батырҙары тора.

1946–1948 йылдарҙа Р. Ниғмәти үҙенең ҙур күләмле әҫәре – "Большевик" поэма ы өҫтөндә эшләне. Советтар Союзы Коммунистар партия ының данлы тарихи юлын, коммунист образын лиро-эпик планда, публицистик алымдар аша кәүҙәләндереүсе был поэма тема ының ә әмиәте, идея-художество юғарылығы яғынан шағирҙың үҙ ижады үҫеше өсөн генә түгел, бәлки, уғыштан уңғы башҡорт совет поэзия ы күтәрелешендә ҙур урын тотҡан әҫәрҙәрҙең бере е булды.

Тыуған еребеҙ байлығының, халҡыбыҙҙың хәләл көсөнөң тормошто биҙәр әләте донъялар именлеге менән тығыҙ бәйләнгән. Шуға күрә лә Ниғмәти поэзия ында ижади хеҙмәт, коммунизм өсөн көрәш тема ы донъяла тыныслыҡ, именлек тема ы менән бергә үрелеп барыуын дауам итте.

уғыш илебеҙгә ҙур юғалтыуҙар, ифрат күп бөлгөнлөктәр килтерҙе. уғыш алған тәрән яранан тыуған тупраҡ аман улҡылдап ыҙлай ине, балаларҙың илау тауыштары ҡолаҡта әле аман яңғырай ине.

*Аҙмы йәш ғүмерҙе уғыш алды,*
*Аҙмы иптәш ҡултыҡ таяҡлы;*
*әм Зоя ыҙ ҡалды күпме әсә,*
*Күпме Маресьевтар аяҡ ыҙ!*
*Беҙ еңеүгә уттар аша килдек,*
*Арыҫландар кеүек уғышып.*
*Бына шуның өсөн,*
*Шуның өсөн*
*Беҙгә бик, бик ҡиммәт тыныслыҡ.*

("Тыныслыҡ өсөн")

Тәрән яраның әленән-әле ыҙлап китеүе төҫлө, шағирҙың яу ыҙғарын шулай

хәтерләтеп үтеүе тыныслыҡтың ҡәҙерен тағы нығыраҡ ыҙыҡ өҫтөнә алыу маҡсатына буй ондорола.

әр яңылыҡтың тыуыуын әм үҫешен шағир зирәклеге менән күҙәтеп барырға ғәҙәтләнгән Ниғмәти айырыуса илленсе йылдар башындағы ижадында совет ысынбарлығын, шаулы тормошобоҙҙо киңерәк планда үрәтләү, совет кешеенең күптәргә өлгө булырҙай яҡты образдарын кәүҙәләндереү йүнәлешендә яңы уңыштарға иреште. Был йылдарҙа шағир республикабыҙҙың яңы ҡалаларына, ауылдарға ижади командировкаларға бик йыш сыға, тормоштағы, совет кеше ендәге яңы ыҙаттарҙы ентекләп өйрәнә.

Уның, мәҫәлән, 1951 йылда яҙылған " аҡмар ҡыҙы" тигән поэма ы ла ана шул коммунизм төҙөүсе кешеләрҙең яңы характер ыҙаттарын – социалистик хеҙмәт тыуҙыра торған ыҙаттарын – Гөлгөл, Байрам кеүек образдарҙа бөтә йәштәргә өлгө булырлыҡ итеп күр әтеү маҡсатын ҡуйған иң күренекле әҫәрҙәренең бере е булды.

Башҡортостандың халыҡ шағиры күп яҡлы талант эйә е ине. Башҡорт әҙәбиәтенең үҫешендә уның шағир булараҡ ҡына түгел, бәлки, күренекле драматург, оҫта тәржемәсе, үткер публицист булараҡ күр әткән хеҙмәте лә ҙур. Рәшит Ниғмәти – ете пьесаның авторы ("Врач Ғимранов", "Урман шаулай", "Ағиҙел ярында", " инең йондоҙоң" .б.).

Рәшит Ниғмәтиҙең тәржемә өлкә ендәге эшмәкәрлеге уның рус классик әм совет әҙәбиәтен ижади өйрәнеү тәжрибә е менән тығыҙ бәйләнешле ине. Ул бигерәк тә А. Пушкиндың байтаҡ шиғырҙарын, "Дубровский" повесын, "Руслан әм Людмила" поэма ын, В. Маяковскийҙың "В. И. Ленин", "Бөтә тауышҡа" поэмаларын, сит ил тура ындағы шиғырҙар циклын башҡортсаға уңышлы тәржемә итте. М. Лермонтовтың "Маскарад", М. Горькийҙың "Макар Чудра", "Егор Булычев әм башҡалар" тигән әҫәрҙәрен, Д. Фурмановтың "Чапаев", Ст. Злобиндың "Салауат Юлаев", В. Катаевтың "Яңғыҙ елкән күренә ағарып" әм П. Павленконың "Бәхет" романдарын башҡорт уҡыусылары Ниғмәти тәржемәләре буйынса яҡшы белә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

## амар башҡорттарына

*Ете яттай, моң оу сырай менән*
*Ҡаршы ала беҙҙе Самара.*
*Ауылдарҙа әр бер өй күҙенән*
*Ҡайнар йәштәр тора тамырға.*
*Ете яттай, тимәй юҡтыр сарам –*
*Кендектәр бит күптән өҙөлгән.*
*Беҙҙе тоташтырған тамырҙар ҙа*
*Шәжәрәлә генә терелгән.*

*Бөрйән, ҡыпсаҡ, табын, үҫәргәндәр –*
*әр бере е ырыу ағасын*
*Ҡаҡҡан ерҙә ауыл ҡалҡып сыҡҡан...*
*Эх, булған бит нығыраҡ ҡаға ы!..*
*Ошо ерҙәр өсөн ҡан ҡойолған...*
*Тамғалар ҙа инде юйылған,*

*Атай нигеҙҙәрен аҡлаусы бар,*
*Ҡай бер өйҙә усаҡ ыуынған.*

*Бына Хәсән...*
*әҙиә апай, инең*
*Ҡалды микән бында эҙҙәрең?*
*Ауыл шиңә...*
*Яҡташтарың ниңә*
*Йәшерәләр бойоҡ күҙҙәрен?*
*инең бөйөклөктө*
*Урамыңда*
*Урал ташы иҫкә төшөрә.*
*Үлмәҫ әҫәрҙәрең*
*ил а -зарын*
*Сал замандан алға күсерә...*

*Ай, Диңгеҙбай!*
*Күр ә Рәшит ағай,*
*Ятып илар ине сиҙәмдә...*
*Юҡ, иламаҫ ине,*
*Йәне генә*
*Тәгәрәп китер ине иҙәндә.*
*Данлағанға йырҙа Ағиҙелен*
*Күтәрелде илдә иммәте.*
*Йәтимлектә үткән йәш сағындай,*
*Ярҙа яңғыҙ ята Ниғмәти...*

*Ниндәй башҡорт, ти, ул — туған тел еҙ,*
*Үҫ ә тағы бишек йыр ыҙ ҙа?*
*Йәш Рәшиттәр, ылыу әҙиәләр,*
*Фатималар тыуған Ырғыҙҙа!*
*Ерҙә кемдәр генә көн итмәйҙер:*
*“Йәшәп була,— тиеп,— йыр ыҙ ҙа...”*
*Башҡорт ҡына йыр ыҙ йәшәй алмай!*
*Яңы башҡорт яңы йыр уҙа.*

*Кәрәлек әм Ырғыҙ буйҙарында*
*Ҡәрҙәштәрҙең көйрәй күмере.*
*Ҡышлауҙары, йәйләүҙәре, гүйә,*
*әр башҡорттоң*
*Йөрәгенә ҡуйған күмелеп...*
*Туғанындай күреп,*
*ихлас, йомарт*
*Ҡаршы ала беҙҙе Самара.*
*ағыныуҙар даръя булып ташҡан,*
*Ҡайнар йәштәр тора тамырға...*

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ.**
**2008 йыл, ноябрь.**

# МӨЛӘЙЕМ ӘҘИП ИНЕ...

*(Нурислам Шәйхуловтың тыуыуына 80 йыл)*



*Ғафури районының Сәйетбаба ауылында тыу а ла, Нурислам Шәйхулов шаршылы Еҙем үрендәге Хоҙайбирҙе ауылында егет ҡорона аяҡ баҫа, сөнки колхозлашыу осоронда атаы Фәтхелислам фәҡир генә ғаилә ен ҡарурманлы күрше райондың төпкөл ауылына күсерергә мәжбүр була.*

*Белорет педучилище ын тамамлағас, Нурислам Шәйхулов хеҙмәт юлын уҡытыусы булып башлай. Райондың "Сталинсы" (хәҙер "Урал") гәзитендә яуаплы секретарь вазифа ын башҡара. Аҙаҡ ишле ғаилә е менән Еғәҙегә күсенә. Бында ул биш йыл самаы ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе йөгөн тарта — башҡорттар менән урыҫтар күпләп аралаш йәшәгән ҡасабала ихтирам ҡаҙана. Кәңәшсел, ярҙамсыл, күп өнәргә эйә булғаны өсөн дә ололайҙар уны. Оҫта скрипкасы, әләтле рәссам, яҡшы фотограф та, эшсе-хәбәрсе лә ине. Сафия ханым менән бына тигән ул әм ҡыҙҙар үҫтерҙеләр: туғыҙ бала ы ла юғары уҡыу йорттарын тамамлап, төрлө тарафтарҙа үҙ өнәрҙәре буйынса маҡтаулы эшләйҙәр, донъя көтәләр.*

*Нәфис әҙәбиәткә ул сағыштырмаса уң, әммә мул тормош тәжрибә е туплап, ҡәләмен ныҡлы "сарлап" килә. Тәүге китабы — "Шаулай Еҙем" — 1985 йылда донъя күрҙе. Икенсе китабының ҡульяҙма ын тикшергәндә күренекле әҙиптәр Ноғман Мусин, Булат Рафиҡов, Әмир Гәрәев, Ғәзим Аллаяров, Әнүр Вахитов, Әмир Әминевтарҙың ҡатнашҡаны хәтерҙә. Повестар, хикәйәләр, нәҫерҙәрҙән торған йыйынтығы и ә " ағындырыр андуғасы..." тигән исем менән 1991 йылда нәшер ителде. уңғараҡ педагог әм әҙиптең балаларға тәғәйен "Хәүефле сәфәр" тигән мажаралары айырым китап булып баҫылып сыҡты. Авторҙың теле халыҡсан, юморға бай, ул ауыл мөхитен, бигерәк тә урмансылар, унарсылар, рудасылар, уҡытыусылар тормошон төптән белеп тасуирлай, геройҙарын үҙ замандаштары ара ынан айлай торғайны. Өр-яңы повестарҙан тупланған ҡульяҙма ын нәшриәткә тапшырған йылда аяу ыҙ сир әҙипте арабыҙҙан тартып алды. Өҫтәлендә байтаҡ әҫәрҙәре ҡалды. Башҡортостан Яҙыусылар союзында ни бары ике йыл ғына ағза булырға, бер съезда ҡатнашырға өлгөрҙө ул.*

*Ошо айҙа Н.Шәйхуловҡа 80 йәш тулыр ине. Ине... Әммә ул әҙәбиәтебеҙҙә үҙ үҙен, тыуған яғында шө рәтен ҡалдырып китте. Бына ун ике йыл инде Еғәҙелә йәмле генә бер урам әҙип исемен йөрөтә. РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы, журналист әм әүәҫкәр рәссам Нурислам Шәйхуловтың яҡты иҫтәлеген, аяҡ эҙҙәрен аҡлай ҡалҡыуҙағы был урам.*

*Яңыраҡ "Китап" нәшриәте әҙиптең "Ожмах ҡайҙа?" тигән проза китабын сығарҙы.*

**Сабир ШӘРИПОВ**.

**Нурислам**
**ШӘЙХУЛОВ**

# ҠАҘ БӘПКӘЛӘРЕ АРЫ ИКӘН...

**ХИКӘЙӘ**

Ғәшүрә инәйгә игеҙенсе тиҫтә. Күҙҙәре томаланған, ҡолаҡтары тонған, тамаҡ төбө менән саҡ өйләшеп ултыра. Әммә башынан үткән ауырлыҡтарҙы өйләй башла а, хәтеренә хайран ҡала ың. Ҡасан, кем ауыр үҙ әйткән, кем ни өсөн рәнйеткән, ҡайҙа, ниндәй ыҙа сиккән – бары ын да бөгөнгөләй иҫләй. Өрмәгән ергә ултыртмай, усында йөрөтөп тигәндәй бер бөртөк ул үҫтерҙе. Бына шул малайының изгелеген күреп, йомшаҡ балаҫтар өҫтөнән генә йөрөр сағында ҡарттар йортона килеп эләкте. Нисек булды уң әле был? Улына бөтә булмышын, барса тәрбиәне бирергә тырышҡайны ла а. Халыҡтың тамағы икмәккә туймаған саҡта ас итмәне, кеше яланғас ваҡытта яңынан-яңы кейем кейҙерҙе. Ә Хәлиме әсә ен ҡарауҙан баш тартты. Ошоларҙы уйлай Ғәшүрә әбей, ә битендәге ваҡ бураҙналар өҫтөнән өҙлөк өҙ әсе ынйылар тәгәрәй.

...Саҡрымдарға уҙылған Таҡаты үре. Ат юлын буран күмгән, йүшә баҫҡан йөҙйәшәр ағастар беленер-беленмәҫ юлға баштарын эйгән. Ҡараңғы төн. Ҡаты сана юлын йоҡа сабаталы аяҡтар ғына тоя, яңылыштырмай. Бер бот ҡына он менән юл аҙығын алған бәләкәй сана өйрәп, урта йәштәрҙәге бер ҡатын ах та ух килеп юл йыра. Яңғыҙы. еләү ене лә, бүре е лә, ене лә ҡурҡытмай уны. Өйҙә тилмереп, әсә ен көтөп зарыҡҡан ғәзиз улы – Хәлиме шикләндерә. Ике генә бөртөк өшә менән бер биҙрә генә аҙаҡҡы картуфын ҡалдырғайны – бөткәндер инде. Ғәшүрә алтынсы көн юлда, ҡайтып етергә тағы бер көнлөк юл алдында. Былай бот төбөнән ҡар кисеп, юл йырып бар аң, ике көндә лә ауылыңа етә алмаҫ ың. Ҡатын бар көсөн йыйып алға ынтыла, ләкин сана ҡарама ына эркелгән еүеш ҡар тышаулай, ҡалын булып тығыла. Юлсы ике-өс аҙым атлай ҙа, тағы туҡтап, сана ы алдын тапай... тағы шулай, тағы... Юлын еңеләйтергә теләп, ауыҙ эсенән көйләргә кереште, хәле барҙа үрҙе сығып ҡалырға тырышты.

*Ҡаҙ бәпкәләре ары икән,*
*Теҙелеп-теҙелеп ыуға бара икән.*
*Йөрәк баштарына ҡан ауҙырған*
*Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән...*

Ғәшүрәнең хәле тамам бөттө, тамағы ҡатты, арҡалары ыуға төшөп сыҡҡан шикелле еүешләнде. Ул, ҡалтырап, алҡын ҡарға йөҙтүбән ҡапланды. “Эй, Хоҙайым, ал йәнемде, ыҙалатма был тиклем”, – тип үк ене ул ихтыяр ыҙ. Уға яуап итеп ағас баштарында уйнаған ел генә ыҙғырҙы, олондар елкенде, юлға ауыр йүшәләр лаплоп төштө. Ап-аҡ йөҙлө, ҡара күҙле Хәлименең матур ыны күҙе алдына килгәс, ҡатын йәнә торҙо, ауыр йөгөн өйрәргә тотондо. “Ошо ризығымды иҫән- ау алып

ҡайтып еткер әм, тағы бер туҡ ырап ҡалыр ине балаҡайым...” Бар уйы шул ине Ғәшүрәнең. Ҡә әрле уғыш бөтөүгә бер йыл үтеп кит ә лә, илдә – аслыҡ. Эшләгәндәргә лә бер ерҙән тәғәм ризыҡ бирелмәй. Барлы-юҡлы хәрезендә йыйнап, ялан баҙарына сыҡмай хәлең юҡ. Бына Ғәшүрә лә шуның михнәтен күрә. Ул таңға ғына Таҡаты үрен артылып, бер генә мәрйә йәшәгән утарға етте, бер-ике стакан сәй эскән булып, бер сәғәттәй генә серем итте лә тағы ла көрт йырырға кереште. ирәк йөрөйҙәр, исма ам, ҡаршыға берәй е килеп сыҡ асы.

Был ҡә әрле йылдар артта ҡалды, ил туҡлыҡҡа сыҡты.

Хәлим мәктәптә иң зирәк уҡыусы булыуы менән шатландыра.

...Ҡышҡы алҡын ғына көн ине. Ғәшүрә ыуҙан ҡайтып ин ә, улы ата ының ҙур ағас көрәге менән кеше урамын көрәп йөрөй. Уны күреп, әсәнең йөрәге ярылырҙай булды. “Ни ҡылана ың ин, ә? Ауыр ҡарға биленде, эсенде ауырттыра ың бит, үҙем көрәмәйемме ней?» – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Хәлиме ирендәрен ослайтып әҙерәк тора бирҙе лә ыҙҙы иптәше Рәдифтәргә. Уларҙан кискә генә тирләпбешеп, ал ыуланып ҡайтып инде. “Ох, эшләнек кенә-ә-ә! Рәдифтәрҙең ҡарын урам буйына сығарып өйҙөк”, – тине малай, ауыҙын йырып. Әсә енең йөҙө ҡапыл күгәрҙе, йоҡа ирендәре ҡалтыранды.

– Кешегә эшләшеп йөрө әң, кәрәгеңә алыр ың. Үҙҙәре түк ен. Аслан үҙеңдән кәм кешегә эшләшеп йөрөмә. Рәдиф тә булдымы кеше, ҡар түгешеп йөрөргә...

Өсөнсө көнөнә балаларҙың яңғыҙ йәшәгән Сибай ҡартҡа утын бысыуҙарын күреп ҡалды. Унда Хәлиме лә бар, пальто ын сисеп ташлап утын яра. Ғәшүрә түҙмәне, улын елтерәтеп алып ҡайтты:

– Нимә тинем мин иңә? Ниңә кеше эшен эшләп, өҫ туҙҙыра ың ин, ә? Йүнле кешеме ней ул Сибай сулаҡ.

– уғышта ҡул ыҙ ҡалған бит, ярҙам итәйек...

– уғышҡа кергән ти еңме шул, үҙенең ҡулын үҙе атып ҡайтҡандыр әле. Ҡара уны, үҙеңдән кәм кешегә эшләшеп йөрө әң...

Быңдай киҫәтеүҙәр күп булды, ул үҙенекен итте: малай өйөндә лә, мәктәптә лә, кешелә лә эш тотмаҫ булды, китап уҡыуға алышты. Мәктәптәге барса әҙәби китаптарҙы уҡып бөткәс, уҡытыусы ының өйөндәге китаптарҙы ташый башланы. Уға оҡланмаған кеше ҡалманы ауылда, бик юғары белемле ғалим булыр был, тиештеләр. Эйе, ололар ауыҙынан сыҡҡан оло үҙ кешегә доға булыр, тигән, имеш, пәйғәмбәр. Килде әйткәндәре – Хәлим унынсыны алтын миҙал менән тамамланы, көҙгә Совет Армия ына алынды. Тәүге йылда Ғәшүрәгә ирәкләп бул а ла хат килеп торҙо улынан, уңынан ниңәлер яҙмаҫ булды Хәлим. Шулай ҙа әсә кеше күрше-күләнгә ыр бирергә теләмәне. “Кешегә ыр биргәнсе, ыртыңды бир” тип, үҙаллы йәшәүен белде. Малы бар, пенсия ы килеп тора. Кистәрен йоҡлай алмай ятҡан саҡтарында Хәлименең әллә ҡасанғы хаттарын уҡып ала, төрлө хәтирәләргә төшөп китә.

...Эй, бала, бала. Бер саҡ мәктәптән ялтырап ҡайтып инде лә: “Әсәй, Сибай бабай ҡулын үҙе атмаған. Ветеран менән осрашыу булды. Берлин янындағы Одер йылға ын кискәс, бер ауылды алырға приказ бирелде, ти. Яҙғы ыуыҡ, баҫыуҙа ҡар аралаш батҡаҡтан ауылға табан шыуышабыҙ, ти. Шул ваҡыт немецтарҙың “Тигр” тигән танкы ы килеп сыҡҡан да беҙҙең алдаттарҙы ата, тапата башлаған. Танк минең яҡҡа килә башлағас, ти Сибай бабай, бер бәләкәй генә уба артына тәгәрәнем дә гранаталарымды тондорҙом тегеңә, ти. Танкының гусеница ы өҙөлгән, яна башлаған. Сибай бабай унда булған бөтә немецты ҡырған, вәт. Шуға орден биргәндәр – үҙе күр әтте. Граната ташлағанда үҙенең ул ҡулына немец пуля ы тейеп өлгөргән. Ә ин, үҙе атҡан, ти ең...” тип өйләне.

– еҙҙе, ней, алдайҙыр инде, шапырына. Алдаҡсы ҡарт бит ул. Бер көн, утын килтерәм, тине лә балнисҡа китеп барҙы, ауырыйым тип ылтаулап... Беҙҙә йүнле кеше юҡ ул хәҙер.

Шулай өйләшкәндәрен иҫенә төшөрөп, йылмайып ҡуя Ғәшүрә. Эй, улының зирәклеге. әр нәмәне онотмай ораша, төбәшә торғайны бит. Иҫән бул а, ҡайтып килер. Йорт яҡшы, мал бар, матур итеп донъя көтөп алып китер. Арыу ғына ки-

лен насип бул а, балалар үҫтерер. Ул сағында өләсәй булған Ғәшүрә әбейең түрҙә генә рәхәтләнеп, улының изгелеген күреп ултырыр. Төрлө тәмле хыялдар менән йоҡлап китә Ғәшүрә.

Донъя шулай ыңғай ғына, тыныс ҡына бар а икән. әр ваҡыт улай булмай шул. Уйламағандан ел-дауылы сығып, донъяны ҡыйрата, даръялар ярҙарынан сыға, бар нәмәне емерә. Тормошта ла шулай: уйламағандан йә бөтмәҫ сир аяҡтан йыға, йә күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы-хәсрәт килеп баҫа. Шәменә ут алып, улының арғайып бөткән хаттарын, ҡырҡ ҡабат уҡыуына ҡарамаҫтан, тағы ла күҙенә терәп ултырғанында ишек туҡылдаттылар. Унан Хәлимдең тәүге уҡытыусы ы Ғәлләм Ғәбитович менән ҡалын ҡыҙыл папка тотҡан ят кеше килеп инде. Яғымлы ғына аулашып, урындыҡҡа ҡунаҡлағас, ят кеше үҙен район тәьминәт бүлеге инспекторы Сәлимйәнов тип танытты ла ни эш менән йөрөүҙәрен әйтте. “Хәлимемә бер-бер хәл булмағайы”,– тип шөрләгән Ғәшүрә тынысланды... Ул алдашып ҡартлыҡҡа пенсия алып ята икән. «Ауыл Советында секретарь булып эшләгән сағында ҡус-ты ы тыуған йылын күпкә үҙгәрткән», – тиелгән ул аноним хатта.

– Паспортығыҙҙы ҡарайыҡ әле, – тигәс инспектор, төҫкә-башҡа йәп-йәш күренгән Ғәшүрә йылп итеп урындыҡҡа менде лә кәштә башына үрелде. Унын йәштәр кеүек етеҙлегенә аптырашып, бер-бере енә ҡараны тикшереүселәр. Дөрөҫ, паспорт буйынса ик әненсе йәштә булып сыға Ғәшүрә. Ултыра торғас, уйламаған орау биреп алды Сәлимйәнов.

– Хәлим еҙҙең үҙ улығыҙмы?

– Үҙем тапҡас, минеке булмай, кемдеке бул ын?!

– Уға хәҙер нисә йәш?

– Егерме. Нинә?

Инспектор бер аҙ шымып ултырҙы ла:

– Алтмыш йәштә лә бала табалар икән дә ә, – тип ҡуйҙы.

Әбей ыҡ-мыҡ килде, аҙаны. Тикшереүселәр, башҡа бер үҙ өндәшмәйенсә, ҡайтыу яғын ҡараны. Тик шуны ы: икенсе айҙа Ғәшүрәгә пенсия туҡтаны. Унын: “Хәлимем ҡайт ын әле, кәрәгең бирер”, – тип уҡытыусыға янаған үҙҙәре урам буйлап йөрөнө.

Өс йыл диңгеҙҙә йөҙөп, шығырлап торған моряк кейемендәге Хәлим ҡайтыуының икенсе көнөндә үк мәктәпкә килде. Кескәй уҡыусылары менән Яңы йылға концерт әҙерләп йөрөгән уҡытыусы ының муйынынан алды.

– Әсәйемдең пенсия ын ин генә туҡтаттырған ың. Нимә еҫе сыға, еҫкәп ҡара әле, – тип ул йоҙроғон Ғәлләм Ғәбитовичтың танауына терәне.

Уҡытыусы дөрөҫлөктө, үҙенең ғәйепле түгеллеген аңлатҡансы байтаҡ ваҡыт үтте, сәхнә артына ырыҡты төҫтәре ҡасҡан балалар.

– Әсәйҙең аҡса ын нисек юйҙыр аң, шулай кире юллап сығара ың, а то... – тип янап сығып китте ир еткән уҡыусы ы.

Уҡыусыңа ҙур өмөттәр бағлап, үҙ йөрәгенде бирерҙәй булып, бөтә булмышыңды, барлыҡ зи ененде түгә ең, унын ҡыйыш юлға баҫып абыныуынан ҡурсалай - ың, унын уңыштарына сабыйҙар шикелле өйөнә ең. Ә ул бала, үҫеп кеше булғас, ниндәйҙер элекке үпкә е өсөн инән үс алырға ниәтлә ә йәки нахаҡтан рәнйет ә, шунан да ауыры юҡтыр. Алманы бар хәленсә тәрбиәләп үҫтереп, унын ҡыҙарып бешкән сағында ғына ҡорт ашауы менән бер бит был... Бала тәрбиәләгәндә ел-ямғыр ыҙ булмай, әлбиттә. Насар холҡон төҙәтәм тип орошҡан, ҡатыраҡ бәрелгән саҡтар ҙа була. Уны ын онот асы бала. Юҡ, рәнйеүҙәр онотолмай. Хәлим өсөн дә Ғәлләм Ғәбитович аҙ көс түкмәне. Яҡшы уҡы а ла, әллә ниндәй аңлай алмаҫлыҡ характерлы малай ине. Ул – иптәштәрен, иптәштәре уны яратманы. Ысын дуҫтары булманы ла, шикелле. Был турала әсә е менән әңгәмәләшеп тә ҡарағайны, файҙа ы теймәне. Дуҫлыҡ, кешелеклелек тойғо о тәрбиәләй алманы бул а кәрәк Ғәлләм ағайы Хәлимдә.

Ғәшүрә балаларҙан мәктәптәге был ситен хәлде – улының уҡытыусыны муйынынан алыуын – ишеткәс: “Шулай кәрәк, Хәлимем ымаҡ бул ындар әле тәүҙә, йәтеш иткән, әллә кем булып кеше тикшереп йөрөмә ен”, – тип үҙенсә ығымта

яап ҡуйҙы. Уҡытыусы Хәлимдең ҡыланышына тешен ҡыҫып түҙҙе, әбейгә пенсия юллап бирҙе, әммә алдашыу юлы менән түгел, Ғәшүрә пенсия йәшенә еткәс кенә.

Хәлим икенсе көҙгә тиклем әсә енең барлыҡ хәрезе менән ауылда болғанлап йөрөнө лә, берҙән-бер туҡал ыйырын аттырып, табиплыҡҡа уҡырға китте. әр йәйҙә ул, үҙҙәрендә донъя нығытыу урынына, әсә енең үҙенән нисек кәрәк арттырып йыйған аҡса ына иптәштәренең ауылдарына ыпыртты. Институттың уңғы йылына барыр йәйҙә генә ҡайтып килде. Китер алдынан ҡартайып уҡ килгән әсә енең эргә енә ултырып, йыландай телен уҙып юхаларға кереште. Әсә йөрәге – күл. Уға бер йылы үҙ етә, рәнйеүҙәрен онотоорға, ғәзиз бала ы өсөн йәнен бирергә әҙер тора. Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала, тип бушҡа әйтмәгәндәр инде.

Ҡояшлы август көнө. Бер еренә лә серек төшмәгән өйәк кеүек ныҡ шыршы өйҙөң ҙур тәҙрәләренән төшкән нур бүлмә эсендә уйнай. Ғәшүрә әбей ифрат шат, берҙән-бер улы килә е йыл табип булып, ҙур кеше булып ҡайтасаҡ. Ниндәй итәғәтле бала үҫтергән ул. Ана бит, өҫтәл янына иплəп ултырып, көләс йөҙ менән әсә ен эргә енә саҡыра, яҫы ап-аҡ тештәрен ялтыратып иплe үҙҙәр өйләй.

– Әсәй, уҡып сығып эшләй башлау менән мин ине үҙемдең яныма күсереп алырмын, етеш донъяла рәхәтләнеп йәшәр ең.

Әсәнең йөҙө яҡтырып китте. Ләкин әңгәмә ҡапыл икенсе төҫ ала.

– инең аҙ-маҙ пенсияң, стипендия аҡса ы менән генә уҡыуы, ҡалала көн итеүе бик ауыр, быйыл диплом яҡларға кәрәк. Ни атырға малың юҡ. Давай, өйҙө атайыҡ...

Ғәшүрә әбейҙең сәстәре үрә торҙо. Ул, үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмай, албырғап ҡалды.

– Аптырама, әсәй, мин эшләй башлағас, бынан да ҙур итеп, яңыса алырбыҙ йортто. атайыҡ, шун ыҙ әмәл юҡ. Юғи ә уҡыуҙы ташлап эшкә инергә тура килә, – тине Хәлим. – Алыусы бар, мин белештем, инең ризалыҡ ҡына кәрәк. Ниңә, берәй ҡыш күршеләрҙә йәшәп торор оң.

– Әлләсе, – тине әсә е, көр өнөп, – атайың мәрхүм был өйҙө үҙ беләк көсө менән генә алғайны уғышҡа китмәҫ борон, уның шунан башҡа ҡомартҡы ы юҡ бит.

– Ҡомартҡы, ҡомартҡы, имеш – үҙе булмағас, уның тынҡырлап ултырған буш өйөнән ни файҙа? атып файҙа ын күрәйек, исма ам.

– Шулайын шулай ҙа, донъяны бөтөрөүе генә ан ат, яңынан ҡороуы бик ауыр ул. Был йортто атайың менән икәүләп тигәндәй алдыҡ. Ағас ҡырҡышырға, бүрәнә әрсешергә, таҡта ярышырға атайың мәрхүмдән бер аҙым ҡалмай йөрөнөм, көсө етмәгәндә бүрәнә ен күтәрештем. Ә аҙлыҡта мүк йолҡоуҙары, еүеш мүкте ташыуҙары еңел булған ти еңме?!. Бил еҙ ҡалдым, эсем түбәнәйҙе, балнисында саҡ кеше итеп сығарҙылар...

– уң, әсәй, үҙең нимә тип өйрәтә торғайның, – тип Хәлим урынынан тороп уҡ китте, иҙәндә кәлеп ала- ала ныҡышыуын белде. – Үҙеңдән кәм кешегә инәлмә, баш эймә, үҙеңде эре тот, ин бит иң зирәк бала, ти торғайның. Хәҙер мин, диплом алыр йылымда, шул үҙемдән кәм әҙәмдәргә аҡса орап барайыммы? Ғәрлек бит. Анау әҙәм рәтле белеме лә булмаған Рәдифкә тоҡсай тотоп барайыммы? Ә бит ҡай ы бер атай-әсәйҙәр балаларына машина алып бирәләр хатта, бер нәмәләрен йәлләмәйҙәр. Ә минең өҫтә йүнле кейемем дә юҡ. Ят ергә врач булып ошо кейемдәр менән нисек барып төшөрмөн, әҙәмдән оят... атайыҡ өйҙө, әсәй. Яңы ы булыр уҡып сыҡас.

–Хөкүмәттән ярҙам алып тороп булмаймы уң?

–Юҡ, әсәй, донъя ҡороусыларға ғына бирелә ул ссуда... Йә, ни хәл итергә? Әллә уҡыуҙы ташлап, леспромхозға утын киҫеүсе булып керә е, – тине Хәлим кинәйә менән.

–Аллам аҡла ын! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Ғәшүрә әбей, – шулайтмай ней, атайың мәрхүм ғүмере буйы урманда туҡылдауы етмәгән, исма ам, ин уҡып кеше бул... ат өйҙө, уҡып бөт, – тине әсә кеше, эсе ян а ла.

Хәлим Ғәшүрәне күршеләренә өйҙәш сығарып, йорт аҡса ын тиненә тиклем кеҫә енә алды ла институтына ыпыртты. Дипломын яҡлағас, икенсе районның ҙур ғына поселогындағы участка больница ына баш врач итеп ебәрелде. Өйҙәш йәшәп йонсоған, бәлтерәгән Ғәшүрә әбей улының икенсе йыл эшләп йөрөгәнендә генә, адресын табып, шул ауылға юлланды. Унда ла күршеләренә: "Ауыр эштә бит Хәлимем, бушамайҙыр, хәҙер ней танауҙарынан үл аҡ а ла балнис, аяҡтары ыҙ-ла а ла балнис тип йүгерәләр, бушамайҙыр балаҡайым, үҙем барып хәлен беләйем», – тип өйләнде.

***

Хәлим Сәлимович эшләгән районға килеп еткәс, бәләкәй генә сепрәк моҡсай тотҡан Ғәшүрә әбей поездан төштө лә вокзалда ҡайнашҡан кешеләрҙән улы йәшәгән ауылды орашты. Яҡын икән, бынан игеҙ саҡрым ғына. Бәләкәй сана өйрәп, алтмышар саҡрымды көрт йырып үткән кеше әле мин, таҡыр юлда игеҙ саҡрым нимә ул, тип әбей бер таяҡ эҙләп алды ла юлға сыҡты. Ялан юлы тигеҙ, е-пертмә ел ҡарҙы баҫыуҙарға ташый. Йоҡа кейемле әбейҙең ҡуйындарына тула, уны ҡалтырата, күпме генә ҡыҙыу юрғалама ын, йылына алмай әбей. Ҡулын йы-лыт а – ҡан ыҙ йоҡа биттәре, сикәләрен ышҡы а, бармаҡтары туңа. Ара-тирә йөк машиналары уҙып тора. Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, улары ла Ғәшүрә әбей бар-ған яҡка түгел, гел ҡаршы ына. ыуыҡты еңергә тырышып, әбей йылы хистәргә бирелергә, Хәлимен күҙ алдына килтерергә самалай. Ана, алдында ҡара ҡашын төшөрөп, ап-аҡ йөҙлө Хәлиме тора, күҙҙәре йәшләнгән.

– Нимәгә балауыҙ ыға ың? – ти улына.

– уғыштыҡ. Рәдиф уҡты.

– Шул йыбытҡынан уғылып тора ыңмы? Кеше уҡ а, үҙенән яман тондор, туҡ-малып йөрөмә аслан. Ҡана, үҙем барып кәрәген биреп киләйем әле йолҡоштоң...

Рәдифтәрҙең өйөнә барҙы-барыуын, ләкин малай йәшенеп өлгөргәйне. Ярай әле, тегенең әсә е тынысландырҙы: уғышып йөрөгәне өсөн ул Рәдифен сыбыҡ-лаған икән. е, бына шулай, себештәрен аҡлаған инә ҡоштай ҡурсалап үҫтерҙе бит ул Хәлимен... Бына барып күрәйем, йылы өйөнә инеп, йомшаҡ урынында аунайым. Улымды уҡытып кеше иттем, изгелеген күрәйем ҡартлыҡ көнөмдә, Ал-ла бойор а...

Юлды ыратырға булып, әбей бер аҙ көйләп килде.

*Күтәрмәлә ишек, күндер итек,*
*Йүгереп барып типмәй асылмай,*
*Елмерҙәкәй тауы алыҫ ҡалды,*
*Бер йырламай күңелем баҫылмай.*

Шул саҡта буран уйнатып ҡаршыға килгән ҡыҙыл тәреле йәшел машина әбей-ҙе уҙа биреп туҡтаны ла, ҡысҡыртып, арты менән кире килә башланы. Юл биреп ситкә тайпылған Ғәшүрә әбей тәңгәленә етеү менән туҡтаны, ишеге шар асылып, унан фырт кейенгән, күҙлекле йыуантаҡ ир кеше еңел генә икереп төштө. Эстә сейә иренле ылыу ҡатын күренеп ҡалды.

– Сәләм! – тине теге кеше ҡалын тауыш менән. – Беҙгә киттеңме? Йәл, юҡка, юҡка... Көтөргә кәрәк ине... Йәл, өйҙә булмайым, мине бер айлыҡ курсҡа ебәрҙеләр. Мә, ҡайтыуыңа аҙ ғына бул а ла юллыҡ аҡса ал, әсәй, – тип шыбырла-ны ла, ун ум аҡса тотторып, йылп итеп машина ына инде әм күҙ асып йомғансы юҡ та булды. Унлыҡты усында йомарлап торған әбей ни эшләргә белмәй аҙап ҡалды, быуындары бәлтерәп, ҡарға ултырҙы, күҙҙәренән йәштәр атылды. "Бәй, Хәлимем булды түгелме уң? Өнөммө-төшөммө, шул бит, "әсәй" тине бит балаҡ-айым, ашыға, поезға уңлап ҡуймайым, тиҙер... Хәйер еҙ юлға сыҡҡанмын икән. Бер айға киттем, тиме?.. Уф Алла, ни эшләйем икән?"

Ғәшүрә әбей үҙе лә иҙмәҫтән кирегә, машина киткән яҡка, юрғаланы, "Хәлим, Хә-ә-әл-и-и-им, – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡулдарын болғай-болғай йүгерҙе, – көтөп то-о-ор!" Шул ыңғай юлға йөҙтүбән ҡапланды ла үк ергә кереште: "Эй, Хо-ҙайым, ал йәнемде, ғазаплама күп".

Тороп ҡағынды, бер-ике аҙым атланы ла тағы туҡтаны. Кире китергә ваҡыт уң

бит, ауыл яҡындыр инде, еткәс етеп ҡайтайым ауылдарына тип, әбей тағы юлын дауам итте. Бер аҙ барғас, башына тағы шундай уй килде: “Унда барып уң, кемгә инермен? Хәлим өйҙә юҡ та а, мине кем белә?” Албырғаған әбей тағы станция яғына ыңғайланы: “Ярар, булыр әле, моғайын, поезы”. Юҡ, аяғы башҡаса кирегә атламаҫ булды. Ул ауыл яғына боролдо. Ялан еле уны нығыраҡ ҡороштора башланы, ҡуйынында, итәк аҫтарында өйөрөлдө. епертмә ҡар кейемен ырыны. “Ҡуй, ауылға барып ҡунайым, берәй изге бәндә өйөнә индерер әле”, – тип Ғәшүрә юлын ауыл яғына тотто. Күҙ бәйләнеүгә генә унда барып етте. Ул, туңған ҡулдарын ыуалай-ыуалай килеп, иң остағы өйҙөң ҡапҡа ын туҡылдатты. Ипләберәк ҡара а, эт башындай йоҙаҡ менән бикле булып сыҡты ҡапҡа. Икенсе өйҙөң селтәрле ҡапҡа ына килде, туҡылдатты, ашарҙай булып яр ыған эт лауылдауынан башҡа тауыш ишетелмәне. алҡындан тамам ҡатҡан әбей өсөнсө өйгә килеп терәлде. Изге йән бар икән әле донъяла – үҙе кеүек көмөрәйеп бөткән бер ҡарсыҡ ҡапҡа ын асты ла ғәжәпләнеп ҡарап торҙо әм, телгә килеп:

– Мынау селләлә берәй яҡтан килә еңме әллә, ин-ин, туңған ың бит, – тип яҡты өйөнә саҡырҙы.

Яңғыҙ ғына йәшәгән был Мөслимә исемле әбей алсаҡ, үҙсән булып сыҡты. Тиҙ арала юлсының кем икәнлеген, ҡайҙа китеп барыуын белеште, сәй ҡайнатты, ят әбейҙе ыйларға кереште. Ғәшүрә улын юллап килеүен йәшерҙе, Хәлимдең абруйын аҡларға булды.

– Врачығыҙға күренәйем тигәйнем, арыу кеше, әр ауырыуҙы белә, тип ишеткәйнем, – тигән булды.

Ҡайнар сәйен эсеп ултырған Мөслимә ҡарсыҡ йәнләнеп китте.

– Врашыбыҙ бик белемле. Тик әллә ниндәй холоҡло, аңламаҫ ың, – тине ул, сәйен емереп, – үҙен враш тип әйттермәй, доктор тип әйтергә ҡуша икән, йәнә е, враш үҙе врать үҙенән алынған, имеш, үлергә ятҡан кешегә йүнәлә ең тип алдауҙары бар инде былай.

– Әллә ниндәй холоҡло, тинең духтырығыҙҙы. Ниндәйерәк уң? – тип орап, Ғәшүрә әбей улы хаҡында күберәк өйләтергә теләне. Теге е инәлтмәне, белгәндәрен сурытты ғына.

– Әкәмәт холоҡло шул. Доктор кеше иммәтле, йыуан булырға тейеш, тип төндәр буйы ҡатыҡ емереп сыға, тип сестралары өйләй. Кеше өймәҫ әҙәм ул. Яңыраҡ үҙ ғүмеремдә бер тигәндәй күренергә барғайным, ашҡаҙан тирә е сәнскеләгәс. Ҡарап, орап та торманы: “Ҡартайған ың, үлер сағың еткән”, – тип, дарыу ҙа яҙмай, ҡайтарып ебәрҙе. Эй үпкәләнем, эй ғәрләндем. Докторҙың арыу үҙе үҙе тәнгә бер сихәт бит, нисек итә ең, улар менән даулашып булмай. Ана, яңыраҡ Ҡотлогилде ҡартты телләшкәне өсөн балнисынан төрткөләп сығарған. Ҡарт: ”Мин фронтовик, мин ветеран, минең ымаҡ ҡырҡ йыл эшлә әле”, – ти ә, доктор: “Тәүҙә минең ымаҡ ун алты йыл отличноға уҡы әле, шунан миңә өйрәтер ең, марш иҫән сағында”, – тип аҡыра, ти, әстәғәфирулла! Беҙгә йүнле кеше киләме ни. Нисәмә йыл арыу враш күргәнебеҙ юҡ. Инде белемле, йәш кеше килде, тип өйөн әк, быны ы ла кеше өймәҫ әҙәм булып сыҡты, оҙаҡ эшләй алмаҫ ул, былай ҡылан а. Беҙҙең ауылда ла грамутнайҙар күп.

Бер ағарып, бер күгәреп ултырған Ғәшүрә әңгәмәне өҙөргә теләмәне.

– Бисә е, бала-саға ы бармы уң? – тигән булды.

– Юу-у-уҡ, – тип уҙҙы йорт хужа ы, – буйҙаҡ, әллә кемдең генә ғәзиз балаҡайын йонсотор инде кеше өймәҫ бәндә. Өйләнмәгән бул а ла, яңғыҙ йәшәмәй, тиҙәр. Әзмәүерҙәй йәш нәмә ни, үҙенең ылыу бер медсестра ын артынан ҡалдырмай икән. Арбала – ярышлап бергә, ауылдарға кит ә – тағы янында. Ә ул ылыуының өйөндә, ҡарт бул а ла, ире көтөп ултыра. Нисек түҙәлер шуларҙы ишетә тороп, бахыр. Әҙәмдән оят инде... е, хәҙергеләр халыҡтан ояла беләме, биттәренә туҙ ҡаплаған бит улар. Кем генә тәрбиәләп үҫтергәндер инде әҙәм өймәҫ тупаҫ зат итеп ул враштьі. Шул холҡо менән докторлыҡҡа уҡымаҫҡа, ә милицияға уҡырға кәрәк ине. Вәт, килештерер ине.

“Кем генә тәрбиәләгән икән?” тигән үҙ Ғәшүрәнең йөрәген өтөп алды. “ уң

бөтә көсөмдө, хәреземде биреп, ас-яланғас итмәй, матур тәрбиәләп үҫтерҙем, мал ыҙ-өй өҙ ҡал ам-ҡалдым, белем бирергә тырыштым. Ни эшләп, кемгә оҡшап былай яман холоҡло булып үҫте икән балам? – тип әсенә ине әбей күңеленән. – Ана, Рәдиф әсә енең сыбығын аҙ татынымы, йыртыҡ кейем менән балта-бысҡынан айырыла алманы малай сағынан уҡ. Белем еҙ бул а ла, ана, ҡай ылай деңләтеп донъя көтә, балалар үҫтерә, әсә е түрҙә генә аяҡ бөкләп, әҙергә-бәҙер булып ҡына ултыра. Ә мин... мин бәхет еҙ. Бер бөртөк улымдың изгелеген күрә алмай ҡаңғырып йөрөйөм. Мин дә ейәндәремде өйөп, йылы түрҙә ултырырға яратыр инем. Ниңә Хоҙай Тәғәлә былай ҡарғаны икән, бер кемгә лә зыяным тейгәне булманы ла а...”

***

Йоҡларға яткас та ике әбей, әхирәттәр кеүек, оҙаҡ ҡына сөкөрләште. Мөслимә әбей ҙур ихласлыҡ менән балаларын, кескәй ейәндәренең ҡыланыштарын өйләп ятты. Биш бала үҫтергән, бары ы ла тейешле белем алған, матур донъя көтәләр икән. Биш ғаиләлә ун ике ейән-ейәнсәре үҫеп килә, ти, бәхетле өләсәй. Йәй айын ҡаланан берәй айға килеп, ял итеп, утын-бесән әҙерләшеп китәләр икән. Мөслимә әбей кейәүҙәрен дә, килендәрен дә ауыҙының ыуын ҡоротоп маҡтай. “Үҙҙәре янына алып китергә итәләр ҙә, – ти Мөслимә әбей, – юҡ, үҙ донъямды ташлап, бер ҡайҙа ла китмәйем, яңғыҙ йәшәп өйрәнгәнмен инде. Ана, Мөхәмәтша ҡарттың улы ата ының бар донъя ын аттырып, күсереп әпкиткәйне, ярты йыл да бергә йәшәй алманылар. Бөлөнөп ҡайтып килде, бахыр. Хәҙер кеше туп а ында йөрөй. Бүтән өй алыр ине, аҡса юҡ, малайы машина ына тыҡҡан. “Аҡсаны бир”,– ти ә, “Ҡайҙа мин аҡсаңды алғаныма ша итың?” – ти икән улы. Минекеләр улай итмәҫтәр ҙә, яңғыҙ йәшәп өйрәнгәнмен инде. Йылы үҙҙәре бул а, шул еткән. Аллаға шөкөр, донъям бөтөн, пенсия килеп тора, аҡсаны өйөмә генә килтереп тотторалар”.

– Бәхетең бар, – тип ҡуйҙы Ғәшүрә әбей. – Ейәндәреңдең арҡа ынан тупылдатып өйөүе үҙе ни тора, оло бәхет, ҙур шатлыҡ бит.

Үҙ бәләкәстәргә күскәс, Мөслимә әбей, теш еҙ ауыҙын йырып, тороп уҡ ултырҙы.

– Ҡалала ни иптәштәре урыҫ балалары булғас, бында кил әләр ҙә урыҫса лыҡылдашалар. Бел әм дә, бер үҙ ҡушмайым тегеләргә урыҫса. Бер айҙа апаруҡ үҙебеҙсә өйләшеп ҡайта суҡынмағырҙар. Кинйә ҡыҙымдың улы Ринат бигерәк ҡыҙыҡ. Бергөн иртәнсәк юрған аҫтынан тороп килгәнендә: “Кемдең башы сығып килә шул юрған аҫтынан, ә?” – ти әм, ҡолонсағым: “Хоҙайым биргән баш та-а”, – тимә енме! Шунан алдараҡ “Хоҙайым биргән малай” тип өйгән булғайным, шуны отоп та алған. Зирәк баш. Ә уртансы улымдың бәләкәс ҡыҙы – Мәфтуха ы – ишшыу йәтешерәк. Апа ы урынға алып, күҙенде йом, ти ә, күҙҙәрен сырт йома ла йоҡлама а ла шулай тик ята, күҙенде ас, тимәйенсә асмай. Мин йәлләйем, ә уларға көлкө, әйҙә, шаяралар... Донъялар тыныс тороп, бәхетле ғүмер бир ен инде Хоҙай Тәғәлә.

“Баланың күплеге, бәлки, лутсылыр, – тип уйланы Ғәшүрә, – бергә уйнап, бергә эшләп, гөрләшеп үҫәләр, бер-бере енә ҡарауыл. Ә яңғыҙ бала ин ә-сыҡ а ла яңғыҙы, ят кеше бала ына ыйынған була ла, улары инең балаңа йүнле тәрбиә бирергә торамы?”

Мөслимә әбейҙең ләззәтләнеп өйләгән хәбәрҙәре Ғәшүрәнең йөрәген өҙгөләне. Ул Хәлимен күҙ алдынан ебәрә алмай, уны тәрбиәләп үҫтергәндә булған гона тарын эҙләй, ләкин таба алмай.

Иртәгә ен ҡарсыҡ таң менән ҡыптыр-ҡыптыр йүнәлде дауаханаға. Исма ам, эшләгән урынын, йәшәгән ерен тыштан бул а ла күреп китеү ине ниәте. Барҙы, ләкин “ниңә килдем икән бында” тигән көнгә төштө. “Ауыл – ауыҙ” тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Аҡ халатлы ике бисә – сестраларҙыр инде – бер-бере енең ауыҙына керә яҙып, ләстит аталар. “Ауылда ниндәй хәбәр бар – ошонда икән”, –

тип уйлап ҡуйҙы Ғәшүрә.

Ул тегеләрҙең хәбәренә ҡолаҡ алды: бышылдап ҡына өйлә әләр ҙә, үҙҙәре асыҡ ишетелә ине.

– ...Эйе, сессияла булған, вәт, – ти йыуантағы, – тетмә ен теткәндәр депутаттар Хәлим Сәлимовичтың.

– Үҙен бигерәк эре тота ине, – ти икенсе е, – йәтеш булған.

– Йәтешен-йәтеш тә, тағы доктор ыҙ ҡалдыҡ бит, – тип үҙен дауам итә йыуаны, – тәнҡиткә сыҙамай, кисә ни пыр туҙып ҡайтып киткән, ти бит, шоферы әйтә.

“Йә, Хоҙай, – тип Ғәшүрә әбей ауыҙ эсенән лығырлап ҡуйҙы, – уҡырға киттем, тип мине алданымы? Эй, балам, балам”.

Ул, хәлдең айышына төшөнөү өсөн, тегеләргә яҡынараҡ шыуып ултырҙы, ят әбейгә иғтибар итеүсе булманы. Иртәрәк ине шул әле ауырыуҙарҙы яҙырға.

– Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та булған ул сессияла, вәт, – ти имеҙ сестра, – Хәлим Сәлимовичтың отчетынан уң унның эшен лесхоз директоры менән участка мастеры ауыҙҙарының ыуҙарын ҡоротоп маҡтарға керешкәндәр икән, ветеран Нурғәлиев бабай, ырғып тороп, ауыҙҙарын томалаған тегеләрҙең: “Эштә белемлелек кенә етмәй, – тип әйтә, ти, вәт. – Кешемен тигән бөйөк исем йөрөткән әҙәмдәргә иғтибарлы, ихтирамлы булыу мотлаҡ врач кешегә. Ауырыуға йылы үҙ – үҙе йән аҙығы. Ә беҙҙең больницала заманында фронт өсөн күмер яндырған, бына тигән биш бала үҫтергән Мөслимә әбей, кәкрәйеп бөткән ветеран Ҡотлогилде ҡарт ҡыуылып сыҡҡаны ишетелә”, – тип әйтә, ти, вәт. Дөрөҫ әйткән: ҡыуҙымы – ҡыуҙы, үҙебеҙ күрҙек... Ялған, ошаҡсы ин, тип ҡысҡырған була, ти, Хәлим Сәлимович. Тегене е ишшыу ҡыҙып киткән. Улары ялған бул а, бына ысын факт, тип теге былтыр анау урмансы Шәйхетдинде ҡарамай, эсеп килгәнең, тип ҡайтарғанын өйләгән, уны ы элек эсмәгән булған, шунан аҙаҡ эскесегә әйләнгән, ти, вәт. Теге балыҡҡа барып, участка мастеры рулгә еңмешләнеп ултырыуын әм машина ын соҡорға ҡолатҡанда атыусы егетте үлтереүен, мастерҙы енәйәт эшенән доктор ҡотҡарып алып ҡалыуын да ҡалдырмаған. Кеше өймәҫ бәндә, бюрократ ин, тип әйтә, ти, вәт. Ҡаты шелтә биреп, ҡарарҙы район аулыҡ аҡлау бүлегенә бирергә булғастары, докторыбыҙ сыҙамаған, тайған таң менән...

Аҡ халатлы ике бисәнең шомло хәбәрҙәрен ишеткәс, Ғәшүрә әбейҙең арҡа буйҙары зымбырлап ҡуйҙы, ҡалтырана башланы. Урынынан саҡ күтәрелеп, өмөт өҙлөк менән бүлмәнән сыҡты. Алда ҡараңғылыҡ, билдә еҙлек ине. Хәлтәслимгә ҡайтып етте етеүен ауылына, әммә ауырыуға дусар булды, больницаға барып йығылды. Көттө улын. Ләкин «әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала».

Күҙенең ҡара ы кеүек, ел-ямғырҙан аҡлап үҫтергән ғәзиз улының адресын шулай юғалтты Ғәшүрә әбей. Ул больницаның эре тәҙрәләре янынан китмәне. Был-бына ҡыҙыл тәреле йәшел машина ҡар туҙҙырып килеп туҡтар ҙа унан фырт кейемле Хәлиме килеп сығыр, ҡосағын йәйеп уға ташланыр, үҙенең яңыса алынған күркәм йортона алып ҡайтып, түргә ултыртып ҡуйыр төҫлө тойола ине.

Дөрөҫ, Хәлим Сәлим улын эҙләп ҡаранылар, әммә оҙаҡ көттөрөп бул а ла “Эйе, беҙҙә ундай кеше эшләп китте” тигән яҙыуҙан башҡа йылы хәбәр килмәне. Рәдифтең әсә е бер көн: “Хәлим, ней, эскегә алышҡан, бер ерҙә лә эшләмәй икән”, – тип өйләнгән. Себер яғына олаҡҡан, имеш, тигән хәбәр ҙә бар.

Элегерәк, торғонлоҡ йылдарында, беҙҙең арала Хәлим ымаҡ бәләкәй бюрократтар булғылай торғайны. Бюрократтың оло о ни, кесе е ни – барыбер, тормошта зыян ғына килтерә. Халыҡ боҙоҡлоҡто онотмай, ҡырын эш ҡырҡ йылдан уң да беленә.

**1987 йыл.**
**Матбуғатҡа С. Шәйхулова әҙерләне.**

# УҠЫЛМАҒАН ХАТ

*Был донъяға илап түгел,*
*Көлә-көлә килгәнмен.*
*Көлөү бәхет икәнлеген*
*Тыуғанда уҡ белгәнмен.*
*Был донъянан илап түгел,*
*Көлә-көлә китермен.*

***Мар. Сәлим.***

1

Планетала аҡыл ҡеүә е булған, йәшәгән мөхитен, үҙен аңларға әләтле йән эйә е Кеше йәшәүе – Ер шары менән Йы андың берлектәге мөғжизә е. Ошо яҡты донъяға барыбыҙ ҙа үҙ иркебеҙ менән түгел, ә тирә-яҡ мөхит әм үҙебеҙ өсөн көтөлмәгәндә генә яралабыҙ.

“Тормош – беҙ көтөп алмаған бүләк ул”, – тигән философ А. Конар. Был, әлбиттә, хәҡиҡәт, әммә кеше лә донъяға тәбиғәттең йәшәүе, үҫеше эҙемтә е буларак барлыҡҡа килә. Тимәк, ул да – тәбиғәттең үҙенсәлекле сағылышы йәки, башҡа йәндәр тереклек иткән кеүек үк, законлы күренеш. Ошо йә әттән кешенең донъяға килеүе, тәбиғәттең йәнле киҫәге булып йәшәүе – объектив ысынбарлыҡ, хатта зарурлыҡ әм матди донъяны тулыландырып тороусы төшөнсә.

Кеше – бары ына ла баш, тормош нигеҙе, йәмғиәтте тотоп тороусы. Ул ижад итә, ҡора, тормошто, йәмғиәтте камиллаштыра. Үҙе лә – матди донъяла тиңдәше, быҒаса билдәле булмаған ( әр хәлдә беҙгә ул хаҡта билдә еҙ) ғәҙәттән тыш ирәк күренеш.

Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡасандыр донъяла мөғжизә булған әм ошо юлдарҙың авторы, мин, донъяға килгәнмен. Ул көн – бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ өсөнсө йылдың беренсе авгусы, шәмбе. Әсәйемдең хәтерләүенсә, бер көн элек, йәғни йома көн, утыҙ беренсе июлдә ул, иртәгә балам тыуыр, тип күҙ алдына ла килтермәгән. Әммә төштән уң көн ҡырҡа үҙгәреп, көслө ел сығып, күк йөҙөн ҡара болоттар ҡаплап, ямғыр яуа башлағас, әсәйем хәле насарайыуын тойған. Тәбиғәт әм кешеләр өсөн ҡәҙимге ауа торошо әсәйемдең физик, психик хәленә ҡырҡа йоғонто я аған. Уның нервыларын ҡуҙғытып ебәргән, ҡапыл ғына ҡан баҫымы күтәрелә башлаған, тәнен ауырлыҡ баҫҡан. Иң мө име, уны әллә ҡайҙан килгән борсоулы уйҙар биләп алған. Ул арала ямғыр ҙа көсәйеп, киске яҡҡа ҡойоп яуа башлаған. Ихата-урамдар буйлап ыу йылғалай аҡҡан, юлындағы нәмәләрҙе лә ағыҙып алып киткән. Күк йөҙөндә тәүҙә үрән генә, артабан көслө йәшен йәшнәгән. Тора-бара уның уҡтары күк йөҙөн буйҙан-буйға киҫеп үтеп, остары ер өҫтөнә лә етә кеүек тойола башлаған. Уның артынса яман тауыштар сығарып күк күкрәгән. Торған айын көсәйә барған дөбөрҙәүҙәр ауыл өйҙәрен генә түгел, хатта Ер шарының үҙен дә елкетә кеүек тойолған. Көслө ел, көтмәгәндә килеп ябырылған дауыл өй алдындағы тирәктең, уның янындағы өйәңкенең ботаҡтарын ергә тейерҙәй итеп бөккән, әммә ындыра алмаған. Ағастар, кешеләрҙән шәфҡәт ораҒандай, ҡай ы саҡ өй тәҙрәләренә лә уҡҡылап алған. Шатлыҡҡа күрә, ҡаты ағастан я - алған тәҙрә рамдары ныҡ булып, баҫымға бирешмәгән.

Әсәйемдең хәле насарайғандан-насарайған. Сөнки бала тыуыу өйәнәгенең яҡынайыуын тойған. Билдәле, бындай ваҡытта ауырлы ҡатындар үҙҙәрен насар хис итә. Биҙрәләп яуған ямғыр, уҡырайтырҙай булып ялтлаған йәшен уты, ҡот осорлоҡ күкрәү тауыштары былай ҙа ҡыйыу ыҙ әсәйемдең ҡотон алған. Үҙе, ғаилә е, тыуасаҡ бала ы өсөн ҡурҡыу тойғо о кисергән ул. Ә бит әсәйемә ни бары утыҙ йәш булған, әм был уның беренсе бала көтөүе лә түгел, әммә ошоғаса уға бындай тойғо кисерергә тура килмәгән. Аңлайыш ыҙ хәл – борсолоу әм ҡурҡыу йәш ҡатынды бөтөнләй быуып алған, меҫкен әсәйем үҙенең ни өсөн ошо хәлгә төшөүен аңлай ҙа, аңлата алыр ҙа әләтен юғалтҡан. Ул Алла ы Тәғәләнән ярлыҡау ораған, был ғәрәсәттең имен генә үтеп китеүен теләгән. Шул уҡ ваҡытта, был ниндәйҙер гона ым өсөн ебәрелгән яза түгелме, тип тә уйлаған. Тик ни өсөн? Уның бер ниндәй ҙә гона ы юҡ. Бәлки, был ғәрәсәт сәбәбен башҡа тирәнән эҙләргә кәрәктер? Әйтәйек, бәхет йәки күрәҙәлек билдә е итеп? Булмаҫ тимә, бары ы ла Алла ы Тәғәлә ихтыярында бит.

Ә дауыл дауам итеү генә түгел, хатта көсәйә барған. Төн урта ы ауып, сәғәттәр яңы тыуған тәүлекте иҫәпләй башлағас, өй янындағы тирәкте йәшен атҡан, уның дөбөрҙәүенән хатта өйҙәге өҫтәл менән шкаф та елкенгеләп ҡуйған. Әсәйемде ҡалтыраныу баҫып, ул ысынлап та бик ныҡ ҡурҡа башлаған. Ул бына-бына өйәнәге башланасағын тойған.

Мин – әсәйемдең өсөнсө ө, шуға күрә лә бала өйәнәгенең нисек килеүе уға ят кисереш түгел. Эргә енән китмәгән атайымды ул урамыбыҙҙа йәшәгән апай- еңлеләрен, әбейҙәрҙе саҡырып килтерергә ебәргән. Элек тә ҡатын-ҡыҙ бала табыр алдынан шулай эшләгән. Башҡа төрлө әмәл юҡ, әүәл-әүәлдән килгән йола шуны ҡуша.

Оло юлдан, шау-шыулы ҡалаларҙан ситтәге Борай районының Иҫке Ҡарағош ауылында ул саҡта фельдшер ҙа, акушер ҙа булмаған, ә табип тура ында инде әйтергә лә түгел. Бала табыусы ҡатындарҙың күҙ терәгән берҙән-бер кешеләре – кендек әбейҙәре. Ә махсус санитария шарттары, медицина ярҙамы тура ында кешеләр хыял да итмәгәндер.

Атайым ҡойма ямғыр аҫтында ҡатын-ҡыҙҙарҙы саҡырырға йүгергән. Рәхмәт инде уларына, бере е лә, тышта кеше сығырлыҡмы ни, тип уҡранмаған, тиҙ генә килеп еткәндәр. Әсәйемдең бер туған апа ы Дания, атайымдың еңлеләре Мәфтуха, Закира, кендек әбейе Мәрйәм ҡарсыҡ булған улар.

Атайыма өйҙән сығып торорға ҡушҡандар. Бала тыуғанда өйҙә ир-ат заты булырға тейеш түгеллеге, дин әм әҙәп күҙлегенән сығып урынлашҡан ғөрөф-ғәҙәт буйынса, мосолмандарҙа элек-электән килгән.

Мин тыуғанда өлкән апайым Вәсиғәгә – дүрт, бәләкәйе Йәннәткә ике йәш булған. Атайым, әлбиттә, малай тыуыуын теләгән, Алла ы Тәғәләнән ошо теләген ҡабул итеүҙе үтенгән. Ҡыуғас, нишлә ен, ҡыҙҙарын кейендергән дә күршеләренә киткән.

Ул арала, нисек килеп ябырылған бул а, шулай ямғыр ҙа тымған, тирә-йүн тып-тын булып ҡалған. Болоттар яй ғына көньяҡ тарафтарына шылышҡан, күкте лә йәшен уҡтары телгеләмәгән. Тиҙҙән шәфәҡ ҡыҙыл төҫкә инә башлаған.

“Инде яҡтыра ла ла башланы, ә ин аман юҡ ың, – тип иҫкә ала ул саҡтарҙы Дания инәй. – Шундай матур көн тыуҙы. Ямғырҙан уң күк йөҙө болоттарҙан арынып, тирә-йүн йәмләнеп, яҡтырып ҡалды. Ҡояш сығып, тәүге нурҙарын ергә ибә башлағанда ғына ин тауыш бирҙең. Әсәйең малай табыу ҡыуанысынан илап ебәрҙе лә, бер аҙҙан тынысланып, йоҡоға талды. Уҡтай атылып, өйгә атайың килеп инде әм улы тыуғанға шатлығынан түшәмгә башы тейерҙәй булып икерергә тотондо. Апайҙарың да йүгереп килеп етте. Бары ы ла яңы тыуған сабыйҙы күрергә теләй. Ә ине беренсе булып ҡулыма мин алдым”.

Ул көн таңы ысынлап та мөғжизәле, гүзәл була. Йылдар уҙғас та атайым менән әсәйем уны ағынып иҫкә алыр булдылар. Ни яғы менәндер ошо көн улар хәтеренә ныҡ уйылып ҡалғайны. Айырыуса әсәйем ошо ғәжәйеп матур иртә тура ында өйләргә яратыр булды... Күк күкрәп яуған ямғырҙан уң күк йөҙө лә орап алған кеүек зәп-

зәңгәр, унда бер болот әҫәре лә юҡ. Яңы ҡалҡҡан ҡояш үҙенең йылы нурҙары менән бар тереклекте иркәләй: үлән-ағастарҙы, баҫыу-күлдәрҙе, урам-йорттарҙы әм, әлбиттә, кешеләрҙе. Ҡояш әм Ер беҙгә – ата-әсә, туйындырыусы, ваҡыты еткәс, барыбыҙҙы ла үҙ ҡуйынына ала.

Төшкә табан көн тағы ла матурлана төшә. Ауылдың көнсығыш күгендә үҙенә күрә томанлы диңгеҙ күҙгә салынғандай: ҡара тупраҡтан күтәрелгән ямғыр пары ауаны сафландырып, тын юлдарын киңәйтә. Был сихри гүзәллектән, әкиәттәгеләй хозурлыҡтан әҙәм күңеле әйтеп бөткө өҙ кинәнес таба.

Аҡ аҡалдар хәтерләүенсә, шул беренсе август көнө тирә-йүндә ожмах түреләй рәхәтлек хөкөм өрә, тәбиғәт бик ирәк саҡтарҙағылай тантана итә. Тирә-яҡ шундай саф, ямғырҙан уң озонға туйған ауа улап туйғы ыҙ. Кеше генә түгел, бар тереклек үҙен ғәжәйеп дәрәжәлә яҡшы тойғандыр ул көндө. Әсәйемдең дә күңеле иҫ киткес күтәренке, көр булған.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға оҙаҡ йәшәргә насип булманы, сөнки тормош көтөү бик ауыр ине шул. Минән уң әсәйем тағы ла ике малай – Мөҙәрис менән Камилды тапты. Тәбиғәт мөғжизә енәндер, тимен, әсәйем мин тыуған көндө ғүмерлеккә хәтерендә ҡалдыра. Мин үҫә башлағас, ошо көн тура ында иҫкә алып, беренсе август көнөнән дә бәхетлерәк көнөм булмағандыр, сөнки беҙ атайың менән икәүләп хыялланған маҡсатҡа, тормош маҡсатына өлгәштек – ир балабыҙ тыуҙы, тип иҫләр булды.

Ир бала – ул нәҫелде дауам итеүсе, атай нигеҙенең йылы ын аҡлаусы, туйындырыусы ғаилә башлығы. Эйе, тормош ниндәй генә ҡатмарлы булма ын, унда кешеләр үҙен бәхетле тойған мәлдәр әр саҡ була. Бәхетле булыу – әр кемдең үҙенән, әм әр кем үҙенсә бәхетле.

2

Ғәҙеллек өсөн шуны әйтергә кәрәк: егерменсе быуаттың утыҙ өсөнсө йылын уңышлылар рәтенә индереп булмай. Ул тарихта ашлыҡ уңмау арҡа ында крәҫтиәндәр асығырға мәжбүр булған йылдар иҫәбендә. Беҙҙең Иҫке Ҡарағош ауылын да ул урап үтмәй. Атайым ғаилә е лә интеккән ул йылды.

Ошо тиклем ғүмер артта ҡалғас, ул йылдарҙа беҙ күргән михнәттәрҙе күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Ғаиләбеҙ ни менән туҡланған, хужалыҡ итеү өсөн ҡаралты-тауар булғанмы – билдә еҙ. Хәйер, был хәҙер кәрәк тә түгелдер. Әммә ғаиләбеҙ ҡыйынлыҡтарҙы, башҡалар кеүек үк, еңеп сыға. Ҡай ы бер факттар өҫтөндә шулай ҙа уйланырға, минеңсә, урын бар.

Мин тыуған көндө атайыма бала тыуыу айҡанлы колхоз идара ынан матди ярҙам орарға ылтау барлыҡҡа килә. Уның теләгенә ҡаршы килмәйҙәр. Бер бот, йәғни ун алты килограмм ашлыҡ яҙып бирәләр. Атайым уны елкә енә йөкмәп өйөнә алып ҡайта. Ни өсөн шулай ғына биргәндәр, ике йәки өс бот түгел – билдә еҙ. Күрә ең, колхоздың хәле мөшкөл булған. Бына-бына ураҡҡа төшөр ваҡыт етере әм колхоз амбарҙары ашлыҡ менән туласағы, ни эшләптер, иҫәпкә алынмаған.

Атайым атын егә лә, ун алты кило ашлыҡты арба төбөнә алып, өс саҡрымдағы тирмәнгә юл тота. Тирмәнсе, беҙҙең ауыл кеше е, үҙе хәллерәк йәшәгәндер инде, атайымды алҡын ҡаршылай. Ул әле генә колхозға байтаҡ ашлыҡ тарттырып, өйөнә ҡайтырға йөрөгән. Бәлки, ураҡ алдынан тирмәнен ҡарап алырға ла йыйынғандыр.

– Иртәрәк килеп булмай инеме ни? – ти тирмәнсе Шакир тамаҡ төбө менән.

– Юҡ шул. – Атайым тирмәнсенең риза ыҙлығына ә әмиәт бирмәй. – Игенде бөгөн генә алдым бит.

– Он менән бирә алманылармы ни? – Тирмәнсе аман да үҙенекен тылҡый.

– Ҡарале, Шакир, бар ҙа брсиҙәтелдән ора! Мин ҡайҙан беләйем.

Атайым төртмә телле, ғәриптәргә генә хас булғанса ауыр холоҡло кеше булып, шуға ла уны ауылдаштары ла яратып еткермәй.

– Ма ая башланың ин, Шакир, – ти атайым, ҡыҙа төшөп. – Тирмән арҡа ында

байыбыраҡ киттең шул. Беҙҙең кеүек фәкирҙәрҙе анға уҡмай ың. Ә бит беҙ бергә уйнап үҫтек, уҡып та булаштыҡ.

— Бул а уң!? Уның хәҙер ни ҡыҫылышы бар?

— Ә ине, ҡулын оҙонайта башлаған, тип тә өйләйҙәр. Ҡатыныңды ҡыуып сығарыуың дөрөҫмө?

— Унда инең эшең юҡ!

— Эшем юҡ, бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә тирмән колхоздыҡы. Барыбыҙҙыҡы ла. Әллә белмәй инеңме? Халыҡтың, урыҫ байы а, өй ала, татар ҡатын алмаштыра, тигәне дөрөҫтөр. — Шулай өйләнеп, атайым, күрә ең, тирмәнсегә ҡатыраҡ бәрелергә теләй.

— Әрем телле ин, Кәрәметдин ағай, — тип йомшара тирмәнсе. Күрә ең, хәлде ҡырҡыулаштырырға теләмәй, әммә өҫтәп ҡуя: —Тиреҫ ҡорто.

— Ә ин ҡала ҡомағы. — Атайым бурыслы булып ҡалмай. — Бына, моғайын, тиҙҙән ҡалала йәшәй башлаясаҡмын, тип хыяллана ыңдыр әле! Ауылда күптән шулай өйләйҙәр.

— Тиҙҙән, ҡәҙерлем, — ти ҙә Шакир тирмәнен ебәрергә әҙерләнә. Күрә ең, үҙен мыҫҡыллаған әсе телле ауылдашынан тиҙерәк ҡотолорға тырыша. — Белә ең бит, балаларым күптән Бөрөлә йәшәй. Үҙ яндарына саҡыралар. Лутсы әйт, нишләп ваҡыт ыҙ килергә иттең әле? — ти тирмәнсе, хәйләкәр күҙҙәрен ҡыҫа төшөп. — Бер бот ашлыҡ тейәп...

— Сәбәбе бар шул.

— Берәй нәмә булдымы?

— Оло шатлығым бар!

— Ысынлапмы? Әллә баҡсаңда самородок таптыңмы, әллә миллион ум оттоңмо?

— Бигерәк ай йөҙә ең, Шакир. Улым бар, ә бына ашарға юҡ. Ә ин “алтын таптыңмы”, имеш. Малай тыуҙы, ә өйҙә бер ҡабым әпәй юҡ. Шуға килдем, ә ондо иртәгә йәки уның уңына ғына бирә башлаясаҡтар.

— Килгәс тә шулай тимәй. Ҡотлайым...

— Ҡысҡырырғамы ни? Башҡа ваҡытта ин “ғәли йәнәпте” борсоп йөрөр инемме ни?

— Ярай инде, үпкәләп бара ың үҙең. Әйҙә, тиҙ генә ашлығыңды мөшкәгә бушат та, тирмәнде худҡа ебәрәм.

Атайым ашлығын мөшкәгә мендереп ала ла, аҫҡа төшөп, тоғон он килә торған улаҡҡа ҡуйып көтә башлай. Бына аҡ ыл булып күпереп, сөсө еҫтәр сығарып, арыш оно улаҡ буйлап аға. Атайымдың күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары бейешә, тирмәндең дөңгөр-дөңгөр килеп эшләүенә, ондоң күп килеүенә шатлығы эсенә ыймай, ул “Сарман”ды, үҙенең иң яратҡан йырын, уҙа башлай.

Ә арыш оно аға ла аға. Атайым тәүҙә быға бик иғтибар бирмә ә лә, тора-бара аптырай: ә бит ул алған бер бот мөшкәнең төбөндә генә ине. Бына он ярты тоҡтан да артты. Тоҡ тулыу менән тирмәнсе лә килеп етә.

Йөҙө үҙгәреп киткән атайым аптыраулы ҡарашын төбәгәс:

— Бер-бер хәл булдымы әллә, Кәрәметдин? — тип орай тирмәнсе.

— Бәй, Шакир, бер генә бот ашлыҡ алғайным, тоҡ бына тулды ла ҡуйҙы. Мөшкәгә игенде тағы ла берәй е өҫтәмәнеме икән?

— Бер кем дә килмәне, өҫтәүсе лә булманы. Хикмәтле тирмән был: йә ондо йәшереп алып ҡала, йә артығын бирә. Тирмән иҫкерҙе, “ашарға” орай. Бик яҡшы ремонт кәрәк. Ә бына ваҡыт тигән нәмә етмәй ҙә ҡуя.

— Ҡайҙа буш тоҡ бир әле. Артығын бушатайым, — ти атайым.

— Кәрәкмәй, ал әйҙә. Мин иңә үҙемдең игенде алманым бит, — тип ҡаршы төшә Шакир. — Он, күрә ең, колхоз ашлығын тартҡандан ҡалған. Өлөшөңә төшкән көмөшөң.

— Юҡ! Мин кеше милкен алып өйрәнмәгәнмен, — тип өҙөшә атайым.

— Иҫәр, был бер кемдең дә оно түгел. Фәрештә булып ҡыланма, ал! Тирмәндең ине бәхетле итке е килгәндер. Миңә он кәрәкмәй. Ул инеке. Ас ың бит, унда ла тартҡылашып торған була ың...

Тирмәнсе атайыма тоҡ ауыҙын бәйләп, арбаға күтәреп алырға ярҙам итә лә хушлашҡанда былай ти:

– Был ризыҡ инеке лә түгел. Улындыҡы. Уның бәхетенә тура килгән. Белә ең, был – яҡшы билдә. Улың, моғайын, бәхетле булыр.

Бына шулай мин атайымдан тирмән мөғжизә ен дә белдем.

Мин әсәйемде сама ыҙ яраттым. Олораҡтар үҙенә ҡарағанда, тәпәй баҫҡанға тиклем ҡулынан төшмәгәнмен дә. Ә инде әсәйем мине ултыртып ҡуйып, берәй яры кит ә, ҡысҡырып илап ебәргәнмен, ул күренеү менән тынысланғанмын. Апайҙарым да мине сама ыҙ ҡурсалаған, йыуатҡан. Ошо апайҙарым минең тәүге тәрбиәселәрем, аҙаҡ уҡытыусыларым булды.

3

Утыҙ етенсе йылда, үҙемә дүрт йәш тулғас ҡына, ысынбарлыҡты тоя, иҙемләй, кем икәнемде, йәшел хәтфә үләндә атлап йөрөүемде белә башланым. Уға тиклем нисек йәшәгәнем хәтерҙә ҡалмаған. Ҡояшлы әм йылы йәй көнө ине. Шул йәйҙе ике туған ағайым Сәлих менән ауыл урта ындағы күлдә ыу инеүебеҙҙе хәтерләйем. Иртәнән кискә тиклем күлдән сыҡманыҡ та. ыу инеү тип, йөҙә белмәгәс, күл ситендә ыу сәсрәткәнбеҙҙер инде.

Тағы ла бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Атайым менән әсәйем, ат егеп, Балтас районындағы Восток ауылына әсәйемдең еңле енә ҡунаҡҡа йыйындылар әм мине лә үҙҙәре менән алдылар. Бер урман аша үткәндә атайым аҡлан ауыҙында атын туҡтатты. Ҡояш нурҙарына күмелгән, ялан сәскәләре баҫҡан был бейек үләнле аҡланды әле лә хәтерләйем. Бында еләк бар ине. Бәлки, миңә, балаға, шулай тойолғандыр, еләк бында түшәлеп тигәндәй ята ине. Мин ултырған ерҙән ҡуҙғалмай ғына ашап туйҙым да ҡуйҙым. Әсәйем и ә аҡлан буйлап йөрөп йыйҙы, күрә ең, еләктең мулыраҡ ерен эҙләгәндер.

Атайым да ҡул ҡаушырып ултырманы. Атты ашатты, арбаға ултырып ниҙер эшләне. Унан аҡлан ситендәге киң олонло йүкә аҫтына ултырҙы ла мине саҡырып алды. Итәгенә ултыртып, миңә ата-бабаларыбыҙ, уларҙың көнкүреше тура ында өйләй башланы. Бындай хикәйәттәрҙе бәйән итергә ярата әм телә ә кемде әүрәтерлек өйләй белә ине ул.

Атайымдың әңгәмә е нәҫелебеҙҙең данлыҡлы баба ы Ташбулат тура ында ине. Ә уға был хаҡта ата ы, олатайым Ғәлләметдин, өйләгән. “Ни өсөн мин был турала ошонда килгәс кенә өйләргә булдым,– тине атайым. – Уның үҙ сәбәптәре бар”.

Бик күптәнге замандарҙа бабабыҙ Борис бына ошондай гүзәл аҡланда ыу өлөгө кеүек сибәр Зөбәйҙәне осратҡан. Ҡыҙ аҡланға әхирәттәре менән бергә еләк йыйырға килгән икән. Уны күргәс, Борис ҡараған да ҡатҡан. Ҡыҙ ҙа уға күҙ алғас, уларҙың ҡараштары осрашҡан. Егет төҫкә күркәм, аҡ ыл йөҙлө булған. Бер ҡарауҙа улар бер-бере ен оҡшатҡан, әммә ауыҙ асып бер үҙ ҙә әйтмәгәндәр.

Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиҙәр бит, йәштәр тағы ла осрашҡан. Былай булған ул осрашыу. Борис беҙ әле генә уҙып киткән күрше Киҙгәнбаш ауылында йәшәгән. Ҡалҡыу буйлы, төҙ кәүҙәле, ә күҙҙәре зәңгәр. Ата ы Бористы беҙҙең ауылға сбруй я аусы Әхмәткә ебәргән. Әхмәттең ҡамыт, ыңғырсаҡ, дуғалары ысынлап та бик уңайлы әм матур булып, тирә-йүндәгеләрҙең бары ы ла уға мөрәжәғәт иткән.

Егет ата ының йомошон йомошлап ауылды сығып барғанда, ҡаршы ына көйәнтә менән ыуҙан ҡайтып килгән Зөбәйҙә тап була. Бер-бере ен күреү менән улар ике е лә ҡатҡан да ҡалған. Бер аҙ ғына торғанмы йәштәр шул килеш, әллә оҙаҡ ҡынамы – легенда ул хаҡта телгә алмай. Әммә йәш йөрәктәр айырылышырға ашыҡмаған.

Зөбәйҙә аҡрын ғына иҫкән елдең егеттең арыш аламылай сәсен ыйпап үтеүен, зәңгәр күҙҙәренең бик тә яғымлы ҡарауын тоя. Үҙенең дә муйылдай ҡара күҙҙәрендә ялҡын тоҡана, таныш булмаған тойғолар бөтә тәне буйлап үтеп, йөрәген ҡуҙғыта. Ҡыҙ, әлбиттә, егеттең дә шундай уҡ тойғолар ҡоллоғонда булыуын, уның сихри

гүзәллегенә арбанып, осрашыу шатлығынан иҫерә яҙып тороуын күҙ алдына ла килтермәй. Тимәк, был фәрештәне уға Алла ы Тәғәлә үҙе ебәргән, шуға ла ул ҡыҙҙың килеренә ышанып, уны көткән. Бына күҙ ҡамаштырырҙай ылыу ҡыҙ унның алдында баҫып тора, ә егет, унның сибәрлегенә ушы китеп, телгә килә алмай йөҙәй.

Бер аҙҙан йәштәрҙең ике е лә ҡаушай төшә. Быға тиклем ошондай тойғоларҙы ис тә кисермәгән Зөбәйҙә тертләп китә. Ҡапыл башы әйләнә, яурынынан көйәнтә е шыуып төшә. Ҡыҙ иҫен юғалтып йығыла. Егетте ҡурҡыу ала. Ул ҡыҙҙы ҡулдарына күтәрә лә ирене менән унның янып барған сикә енә ҡағыла. Шул саҡ ҡыҙға йән керә әм ул, тыпырсынып, егеттең ҡулдарынан арынырға теләй.

– инә ни булды? – тип ашығып орай егет. – Ҡурҡыттың бит. Әллә хәлең насармы?

– Белмәйем... Ҡурҡтым, шикелле. Күрә ең, инән...

Ҡыҙ бер аҙ үҙ еҙ тора, үҙенең ҡыйыулығына үҙе аптырап, егеттең күҙҙәренә туп-тура ҡарай ҙа орай:

– Исемең нисек?

– Борис, – тип ашығып яуаплай егет.

– Нишләп инә ундай исем ҡушҡандар?

– Белмәйем, әсәйем, үҙе башҡорт бул а ла, шулай ҡушҡан...

– Ебәр мине.

Борис ҡыҙҙы ысҡындыра. Көтөп тороуын үтенеп, тиҙ генә күлгә йүгереп бара ла ике биҙрәне лә тултырып ыу алып килә, сөнки ҡыҙ йығылғанда биҙрәләр бушай. Хушлашҡанда егет ҡыҙҙы ҡояш байығас күл буйына килергә саҡыра. Ҡыҙ өндәшмәй, улар айырылыша. Кеше аяғы ил булғас, ҡыҙ күл буйына ашыға...

Егет менән ҡыҙҙы сихри хистәргә сорнаған тойғо, – әлбиттә, мөхәббәт. Тәү осрашыуҙан, бер ҡараштан. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел, сөнки Алла ы Тәғәлә уларҙы бер-бере е өсөн яратҡан.

Легенда Зөбәйҙә менән Боpистың мөхәббәтен фәрештәләргә генә хас өйөү тойғо о итеп үрәтләй. Кешенең эске донъя ының матурлығы, ир менән ҡатын ара ындағы мөнәсәбәт нескәлеген, ғөмүмән, кешеләр ара ында ихтирам тойғо о булырға тейешлегенә ишара я ай был легенда. Әйтер ең дә, ике йәш йөрәктең ҡапыл ғына тоҡанған мөхәббәт утынан тирә-йүн яҡтырған, ҡояш нығыраҡ йылыта, кешеләр игелеклерәк була башлаған. Ғөмүмән, донъя ыңғай яҡҡа ҡырҡа боролош я аған, ниндәйҙер ила и көстәр ихтирамы менән тормош йәмләнә төшкән.

Был ваҡыттарҙа ауылда мәсет төҙөлөп, уға кешеләр әүҙем йөрөгән. Доғалар уҡылған. Бында кешеләр Алла ы Тәғәләгә табыныу өсөн генә килмәгән. Ауылда клуб та, китапхана ла булмағас, был йорт үҙ-ара өйләшеү, аралашыу урыны ла аналған. Мәсеткә намаҙға йөрөү төпкөлдә йәшәүсе кешеләргә күптән түгел генә ҡабул ителгән Ислам динен тотҡан өсөн рәхмәт йөҙөнән Күктәр тарафынан ебәрелгән быға са күрелмәгән ләззәт булып тойолған. Тәүҙә халыҡ күрше ауыл егете Бористың, ә урындағы башҡорттар телендә Барыстың, бында йыш килеүенә аптырай төшкән: ни бар әле был алам сәсле егеткә бында? Ул кафырға мосолмандар ара ында ни бар? Нимә эҙләй ул?

Был орауға яуап табылып та өлгөрмәй, Бористың ауыл ылыуы Зөбәйҙә менән йыш ҡына осрашыуы тура ында имеш-мимеш тарала. Артабан инде, Борис Зөбәйҙәгә өйләнә, имеш, тигән үҙ китә. Ҡыҙҙың ата ы Мөхәмәтйәндән, ысынлап та Зөбәйҙәне шул егеткә бирергә самалай ыңмы ни, тип орауҙан да тартынмайҙар. Ата ы тәүҙә ни әйтергә белмәй, ә уңынан, була торған эш түгел, тип ҡырт киҫә.

Шул уҡ ваҡытта кеше күрә бит: ҡыҙ менән егет бер-бере ен шундай ҡаты өйә, хатта айырылмайҙар ҙа кеүек... Әммә тиҙҙән шау-шыу ҡуба, Мөхәмәтйән Бористың атаәсә енә ҡыҙын уларға бирмәйәсәген белдерә. Был хәбәр, билдәле, ҡыҙҙың ауылдаштарына оҡшай, тик бер-бере ен шашып өйгән әм алдағы көндәрен бер-бере енән башҡа күҙ алдына ла килтерә алмаған йәштәр был хәбәрҙе ҡотолғо оҙ әләкәттәй ҡабул итә.

Ваҡиғалар, төрлө сүрәткә инеп, ҡуйырғандан-ҡуйыра. Тәүҙә яуыз уйлы бәндәләр,

имеш, Зөбәйҙә нишләптер йыуаная башлаған, тимәк, ул Бористан бала көтә, тигән хәбәр тарата. Ата-әсә е ҡыҙҙарын Борисҡа яҡын юллатмаҫҡа , ә Бористы был тирәлә йөрөтмәҫкә маташып ҡарай, әммә йәштәр барыбер яйын табып, осрашыуҙарын дауам итә.

Зөбәйҙәнең балаға уҙыуы тура ындағы хәбәрҙе ата-әсә енә еткергәс, тегеләр өҫтөнә ҡара ҡайғы төшә. Асыуынан ни эшләргә белмәгән Мөхәмәтйән ҡыҙын туҡмап ташлай ҙа соланға бикләй. Әммә Борис, солан стена ын емереп, өйгәнен ирекkә сығара. Ауыл егеттәре, Мөхәмәтйәндең үҙен тыңлап, егетте үлтерә яҙғансы туҡмай, тегеләргә лә эләгә: бере енең башы ярыла, икенсе енең ҡулы ына...

Бындай эләгешеүҙәр артабан да дауам итә, әммә йәш йөрәктәрҙең өйөүен үрелтә алмай. Тик уларға ҡауышырға юл ҡуймаясаҡтары ла көн кеүек асыҡ була. Башҡа юл ҡалмағас, йәштәр был тамуҡ менән хушлашырға ҡарар итә. Алдан өйләшеп, улар күл буйындағы иң бейек ярға килә лә, кәүҙәләренә ҙур таш бәйләп, күлгә икерәләр. Егет батып үлә, ә бына Зөбәйҙәне иртәгә енә ярҙа аҫылынып торған килеш табалар. Ҡыҙ тере була. Бористың өйгәненә таш бәйләмәгәне, ул ыуға батма ын өсөн бауҙы ҡыҫҡартыуы асыҡлана. Шул рәүешле егет Зөбәйҙә иҫән ҡалып, бала ын тап ын өсөн тырышҡан икән.

Йән өшөткөс хәбәр шунда уҡ ауылды урап сыға, башҡа тарафтарға ла тарала. Зөбәйҙәне өйөнә алып ҡайтҡас, унда, күҙ йәштәрен өртә- өртә, кешеләр йыйыла башлай. Бористың был тәртибен халыҡ ыңғай ба алай: башҡаларға ғүмер биреп, егет бик дөрөҫ эшләгән.

Зөбәйҙә бик аҡрын ауыға. Ул ҡара ҡайғыға бата, бер кем менән дә өйләшмәй, тик мендәренә ҡапланып, буҫығып илай ғына. Оҙаҡламай йәш ҡатын, ысынлап та, етлекмәгән, сирләшкә бала таба әм, ҡайғы ын күтәрә алмай, яҡты донъя менән хушлаша. Ә бала тере ҡала, ата-әсә еҙ үк еҙ етемде бөтә ауыл халҡы тәрбиәләй. Тәүҙә баланың ғүмере буласағына ышанмайҙар, әммә малай теш-тырнағы менән йәшәргә ынтыла. Олата ы, Мөхәмәтйән, дингә мөкиббән киткән кеше, малай ныҡ бул ын өсөн уға Ташбулат тигән исем ҡуша.

Бына шундай хикәйәт. Ошо тетрәнеүҙән уң ауыл был ерҙән күсеп киткәнгә тиклем байтаҡ иҫенә килә алмай. Бористың күләгә е уларҙы әр ваҡыт эҙәрлекләй кеүек. Кеше үҙенә ҡарағанда, егетте эңер алдынан урам буйында йәки күл яры буйында күрәләр. ыу өҫтөндә лә сағылып ҡала егет шәүлә е. Ул ауыл өҫтөнә ҡарап йылмая ла ҡояш сыға башлау менән иреп юғала. Әйтеүҙәренсә, бындай күренеш бик аяҙ кистәрҙә әм ямғыр яуыр алдынан күҙәтелә торған булған. Бынан уң ауыл халҡы күл ыуын эсеүҙән төңөлә. Тора-бар күлгә Барыскүл тигән исем тағыла. Әйткәндәй, был исем әле лә аҡлана.

Ике ауыл ара ынан ҡара бесәй үтә. Бористың ата-әсә е, ауылдаштары, егеттең ихтыярлы, көслө булыуын иҫәпкә алып, үҙен-үҙе үлтереүенә ышанмай. Улар егетте үлтергәндәр тип ныҡыша әм күршеләренән даими үс ала. Ике арала тыныслыҡ бөтә. Дөрөҫ, ер арҡа ында низағ ике ауыл ара ында элек тә ҡаты ғына булғылаған. Хәҙер инде ауылға-ауыл тороп уғышыу йышая. Был дошманлыҡты Киҙгәнбаш христиандарының күршеләре – мосолмандарҙың дини тойғоларын кәм етергә тырышыуы тағы ла көсәйтә төшә.

Ә ваҡыт йылға ы аға бирә. Ташбулат та ҙурая, көслө егет булып етешеп, ауылдың ятаҡкан кеше енә әүерелә. Унның сәсе әсә енеке кеүек дегеттәй ҡара, ә күҙҙәре ата ыныҡына оҡшап зәңгәр була. Буйы менән дә егет ата ына тартҡан. Өҫтәүенә, ҡаты холоҡло, ҡыйыу. Ата-әсә е тура ында өйләгәнде Ташбулат ауыр ҡабул итә, ә инде ололарса фекер йөрөтә башлағас, мәрхүм ата ының был хәтәр аҙымын хупламауын белдерә. Башҡа төрлө юлын табып булыр ине, тигән ығымта ын йәшермәй. Йәшлегенә ҡарамаҫтан, Ташбулат төплө фекерләй, үҙ эргә енә йәштәрҙе туплап, уларҙың башында торорлоҡ аҡыллы була.

Шулай бер нисә йыл үтеп тә китә. Ә инде Ташбулат етәкселегендә Киҙгәнбаштың уғыш суҡмарҙарын ярай ы ғына бәргеләп ташлағас, егетте ауыл йыйынында староста

итеп айлайҙар.

Ун дүртенсе менән ун бишенсе быуат ара ы бығаса күрелмәгән стихиялар менән йонсота. Ҡышын туҡтау ыҙ ҡар яуып, артынан буран ҡуп а, йәйен ҡойма ямғырҙар йышлай ҙа ауылдың төньяҡ-көнбайышындағы уйпатлыҡты ыу баҫып китә. Алла ыға ышанғандар, ахрызаман килә, тип уйлай әм, ғибәҙәт ҡыла-ҡыла, яза көтә. Ахрызаман ысынлап та яҡынлаша...

Оҙаҡламай Киҙгәнбаш кафырҙарының дошманлығы менән бәйле хәтәр ваҡиға була: ауыл мәсетенә сусҡа индереп бикләйҙәр. Ә был инде,– ислам ҡанундары буйынса иң ҙур гона . Мосолмандар инде бәлә килеүенә шикләнмәй. Ул көттөрмәй.

Тәбиғәттең ҡай ы саҡ көй өҙләнеүе арҡа ында шулай килеп сыҡҡанмы, әллә ысынлап та Алла ы Тәғәлә ебәргән яза булғанмы – дөрөҫ яуапты бер ҡасан да табып булмаясаҡ. Тәбиғәттә быларҙы инҡар итерлек йәки хупларлыҡ факттар юҡ. Бары ы ла Алла ы Тәғәлә ихтыярынан торған йәки теге донъяла ла тормош барлығы кеүек.

Бер туҡтау ыҙ яуған ямғырҙарҙан уң төндә көслө тауыш менән күл янында ер убылып, бер нисә йорт, шул иҫәптән мәсет тә, ер аҫтына китә. Иртән был урында кешеләр ыу ғына күрә. Ә уның өҫтөндә мәсет манара ы ерәйеп тора...

Бындай бәләнең бығаса ла, бынан уң да осрағаны юҡ. Бер ҡайҙа ла: өйәҙҙә лә, губернала ла. Кешеләрҙе ҡурҡыу тойғо о солғап ала, улар ниндәйҙер мөғжизә көтә... Ә инде йәй урта ында күлдә бер нисә кеше батып та үлгәс, ауыл халҡы был Алла тарафынан ҡарғалған урынды ташлап китергә мәжбүр була.

Атайымдың өйләгәне бала ғына күңелемде ныҡ ҡуҙғытты. Был тарих миңә ғәйәт ҙур, кешелек донъя ында тиңе булмаған ваҡиға кеүек тойолдо. Кискә табан беҙ Восток ауылына килеп индек, әммә мин бер нисә көн атайым өйләгән хикәйәт йоғонтоонан арына алманым. Шул геройҙар менән аташып йөрөнөм.

Бушаған ваҡыттарында атайым миңә Ташбулат тура ындағы хикәйәтен бер нисә тапҡыр бәйән итте. Был хикәйәт артабан минең ижади ил амыма әүерелер, тип кем генә уйлаған инде.

4

әр кемдең дә бала, үҫмер саҡтары була. Бала саҡ шуны ы менән иҫтәлекле: донъяны тәү тапҡыр танып белә башлай ың, тирә-яҡ мөхит үҙенә хас булғанса түгел, ә бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итеlә. Балаға яҡты әм шатлыҡлы күренгән был донъяла ҡай ы саҡ өлкәндәр шундай насарлыҡ ҡылып ташлап, баланың күҙе алдындағы яҡты тормошто баштүбән әйләндерә.

1938 йылда, биш йәш тулғанда, мин тәү тапҡыр әсе итеп илап ебәрҙем. әр хәлдә миңә шулай тойола. Моғайын, беренсе тапҡыр түгелдер, ләкин, үлтер әләр ҙә, уға тиклем балауыҙ ығыуымды хәтерләмәйем.

Ә ул былай булды. Беҙ, малай-шалай, ауыл урта ындағы Олокүлдең көньяҡ ярында баҫып торабыҙ. Мәсетте нисек үтеп алырҙар икән, тигән уй килтергәйне беҙҙе. Алла- ы Тәғәләнең йорто күлдең ҡаршы яҡ өҙәк ярында урынлашҡан. Яр буйында уҡ түгел инде, саҡ ҡына ары.

Эргәлә ололар: ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро.

Әле лә күҙ алдымда: бер нисә ир мәсет манара ын емерә. Ни айәт, тирә-яҡҡа ҙур саң болото күтәреп, манара ергә ҡолаНы. Бер ҡарт илап ебәрҙе лә үҙ алдына доға уҡый башланы. Ҡарт артынан ҡатындар ҙа балауыҙ ығырға кереште. Мәсете, Алла ы Тәғәлә ҡорамы миңә лә йәл булып китте, ахыры, мин дә илап ебәрҙем. Иң яҡын, изге нәмәне юғалтҡан кеүек, шул тиклем ауыр булды. Дингә ышанған бар кешеләр ҙә кисергәндер инде был тойғоно, әм уларға бындай гона өсөн Алла ы Тәғәлә ебәрәсәк язаны көтөү тойғо о ла өҫтәлгәндер. Күптәр үҙе белгән доғаларҙы уҡый, ҡай ы берәүҙәр уҡрана ине.

Атайым яныма килде лә, ҡулына алып, мине йыуата башланы. Ихлас уҡынды. Бар кешеләрҙең дә йөҙө борсоулы, хатта ҡурҡыуға төшкән кеүек. Бәлә киләсәк, тинеләр...

Бер ир атайымдан  орай ҡуйҙы:

– инҙә лә мәсетте емереүҙә ҡатнашырға тәҡдим иттеләрме?

– Эйе, – тине атайым. – Тик мин ҡырҡа баш тарттым. Беренсенән, дингә ышанам, ә, икенсенән, ғәрипмен. Алла ы Тәғәлә рәхиме менән генә үлемдән тороп ҡалдым. Мине ҡурҡытырға итеп тә ҡаранылар, тик миндә ундай тойғо ҡалмаған. “Теге донъя”нан ҡайтҡан кеше бит әле мин.

– Аҡса вәғәҙә иткәндәр, имеш, тиҙәр.

– Минә уларҙың аҡса ы кәрәкмәй. Алла ы Тәғәләгә ышанған кеше буларaҡ, мин үҙ өҫтөмә ундай гона  ала алмайым. Гона тарыбыҙ былай ҙа баштан ашҡан. Белә егеҙ, мин власҡа ҡаршы түгел, ә бына мәсетте, Алла ы йортон, емереүгә ҡаршымын.

Был көндө ололар беҙгә, малай-шалайға, аңлашылмаған күп нәмәләр тура ында өйләне. Тик өйләнеүҙән, уҡраныуҙан уҙманылар, бер кем дә мәсетте емереүгә ҡаршы протест белдермәне. Шул уҡ ваҡытта бары ы ла Алла ы йортон емереү – динде юҡҡа сығарырға тырышыу ғына түгел, ә быуаттар буйы килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, әхлаҡты емереүгә тиң икәнен аңлай ине.

Мәсетте емергәндән  уң ауыл буйлап имеш-мимеш таралды. Берәүҙәр, кем мәсетте боҙоуҙа ҡатнашҡан, шуларҙы Алла ы Тәғәлә тамуҡта язалаясаҡ, тине. Хәҙер кешеләр бигерәк йыуаш  әм күндәм, элекке ваҡыт бул а, былдай баш-баштаҡлыҡҡа юл ҡуйылмаҫ ине, тип көр өнөүселәр ҙә булды. Тиҙҙән тағы ла бер әҙәм ышанмаҫлыҡ хәбәр таратты: йәнә е, кемдәрҙер бынан күп быуаттар элек  ыу аҫтына киткән мәсеттең күл өҫтөндә йөҙөп йөрөүен күргән.

Ауылда, мәсетте  үткән кешеләргә Алла ы Тәғәлә шундай яза ебәргән, ә изге йорт барыбер яңынан төҙөләсәк, сөнки дингә ышаныу барыбер ҡайтыр, тигән хәбәр йөрөнө. Кемдәрҙер, үҙ эсенә бикләнеп, оло бәлә килерен көттө. Шул уҡ ваҡытта ҡайғы төҫө ҡағылғандар ғына түгел, шатлыҡтан балҡыған йөҙҙәр ҙә юҡ түгел ине.

Мәсет күл өҫтөндә йөҙөп йөрөгәнме-юҡмы – уны ы минә билдә еҙ, әллә күргәндәр, әллә юҡ. Мин и ә ишеткән-күргәндәрҙе генә яҙам.

Мәсет күл урта ында тора, тигән хәбәрҙе ишетеү менән беҙ, малайҙар, Барыскүл буйына саптыҡ. Тик – бушҡа. Яр ситендә Хәйрулла менән Зиннур бабайҙар ғына доға ҡылып ултыра. Беҙҙе үҙ яндарына сүгәләттеләр. Мин ҡарттарҙы белә инем, сөнки атайым йыш ҡына улар менән осраша  әм ни тура ындалыр әңгәмә ҡора ине.

Ҡарттар өс көн элек кенә ошонда мәсет манара ын күреүҙәре тура ында  өйләне. Алла ы йортоноң иң бейек өлөшө  ыу өҫтөнән бер метр-метр ярымға күтәрелеп, бер аҙ торған да шунда уҡ  ыу аҫтына киткән. Зиннур бабай хатта манараның ҡай ы тәңгәлдәрәк күренеүен дә самалап күр әтте. “Ана тора ул, яҡшылап ҡарағыҙ”, – тине ул, яр ып. Күл эсендә, ысынлап та ниндәйҙер ҡара нәмә күренгәндәй ине. Әллә ҡамыш, әллә ағас ботағы, тик уның өҫтән аҫҡа табан  уҙылғаны ғына шәйләнә. Башҡа нәмә күренмәне. Был ысынбарлыҡ ине.

Ошо айҡанлы бер фекер әйтке килә: ҡай ы бер факттарҙы тергеҙергә мөмкин бит. Мәҫәлән, профессиональ водолаз саҡырып, күлдең төбөн тикшерергә. Бәлки, унда ысынлап та ниндәйҙер таҡталар йәки ағастан эшләнгән, ағас булмаған нәмәләр яталыр. Ни ҙә бул а табыла ҡал а, күптәнге ваҡиғаның ҡасан булғанын самаларға мөмкин.

Фән хәҙер ундай  әләткә эйә лә ә.

**Сәләхетдин КАРАМОВ.**

*(Аҙағы бар.)*

## “Күңелемдә – донъя сере”

“Ағиҙел” журналы, Башҡортостан Республика ы Президентының 2009 йылды йәштәрҙең башланғыстарын яҡлау әм үҫтереү йылы тип иғлан итеү тура ындағы Указына ярашлы, “Күңелемдә – донъя сере” тигән йәш шағирҙар конкурсы иғлан итә:

• конкурста 35 йәшкә тиклемге Яҙыусылар союзы ағза ы булмаған йәш шағирҙар ҡатнаша ала;

• конкурста ҡатнашып еңеүселәр 1-се, 2-се, 3-сө урындар менән билдәләнеп, аҡсалата премиялар менән бүләкләнәсәк;

• конкурсҡа 2009 йылдың декабрендә йомғаҡ я аласаҡ;

• конкурста ҡатнашырға теләүселәр “Ағиҙел” редакция ына үҙҙәре хаҡында тулы белешмә (ярты бит), компьютерҙа йыйылған текст, фото ын, тулы адресын, телефонын ебәрергә бурыслы;

• конкурсҡа ебәрелгән шиғырҙарҙың тема ы ирекле;

• конкурсҡа ебәрелгән әҫәрҙәр кире ҡайтарылмай;

• әҫәрҙәрҙе “Ағиҙел” журналының редакция ына “Конкурсҡа” тигән билдә менән ебәреү орала.



**Ләйсән ЯҠУПОВА**

## Йән — күбәләк

*Ҡараңғы төн.*
*Яҡты күҙҙәр.*
*Донъяға моң ибелгән.*
*Ташҡын булып*
*Аҡҡан хистән*
*Күңел бөгөн иҫергән.*

*Ҡараңғы төн.*
*Йән — күбәләк.*
*Күңел донъяны ҡоса.*
*Йөрәгең — ут,*
*Ялҡыныңа*
*Күбәләк — йәнем оса...*

***

*Ямғырҙан түгел,*
*Күҙҙәрем*
*Йәштәремдән йәшләнде.*
*Йәшенле төндә*
*Йәшенме,*
*Йәшлегемме йәшнәне...*

## Иламаҫ өсөн көләм

*Мин аман да көләм әле,*
*Мин аман да йылмаям.*
*Минең башым аман ғорур,*
*Күҙҙәрем аман шаян.*

*Мин аман да көләм әле.*
*ин аптырай ың, беләм.*
*Аңламай ың, мин бит бары*
*Иламаҫ өсөн көләм...*

## Көнөм тыуҙы...

*“Уянғаның саҡ-саҡ көттөм”,– тиеп*
*Аҡ ағышым ҡаршы алды.*
*аташыуҙан туйған йәнем*
*Уны ҡосағына алды.*

*Төнөм килде...*
*“Инде ағыштарҙан ҡасам”,– тиеп*
*Был күңелем төнгә инә...*
*аташыуҙар булып тағын*
*ағыштарым төшкә инә...*



## Илгиз ИШБУЛАТОВ

### Мин – осар ҡош

*Ҡанаттарҙы еңел елпеп,*
*Болоттарға осам, имеш...*
*Бары ы ла аҫта ҡала:*
*ылыу аҡмар, көмөш инеш...*

*Бына хатта ҡыйғыр бөркөт*
*Оса ергә ыйынғандай...*
*... Аңғармаҫтан ҡолап төштөм*
*Ҙур өҫтәлдән. Ҡыйын ҡалай...*

*Аяғымды имгәткәнмен,*
*Танауымдан сорнай ал ҡан...*
*Бала саҡтағы был хәлдән*
*Әҙме-күпме ыуҙар аҡҡан.*

*ыуҙар аҡҡан. Тик күңелем*
*Әле аман күктәр орай.*
*Иртән берәү ҡола а, бел:*
*Был – “осоусы Илгиз-малай”.*

### Шоңҡарым

*Күккә сөйҙөм хыял-шоңҡарымды,*
*Ирек бирҙем ҡыйғыр уйҙарға.*
*Осто ҡошом яр ып сапҡан аттай,*
*Йондоҙҙарға етте, айҙарға...*

*өжүм иткәс ҡыйыу ыҙлыҡ-бөркөт,*
*Ҡуйыныма шул саҡ уҡталды.*
*Өлгөрмәне... Инде нисәнсе ен...*
*Ҡан менән зар бергә буталды...*

### Уяныу

*Тәүге бөрө тиртте... Ғәжәп сыңдан*
*Уянғандай булды Ер, Ғаләм.*
*Гүзәллектең сағыу нуры булып*
*Ҡайынҡайҙы йәмләр мең әләм.*

*Умырзая ҡайнар тыны менән*
*Йыртты мәрттең сихыр юрғанын.*
*Ҡар батша ы, мәшәҡәтен бөтөп,*
*Егеп тора осҡор юрға ын.*

*Яҙҙар етте. Йәшәрҙе ер,*
*Күккә ашты шатлыҡ моңдары.*
*Гелән шулай бул ын. Күңелдәрҙе*
*Билә ен наҙ, дуҫлыҡ монары!!!*

# ЫУҒОЯР – ИЖАДСЫ БИЛГЕ Е



—Яҙмышымдың театрға бәйле буласағын үҙемде белгәндән бирле тойҙом, ошо уй менән тыуған да кеүекмен, — ти Суфия Ҡорбанғәлиева.

Ниндәй ышаныслы әйтелгән үҙҙәр! Яҙмышын сәхнәгә бәйләгән әр кем дә, был яратҡан өнәрем — тормошомдоң асылы, тип әйтергә баҙнат итәме икән? “Маңлайына яҙылған” тиеүҙәре шулдыр, күрә ең. Хатта өйөү, ғаилә, көнкүреш мәшәкәттәре, тән сырхауҙары, йән әрнеүҙәре, дуҫлыҡ, дошманлыҡ, байрамдар — быларҙың бары ы ла ошо “яҙыу” алдында ҡайтышыраҡ фиғелдә уның өсөн. Шулай итеп, үҙебеҙ актриса хаҡында, ролдәре, сәхнә образдары тура ында. әр сәхнә геройҙары менән йәшәй Суфия Ҡорбанғәлиева, серләшеп, көндән-көн аралашып, көрәшеп — әгәр спектаклдә ҡатнаша икән; сәхнәлә түгел икән — хыялда, фантазия ында.

Репертуары ҙур Суфия Ҡорбанғәлиеваның, хыялдары — тәрән... Уның ижад афиша ы тиҫтәләгән театр персонаждарын саҡырып тора: төп ролдәр, әҫәрҙең поэтика ын әм эстетик ҡиммәттәрен сағылдырыусы ҙур ролдәр әм бик тә теүәл эпизодик персонаждар. Төрлө улар, темалар иҫәбен түгел, ә әҫәрҙең художество темаларының асылын туплаған образдар...

— Суфия Ҡорбанғәлиева ижадының төп сәхнә образы тип уның телә ә ҡай ы ролен атарға мөмкин, актрисаның әр роле уның сәнғәт эмблема ына әүерелергә әләтле, — тигәйне бер мәл билдәле театр белгесе өйөндөк Сәйетов.

Әйтелгәндәрҙе дәлилләү өсөн Суфия Шәрәфулла ҡыҙының бер нисә роленә туҡталып үтәйек. Иң тәүҙә крәҫтиән ҡыҙы — йәш, көләс Гөлнур (Н.Нәжми, “Гармунсы ҡыҙ”; режиссеры — Лек Вәлиев). Ул — актрисаның иң беренсе характерлы роле. Йәш кенә ауыл ҡыҙы шат әм ҡыйыу рәүештә оло тормоштоң ишеген ҡаға. Ул тормош — уғыштан уңғы ауыр йылдар, әм Гөлнур шул мәл күҙҙәрен ҙур асып шаңҡып ҡала ла ҡот осҡос хәҡиҡәткә төшөнөргә мәжбүр була: уғыш тән йәрәхәттәре генә түгел, унан да яманыраҡ йән ғазаптары ҡалдырып, йәшәүҙең әхлаҡ ҡағиҙәләрен дә ҡаҡшатҡан икән дә ба а!

Тағы бер образ — инде уғыш елдәрен байтаҡ йоторға тура килгән Мәрзиә: ҡан ҡойоштоң әҙемтәләре әле аман әҙәм күңелен емереүен, яҙмыштарҙы ҡыйратыуын дауам итә. Үҙ-үҙендә тоя был мәхшәрҙе Мәрзиә (Ә. Атнабаев, “Ул ҡайтты”; режиссеры —Рифҡәт Исрафилов).

Ә бына — ырыу башлығы Тәңкәбикә, йола, ҡанундарҙың ҡолона әйләнеп, аҡылын юйған, балаларын әләк итеүсе ҡатын — ҡатмарлы психологик образ (Мостай Кәрим, “Ай тотолған төндә”; режиссеры —Рифҡәт Исрафилов).

Тағы бер роль: замандашыбыҙ, клуб хеҙмәткәре Асия көслө рухлы, етеҙ, әләтле, бөтә нәмә лә ҡулынан килә. Бар булмышы менән “бөйөк йәмғиәт” идеалына хеҙмәт итеп, ул ғаилә е, балалары барлығын да онота. Был осраҡта актриса үҙ замандаштарының рухи тынғы ыҙлығын психологик теүәллек, төрлөнән-төрлө биҙәктәр менән асыу йүнәлешендә эшләй. Сәхнәлә — тормош низағтары, әхлаҡи әрнеүҙәр (Наил Ғәйетбай, “Дүрт кешелек табын”; режиссеры — Таңсулпан Бабичева). Үҙенең ҡалған ғүмерен колхоздың ярлы ғына ҡарттар йортонда уҙғарыусы, хыялланырға әм... “төшөрөргә” яратыусы Әҡлимә образында (Ф.Бүләков, “Әбейҙәргә ни етмәй”; режиссеры — Празат Иҫәнбәт) үрҙә телгә алынған шул уҡ Асия төҫмөрләнә түгелме икән?

Тракторсы Харисова (А.Абдуллин, “13-сө председатель”), Ҡарасәс (М.Буранғолов, “Башҡорт туйы”), Салли (Х. Вуоийоки, “Ят йондоҙ”), Наташа (А.Чехов, “Өс бер туған”; спектаклдәрҙең режиссеры — Рифҡәт Исрафилов) әм Домна Пантелеева — үҙ ҡыҙын театр кресло ы хаҡына а- тып ебәрергә әҙер (А.Островский, “Аҡ ҡанатлы хыялым”; режиссеры — Азат Нәҙерғолов) — былар бары ы ла бер актрисаның ролдәре, улай ғына ла түгел, йөрәк йылы ы менән байытылған, бер художество тема ы менән дөйөмләштерелгән образдары. уңғы аталған роль актрисаның бөтә сәхнә ғүмере дауамында етлеккән әм уның аша актрисаның ижады хаҡында фекер йөрөтөп була, тигәйне .Сәйетов. Быға беҙ иң тәүҙә актрисаның үҙе — З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия ы уҡытыусы ы ярҙамында, шулай уҡ художество бағыусылары әм, ни айәт, тәнҡитселәр фекере ярҙамында ирешәбеҙ. Ә тәнҡит айырым бер сәхнә әҫәрен сәнғәт факты, тормош күренеше итеп әм дә фекер үҫеше тарихы, дөйөм кешелек мәсьәләләре яҡтылығында ҡарауҙы хуплай. Ошонан сығып, беҙ, актриса С.Ҡорбанғәлиева театр сәнғәтен ағымдағы тормош-көнкүреш контексында ғына түгел, ә, бәлки, мәҙәниәт тарихы, халыҡ тарихы ерлегендә лә аңларға ынтыла, тип әйтә алабыҙ. Уның, драматургияның телә ә ҡай ы жанрына ҡараған әҫәрҙәге образдарҙың эске донъя ына, рухи үҙәгенә төрлө яҫылыҡтан күҙ алыу менән бергә, уларҙың сәхнәләге әм тормоштағы роле, ә әмиәте, мәҙәниәт үҫешенә я аған тәьҫире хаҡында ла төптән, етди уйланып эш итеүен иҙә ең.

Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған артистка ы Суфия Ҡорбанғәлиеваға амплуа төшөнсә е ҡағылмай. Ул — театр сәнғәтендәге әр төр жанрҙы, әр төр образды еренә еткереп башҡарыуға әләтле, киң мөмкинлектәргә эйә актриса. Уны симфоник оркестр менән генә сағыштырып була. Тамара Ғәниева, мәҫәлән, Суфия Ҡорбанғәлиеваға шундай юлдар бағышлай:

*А , актриса!*
*еҙҙең күңелегеҙ*
*ыйҙырышлы мәллә ғаләмде?*
*Эстәрегеҙ тулы йомартлыҡмы*
*Хәленә керер көллө әҙәмдең?*

*Көлдән ҡанатланған көнҡош кеүек,*
*Айҡағанда иңләп Күк-Ерҙе,*
*Бәндәләрҙең шатлыҡ- ағыштарын*
*Үлсәргә уң ғәйрәт кем бирҙе?*

*ын ҡатырлыҡ итеп еҙ көлгәндә,*
*Арына зи ен хәсрәт-ҡайғынан.*
*Үҙегеҙҙе бармы йәлләүсе е?*
*Фажиғәле ролгә ингәндә лә,*
*Йәш сығарыу еҙгә тыйылған.*

*Яҡшы атҡа менеп, өҙәңге еҙ*
*ыбайлаған яугир*
*Йәи ә*
*Күңелдәрҙән күсеп күңелдәргә*
*Ғәм өләшеп йөрөр али ә.*

*Йәшәү бит ул.*
*Әҙәм бала ының*
*Кеме ен дә ынай был ғүмер.*
*Дөрләп торған еҙҙең усаҡ ун ә,*
*Дарманыбыҙ беҙҙең үрелер,*
*Донъя ы бик ҡот оҙ күренер.*

Бер саҡ Суфия Ҡорбанғәлиева матбуғат биттәрендә үҙенең ижади хыялдары менән бүлешкәйне. Уның бик тә бай театр китапхана ының сағыу персонаждары Лев Толстой әм Генрих Ибсен героиняларынан алып Сартр әм Жироду геройҙарын үҙ эсенә ала.

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ, зи енде эстетик төшөнсәләрҙән бигерәк сәйәси-иҡтисади яңылыҡтар әм төшөнсәләр биләй, – ти актриса. – Ә ижад бөтә замандарҙа ла йәшәйәсәк, сөнки ул – йәшәйештең мәңгелеген тәьмин иткән ҡанундарға хеҙмәт итеүсе зи ен әм күңел шөғөлө.

Суфия Ҡорбанғәлиева шәхси сәхнә образын тормош әм ижад тәжрибә енән тыуҙырҙы (мәҫәлән, яңы норвег драма ы йәки француз интеллектуаль драма ы өҫтөндә рухи эҙләнеү ише мәлдәр…), әм уның –үҙе алған уҡмаҡтан ҡыйыу атлаусы актрисаның ижады, эмоциональ-экспрессив рухы башҡаларҙан айырылып тора: С.Ҡорбанғәлиеваның уйынында драма әҫәренең рухы ҡабат-ҡабат яңғырағандай, ул еткергән фекерҙәр әҙип үҙенең дауамы кеүек ҡабул ителә. Актрисаны әҫәрҙең әҙәби-нәфис сифаты, эстетик тәьҫире, ҡеүәте ҡыҙыҡ ындыра. Ҡорбанғәлиева тамаша ойоштороусы төшөнсәләрҙең эске ҡеүәтен асыҡ күҙаллау ма ирлығына эйә әм тасуирла-



*Флорид Бүләков. “Эх, күгәрсенкәйҙәрем!”*
*Әклимә – С. Ҡорбанғәлиева, Абдулла – З. Вәлитов.*

уҙың үҙенсәлекле сараларын тиҙ таба. (Мәсәлән, Өләсәй, Фин ҡатыны образдары. Г.Х.Андерсен, “Үҙ йөрәгеңде тыңла” әкиәте; режиссеры – Айрат Әбушахманов). Ләкин актриса сәхнә әсәренә уның тәбиғи ерлегенән – ҡатмарлы әм ҡапма-ҡаршылыҡлы тормош тупрағынан да айырып ҡарамай, ә әсәрҙе мәҙәни бөтөнлөктөң мө им бер өлөшө итеп күрергә теләй, тәжрибәле, талантлы артистарға хас булғанса, ижадын ижтимағи процесс менән, йәшәйеш әм рухиәт мәсьәләләре менән бергә үреп алып бара. Минеңсә, актриса ижадының был асыл сифаты – уның тормош менән сәхнә ара ындағы уртаҡ күренеште: кеше рухын, йәшәйештең серле әм тылсымлы хәсиәте булған рухиәттең тәрән ҡатламдарын күҙаллатырға ынтылыуындалыр.

– Бөгөн башҡорт театры (илдең әм баш ҡаланың күп кенә театрҙарынан айырмалы рәүештә) тамашала зи ен зирәклеген әм кисерештәрҙең әүҙем ҡатнашыуын өстөн күрә, әм был ике төшөнсә лә милли ерлектән сыға, башҡорт артисының иң күп уйланғаны иле, милләте, аҡлыҡ-сафлыҡ хаҡында икәне сер түгел. Әгәр ошо уйҙарға кешелек идеалдарына ауаздаш тағы ла ҙурыраҡ төшөнсәләр килеп ҡушыл а, художестволылыҡ тағы ла күркәмерәккә әүерелә, унан эске бер ҡайнарлыҡ та, ғорур басалҡылыҡ та, мәртәбә лә бөркөлә. Сәнғәттәге фекер бөгөн – персонаждарҙың йәшәү рәүешенә асҡыс, шулай уҡ актрисаның донъяла йәшәү рәүеше әм мөнәсәбәте лә ул, – ти Суфия Ҡорбанғәлиева.

Үҙенең артист тәбиғәтенә үҙе үк үрәтләмә биргәндәй тойолдо миңә Суфия Шәрәфулла ҡыҙының был үҙҙәре, актрисаның тәүҙән үк алдына ҡуйған ижад программа ы кеүек тә яңғыраны.

Өфө дәүләт сәнғәт институтында Суфия Ҡорбанғәлиева Шәүрә Мортазина, Ғабдулла Ғиләжев, Фәрдүнә Ҡасимова, Гөлли Мөбәрәковаларҙа уҡый, ә был шәхестәр – башҡорт милли театрының традицион эстетик ҡиммәттәренә тоғролоҡ аҡлаусы педагогтар, үҙҙәре лә сәхнә осталары. Театрҙа эш башлаған йылдарҙа күберәк Рифҡәт Исрафилов ҡуйған спектаклдәрҙә уйнай актриса. Бына ошо профессиональ цехтарҙа Суфия Ҡорбанғәлиеваның шәхси ижад алымы формалаша.

– Йондоҙнамә буйынса ыуғоярмын. Минең үҙемдә әллә нисә ҡатын-ҡыҙ йәшәй, әм әр бере е сәхнәгә сығып, ролен уйнарға ынтыла. Элегерәк бигерәк тә лирик актриса тауыш бирә ине, уңғараҡ – трагик... Ҡыҙғаныска ҡаршы, миңә йышыраҡ характерлы ролдәр бирелә, – ти актриса.

Бәхәслерәк был фекер. Актрисаның тормоштағы уңышы, ижадтағы бәхете был үҙҙәрҙең кире ен иҫбатлай түгелме? Буласаҡ актрисаның — йәп-йәш ҡыҙҙың талантлы режиссер Лек Вәлиевтың иғтибарын үҙенә тартыуы, амплуаға түгел, ә художество киңлегенә ылыҡтырылыуы үҙе үк бәхет түгелме ни?!

Суфия Ҡорбанғәлиеваға күберәк ҡатын-ҡыҙ яҙмышына төшкән бәхеттән мәхрүм булған гүзәл заттарҙы уйнарға тура килде. Уларҙы ул драма, комедия, трагикомедия, мелодрама, фарс, водевиль жанрҙары аша сәхнәгә сығарҙы... Корнелия (Ф.Кроммелник, “Иҫ китмәле мөгөҙлө шәп ир”; режиссеры — Рифҡәт Исрафилов), Октябрина (Н.Ғәйетбай, “Аты барҙың — дәрте бар”; режиссеры — Азат Нәҙерғолов), Астра (Д.Нормет “ әр кем мөхәббәт эҙләй”; режиссеры — Вәзих Сәйфуллин), Катрин (И.Юзеев, “Аҡ ҡалфағым төшөрҙөм ҡулдан”; режиссеры — Рифҡәт Исрафилов), Йыан ҡарсыҡ (Х.Ибра имов, “Башмағым”; режиссеры — Илдар Ғиләжев) .б. Улар менән Суфия Ҡорбанғәлиева шатлана, уйлана, хәсрәттәр бүлешә, ашҡына, ашыға. Ә ҡайҙа ашыға уң?.. Иң тәүҙә — үҙенә табан. Ҡатын-ҡыҙ образының гүзәллеген иҫбат итер өсөн, уның күркәм рухын рәнйеттермәҫ өсөн, ҡатын-ҡыҙ затының идеаль образы өсөн! әм тамашасы Суфия Ҡорбанғәлиева сәнғәтенә ышана! Актриса менән бергә кеше рухының тантана иткәндәге байрам-тамашаларға ихлас ҡул саба, яралы яҙмыштарҙы йәлләп йәш түгә.

Шуны ы ҡыуаныслы: Суфия Ҡорбанғәлиева тыуҙырған образдарҙа ваҡыты-ваҡыты менән башҡорт эпосындағы боронғо мифик персонаждарҙың йөҙө сағылып ҡалғандай: ҡатын-ҡыҙ асылы, усаҡ аҡлаусы, ырыу башлығы, хатта яугир... Был — башҡорт драма актриса ы сәнғәтендә ҡасандыр милли фольклор, уның эпик формалары нигеҙҙәрендә тыуған бөгөнгө театр тауышы яңғырай. Ә тауыш ышаныслы әм ныҡлы, сөнки ул Суфия Ҡорбанғәлиеваның изге тема ына ауаздаш, актриса сәнғәтен шәхестең юғары идеалдары менән ҡанатландырған беҙҙең замандаш — үҙенең иң изге ниәтен эпик ҡолас менән иҫбатлай. Тик заманса милли фәлсәфәүи драма әҫәрҙәренең юҡ дәрәжә ендә булыуы, сәхнә теле уҡытыусы ы булараҡ, халыҡ фәлсәфә енең тотҡа ы әм милләтте сит идеяларҙан ҡурсалаусы туған телдең киләсәк яҙмышы ла борсоуға алмай ҡалмай уны. Халҡыбыҙ хаҡында ғаләм киңлегенән тороп уйлап ижад ителгән, юғары художестволы драма әҫәрҙәре күрге килә, хәл итә е мәсьәләләребеҙ күп бит, ти актриса.

әр кем күңел халәтенә тиң тормош ҡора. Ғүмере йырлы актриса Суфия Ҡорбанғәлиеваның. Ғаилә ағзалары ла — сәнғәткә хеҙмәт итеүселәр.

Ижад итер мәлегеҙ, Суфия Шәрәфулла ҡыҙы! М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнә ендә еҙ, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артистка ы, уйнаясаҡ иң яҡшы әҫәр, унда еҙ йырлаясаҡ иң моңло йыр алда әле. Замана тыуҙырыр өр-яңы әҫәрҙәрҙе тамашасыға түкмәй-сәсмәй еткерә егеҙ бар, тәжрибәгеҙ менән уртаҡлаша ығыҙ бар. еҙгә, Өфө дәүләт сәнғәт академия ы доцентына, тағы ла бик күп йәш ижадсылар тәрбиәләү, бөгөнгө заманыбыҙ ауаздарын киләсәк быуындарға ла ишеттереү бурысығыҙ бар. еҙ — актриса!

**Рәмилә ЙӘ ҮҘИНА.**

# ҺАҘ ӘЛӘШЕҮСЕ РӘССАМ



Сәнғәт белгестәре рәссамдарҙың бәғзеләрен музыкаль рифмаларҙа ил амландырыусы, хисләндереүсе шағирҙарға тиңләй. Уларҙың картиналары менән танышҡан әр кем оҡлана йә нәфрәтләнә, көлә йә ҡайғыра, дәртләнә йә моңая, өмөтләнә йә хафалана. Кеше күңелендә ошондай ғәжәп тойғолар уятыусы рәссамдар ара ында Риф Абдуллин да бар. Уның ниндәй генә картина ын алып ҡарама, ынлы сәнғәт оҫта ының йөрәгендә йыр, шиғыр, поэма урғылыуы күренә.

Бына алдыбыҙҙа – сәнғәт әм әҙәбиәт өйөүселәргә яҡшы таныш “Яҡты көн. Аҡмулланың йәшлеге” картина ы. Ул 2006 йылда бөйөк башҡорт шағиры әм гуманист-мәғрифәтсе е Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән күргәҙмә өсөн киндергә майлы буяу яғып эшләнгән. Рәссам үҫмер Мифтахетдиндың атай йортонан сығып китеү мәлен үрәтләй.

Аҡмулла – уртала, әсә е – улда, ә ата ы уң яҡта баҫып тора. Буласаҡ шағирҙың бер ҡулында – китаптар, ә икенсе ендә – бәхет ҡошо. Арҡа ына юл тоҡсайы аҫҡан. Эсендә бик күп әйбер барлығы иҙелмәй, ләкин буш та түгел. Шар асыҡ ишектән бөтә тирә-йүн күренә. Өй алдында Мифтахетдинды бала-саға көтә. Бер яҡ ситтә – арбаға егелгән ат, ә йыраҡта, тау битләүендә, ауылдар күренә. Офоҡтан, бейек тауҙар ара ынан ҡояш сығып килә.

Ата ының донъя ы – ҡараңғылыҡта. Уның йөҙөнә шәм әм бәләкәй генә тәҙрәнең өҫкө өлөшөнән яҡтылыҡ төшә. Эргә ендә – семәрләп эшләнгән андыҡ. Байлығы – андығы – бикле.

Әсә е – шаршау артында, өй эше менән мәшғүл. Әйләнә-тирә ендә ағас ҡалаҡтар, сигелгән таҫтамал, еҙ батмус, еҙ ҡомған үрәтләнгән.

Тәү ҡарашҡа картина ябай әм аңлашыла ымаҡ. Ләкин иғтибарҙы атай кешегә йүнәлт әк, тағы шул асыҡлана: дин ә еленең өйөндә (быны өҫтөндәге кейеме, ҡулындағы тиҫбе аңлата) китап күренмәй. ис юғында Ҡөрьән-Кәрим булырға тейеш бит! Рәссам быны махсус рәүештә эшләй: уҡығаным еткән, хәҙер миңә тик байлыҡ тура ында ғына уйларға кәрәк, ти. Был – атай фекере. Әммә уның йөҙөндә улының сығып китеүенә риза ыҙлыҡ белен ә лә, күңелендә мәрхәмәтлелек иҙелә. Мәрхәмәтлелекте, аҡ күңеллелекте рәссам аҡ күлдәгенең аҡ яға ы аша күр әтә. Атай кеше, үҙенә нисек ҡыйын бул а ла, бала ына бик үк ҡаты бәғерле түгел.

Осонмай, иркәләнмәй, тормошто, йәмғиәтте нисек бар шулай ҡабул итергә өйрән; уҡыуың үҙеңә файҙа килтер ен, ти. Үтә лә ҡатмарлы образ.

Әсә е улына ҡарамай, бойоғоп ҡына тора ымаҡ. Ә уйҙары — Мифтахетдиндә. Әҙәплелек, ихтирамлылыҡ, изгелеклелек, иманлылыҡ, инсафлылыҡ кеүек изге сифаттарҙы, улым, инә бирә алдыҡмы икән? Кешеләргә аҡлыҡ ҡына бөркөп йәшәй алыр ыңмы? Әй, Аллам, йөрәгемде урталай бүлеп алып китә еҡ инде! Хәйерле бул ын юлдарың, иҫән-имен йөрө, тип әйтә унын бөтә торошо. Хисле, йөрәкте тетрәндергес итеп ынландырған рәссам әсә кешене.

Ә Мифтахетдин ҡулындағы бәхет ҡошсоғона ҡараған да уның менән нимә хаҡындалыр серләшәләр ымаҡ. Аҡ күңелле, аҡ күлдәкле, аҡ ҡошсоҡ тотоп Аҡмулла яҡтылыҡҡа, ҡояшҡа ынтыла... Алда уны егелгән ат, белемгә ынтылған балалар көтә...

Сәнғәттә шундай төшөнсә бар: йырсы булыу өсөн иң тәүҙә — моңло тауыш, ә рәссам өсөн донъяны, ғаләмде күрә белгән күҙ кәрәк, тиҙәр. Риф Абдуллиндың күҙе үткер. "Яҡты көн. Аҡмулланың йәшлеге" картина ында, ваҡиғаны көсөргәнешле итеп күр әтеү маҡсатында, ул төҫтәр менән белеп уйнай. Тормошта төҫтәр кешегә төрлөсә тәьҫир итә. Әлеге рәсемдә ул ахроматик (аҡ, ҡара, оро) төҫтәрҙе урынлы ҡуллана. Автор яҡтылыҡ сығанағын, уның төҫтәргә тәьҫирен образдарҙың характерын билдәләү әм картинаның композицион берҙәмлеген тәьмин итеү өсөн дөрөҫ файҙалана. Картинаға тәрән фәлсәфә алынған. Билдәле, музыка яҙыусыны — композитор, ә уның ижад емешен халыҡҡа еткереүсене башҡарыусы тиҙәр. Музыканың кимәле йырсының, ҡурайсының, скрипкасының, баянсының, думбырасының, оркестрҙың башҡарыуы аша сағыла. әйбәт йырҙы тауыш ыҙ йырсы йырла а, ул, әлбиттә, хөрт килеп сығасаҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, әйбәт музыканы әйбәт башҡарыусылар аша ғына белә алабыҙ. Ә ынлы сәнғәттә рәссам — үҙе үк композитор, үҙе үк халыҡҡа еткереүсе. Уға бер кем дә ярҙам итмәй: рәсемдең композиция ы, эшләнеше бөтә ен дә өйләп, аңлатып, күр әтеп тора. Әлеге "Яҡты көн. Аҡмулланың йәшлеге" картина ында әр төҫ, бәләкәй генә деталь, штрих үҙ урынында. Был — рәссамдың талантын әм оҫталығын күр әтә торған сифат.

Риф Абдуллиндың әсә е — Миәкә районы Ерекле Күл исемле хозур тәбиғәтле, Мифтахетдин Аҡмулла эҙҙәрен аҡлаған ауылдың шиғри күңелле, сибәр әм уңған ҡыҙы Шәмсиә, ә ата ы — ошо уҡ районды Күл-Ҡунҡаҫ ауылының Мөҙәрис исемле мәртәбәле егете. Улар 30-сы йылдар аҙағында Дәүләкән педагогия училище ында уҡыған саҡта танышалар. Риф Абдуллиндың архивында әсә енең ошо йылдарҙа яҙған шиғырҙарына училище уҡыусы ы, әҙәби түңәрәк староста ы, буласаҡ күренекле шағир Хәким Ғиләжевтың матур фекерле рецензия ы ла бар. Тимәк, Риф Абдуллинға рәссамлыҡтың нигеҙе — поэтик әләт — әсә е Шәмсиә Зөлҡәрнәй ҡыҙы Ғәлиеванан күскән. Ата ы Мөҙәрис Ҡотләхмәт улы, коммунистар партия ының тоғро алдаты булараҡ, төрлө яҡтарҙа етәксе вазифалар башҡара. Шуға күрә Риф Абдуллин Миәкә районының Елдәр МТС-ында, Мәнәүезтамаҡ, Садовый ҡасаба ы, Ҡырғыҙ-Миәкә урта мәктәптәрендә белем ала. Өфө сәнғәт училище ының ынлы сәнғәт бүлеген тамамлағас, данлыҡлы Кронштадта матрос булып хеҙмәт итә. Ҡайтҡас, Өфө дәүләт сәнғәт институтын (хәҙер З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия ы) тамамлай. РСФСР Художество фондының Башҡортостан ижад-етештереү комбинатының баш рәссамы, партком секретары, Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейы директоры вазифаларын да башҡара. Әле ул Өфө дәүләт сәнғәт академия ында уҡыта.

Романтикаға бирелеүсән рәссам Кронштадта хеҙмәт иткән мәлендә Дүртөйлө ылыуы Рида Басарый ҡыҙына өйләнә. Ул Өфө сәнғәт училище ын тамамлап, ун биш йыл Башҡорт академия хор копелла ында йырсы-солистка була. Бер үк ваҡытта Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих факультетында (хәҙерге М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты) белем ала. Әле Рида Басарый ҡыҙы Көнсығыш гуманитар академия ында баш идарасы булып эшләй.

Улдары Рөстәм – медицина фәндәре кандидаты. Ейәнсәрҙәре Алина 8-се класта уҡый, бер үк ваҡытта музыка әм художество мәктәптәрендә лә белем ала.

Риф Абдуллин 1972 йылдан алып картиналары менән республика, зона, Рәсәй, СССР әм Халыҡ-ара ынлы сәнғәт күргәҙмәләрендә ҡатнаша, эштәренә оло ба а ала. Бағдад-82 (Ираҡ), Нью-Дели-84 ( индостан) халыҡ-ара йәрминкәләрендә рәссам-дизайнер вазифа ын башҡара әм ике ендә лә Оло Алтын миҙал менән бүләкләнә. Уның инициатива ы менән Миәкәлә “Эрмитаж” картиналар галерея ы асыла. Музейҙың төп фондын Риф Абдуллин бүләк иткән картиналар тәшкил итә. Рәссам бер нисә йыл рәттән бөйөк башҡорт шағиры, мәғрифәтсе е Мифтахетдин Аҡмулла тормошона әм ижадына бағышлап Башҡортостан Милли әҙәбиәт музейы ойошторған республика конкурсына етәкселек итте.

Рәссамдың эштәре Башҡортостан Милли әҙәбиәт, М.В.Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество, Хәрби дан музейҙарында, Ҡазан, Төмән, Мәскәү ҡалаларында, Австрия, Германия, индостан, Финляндия, АҠШ, Бөйөк Британия әм башҡа илдәрҙәге шәхси музейҙарҙа, өйҙәрҙә аҡлана.

Риф Абдуллиндың ижадын реалистик йөкмәткеле романтика менән уғарылған картиналар, этюдтар, пейзаждар, портреттар, графика тәшкил итә. Ул Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, әҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Сафуан Яҡшығолов, Төхфәт Йәнәби, Ғариф Ғүмәр, Рауил Бикбаев, Флорид Бүләков, Хәкимйән Зарипов, Ғайса Хөсәйенов, Рәмил Йәнбәк кеүек күренекле яҙыусыларҙың ижади портреттарын яҙҙы. Бөгөнгө көндө улар музейҙарҙа әр яҙыусының тормошон, ынтылышын, кисерешен сағылдырып, сәнғәт бейеклегенән әҙәбиәт нескәлектәрен аңлатып тора. Әлбиттә, ҡапма-ҡаршылыҡлы характерлы, төрлө йүнәлештәге ижадсының портретын ынландырыу үтә ҡатмарлы. Ләкин рәссам был эштәрҙе юғары оҫталыҡ менән атҡарып сыҡҡан.

Хәҙер иғтибарыбыҙҙы “Ғаилә” картина ына йүнәлтәйек. Киндергә майлы буяу менән эшләнгән рәсемдә малай ҡағыҙҙан самолет я аған, шуны осорорға әҙерләнә. Әсә бәлеш бешерергә ҡамыр баҫа, ә атай кеше – рәссам. Йәғни ғаиләнең әр кеме үҙ эше менән мәшғүл. Ә уларҙы бер бөтөн итеп берләштереүсе – ап-аҡ ромашкалар гөлләмә е. Рәссам фекеренсә, әр кеше матурлыҡҡа ынтылып йәшәргә тейеш. Картинала матурлыҡ символы – ап-аҡ ромашкалар. Улар рәссам эшен тулы йөкмәткеле итеп тә күр әтә. Әгәр беҙ өҫтәлдән ромашкаларҙы ал аҡ, рәсем аңлашылмаясаҡ. Риф Абдуллин картиналағы персонаждарҙың паклыҡ сифаттары барлығын: әсәлә – аҡ яулыҡ, аҡ ойоҡбаш, аҡ он, малайҙа – аҡ ҡағыҙ, атай кешелә аҡ күлдәк яға ы менән аңлата. Ләкин дөйөмләштереүсе, рәсемде сәнғәт кимәленә күтәреүсе – ул ромашкалар. Бында авторҙың ҡыҙыл, ары төҫтәрҙе лә урынлы ҡулланыуы иҙелә. Шуға күрә картина, күңел түрендә нескә хистәр уятып, ине үҙенә тарта.

– әр кемдең күңелендә, йөрәгендә, – ти Риф Абдуллин, – үҙе генә ятаҡкан, үҙе генә теләгән үҙ моңо бар. Кеше уны әр ваҡыт эҙләй. Ғәҙәттә, ул моң тәбиғәттә табыла. Ә тәбиғәт, билдәле, үҙгәреүсән. Шуға күрә кеше ила и хисте тойоп ләззәтләнер өсөн үҙе генә ятаҡкан, үҙе генә теләгән үҙ моңон рәссамдарҙың

эштәренән эҙләй. Эҙләгәнен тапҡас, бәләкәй балалар ихласлығы менән шатлана, хисен яңырта. Был картинаны ул йә атып ала, йә аҙна айын музейға йөрөй. Ә рәссамдарҙың бурысы – кешене хисләндерә торған картиналар ижад итеү.

“Өләсәйем балаҫы” рәсеме тура ында үҙ сыҡҡас, Риф Абдуллин фә емле генә тарих өйләп алды: “Атайымдың әсә е, Ғәбиҙә ҡәртинәйем, ҡартая башлағас, иҫтәлеккә тип, әр ейәненә нимәлер бүләк итте. Кемгәлер – ҡулдан биҙәкләп эшләнгән ашъяулыҡ, бәғзеләргә – сигеп нағышланған таҫтамал, ә миңә буй у-ғылған балаҫ эләкте. Уны алып ҡайттым да мастерскойға ҡуйҙым. Ике йыл тирә е ваҡыт үткәс, бисә әйтә, ҡәртинәйҙең бүләгеп өйҙә аҡлайыҡ, ти. Бисәнең үҙе – за-кон: киттем мастерскойға. Балаҫты күтәреп ҡайтып киләм, әм кинәт башҡа уй төштө: ҡәртинәй ни өсөн ул балаҫты миңә бүләк итте икән? Яуап эҙләйем. Беҙ уны ҡоймаҡтары, ҡаймаҡтары, бәлештәре, төрлө аштары менән ыйлағанын ғы-на иҫкә алырға тейеш түгелбеҙ, ә үҙебеҙ, ҡәртинәй кеүек, тормошта әр саҡ егәрле булып, бер ниндәй эштән дә ҡурҡып тормай, уңған балалар үҫтереп, донъяны ма-турлап йәшәргә тейешебеҙ – бына ул нимәгә өндәгән! Ошоларҙы уйланым да йүгерҙем кире мастерскойға. Бер нисә көндән ошо картина тыуҙы”.

Киндергә майлы буяу яғып эшләнгән был рәсемдә буйлы балаҫ ҡоймаға эленгән. Бер аҙ ҡыйшайған матур ғына өйҙөң бер өлөшө, ҡойма аша туғай, күл, Күл-Ҡунҡаҫ ауылы тауҙары күренә. Туғай урта ына туҡталып, йәш кенә ир менән ҡатын малайҙарына нимәлер өйләй. Торош- ындарына ҡарағанда, улар улдары-на ауыл, олатай, өләсәйҙәренең тормошон, тәбиғәт матурлығын аңлата ымаҡ. Ә картинаның урта ында – яран гөлө. Рәсемгә ҡарау менән беҙҙе иң тәүҙә ошо яран гөлө арбай. Бер аҙҙан ғына тирә-яҡҡа күҙ ала ың...

Ғөмүмән, картинала төҫтәр бер-бере енә тығыҙ бәйләнгән. Йәшел төҫтәр ба-лаҫтан ағастарға, туғайға, тауҙарға күсә. Балаҫтағы ҡыҙыл, ҡара, ал ыу төҫтәр ҡа-тынды, ирҙе, малайҙы, аттарҙы яран гөлө менән тоташтыра. Ғашиҡтар бит яран гөлө сәскә ен мөхәббәт сәскә е менән сағыштыралар. Рәссам, ошо хәҡиҡәтте иҫтә тотоп, “Өләсәйем балаҫы” картина ында, мөхәббәтле тормоштоң киләсәге матур буласаҡ, тип аңлата. Өләсәйҙәрҙең изге теләгенә беҙ ҙә ҡушылайыҡ.

Риф Абдуллиндың “Күктәге драма”, “ андал ямғыр”, “Сочи кипаристары”, “Көтөлмәгән ҡар”, “Алтын кис”, “Дим буйы”, “Мәңгелек өҫтөндә”, “Олатайҙар төбәге – Күл-Ҡунҡаҫ”, “Париж. Нотр-Дам”, “Собор. Нотр-Дам” әм башҡа кар-тиналары ла кешеләргә ил ам өләшә, моңландыра, шатландыра. Ә бына “Төш ваҡыты” рәсеменә тәрән фәлсәфә алынған. Унда көтөүсе малай йоҡлап ята. Ағас – тормош символы. Уны ындырғандар, бөккәндәр, ә ул аман йәшәй. Малай янындағы кәзә ауыҙына бер япраҡ ҡапҡан. Тимәк, бер көн үтте. Борғаланып оҙон сыбыртҡы ята – ҡатмарлы ваҡытта йәшәйбеҙ. Эт – ул беҙҙең яҙмыш аҡсы ы. Мал йөрөй, борғаланып йылға аға – тимәк, тормош дауам итә. Ләкин әр кемдең үҙ донъя ы.

Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия лауреаты, ынлы сәнғәт оҫта ы Риф Абдуллин бөгөн олпатлыҡ миҙгелен ижади уңыштар менән ҡаршы ала. Ул мауыҡтырғыс композициялы, монумен-таль әм моңло эштәре менән беҙҙең хистәрҙе әр саҡ яңыртып торор, ынлы сәнғәттең сихри бишегендә наҙландырып тағы ла оҙаҡ-оҙаҡ тирбәлдерер әле, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

***

Башҡортостан Президенты М.Ғ. Рәхимов Силәбе өлкә е губернаторы П.И. Суминдың саҡырыуы буйынса өлкәнең 75 йыллығына арналған тантаналы сараларҙа ҡатнашты. М.И.Глинка исемендәге Силәбе академия опера әм балет театрында үткәрелгән йыйылышта М.Ғ.Рәхимов байрамда ҡатнашыусыларҙы юбилей менән ҡотлап: «Силәбе еренең тарихын, бөгөнгө өн әм киләсәген Башҡортостан менән дуҫлыҡ әм хеҙмәттәшлек ептәре бәйләй»,– тине.

2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә күҙ ал аҡ, өлкәлә 166 мең башҡорт (өлкә халҡының 4,6 проценты) йәшәй. 2003 йылдың ноябрендә ике төбәк ара ында беренсе тапҡыр Сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль әм мәҙәни хеҙмәттәшлек тура ындағы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Ул йыл айын тулыландырылып, яңы мөмкинлектәр аса. Быға Башҡортостан Республика ының Магнитогорск әм Силәбе ҡалаларында асылған даими вәкиллектәре лә үҙ өлөшөн индерә.

– Беҙҙең мөнәсәбәттәр, хеҙмәттәшлек, дуҫлыҡ быуаттар буйы тупланып, ваҡыт менән ыналған. Беҙ ҡулға-ҡул тотоношоп уңыштар яуларға, ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәнгәнбеҙ,– тип билдәләне өлкә губернаторы П. И.Сумин. – Беҙҙең өсөн рухи яҡынлыҡ та бик мө им.

Өлкә Хөкүмәте менән тығыҙ бәйләнештә эшләүсе Силәбе өлкә е башҡорттары ҡоролтайы ҡәрҙәштәрҙе туплау үҙәге булып тора. Рәсәй Федерация ы халыҡтары конгресының, Халыҡ-ара төрки академия ының, “Рәсәй-Шәреҡ” III халыҡ-ара конференция ының әм дзюдо, Х.Йосопов призына милли көрәш буйынса халыҡ-ара бәйгеләрҙе ойоштороусыларҙың бере е лә – ҡоролтай башҡарма комитеты. Йыл айын уҙғарылып килгән өлкә, ҡала әм район абантуйҙары халыҡтың көтөп алған байрамына әйләнгән. Арғаяш районында оҙаҡ йылдар – халыҡ театры, Магнитогорск ҡала ында – Башҡорт сәнғәт йорто, милли мәҙәниәттәр үҙәгенең башҡорт бүлегендә – ҡурайсылар әм ҡатын-ҡыҙҙар фольклор ансамбле, Златоуста – “ андуғас”, атҡыла – “Йәйғор” коллективы, Үрге Өфәлей мәҙәниәт йортонда – “Ләйсән”, Мейәстә –“Уралым” халыҡ, Ҡоншаҡ районында “Миләш” ансамблдәре әм башҡалар әүҙем эшләп килә.

Рәсәй әм Башҡортостан Яҙыусылар союзына ете әҙипте әҙерләгән М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә хәҙер үҙенең икенсе йәшлеген кисерә. Силәбе өлкә е башҡорттарының «Шәжәрә» проекты өҫтөндә эш алып барыла. Өлкәлә айына бер тапҡыр “Уралым” башҡорт гәзите донъя күрә, “Челябинский рабочий” гәзитендә айына ике тапҡыр “Башҡорт” ҡушымта ы сыға.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ының ултырышында уның 2009 йылғы эш планы раҫланды. Программа бик тығыҙ, ҡоласлы, сөнки, идара рәйесе Рауил Бикбаев әйтеүенсә, быйыл БР Яҙыусылар союзының ойоштоҡолоуына 75 йыл тула. Төрлө тарафтарҙа күренекле әҙиптәрҙең юбилейҙары ла уҙғарыласаҡ.

***

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге милли китапхана патриот шағир Фатих Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән хәтер кисә е үтте. Тәүге үҙҙе Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе Рауил Бикбаев алды.

Ул яҙыусының татар әҙәбиәтенә ҙур өлөш индереүен, Бөйөк Ватан уғышында ҙур батырлыҡтар күр әтеп, уғыш тамамланыр алдынан ғына әләк булыуын ыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ғалимдар Суфиян Сафуанов, Әхәт Ниғмәтуллин, Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов, шағирҙар Тойғон, Әнисә Та ирова, Хәсән Назар, Рәшит Сабит шағирҙың тормош юлына, ижадына байҡау я аны.

***

“Нур” татар дәүләт театрының “Йәсмин гөлө” тип исемләнгән спектакль премьера ы Бишбүләк районының Айыт ауылында тыуып үҫкән патриот шағир Фәтих Кәримдең яҡты иҫтәлегенә арналды. Сәхнәнән шағирҙың әҫәрҙәренә ижад ителгән йырҙар, поэма ынан өҙөктәр яңғыраны, әҙиптең шәхси архивынан фото үрәттәр күр әтелде. Театрҙың Фәтих Кәрим тормошона әм ижадына иғтибар итеүе хуплауға лайыҡ – әҫәрҙәре бөгөнгө уҡыусы тарафынан яратып уҡыла. Тамаша Фәтих Кәримдең камил, ил өйәр шәхес булыуын үрәтләне.

***

Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрында Флүр Ғәлимовтың 50 йәшлек юбилейына арналған кисә булып үтте. Театр уның "Гона лы хыялдар" тигән трагик комедия ын сәхнәләштерҙе (режиссеры – Азат Йы аншин).

Спектакль алдынан юбилярҙы Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Риф Тойғонов, "Башҡортостан"гәзитенең баш мөхәррире Рәлиф Кинйәбаев, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошма ы етәксе е Кәбир Аҡбашев, ойошманың әҙәби консультанты Зөбәржәт Йәнбирҙина, драматург Хәмит Ирғәлин, шағирәләр Рита Фәтҡуллина, Земфира Муллағәлиева, прозаик Әмир Ҡотлозаманов, йәш шағир Фәүкәт Ҡотлошин ҡотланы.

***

“Хан” нәшриәтендә Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премия ы лауреаттарының шиғырҙары тупланған “Ал да нур сәс халҡыңа!” йыйынтығы баҫылып сыҡты. Китапҡа Рәйес Түләк, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөлфиә Ханнанова, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллинаның әҫәрҙәре ингән.

***

Билдәле шағирә, Ғәли Ибра имов исемендәге премия лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Эльмира Сәсәнбаева (Сәсәниә) Стәрлетамаҡ ҡала ында йәшәй әм ижад итә. Быйыл “Китап” нәшриәтендә уның “Шиғырҙар” баҫма ы донъя күрҙе. Тормош ысынбарлығын үткер үрәтләүсе шағирәнең ижады әҙәбиәт өйөүселәргә күптән таныш.

Абдулҡадир Инан исемендәге милли китапханала “Ашҡаҙар” әҙәби ижад түңәрәге ағзалары ҡатнашлығында уҙған кисәлә Сәсәниәнең ижады әм күңел донъя ына байҡау я алды, әҙибәнең шиғырҙары яңғыраны.

***

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына төрлө район-ҡалаларҙан йыйылған 325 уҡыусы башҡорт теле әм әҙәбиәте буйынса үҙ-ара көс ынашты.

Олимпиада өс турҙан: сәсәндәр бәйге енән, инша яҙыуҙан, башҡорт теле әм әҙәбиәте буйынса викторинанан торҙо.

Яҙыусы-ғалим Мирас Иҙелбаев етәкселегендәге жюри ағзалары балаларҙың белемен ентекле ба алауға өлгәште: IX синыф уҡыусылары ара ында Илмира Ҡолбаева (Көйөргәҙе районы Ермолаево ҡасаба ы), Гөлйөҙөм Кинйәбаева (Бөрйән районы Аҫҡар мәктәбе), Миләүшә Мырҙабаева (Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө гимназия ы); X синыф уҡыусылары ара ынан Гүзәл Туҡтарова (Стәрлебаш районы), Гөлсиә Солтанова (Йылайыр районы Байғужа мәктәбе), Айгөл Фәтҡуллина (Дыуан районы Мәсәғүт республика лицей-интернаты); XI синыф уҡыусылары ара ынан Динара Ибәтуллина (Стәрлетамаҡ районы Оло Ҡуғанаҡ урта мәктәбе), Зө рә Сафина (Ҡыйғы районы Йосоп урта мәктәбе), Зөлфиә Мөхәмәтйәнова (Мәләүез ҡала ының 9-сы башҡорт гимназия ы) еңеүсе тип табылды.